// АҒИҘЕЛ

**Өфө,**
**февраль**
**2020**
**2 (1162)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ПУБЛИЦИСТИК ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ПУБЛИЦИСТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы,
“Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы” төбәк йәмәғәт ойошмаһы.

Учредители:

Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан,
Региональная общественная организация “Союз писателей Республики Башкортостан”.

1923 йылдың мартынан башлап сыға.

Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.

Издается с марта 1923 года.

Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ • АГИДЕЛЬ

*Баш мөхәррир*

Рәлиф ҠИНЙӘБАЕВ

*Мөхәрририәт*

Рәнис АЛТЫНБАЕВ
Әлфис ҒАЯЗОВ
Тамара ҒӘНИЕВА
Таңсулпан ҒАРИПОВА
Фирҙәүес ӘХМӘТЙӘНОВА
Мөнир ҠУНАФИН
Рафаэль ЗИНУРОВ
Йомабикә ИЛЬЯСОВА
Әмир ИШЕМҒОЛОВ
Тимерғәле ҠИЛМӨХӘМӘТОВ
Әхмәр ҮТӘБАЙ
Зөлфиә ХАННАНОВА
Айбулат ХАЖИН
Салауат ӘБҮЗӘР
Зәки ӘЛИБАЕВ

*Кәңәшселәр ҡоро:*

Ҡәҙим АРАЛБАЙ
Марат ҠӘРИМОВ
Ҡамил ЙЫҺАНШИН
Гөлдәр МОРАТОВА
Ноғман МУСИН
Гүзәл СИТДИҠОВА
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ
Рәшит ШӘКҮР
Гөлнур ЯҠУПОВА

Илгиз Ишбулатов — яуаплы сәркәтип.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында 2016 йылдың 31 октябрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ТУ 02-01565.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 20.2.2020. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 2004 дана. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 200389.

**Издатель**: ГУП РБ Издательский дом “Республика Башкортостан”.
**Адрес**: 450079, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13.
**Нәшер итеүсе**: БР ДУП “Башҡортостан Республикаһы” нәшриәт йорто.
**Адресы**: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.

**Адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 9-сы ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13, 9-й этаж.
Наша электронная почта: Agideljurn@mail.ru.
Наш адрес в Интернете: http://www. agidel.rbsmi.ru.

ЯСЙ “Белая река” нәшриәте”ндә
әҙер файлдарҙан баҫылды.
450078, Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 109.
Отпечатано с предоставленных файлов
в ООО “Издательство “Белая река”.
450078, г. Уфа, ул. Кирова, 109.
Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель», ИНН 0278066967,
р/с 40602810862000000102, к/с 30101810200000000934,
БИК 048073934 в Башкирский РФ АО «Россельхозбанк»
ОКПО 32016876 / ОКОПФ 30002

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

**© «Ағиҙел», 2020 (2, 1162)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Фәниҙә Исхаҡова**. Асманға ашыу. Роман-баллада. Дауамы.............................6

**Рәсүл Байгилдин**. Ярһыу йылдар үтер, яҡты яҙҙар етер... Повесть. Аҙағы....35

**Иҙрис Ноғоманов**. Урыҫ баҙында ун дүрт көн. Хикәйә...........................63

**Лариса Абдуллина**. Миңле Буранбай. Хикәйә............................................83

**Хәйҙәр Тапаҡов**. Хәтерҙәге хәтирәләр. Башы............................................90

ШИҒРИӘТ

**Камил Фазлый**. Һулыш бирә тыуған ерем. Шиғырҙар...............................106

**Зөфәр Вәлит**. Һөйөр өсөн бирҙем ғүмеремде... Шиғырҙар............................110

**Мөнир Иҡсанов**. Тоям яулар дарманды! Шиғырҙар..................................115

**Салауат Рәхмәтулла**. Йәшәр өсөн тыныс йән менән... Шиғырҙар............121

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ – 75 ЙЫЛ

**Тәлғәт Сәғитов**. Йылдар аша һөйләшеү.....................................................126

**Сәйет Әхмәт**. Торналар. Хикәйә.................................................................137

БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ

Тарихи хәҡиҡәт үҙгәрешһеҙ ҡала. Тарих фәндәре кандидаты **Салауат Хәмиҙуллин** менән әңгәмә...............................................................................142

**Мәхмүт Хужин**. "Беҙ урман башҡорто буламыҙ"......................................150

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Рим Исхаҡов**. Һәр кемдең бәхете үҙ ҡулында..............................................160

**Әлфиә Зәбдинова**. Тетрәндергес әҫәр.............................................................163

РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Рәсүл Сәғитов**. Әйткән һүҙ атҡан уҡ түгел...................................................166

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Ринат Хәйри**. Юлдар буйлап тик үтергә яҙһын / Халҡым менән бергә, ил менән! Шиғырҙар.........................................................................................183

ХӘТЕР

**Риф Иҫәнов**. Йәне йәннәттә булһын көрәштәшемдең.....................................186

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ...................................................................................191

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА
Фанида Исхакова. Вознесение на небеса. Роман-баллада. Продолжение.
Расуль Байгильдин. С надеждой на светлую весну. Окончание.
Идрис Нугуманов. Тринадцать дней в русском погребе. Рассказ.
Лариса Абдуллина. Миннибай, у которого много родимых пятен. Рассказ.
Хайдар Тапаков. Воспоминания из памяти. Начало.
ПОЭЗИЯ
Камиль Фазлый, Зуфар Валит, Мунир Иксанов, Салават Рахматулла. Стихи.
75 ЛЕТ ВЕЛИКОЙ ПОБЕДЫ
Талгат Сагитов. Беседа сквозь года.
Саид Ахмад. Журавли. Рассказ.
ВСЕРОССИЙСКАЯ ПЕРЕПИСЬ НАСЕЛЕНИЯ
Историческая истина неизменна. Беседа с кандидатом исторических наук Салаватом Хамидуллиным.
Махмут Хужин. “Мы – лесные башкиры”.
ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА
Рим Исхаков. Счастье у каждого – в его руках.
Альфия Забдинова. Потрясающее произведение.
ДУХОВНЫЕ ЦЕННОСТИ
Расуль Сагитов. Слово – не пущенная стрела.
НАШ КАЛЕНДАРЬ
Ринат Хайри. Стихи.
ПАМЯТЬ
Риф Исянов. Пусть земля будет пухом моему соратнику.
ЛИТЕРАТУРА, ИСКУССТВО

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-78-90
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 216-52-35 (факс)
Хужалыҡ һәм альтернатив подписка бүлеге —277-76-88 (факс)
Проза һәм публицистика, шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит бүлектәре — 277-87-50
Бухгалтерия — 292-77-66

• Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
• Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
• Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
• Гонорар буйынса 223-64-01 телефонына шылтыратырға кәрәк.
• Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 8(8332)501-432 телефоны аша хәбәр итергә кәрәк.

Фәнизә
ИСХАҠОВА

# АСМАНҒА АШЫУ

Роман-баллада

## 10

Поль бар көсөнә итектәренең үксәһе менән атының ҡабырғаһын төйгөсләй. Уның артынан килгән иллеләп һыбайлы, командирҙарынан ҡалышмаҫҡа тырышып, күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә алға елә. Былай оҙаҡ барһалар, аттарының янып ауыуы ихтималлығын да белә улар.

Ләкин башҡа саралары юҡ.

Улар өлгөрөргә тейеш.

Бөгөн иртән Томпсондар биләмәһенең йәнә инглиздәр ҡулына күсеүе билдәле булды.

Була торған хәл дә бит.

Ләкин…

Ниндәйҙер юл менән инглиздәргә был биләмәнең ябай ғына ферма түгеллеге билдәле булғайны.

Капитан Поль де Бернарҙың исеме тирә-яҡта киң таралырға өлгөргәйне инде. Еңел ҡоралланған һыбайлы отряд әле бер, әле икенсе урында ҡалҡып сығып ҡына торҙо. Баш күтәреүселәрҙең флангылары ҡаҡшап таралып төшөргә генә торған мәлдәрҙә был һыбайлыларҙың ер аҫтынан ҡалҡҡандай хасил булыуы күптәрҙе – хурлыҡтан, ә бәғзеләрҙе үлемдән ҡотҡарҙы. Пуля алмаған командирҙарына ҡарап, унең яугирҙары ла ҡурҡмаҫҡа өйрәнде. Эйе, бындай ир азаматы артынан утҡа ла, һыуға ла инергә мөмкин.

Ләкин ни өсөн унең шулай айбарлы алышыуының сәбәптәре лә тирә-

---

*(Дауамы. Башы 1-се һанда.)*

яҡта билдәле ине. Унда, тауҙар ашаһында, ҡурҡыу белмәгән графтың йөрәген елкеткән йәп-йәш кенә ҡыҙ бар. Һәм был граф шул һылыуҙың атаһына биргән вәғәҙәһен үтәр өсөн йәнен аямаясаҡ һәм һуңғы тамсы ҡанынаса алышасаҡ.

Мәгәр Поль де Бернарҙың һуңғы тамсы ҡанына дәғүә итеү бигүк еңелдән түгел ине. Һуғыш серҙәрен бөтә нескәлектәренә тиклем белгән капитан үтә таһыллы булып сыҡты. Уға ҡаршы ташланған яугирҙар киҫелгән үлән шикелле ауа бирҙе, ә ул иҫән ҡалды.

Алыш сигенең теге яғында тороусылар уның эләктереп алырҙай сибек урындарын эҙләй башланы.

Һәм таптылар.

Был Эмилия ине.

Бөгөн иртән дошман яғынан килгән хәбәр тәү ҡарауға бик ябай кеүек күренде. Томпсондар фермаһын яндырырға йыйыналар, тине килгән крәҫтиән. Полдең яугирҙарының күбеһе шул ерҙәрҙән булғас, улар араһында ығы-зығы ҡупты. Хәбәр килтергән крәҫтиән үҙе иһә шау-шыу араһында юҡҡа ла сыҡты.

Ул үҙ теләгенә ирешкән: ун биш минуттай ваҡыт үтеүгә отрядтағы һәммәһе лә оло юлдың туҙанын борҡотоп шул яҡҡа табан елә ине инде. Ләкин фермаға етәрәк урман эсендә үҙҙәрен ни көткәнен улар белмәне. Инглиз тәхетенә тоғро ҡалып, хәҙер улар яғында һуғышҡан ирокездар ҡәбиләһе яугирҙары уҡ-һаҙаҡтарын әҙер тотоп ағастар араһына йәшеренгәйне.

Бик күп йылдар үтер, һәм граф Поль де Бернар шул көндә үҙенең ни рәүешле иҫән ҡалыуының сәбәбен аңлай алмаҫ.

Ә бит был тарлауыҡ иллеләп һуғышсыны себен урынына ҡырып һалыу өсөн ғәжәйеп уңайлы урын ине. Ике яҡтан ишелеп килгән бейек тауҙа – ботаҡтарын тарбайтып үҫкән йөҙйәшәр ағастар. Уларҙың артына йәшеренгән уҡсылар, ҡабаланмай ғына атһа ла, һуңғы яугирҙарына тиклем сүпләйәсәк ине.

Мәгәр был идеаль планға ниҙер ҡамасауланы.

Тар урынға етәрәк төркөм шып туҡтаны. Алда ниҙер ауҙы һәм аҫҡа тәгәрәне. Йәнә тынлыҡ.

– Капитан, ишеттегеҙме? – Был Джон, Эмилияның ағаһы, яраланғандан һуң һауығып, хәҙер инде Полдең отрядында һуғышыусы яугир.

Хәлде самалау өсөн бер нисә секунд та етте.

– Артҡа! Был – засада!

Ярһыған аттар үрәпсеп урындарында бейене һәм һыбайлылар, ҡырҡа әйләнеп, килгән юлдары буйлап ҡабат сапты. Ҡолаҡ эргәләренән уҡтар зыйылдап осто, ләкин улар һиҙелерлек зыян килтерә алманы.

Арттарынса уҡ тиерлек урман эсенән аттарына менеп өлгөргән ҡыҙыл тәнлеләр күренде. Ҡыйҡыулап һөрәнләп килгән ҡәбилә яугирҙары күпмелер ваҡыт keрештәренән уҡ яуҙырҙы ла, үҙҙәренең һаны сама менән ике тапҡыр кәмерәк булыуын күреп, кире боролдо.

Отряд бер урынға йыйылды.

– Йә, ни эшләйбеҙ, капитан?

– Тауҙы туранан артылырға кәрәк, – тине Поль, тирә-яғын байҡап. – Күп ҡалмаған. Хәҙер юл буйлап барыу хәүефле.

Төркөм аттарын юрттырып ағастар араһынан китте. Һәр тауышҡа ҡолаҡ

һалалар, ҡоралдары иһә теләһә ниндәй минутта кәрәк булыу ихтималлығына самаланған.

Уларҙы ферма эргәһендә көтәләр ине инде. Бая һөжүм иткән төркөмдән күпкә күберәк. Отрядтың боролоштан күренеүе булды, ҡолаҡ эргәләренән йәнә уҡтар һыҙғырышып осто. Тарлауыҡ эргәһендәге ҡыҫҡа бәрелештә ярһып өлгөргән төркөм шундуҡ һөжүмгә күсте. Ике яҡтан ташҡын кеүек килгән һыбайлылар бер һыҙыҡта бәрелеште. Аттар үрәпсене, ҡылыстар ялтыраны, пулялар һыҙғырышты, йәнә уҡтар осто. Эйәр өҫтәренән яраланған яугирҙар ауа, кемдер, һуңғы минуттары яҡынлашҡанын аңлап, күҙҙәрен күккә төбәй.

Поль, ярһыған атын бейетеп, ҡылысы менән уңлы-һуллы һелтәй. Шул арала яу ҡырында ни барғанлығын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырыша. Нисәмә йыл алыш эсендә йәшәгәнгә һәм үҙ кешеләре өсөн яуаплылыҡ тойғанға, был фиғелгә ул инде күптән өйрәнгән.

Ул күҙ ҡырыйы менән Джонға айбалта менән һелтәнгән ҡыҙыл тәнлене күреп ҡала һәм һул ҡулы менән пистолетын эләктереп алып атып өлгөрә. Индеец атынан ҡолай. Шул арала Джон рәхмәтле ҡарашын буласаҡ кейәүенә төбәп һаран йылмая ла йәнә алышҡа ташлана.

Полдең иғтибары инде икенсе тәңгәлдә. Бына өсөнсө ай инде уның менән иңгә-иң терәп ошо ерҙәр өсөн алышҡан тағы ла бер фермер улы Томастың ҡылысын ҡулынан бәреп төшөрәләр. Ул, теләһә ниндәй минуттың үҙе өсөн һуңғыһы буласағын самалап, үҙенә йүнәлгән суҡмарҙан ялтанырға тырыша. Шул мәлдә уға һөжүм иткән ҡыҙыл тәнлենең иғтибары икенсегә күсә. Уға Полдең һөжүменә ҡаршы торорға кәрәк. Томас был мәлдән файҙаланып ҡалырға тырыша. Уның билендә тағы ла бер ҡорал бар. Ҡорал бар икән – тимәк, йәшәйһе ғүмер ҙә бар әле.

Был юлы инде Полдең үҙенә өсәүләп ябырылалар. Алыш яланын байҡаған арала ул уңайлы позиция табырға тырыша. Иң мөһиме – көтөлмәгән һөжүмдән арҡаны һаҡлау. Ләкин шул минутта эргәһендә генә кемдеңдер уның менән бергә алышҡанын тоя. Командирҙарына өсәүләп ябырылғандарын күреп, уға ярҙамға ашығалар.

Полдең отрядының көсө бына ошо берҙәмлектә ине. Тап шул берҙәмлек уның төркөмөн күп яуҙарҙа ҡыйралыуҙан һаҡлап алып ҡалды.

Әле лә, юғалтыуҙар булһа ла, бирешмәнеләр. Ҡыҙыл тәнлеләр, һуғыш ҡырында байтаҡ яугирҙарын ҡалдырып, урман эсенә сигенде.

Поль, ниһайәт, еңел тын алып, тирә-яғына күҙ йүгертте. Джордж Томпсондың йорт-ҡаралтылары үҙ урынында. Көҙгө һалҡындар башланырға тора, оҙаҡламай ҡыш та етәсәк. Ваҡыты-ваҡыты менән ярайһы уҡ уҫал булған ҡыш миҙгелендә баш өҫтөндәге ҡыйыҡһыҙ ҡалыу уйын эш түгел. Бигерәк тә бөтә ир-аттың бар хәстәре һуғыш мәшәҡәттәре булған ваҡытта.

Яугирҙар бер урынға йыйыла башланы. Ярайһы уҡ йылдам хәрәкәт итеүселәрҙең дә яралы булыуҙары асыҡлана, алыш мәлендә уның ҡайғыһы булмаған ғына. Ауыр яралыларҙы барлайҙар. Кемдәр өсөндөр был алыш – һуңғыһы. Улар күҙҙәрен мәңгегә йомған. Һәләк булғандарҙың яҡындарына хәбәр итергә кәрәк буласаҡ. Быны эшләүе еңелдән түгел, ләкин башҡа сара юҡ. Ни эшләйһең, һуғыш ҡорбандарһыҙ булмай.

– Поль!

Капитан тауыш ишетелгән яҡҡа боролдо. Уға табан Эмилия йүгерә ине.

Алтынһыу сәс бөҙрәләре яурындарына таралып төшкән. Ҡупшы итеп тегелгән аҡһыл-күк төҫтәге оҙон итәкле күлдәктәге ҡыҙ осоп китергә торған күбәләк кеүек күренә.

Поль атынан һикереп төштө. Бөтә был ҡанһыҙ алыштың Эмилияның йорто эргәһендә булғаны унең аңына саҡ барып етте. Күрәһең, йорт эсенән бөтә был мәхшәрҙе күҙәтеп торғандар. Ҡыҙҙың ағарынған йөҙө ошо хаҡта һөйләй ине.

Граф ҡыҙға табан ынтылды һәм Эмилия килеп етер-етмәҫтән уны ҡосаҡлап күтәреп үк алды.

– Минең бәләкәс гүзәлем!

– Поль, мин шул тиклем ҡурҡтым... Был алыш бөткәнсе әллә нисәмә тапҡыр үлеп терелдем. Ярай ҙа иҫән ҡалдың...

– Ҡурҡма, гүзәлем! Мин бит һиңә вәғәҙә бирҙем... Мин оҙаҡ йәшәйәсәкмен... Һинең хаҡыңа... – Поль Эмилияның йәшләнгән күҙҙәренән, еүеш сикәләренән үбә. Ул инде этикет ҡағиҙәләре хаҡында ла, бөтә был осрашыуҙың фермер йорто ҡаршыһында, барыһының күҙ алдында барыуы тураһында ла уйламай, хатта үҙ яугирҙарының берсә һоҡланып, берсә уфтанып уларҙы күҙәтеүен дә онота. Гүйә, бар Йыһанда ул һәм Эмилия ғына.

– Һылыуым, ниңә өндәшмәйһең? – тип һорай капитан, бер аҙ һағайып.

Эмилияның күҙҙәре ҙур булып асыла, ләкин ул яуап бирмәй.

– Эмилия!!!

– Поль, ә мин һине бик-бик яратам!.. – ти ҡыҙ, иҫенә килгәндәй.

“Ә ниңә элегерәк “һин” тип әйтмәнең икән миңә, гүзәлем? – тип бөтөнләй икенсе нәмәләр хаҡында уйлай Поль. – Былай яҡынырaҡ кеүек тә...”

– Тәү күргәндә үк ғашиҡ булдым мин һиңә, Поль... Һин миңә ғәжәйеп бер донъяны бүләк иттең... Тотош Йыһанды... Минең бер ҡасан да был тиклем бәхетле булғаным юҡ ине...

– Беҙ бик-бик бәхетле буласаҡбыҙ... Ышан миңә!

– Поль... – Эмилия хәлһеҙләнеп графтың ҡулдарына һалынып төшә.

Капитан ниҙелер һиҙенеп һағая. Һәм икенсе минутта... Унең ҡулдары Эмилияның арҡаһына ҡаҙалған уҡты ҡапшай.

– Эмилия!!! Эмилия!!!

Поль өсөн кинәт бөтә донъя баш түбән әйләнгәндәй булды. Ул тоноҡлана төшкән күҙҙәре менән тирә-яҡты байҡаны. Хәлде аңлап алған бер нисә яугир, аттарына һикереп менеп, алыҫлаша барған ҡыҙыл тәнле һыбайлының артынан тороп сапты.

Поль Эмилияны беләктәренә һалған да ҡыҙ тыуып үҫкән йортҡа табан ашыға. Әйтерһең дә, ошолай итһә, унең өсөн бик-бик ҡәҙерле булған был йән эйәһенең артынан эйәреп килгән күләгә кеүек Әжәл ситкә китә, тарала, юҡҡа сыға... Уға ғүмер бүләк иткән йорт Әжәлде лә ситкә ҡыуыр кеүек тойола. Юҡ, ҡыуа алмаҫтыр шул инде...

– Поль... – тигән хәлһеҙ тауыш ишетелә.

– Эмилия, китмә! – Егет артабан атлай алмай, быуынһыҙланып ергә теҙләнә. Ул яңаҡтары буйлап йәш тамсыларының әкрен генә һарҡыуын тоя. Ғәжәп, үҙ-үҙен белә-белгәндән бирле илағанын ул бит иҫләмәй ҙә. – Ҡалдырма мине! Беҙ бит бергә булырға тейеш инек! Һин үҙең миңә шулай

тип әйткәйнең! Ҡалдырма минең яңғыҙымды... Һыңар ҡанат менән осоп булмай... Туналған йән менән дә йәшәп булмай... Эмилия!

Эмилия ниҙер әйтергә уҡталды, ләкин булдыра алманы. Ул күҙҙәрен әкрен генә күккә төбәне. Бер аҙҙан ҡыҙҙың ҡулдары быуынһыҙланып һалынып төштө.

Ошо мәлдә Полгә күк йөҙө ишелеп төшкәндәй тойолдо. Ул, зиһене ҡалдырған кешеләй, Эмилияны талған йоҡоһонан уятырға тырышты. Ләкин ҡыҙ хәрәкәтһеҙ ине.

Яугирҙарҙың ҡайһылары баш кейемдәрен һалып, тилергән кеүек ергә теҙләнгән капитандары эргәһенә килде. Кемеһелер уны аяҡтарына баҫтырырға тырышты.

Бер аҙҙан миссис Мартаның эләгә-абына йүгереп килгәне күренде.

Бөтәһе бергә аралашты, ишелде, тоноҡланды.

Уларҙың урынына эсте бошорғос яңғыҙлыҡ килде.

Әйтерһең дә, Поль бөтә был икһеҙ-сикһеҙ Йыһанда япа-яңғыҙы.

Ана шул Йыһандың уйҙар иңләй алмаҫлыҡ киңлектәренә күтәрелергә уҡтала ла... Булдыра алмай.

Уның ҡанаты һыңар ғына ине шул хәҙер.

– Һыңар ҡанат менән осоп булмай, – тип ҡабатлай ул.

– Ә туналған йән менән һуң нисек йәшәргә? – тип һорай ул кемдәндер.

Ләкин был һорауҙарға яуап биреүсе юҡ.

Һуңғараҡ, күпмелер ваҡыттан, бер аҙ иҫенә килгәс, ул үҙенә инде башҡа һорауҙы бирәсәк:

– Ни өсөн мин иҫән ҡалдым? Ә ул китте? Киреһенсә булырға тейеш түгел инеме ни?

Был һорауға ла яуап асыҡ килеш ҡалыр. Уның асылдарын Поль бары тойомлар ғына.

Бынан йөҙәр-меңәр йылдар элек, бәлки, ул шулай уҡ яугир булғандыр.

Данлы һәм шанлы яугир.

Яугирҙың урыны иһә – яу ҡырында.

Яу ҡырында яҙмыштар ҡыйрала.

Ғүмер ептәре өҙөлә.

Һыңар ҡанатлы булып осоштан мәхрүм ҡалыу ғазаптарын да белмәй улар.

Ә Йыһан, белеүебеҙсә, тигеҙлекте һәм теүәллекте ярата.

Туналған йән менән йәшәү ғазаптарын, күрәһең, был яугир ҡасан да булһа үҙе лә татырға тейештер...

...Шулай ҙа Поль үҙен ҡулға алды. Юғалтыуы үтә ҙур булһа ла, ҡайғынан башын юғалтманы.

Сөнки бик-бик боронғо йәндәрҙең көсө һәм энергияһы ғәҙәти әҙәмдәрҙекенә ҡарағанда күпкә юғарыраҡ.

Эмилияны ерләгәндән һуң, күптәр уны шунда уҡ Францияға әйләнеп ҡайтыр тип уйлағайны. Ләкин граф ҡалды һәм бер аҙна самаһы ваҡыттан йәнә яу яланына әйләнеп ҡайтты.

Тик хәҙер уның күҙҙәрендә нур һүнгәйне.

Үҙенең ни өсөн алышҡанын да белмәй.

Ни бары онотолорға һәм яңғыҙ ҡалмаҫҡа тырыша.

Эмилияның ғүмере өҙөлгән өсөн бар ҡайғыһын ул дошмандарына ҡарата нәфрәткә күсерҙе. Элек тә бик таһыллынан һаналған яугир хәҙер дәһшәтле бер көскә әүерелде.

Йөрәк яраларының ҡанһырауына сыҙай алмай, бәлки, үлем дә эҙләгәндер ул яу ҡырында.

Ләкин Үлем уны алманы.

Ваҡыты етмәй, хатта япраҡ та ағасынан өҙөлөп төшмәй.

Теүәл бер йылдан Йорктаун эргәһендәге хәл иткес алыш капитан Поль де Бернар һәм башҡа бик күптәр өсөн һуңғыһы булды. Был ерҙәргә еңеү килде. Британия армияһы еңелеүен танып үҙ иленә юлланды. Поль менән иңгә-иң терәп алышҡан яугирҙар ҙа бер нисә йыл дауам иткән һуғыш ваҡытында ҡаҡшаған хужалыҡтарын тергеҙеү өсөн тыуған төйәктәренә әйләнеп ҡайтты.

Томпсондар ғаиләһе менән хушлашҡандан һуң, граф Поль де Бернар ҙа Францияға юлланды.

Бөтөнләйгә.

## 11

2009 йыл. Сентябрь. Рәсәй. Өфө.

Айҙан ашыу ваҡыт үткәйне. Үҙе өсөн өр-яңы булған эшкә бер аҙ шикләнеберәк тотонған Инесса бизнес өйөрмәһенә ни рәүешле эләгеп киткәнен дә һиҙмәй ҡалды. Тәүге аҙымды яһауы ғына көс икән ул. Алға бер атлаһаң, ниндәйҙер тулҡын эләктереп ала ла – ҡалғаны иһә үҙеңдән тора. Йә һыу аҫтына китергә тейешһең, йә серфингтағы шикелле тулҡындарҙы ла үҙ маҡсатыңа буйһондорорға мәжбүрһең.

Компанияның һуңғы осорҙағы уңышы баш ҡалала төҙөләсәк ҡунаҡхана комплексына заказ тендерын еңеү ине. Һуңғы ике-өс ай дауамында әҙерләнгән был проект, Ғайрат Моратович ҡапыл дауаханаға эләккәс, ҙур хәүеф аҫтында эленеп ҡалды. Заказсылар киләсәге бигүк билдәленән булмаған подрядсы менән, әлбиттә, һис тә бәйләнергә теләмәйәсәк. Мәгәр презентация ваҡытында күбеһен әллә Инессаның үҙен ышаныслы тотоуы арбаны, әллә проекттың кимәле ылыҡтырҙы – улар еңеп сыҡты.

Әле Инесса Байрас менән комиссия ултырышынан ҡайтып килә. Ҡыҙҙың шатлығы эсенә һыймай. Әйтерһең дә, бынан бер нисә ай һуҙымында ғына аҙашып ҡалған ғәмһеҙ мәленә әйләнде лә ҡайтты. Ул туҡтауһыҙ йылмая, руль артында килгән Байрасҡа төбәп юҡ-бар мәҙәктәр һөйләй, ара-тирә көндөң матурлығына ла һоҡланырға өлгөрә. Гүйә, донъяһы түп-түңәрәк!

Их, шулай булһын ине лә ул! Бит Әҙәм балаһы ғүмер баҡый донъяһын түңәрәк итергә хыяллана. Ә уның, донъяның, ниңәлер бер мөйөшө кителә лә төшә. Кеше ул китеген ямап, һөйөнөргә лә өлгөрмәй, икенсе урыны сатнап сыға.

Әле лә Инессаның ошо түп-түңәрәк матур донъяһының бер генә сатнап торған урыны бар – ул да булһа атаһының һаулығы. Ләкин Ғайрат Моратовичҡа операцияны инде яһанылар, һәм ул йылдам рәүештә төҙәлеүгә китте. Тимәк, барыһы ла имен буласаҡ!

Шуға ла ниңә шатланмаһын инде ҡыҙ?!

– Уй, көндөң матурлығы! – тип сәпәкәй итә Инесса. – Мин бит, эш менән булып, көҙҙөң яҡынлашҡанын да күрмәгәнмен! Ҡара, ҡара, Байрас, ағастар һап-һары ла баһа! Сентябрь ҙә еттеме ни шулай?

– Етте шул, бәләкәсем!

– Бәләкәсем! – Инесса башын ҡырынайта биреп ихлас көлә. – Һинең һүҙең бик ҡыйбат тора, Байрас ағай!

– Йә, йә, күпмегә баһалайһың?

Байрас машина тәгәрмәстәре аҫтына йылдам шыуған асфальттан күҙен алмай ғына һораған була. Ләкин уның тауышындағы наҙҙы Инесса тәненең һәр күҙәнәге менән тоя. Их, бәхет өсөн күп тә кәрәкмәй икән ул! Был матур көн шулай үтер ҙә китерме икән ни?

– Бик-бик ҡыйбат шул, йөрәккәйем, – тип көттөрөбөрәк яуапланы Инесса, һүҙҙәренә айырым бер мәғәнә һалып.

Байрас бер аҙ ваҡыт өндәшмәне. Улар урам сатындағы светофор эргәһенә туҡтағайны. Ҡуҙғалып киттеләр. Ләкин бер аҙҙан егет машинаны юл ситенәрәк алып барып туҡтатты ла уның ни әйтерен көтөп шымып ҡалған Инессаға табан боролоп ултырҙы.

– Һин мин түләргә тейешле штраф хаҡында әйтәһеңме?

– Юҡ, Байрас.

– Улайһа, нимә хаҡында?

– Үҙең аңларға тейешһең.

Байрас ҡулдарын рулгә һалған да шымып ҡалған. Уға йөрәгенең дөпөлдәүе әкренләп машина руленә күсә, унан урамға, ҡалаға, бөтә донъяға, Йыһанға тарала кеүек тойола. Ә тышта шундай иҫ киткес сағыу сентябрь көнө. Ҡайындарҙың һап-һары ғына япраҡтарын елдәр елберҙәтә.

Тынлыҡта шул рәүешле бер нисә минут ваҡыт үтте. Ләкин был тынлыҡ көсөргәнешле түгел ине. Бер нисә ай элек кенә бер-берећенең донъяла барлығын да белмәгән егет менән ҡыҙҙың йөрәк тибештәре генә ишетелә кеүек.

Ә ул, йөрәк, уларға ниҙер әйтергә теләй. Үҙенең бик-бик наҙға сарсағанынмы? Әллә нисәмә йылдар ашҡынып көткән үҙ ишен бик-бик һағыныуынмы? Бөткөһөҙ эш мәшәҡәттәре артынан ҡыуған әҙәм балаларының бәғзе берҙә уны тыңларға ла ваҡыттары булмауынмы? Хатта ваҡыттары булһа ла уны ишетмәүҙәренме?

Инессаға ла, Байрасҡа ла әлеге мәлдә бик-бик рәхәт. Улар, был сыңлап торған тынлыҡты боҙоуҙан ҡурҡҡандай, шым ғына ултырҙы.

Ниһайәт, Байрас телгә килде.

– Беләһеңме, хәҙер бит бер нәмә лә элеккесә булмаясаҡ.

– Булмаһын! Кәрәкмәй ҙә!

– Ә һин тәүәккәл!

– Миңә был хаҡта йыш әйтәләр ине. Бигерәк тә бейек ярҙан һыуға һикергән мәлдәрҙә.

– О-һо!

– Ә үҙең һуң үкенмәҫһеңме?

– Ни өсөн үкенергә тейеш әле мин?

– Һинең өсөн бик ҡыйбатҡа төшөүем бар.

– Йырып сығырмын! Осһоҙ мөхәббәт ул, ғөмүмән, минең өсөн түгел.

Был мәлдә Байрас машинаның двигателен тоҡандырғайны инде. Ауыр джип тигеҙ асфальт буйлап алға елдерҙе. Ә Байрас үҙе иһә, йөрәгенең ярһыуын баҫырға тырышып, Инессаға ҡарап-ҡарап ала.

– Беләһеңме, беҙ хәҙер ни эшләйәсәкбеҙ?
– Йә һуң, әйт!
– Эшкә бөгөн бармайбыҙ! Тимәк, тәртип боҙасаҡбыҙ!
– Әйҙә һуң, бер аҙ тәртипһеҙләнәйек! Үтә аҡыллы булыу ялҡытты!
– Дөрөҫ әйтәһең, бәләкәсем.
Байрас һул ҡулы менән рулде борғолаған арала икенсеһе менән кеҫәһенән айфонын тартып сығарҙы ла уны идара панеле эргәһендәге магнитҡа беркетеп ҡуйҙы. Юлдан күҙен алмай ғына машина панелендәге төймәләргә баҫҡылаланы. Күрәһең, телефон ундағы компьютерға тоташты – машина микрофонынан кемдеңдер яуабы ишетелде.
– Йә, Байрас, хәлдәр нисек? Ниңә һуңғы араларҙа күренмәйһең?
– Эш күп, Айрат. Был хаҡта һуңғараҡ. Әле минең һиңә бик ашығыс йомош бар.
– Йә, тыңлайым.
– Бөгөн осош яһай алаһығыҙмы? Берәй сәғәттән миңә һин кәрәкһең, тағы пилот һәм, үҙең дә аңлайһың, самолет. Йә, нисек? Хаҡында тормам.
– Нимә һин, дуҫ, бөгөн ниндәй көн икәнен оноттоңмо? Ял көндәрендә генә бит, аҙна уртаһында бик һирәк беҙҙең.
– Беләм, әйттем бит, минән ҡалмаҫ. Һаран түгелмен, беләһең. Миңә тап бөгөн кәрәк.
– Ну Байрас, һуҡтың хәбәрҙе! Тота килеп ҡайҙан табайым мин һиңә пилотты? Өҫтәүенә, самолеты менән?
– Әйҙә, әйҙә, уйла! Ҡулыңдан килерҙәй булмаһа, ваҡыт әрәм итеп шылтыратып та тормаҫ инем.
Теге оста күпмелер ваҡыт яуап бирмәнеләр. Гүйә, ундағы кеше елкәһен ҡашып уйлана ине.
– Йә, ярай, – тигән тауыш ишетелде бер аҙҙан. – Кил әйҙә, барыбер тынысланмаясаҡһың бит инде. Бер-ике сәғәттән барыһы ла әҙер булыр.
Байрас еңел тын алып ҡуйҙы.
– Рәхмәт, дуҫ, ҡотҡарҙың! Ярты сәғәттән барып етәбеҙ.
Бөтә был һөйләшеүҙән бер нәмә лә аңламаған Инесса егеткә һораулы ҡарашын төбәне.
– Ҡайҙа барып етәбеҙ, Байрас?
Байрас уға ҡарап йылмайҙы.
– Хәҙер үҙең дә күрерһең! Ғүмергә иҫеңдә ҡаласаҡ! Вәғәҙә бирәм.
Күкһел ҡара джип ҡаланан ситкә сыға торған трасса яғына боролдо.

## 12

Машина аэродромға килеп ингәндә көн кискә ауышҡайны. Ҡояш, байыйыммы-юҡмы тигәндәй, күк көмбәҙенең көнбайыш яғында эленеп тора. Офоҡто буйынан-буйына иңләп йоҡа ғына, үтәнән-үтә күренмәле ебәк болоттар ҡаймалаған.
“Их, был көн дә шулай тиҙ генә үтер ҙә китерме икән?” – тип эстән генә болоҡһоно Инессаның күңеле.
Ул үҙен төштә кеүек тоя.
Бөгөн иртән генә бөткөһөҙ мәшәҡәттәре менән тын алырға ла ирек бирмәгән донъя күҙ алдында үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Күңел үҙенән-үҙе йырлай, йөрәге иһә осар ҡоштай күкрәгенә һыймай талпына. Ә ул, Инесса, мөлдөрәмә

тулған ошо ҡыуанысты тәненең һәр күҙәнәге менән тойоп, һуңғы сәғәт эсендә бар донъяһын баш түбән әйләндергән Байрас эргәһендә килә.

Байрас машинаны туҡтатты ла уның двигателен һүндерҙе.

– Һин мине ҡайҙа алып килдең, Байрас?

– Аэродромға, бәләкәсем. Беҙ хәҙер парашют менән һикерәсәкбеҙ.

– Парашют менән? – Ғәжәпләнеүҙән Инессаның күҙҙәре ҙур булып асылды.

– Нимә, әллә ҡурҡаһыңмы?

– Юҡ та, – тигән булды ҡыҙ. – Бигерәк көтөлмәгәндә бит.

– Ә бөгөн бар нәмә көтөлмәгәндә, һылыуым. – Байрас, машинаның багажнигын асып, унан ниҙер алды. – Борсолма юҡҡа, ағайың был аэродромда пропискаға ингән тиергә лә була. Һәр аҙнаның ял көндәрен элегерәк ошонда үткәрә инем дә, һуңғы арала, үҙең беләһең, мәшәҡәттәр муйындан. Ә бөгөн беҙ уның ҡонон ҡайтарасаҡбыҙ. Икәүләп. Ағайыңдың тәжрибәһе нисауа, ҡурҡма, йәме? Ошо тирәләге һауаны арҡырыға-буйға гиҙгән кеше әле мин.

– Һинең парашют спорты менән ҡыҙыҡһынғаныңды белмәй ҙә инем әле.

– Бына бит, белдең.

– Ә миңә ни эшләргә? Уның өсөн әҙерлек кәрәктер бит?

Ҡыҙҙың күҙҙәрендәге бер аҙ икеләнеүҙе күреп, Байрас уны тынысландырырға ашыҡты.

– Бында бар ҡыҙығы ла шунда: беҙ һинең менән икәүләп һикерәсәкбеҙ. Йәғни һин һәм мин. Һәм бөтә күк йөҙө беҙҙеке! Сөнки бөгөн береһе лә бының менән булашмай. Ҡалғаны өсөн борсолма, һинең хәүефһеҙлегең өсөн үҙем яуап бирәм.

– Улайһа, борсолмайым, – тип ихлас ризалашты Инесса.

– Ана, Айрат та килә! – Байрас уларға табан атлаған спорт кейемендәге егеткә ымланы. – Хәҙер арлы-бирле ҡағыҙ эштәрен теүәлләйбеҙ ҙә бер аҙ инструктаж һәм – алға!

Айрат Байрас менән ҡул биреп күреште лә Инессаға еңелсә баш ҡаҡты.

– Йә беҙҙе бөтөнләй онотаһың, йә бөрөп алып бараһың. Ни булды тағы?

– Самолет һәм пилот кәрәк. Ҡалғаны һуңынан.

– Йә ярай. Ҡиәфәтеңә ҡарағанда барыбер кире сикмәйәсәкһең. Булыр. Самолеты ла, пилоты ла. Үҙем дә менермен һауаға. Һеҙҙе оҙатып ебәреүсеһе лә кәрәк бит әле. Ярты сәғәттән барыһы ла әҙер булыр.

– Бына быныһы шәп!

Байрас ҡулдарын ыуғылап алды. Йөрәгенең дөпөлдәүен баҫырға тырышып, Айраттан тегеһен-быныһын һораған булды. Ул ҡасандыр ниәт итеп ҡуйған теләгенең бөгөн ҡапыл шулай тормошҡа ашасағына бер аҙ албырғабыраҡ ҡалғайны.

Парашют спорты менән ул байтаҡтан шөғөлләнә. Гелән бейеклеккә ынтылған күңеле бер мәл тау-ҡаяларға үрләүҙән генә ҡәнәғәтлек таба алмай башланы. Һөнәр инде һайланған, кеҫәһендә дипломы ғына түгел, уңышлы ғына эшләп йөрөгән эше лә бар.

Ә күңел күккә ынтыла.

Осоусы булырға ул инде бер аҙ һуңлаған.

Студент сағында дельтаплан менән осорға хыялланды. Ләкин нисектер яйы сыҡманы.

Ярһыған күңелен нисек итеп баҫырға белә алмай йөрөгәнендә башына килгән көтөлмәгән уй барыһын да хәл итте.

Ул парашют менән һикерәсәк! Бына нимә бирәсәк уға күңеле танһыҡлаған осош тойғоһон! Юғиһә, трасса буйлап автомобилдә юғары тиҙлектә елеү генә был ымһындырғыс тойғоно барыбер бер нисек тә алыштыра алмай.

Шул мәлдән алып Байрас парашютсылар клубының даими ағзаһына әүерелде.

Парашют көмбәҙе аҫтында ике-өс саҡрым бейеклектә тыуған күңел елкенеүҙәрен бер ниндәй һүҙҙәр менән дә аңлатып бөтөрлөк түгел ине. Һәм шундай мәлдәрҙең береһендә егет йөрәге һайлаған ғүмерлек йәрен дә үҙе менән ошо ҡоштар ғына иңләй ала торған бейеклеккә алып менергә ниәт итте.

Бер генә тапҡыр буласаҡ был осош.

Башҡаса ҡабатланмаясаҡ.

Сөнки ул йән һөйгәнен ғүмерлеккә һайлай.

Һәм бына бөгөн ул көн килде.

Йөрәгенең күкрәк ситлегенә һыймай тулап тибеүе Байрас өсөн барыһын да хәл итте.

Байрас әҙерлек эштәре менән була. Кәрәкле ҡорамалдарҙы барлай, аратирә Айрат һәм пилот егет менән дә һөйләшә, эш араһында тағы түҙемле генә көтөп торған Инесса яғына йылмайып ҡарап ала. Юҡ, ҡыҙ тып-тыныс. Әллә егеткә ышана, әллә, ғөмүмән, үҙе лә шул уҡ ҡамырҙан. Ҡалай булһа ла, Байрастың күңеленә был май һымаҡ яғыла.

Ғүмерлеккә һайлаған йәр шулай булырға тейеш!

Бына, ниһайәт, әҙерлек эштәре тамам булды.

Улар дүртәүләп бер яҡ ситтәрәк торған ҙур булмаған самолет яғына йүнәлде.

Байрастың йөгө һәлмәк кенә. Уның арҡаһына парашют һалынған рюкзак та эленгән. Инесса иһә еңелсә генә, уның биле һәм аяҡтары беше ҡайыш менән ҡармалған.

Иң һуңғы минутта тиерлек Айрат әллә ҡайҙан спорт видеокамераһын табып килтерҙе. Беләккә эләктерергә самалап эшләнгән миниатюр аппаратты шул арала Байрастың уң ҡулына тағып та ҡуйҙы.

– Бына, Байрас, барыһы ла юғары разряд буйынса эшләнде. Шунан һуң да беҙгә юлды онотһаң инде, белмәйем…

– Онотмам, – тигән булды егет. Ул Инессаға төбәлгән дә тын ғына йылмая.

Инесса ла егеттең ҡарашын тойҙо. Улар бер аҙ ваҡыт бер-береһенә төбәлеп барҙы.

Өндәшмәйҙәр.

Уларҙың күңелдәре генә һөйләшә.

“Бөгөн ниндәй көн, беләһеңме?” – тип һорай Байрас.

“Әйт һуң!” – тип шат тауыш менән яуаплай Инесса.

“Мин бөгөн һине үҙемдең мәңгелек йәрем итеп һайланым!”

“Уй, ысынлапмы? – тип ҡыуанyслы яуаплай ҡыҙ. – Ә нисек була ул мәңгелек?”

“Ул һулар һауа кеүек һәр минутта кәрәк нәмә, – тип аңлатҡан була егет. – Ҡояш нурҙары кеүек мәңгелек. Болоттар ҡаплаһа ла, уларҙың унда, алыҫ-

алыҫта, офоҡтар артында бар икәнлеген мин бит беләм. Шуның шикелле, һинең донъяла барлығыңды мин тоя инем. Ҡайҙандыр балҡып килеп сығырыңды көттөм генә. Һәм бына һин бында, минең алдымда!"

"Ә һин мине ғүмер буйы яратырһыңмы? Табыуын тапҡас, юғалтыуҙары күпкә ауырыраҡ бит".

"Мин инде быға тиклем дә ятраҡанмын кеүек. Тик хәтеремә төшөрә алмағанмын ғына. Ҡапыл иҫләнем, һәм барыһы ла үҙ урынына ултырҙы".

"Мин һиңә ышанам", – тип яуаплай ҡыҙ. Ләкин был юлы ул керпектәрен аҫҡа төшөрә. Сөнки, ниңәлер, ҡапыл илағыһы килә.

Күңел ниңә шулай ҡыуаныстан да, хәсрәттән дә илай икән ул?

– Әҙерләнергә! – тигән тауыш ишетелә пилот кабинаһы яғынан.

Самолет күптән һауала икән дәһә!

– Бейеклек – өс саҡрым! Һикереү нөктәһенә яҡынаябыҙ! – тип йәнә ҡабатлай пилот.

Айрат ҡыҙҙың ҡайыштарын Байрастыҡына беркетергә ярҙамлаша. Инесса егеттең тын алышын үҙенең елкә тәңгәлендә тоя. Унда ҡапыл егеттең көслө күкрәгенә һырығыу теләге уяна. Хәйер, улар былай ҙа яп-яҡын. Ҡыҙ Байрастың хатта йөрәк тибешен тойған кеүек.

Әллә шулай тойола ғынамы?

– Әҙерлек! Ике минуттан – сығыу нөктәһе!

Самолеттың ишеге асыла. Һалҡынса сентябрь еле кабинаға тула. Ә алыҫта, офоҡ аръяғында, ҡояш әкрен генә байыуға яҡынлаша.

Их, һағындырыр инде был минуттар!

– Һикерергә әҙерлек! – тип өндәшә пилот.

Байрас Инессаны үҙенә ылыҡтыра. Ҡыҙ ошо мәлдә ҡапыл ваҡыттың туҡтауын теләй.

Их, туҡтаһын ине был Ваҡыт!

Сөнки ошо мәлгә Мәңгелектең үҙе һыйған.

Инесса күҙҙәрен асыр ҙа бының төш кенә булғанлығы асыҡланыр.

Ә төштәрҙән күберәк үкенес кенә ҡала.

Сөнки улар нур кеүек кенә йылтлап үтә лә үҙҙәренән һуң юғалтыу тойғоһо ҡалдыра. Ә юғалтыуҙы күтәреүе ауыр, бик ауыр!

Ләкин был төш түгел ине.

Әлегә.

Байрастың көслө ҡулдары Инессаның ыҡсым кәүҙәһен һаҡ ҡына ҡосаҡлап алған. Егеттең ҡорамалдарына беше ҡайыш менән беркетелгәнгәме, әллә үҙенең тотош ғүмерен егеткә ышанып тапшырҙы – ҡыҙ Байрастың ихтыярына тулыһынса буйһондо.

– Сығырға!

Инессаның ҡулдары самолеттың тимерен ысҡындыра, һәм бер нисә секундтан егет менән ҡыҙ асыҡ һауала ине инде.

Парашют әлегә асылмаған.

Иртәрәк.

Бер-береһенә бәйләнгән егет менән ҡыҙ уҡ һымаҡ аҫҡа осто.

Теүәл ҡырҡ секунд дауам итәсәк ине был.

Ә күңелдәре иһә, киреһенсә, ситлектәрҙән ысҡынған ҡош кеүек, өҫкә, икһеҙ-сикһеҙ киңлектәргә атылды.

"Беҙ бергә!" – тип тантана итә береһе.

“Бергә!” – тип ҡеүәтләй уны икенсеһе.

“Бит беҙ меңәр йыл әүәл дә ошо рәүешле күктәргә ашҡайныҡ”.

“Бына бит, йәнә табыштыҡ!”

“Юғалма яндарымдан!”

“Юғалмам!”

“Һин янһаң, мин һүнмәм!”

– Һүнмәм! – тип ҡабатлай тауҙар араһына инеп юғалған шаңдау.

Байрас парашютты ысҡындыра. Ҡолаҡтар эргәһенән шыйылдап өҫкә шыуған һауа ла ҡытыршынан һығылмалыға әүерелә, бит тиреләре лә инде һауа ҡаршылығынан тартышмай.

Улар инде аҫҡа атылмай.

Мәғрур ҡанаттарын киргән бөркөт кеүек, һауала әкрен генә йөҙәләр.

Тирә-яҡта иҫ киткес һиллек.

Өҫтә иһә – күҙҙең яуын алырлыҡ йәйғор төҫтәрендәге парашют япмаһы.

Һәм улар.

Байрас менән Инесса.

Улар бер-береһенең күҙҙәренә төбәлгән.

Һәм тын ғына йылмаялар.

– Инесса… – тип бышылдай егет.

– Эйе… – тип ишетелер-ишетелмәҫ тауыш менән яуаплай ҡыҙ. Ул хәҙер бик мөһим нәмә буласағын күңеле менән тоя. Ә ул, күңел, күптән бит инде тулай.

– Беләһеңме, мин һине ни өсөн бында алып мендем?

– Белергә бик-бик теләйем.

Байрас ҡыҙҙың уң ҡулын үҙенекенә услай. Кескәй ҡул суғы егеттең ҙур устарында юғалып ҡала.

– Мин ғүмер юлымды һинең менән бергә ошо рәүешле атлап, юҡ, осоп үтергә теләйем.

– Был тәкдим ниңә шулай ҡапыл? – тип йылмая ҡыҙ. – Шулай буламы ни ул?

– Ҡапыл түгел. Шулай булырға тейешле.

– Ҡайҙан беләһең?

– Беләм. Беҙ бергә булырға тейешбеҙ. Миңә быны ниндәйҙер бер эске тауыш әйтә.

– Ә минең эске тауыш бер нәмә лә өндәшмәй, – тип көлә ҡыҙ. – Инде ни эшләргә икән?

– Сөнки мин ир-егет, – тип етди тауыш менән яуаплай егет. Инесса уға ҡарап ала. Юҡ, һис тә шаяртҡанға оҡшамаған. Байрас дауам итә. – Минең өҫкә етдиерәк бурыстар һалынған. Һине эҙләргә һәм табырға. Эҙләнем һәм таптым. Йәнә ҡурсаларға. Тап бына ошоноһон хәҙер мин эшләргә тейешмен.

– Улайһа, мин риза! – тип көлөп яуаплай ҡыҙ. – Ундай ир-егеттән баш тартмайҙар!

– Ысынлапмы?

– Ысынлап!

Ҡапыл парашют үҙенең йүнәлешен үҙгәртә. Уның менән идара ителергә тәғәйенләнгән бау көс менән тартҡанға ла шулай ул.

Инесса ҡайһы аралалыр Байрастың ҡосағында булып сыға. Ул егеттең

эҫе тынын сикәһе менән тоя. Әллә сентябрь еле, әллә Байрастың һулышы уның муйынын ҡытыҡлап үтә. Ә бер аҙҙан…

Инессаның ирендәре еңелсә генә һулҡылдаған да һымаҡ. Әллә ниндәй кисерештәр өйөрмәһе иһә уның бар булмышын ялмап алған. Байрастың наҙға һыуһаған ирендәре ҡыҙҙың күҙҙәренә, асыҡ муйынына ҡағылып үтә, унан ирендәрен дә эҙләп таба.

Ә аяҡ аҫтарында, алыҫ-алыҫта, икһеҙ-сикһеҙ киңлектәр йәйелеп киткән. Ләкин ҡыҙ менән егеттең унда тиҙ генә төшкөһө килмәй.

Ерҙә – Ер тормошо.

Бәғзе берҙә ул ҡанаттарҙы яҙырға түгел, башты күтәреп күккә баҡырға ла ирек бирмәй.

Шуға күрә лә Байрас йүнәлеште үҙгәртеп, парашюттың түбәнәйеүен бер аҙға ғына булһа ла кисектерергә тырышамы икән әллә?

Шулайҙыр.

Ләкин парашют куполы аяуһыҙ рәүештә түбәнәйә.

Егет менән ҡыҙ ҙа инде был ҡотолғоһоҙ сиктең ҡасан да булһа килеп етәсәге менән килешә.

Шуға ла улар инде хәҙер һуңғы минуттарҙы фотокамерала булһа ла мәңгеләштерергә ашыға.

Был иҫ киткес минуттар һаҙағай шикелле генә ялтлап үтер ҙә китер, ә, бәлки, фотоларҙа булһа ла ваҡыт ағышы туҡтар, тип өмөтләнә улар.

Кешелек бит шуның өсөн дә фоторәсемдәрҙе уйлап тапҡан.

Унда, һүрәттәрҙә, әҙәм балаһы аяуһыҙ рәүештә үткәндәргә аҡҡан ваҡыттың ағышын бер мәлгә генә туҡтатып өлгөрә.

Рәсемдәрҙә һынланып ҡалған мәңгелектең ошо бер мәле бик оҙаҡ ваҡыт үткәс тә Байрас менән Инессаның йөрәген утлы ҡуҙ шикелле көйҙөрәсәк ине әле.

**13**

– Ә хәҙер ҡайҙа барабыҙ?

Инесса, парашют менән һикергәндә кейгән кроссовкаһы менән джинсыһын сисеп, ҡабаттан тәненә һылашып торған эш костюмын кейеп алырға өлгөргәйне инде. Аяҡтарында ла бейек үксәле килешле туфлиҙар. Ул үрелеп, кейемдәре һалынған пакетын артҡы ултырғысҡа ҡуйҙы. Ҡыҙҙың һәр хәрәкәтендәге нәзәкәтлектән күңеле илергән Байрас уны көслө ҡулдары менән ҡармап алып үҙенә ылыҡтырыуҙан көскә тыйылып, үрелеп офоҡ яғына ҡараған булды.

– Көн беҙҙеке булды. Ә хәҙер кис тә беҙҙеке. – Ул машинаһының двигателен тоҡандырҙы. – Хәҙер күрерһең, һылыуым. Бындай мәл ғүмер эсендә бер генә тапҡыр ҡабатлана, һәм беҙ һәр минуттың баһаһын беләсәкбеҙ.

Машина ҡала яғына елдерҙе.

Ярты сәғәттән улар ҡаланың үҙәк урамдарының береһенә килеп инде.

Ювелир магазины эргәһендә Байрас машинаһын туҡтатты.

– Беҙгә хәҙер ошонда!

Ни өсөн бында килгәндәрен Инесса аңлағайны инде. Ул үҙен төштә шикелле тоя. Уянып китер ҙә быларҙың барыһының да ни бары хыялый уй шаяртыуы ғына икәнлеге асыҡланыр.

Инесса шул арала машинаның был яғына сығып уны етәкләп тигәндәй

алған Байрасҡа ҡарап ҡуя. Юҡ, барыһы ла ысынбарлыҡта кеүек. Ваҡиғаларҙың иҫ киткес юғары тиҙлектә үҙгәреүенән, юҡ, улай ғына ла түгел, әллә ҡайҙан пәйҙә булып, уны ла эләктереп алып киткән өйөрмә кеүек күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә елеүенән генә ул бер аҙ албырғабыраҡ ҡалған. Ләкин ғәжәпкә күрә күңелендә икеләнеү тигән нәмәнең саҡ ҡына юшҡыны ла юҡ. Гүйә, улар бөгөн иртән генә эш мәшәҡәттәренә хаттин сумып, комиссия ултырышына ашыҡмағандар ҙа! Бер нисә сәғәт ваҡыт үтте, әйләнеп ҡарауҙарына бөтә тирә-яҡ, улай ғына ла түгел, тотош донъя үҙгәргән дә ҡуйған.

Байрас ишекте асып Инессаны алдан үткәрә. Ҡыҙҙың күҙ алдынан витринала балҡып ятҡан иҫәпһеҙ-хисапһыҙ затлы йөҙөктәр, алҡалар, тағы әллә ниндәй зиннәтле биҙәүестәр шыуып уҙа. Эргәһендә бөтөрөлгән Байрас та, һатыусы ла ҡыҙҙың күңеленә ҡайһыһы нығыраҡ ятҡанын уның күҙҙәренән уҡырға тырыша. Ҡайһыһынындыр өҫтөнән Инессаның ҡараштары шыуып ҡына үтә, ниндәйҙәрендер кейеп тә ҡарай, унан йылмайып һатыусыға ҡабат һуҙа.

Ләкин береһе уны ниңәлер ылыҡтыра. “Бына ул! – тип уйлай ул эстән генә. – Был йөҙөк тап әлеге көн кеүек – башҡа береһенә лә оҡшамаған. Бик күп йылдар үткәс тә, ошо йөҙөккә ҡараһам, мин ошо көндө иҫләйәсәкмен. Ҙур ҙа түгел үҙе, ләкин унда ниндәйҙер нәзәкәтлек бар… Яҡшы тоҡомло юртаҡ кеүек тиер ине, моғайын, атайым…” – Атаһы иҫенә төшкәс, Инессаның күңеле бер аҙ ғына болоҡһоп ала. Бөгөн, тап бөгөн, атаһы ла уның эргәһендә булһа, ҡайһылай ҙа күңелле булыр ине, тигәнерәк уй бер мәлгә генә китмәй ыҙалата. Ләкин ошо минуттарҙың матурлығы хатта бер аҙҙан уны ла ҡыҫырыҡлап сығара.

Бына йөҙөк тә һайланды. Консультант ҡыҙыҡай уны сейә төҫөндәрәк ҡупшы бәрхәт ҡумтаға һалып Байрастың ҡулына тоттора. Ләкин шул мәлдә уның күҙҙәрендә ярайһы уҡ ҙур сумманы икеләнмәй ҙә сығарып һалған егеткә ҡарата һоҡланыу ҙа, ул егеттең юлдашына ҡарата көнләшеп ҡарау ғәләмәте лә күренә биреп ҡала.

Һатыусыға рәхмәт әйтеп, урамға атлайҙар.

Нимә хаҡындалыр һөйләшәләр, еңел-елпе репликалар менән алышалар. Һәм, ниһайәт, төштән бирле бер тәғәм ризыҡ ҡапмағандары иҫтәренә төшә.

Был мәлдә иһә Байрастың йөҙө тағы ла яҡтырып киткәндәй.

Тимәк, көн әле бөтмәгән!

Ул һаман да дауам итә!

Егет инде ҡулына телефонын алып, ҙур ихласлыҡ менән ундағы интернет киңлектәренә төшөп китә. Ара-тирә Инессанан ниҙер һораған була. Ахыр килеп, Байрас кинәт бейек яр буйында урынлашҡан ресторанды иҫләй. Ул рестарандың тәҙрәләренән күҙ һалһаң, тирә-яҡҡа иҫ киткес панорама асыла. Борғоланып-һырғаланып аҡҡан Ағиҙел йылғаһы, кистәрен уттары менән балҡып торған күпер һәм алыҫтағы икһеҙ-сикһеҙ киңлектәр…

Бөгөн уларҙың күңеле гелән бейеклеккә ынтыла.

Ә, бәлки, физик донъяларға батырылған йәндәренең унда, алыҫ-алыҫта, икенсе үлсәмдәрҙә, икенсе бер донъяның булыуын тойомлағанына ла күңелдәре шул рәүешле юғарыға талпыналыр? Унда бит, башҡа үлсәмдәрҙә, уларҙы бер-береһенә бәйләгән ниндәйҙер бер сер йәшеренгән…

Уларҙың һәр теләген ҡараштарынан уҡ уҡырға тырышҡан официант егет

килешле хәрәкәттәр менән бокалдарға шарап ҡойҙо ла шешәне ситтәрәк торған боҙло һауыт эсенә ҡабат ҡуйҙы.

– Ашығыҙ тәмле булһын! – тине ул, башын еңелсә эйә биреп.

Официант китеү менән үк Байрас түш кеҫәһенән бәрхәт футлярға һалынған йөҙөктө сығарҙы, ҡаршыһында тын ғына йылмайып ултырған Инессаның өҫтәл өҫтөндә ятҡан ҡулын алды һәм йөҙөктө ҡыҙҙың бармағына кейҙерҙе. Ундағы ваҡ-ваҡ таштар, өҫтән, люстраларҙан төшкән ут яҡтыһында сағылып, күҙҙең яуын алып балҡып китте. Байрас ҡыҙҙың ҡулдарын тиҙ генә ысҡындырманы, өҫкә күтәрә биреп, бармаҡтарына ирендәрен тейҙерҙе.

Икеһе лә был минуттарҙың илаһи ҡөҙрәтен тойоп, бер мәлгә генә тын ҡалды.

Уларҙың күҙҙәре генә йылмая ине.

Әйтерһең дә, унда, икенсе үлсәмдәрҙә, Йыһандың бар ҡатламдары, дүңгәләктәре һәм үлсәмдәре әлеге мәлдә улар менән бергә тантана итә.

Бер-береһенә тәғәйенләнгән йәндәр берләшһә, Йыһандың да ҡеүәте арта.

Йыһан һулышы Мөхәббәт тулҡынына көйләнә.

Сөнки Мөхәббәт энергияһы төҙөү энергияһын хәрәкәткә килтерә.

Мәгәр ана шул төҙөү энергияһын ҡыйратыусы ҡаршы донъя ла бар шул.

Үкенескә күрә…

Ләкин Байрас менән Инесса был хаҡта бер нәмә лә белмәй. Әлегә уларға бер-береһенең күҙҙәренә ҡарап ултырыуы ла бик-бик рәхәт.

– Бына, һылыуым, һинең хәҙер статусың үҙгәрҙе. Һин хәҙер – минең буласаҡ кәләш.

– Ә миңә был статус бик тә оҡшай, – тип йылмая Инесса.

Улар бокалдарынан шарап уртлай. Нескә тәмле эсемлектең ҡөҙрәте ҡан тамырҙары буйлап йүгерә.

– Беләһеңме, иртәгә беҙ ни эшләйәсәкбеҙ? – тип һорай Байрас, әллә шараптан, әллә башына кинәт килгән фекерҙән йәнләнә төшөп.

– Йә, әйт!

– Иртәгә мин һине үҙемдең ғаиләм менән таныштырасаҡмын. Әсәйем дә, һеңлем дә бик шатланасаҡ.

Инессаның йөҙө балҡып китте лә бер аҙҙан күләгәләнде.

– Ни булды, һылыуым? – тип борсола төштө Байрас.

– Бик теләр инем дә… – Ҡыҙ уфтанды. – Әлегә иртәрәк.

– Ни өсөн? – тип ғәжәпләнде егет.

– Мин барыһын да янъялдан башларға теләмәйем, Байрас. Әгәр ҙә беҙ быны асыҡтан-асыҡ эшләһәк, тауыш ҡубасаҡ бит.

– Ә-ә, һин контракт хаҡында… – тип күңелһеҙләнә төштө егет.

– Эйе. Бында айыҡ аҡыл кәрәк. – Инесса бер аҙ ваҡытҡа тынып ҡалды. Ул тел осондағы фекерен нисегерәк итеп егетте рәнйетмәйерәк әйтеү юлын уйлай ине. – Контракттың бер генә пунктын үтәмәһәң дә, директорҙар советы һине эштән бушата ала. Хатта мин дә, атайымдың бар хоҡуҡтарын файҙаланып та, һине яҡлай алмаясаҡмын. Ә һин миңә бик кәрәкһең. Компанияла ла, ә хәҙер, бөгөндән башлап, ғөмүмән, миңә кәрәкһең. Аңлайһыңмы?

– Беләм дә…

– Үткәндә, телефон аша һөйләшкәндә мин атайымдан был хаҡта һораным.

– Ул нимә тине?

– Әлеге пунктты Сафин индереп ебәргән. Ә уның ҡулында акцияларҙың егерме биш проценты. Уның бында үҙенең ниндәйҙер иҫәп-хисабы бар.

– Уныһын аңланым инде. Һиңә бөгөн ошо хаҡта әйтергә уйлағайным да, көндөң йәмен ебәргем килмәне.

– Матур көн өсөн рәхмәт, Байрас! – Инесса бойоғоп киткән егеттең уң ҡулын үҙенең кескәй генә устары менән ҡыҫты. Ирҙәрсә ҡеүәтле ҡулдың йылыһын тойоп, ул бер мәлгә генә тынып ҡалды. – Иҫ киткес матур көн бүләк иттең һин миңә бөгөн. Ләкин беҙ бала-саға түгел, һәм һүҙ беҙҙең хаҡта ғына түгел, атайым бөтә ғүмерен бағышлаған компанияның яҙмышы хаҡында ла бара. Хистәрҙе генә өҫтөн ҡуйып, ҡалғанына еңел-елпе ҡарау ҙа дөрөҫ булмаҫ. Шуның өсөн әлегә беҙҙең мөнәсәбәттәр хаҡында артыҡ һөйләмәһәк, урынлыраҡ булыр. Атайым берәй айҙан әйләнеп ҡайтасаҡ. Уның быны хәл итергә ҡулынан килә, ә минең – юҡ. Директорҙар советы был мәсьәләлә минең менән иҫәпләшмәйәсәк. Беҙҙең бары бер юл ҡала – көтөргә. Бер ай ваҡыт. Күпте һорамайым.

– Ярай, – тине Байрас бер аҙ тынлыҡтан һуң. – Көтөргә икән – көтөргә. Мин һине ғүмерем буйы көттөм, һылыуым. Бер айға ғына түҙербеҙ.

– Аҡыллы фекер! – Инесса йылмайҙы. – Әгәр ҙә ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ сыға ҡалһа, икәүләп ҡорасаҡ ғаиләбеҙҙә лә шулай ҡара-ҡаршы ултырып хәл итербеҙ, йәме?

– Ҡара әле, бәләкәсем, һин ил инәләре шикелле зирәк икәнһең дәһә, – тигән булды Байрас. Уның йөҙөнә ҡабаттан йылмайыу ҡунды.

Ләкин йөрәге генә ниңәлер һулҡылдап ҡуйҙы.

## 14

1792 йыл. Май. Франция. Париж.

Граф Поль де Бернар, мөһабәт һынлы ир уҙаманы, алдындағы киндергә төбәлгән дә тынып ҡалған.

Бөгөн ул төн уртаһында һиҫкәнеп уянып китте. Уның һәр ым-хәрәкәтен аңларға әллә ҡасандан өйрәнгән хеҙмәтсеһен дә саҡырып тормай кейенде һәм аҫҡы ҡатҡа йүнәлде.

Күҙ алдына әйләнә лә әле генә күргән төшө килә.

Дөрөҫ, дүрт тиҫтә самаһы ғүмере дауамында төштәрҙең төрлөһөн күргәне булды. Ләкин бөгөнгөһө…

Бөгөнгөһөндә Поль икенсе параллель ысынбарлыҡта йәшәне. Күптән танһыҡлаған күңел бөтөнлөгөн тойҙо ул унда. Әйтерһең дә, хәтһеҙ көндәр буйы сүллек буйлап тамсы һыуға тилмереп барған юлсы һалҡынса һыуҙы танһыҡтары ҡанғансы йотлоғоп эсте. Эсте лә байтаҡтан көткән ләззәттең ҡан тамырҙары буйлап йүгереүенән ҡәнәғәтлек тойоп тынып ҡалды. Гүйә, ул оҙон-оҙаҡ йылдар буйы тилмереп ошо мәлде көткән. Һәр һулышы һәм бар булмышы менән.

Бөгөн төшөндә Поль Эмилия менән осрашты.

Ул, ғүмер уртаһына аяҡ баҫҡан ир уҙаманы, һәм Эмилия, һаман да ун ете йәшлек, алтынһыу сәс бөҙрәләре яурындарына таралып төшөп торған фәрештәләй саф бер ҡыҙ.

Унда, параллель икенсе ысынбарлыҡта булған осрашыуҙан тыуған ҡәнәғәтлекте һәм күңел елкенеүен граф әле булһа тоя. Тоя һәм бер үк

ваҡытта ҡурҡа ла. Ул теп-тере булып күҙ алдында торған Эмилияның һыны тоноҡланып, хәтеренән юғалып ҡуйыуҙан шикләнә.

Ошо йәненә ғәзиз һынды иҫендә ҡалдырырға тырышыу килтерҙе лә инде уны киндер эргәһенә.

Әлегә саҡлы граф Поль де Бернарҙың һынлы сәнғәт менән шөғөлләнгәне булманы. Булһа ла, бәлки, бик алыҫ йылдар ашаһында, үҫмер мәлендә генә. Унынһында ла үҙ ҡатламы ҡағиҙәләренә буйһоноп, дөйөм мәҙәни кимәлде тоторға тырышыу ихтыяжынан.

Граф ҡулына бумаланы алды. Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына киндер өҫтөнә тәүге һыҙаттарҙы төшөрҙө. Артабан иһә уның бар булмышы әллә ниндәй аңлайышһыҙ бер стихия ихтыярына буйһондо.

Киндер өҫтөндә төҫтәр гаммаһы уйнай. Поль ҡулына ҡымтып тотҡан ябай ғына бумала ла, гүйә, музыка ҡоралы – уның осонан әлеге мәлдә көй ағылған кеүек. Юғары даирәләр музыкаһы төҫтәр симфонияһына әүерелеп, ғәжәйеп бер картина булып киндер өҫтөнә күсә бара ине.

Граф эш менән шул тиклем мауыҡҡан, сәғәт артынан сәғәт үтеүенә лә, төн мәленең күптән уҙып, тәҙрә артында ҡояш нурҙарының балҡыуына ла иғтибар итмәй. Уның күҙ алдында бер генә күренеш – төштә күргән һын. Ана шул ғәжәйеп һын күҙ алдынан юғалмаҫ борон Поль уны киндергә күсереп өлгөрөргә тырыша.

Хәрәкәттәре теүәл һәм аныҡ. Гүйә, уның бумала тотҡан ҡулдары менән Күктәр үҙҙәре идара итә.

Талантлы яҙылған бар әҫәрҙәр ҙә донъяға шул рәүешле ярала.

Әйтерһең дә, Күктәр Мәңгелектең бер мәлендә ябай ғына бер әҙәм балаһын үҙенең Ерҙәге илсеһе итеп һайлай.

Был Әҙәм балаһы ҡәҙимге генә лә бит, ләкин уның бөтә булмышы Йыһан ихтыярына буйһонған.

Ул, был икһеҙ-сикһеҙ Йыһан, үҙенең тиңһеҙ ҡөҙрәтен эшкә егеп, ошо кешенең зиһене аша Мәңгелектең үҙе кеүек үк ҡаҡшамаҫ хәҡиҡәттәрҙе Ерҙә йәшәүселәргә еткерергә ынтыла.

Граф һуңғы һыҙаттарҙы төшөрҙө лә әллә нисәмә сәғәт эсендә тәүге тапҡыр тиерлек саҡ ҡына ситкәрәк китеп, алдында асылған ғәжәйеп бер күренешкә күҙ һалды.

Уның алдында теп-тере булып ҡайҙалыр йылдар ашаһында юғалып ҡалған Эмилия тора ине.

Поль де Бернар, яңаҡтары буйлап әкрен генә һарҡҡан күҙ йәштәренә лә иғтибар итмәй, алдындағы һынға табан ынтылды ла, уға ҡағылырға ниндәйҙер миллиметрҙар ғына ҡалғас, артҡа тайшанды.

Ярамай!

Күктәрҙән төшөрөлгән был гүзәл музыканың баһалары бик ҡыйбат!

Граф быны ниндәйҙер бер эске аңы менән тоя.

Сөнки нисәмә йылдар буйы, алыҫ Американан Парижға урап ҡайтҡандан бирле ҡанһырап торған йөрәге ҡапыл им тапҡандай тойолдо. Ә ул үҙе иһә, йәненән ғәзизерәк берҙән-беренең үлемендә үҙен ғәйепләп, әкрен генә һүнә барған ир уртаһы кеше, ниһайәт, күңел тыныслығы тапты.

Картиналағы гүзәл һын уны йәшәргә өндәне.

Сөнки унда Хоҙай ҡөҙрәте менән Йыһан энергияһы һалынғайны.

Граф, шундағы креслоға ҡырын ятып, нисәмә йылдар тигәндә тәүге

тапҡыр тып-тыныс йоҡлап китте. Ғаилә ағзалары ла, күп һанлы хеҙмәтселәр ҙә уны уятырға баҙнат итмәне. Париж уртаһында ҡалҡып торған был күркәм йортта бөгөн төндә донъяға ғәжәйеп бер сәнғәт әҫәре яралғанын әлегә бер кем дә белмәй ине.

Ошо мәлдән алып граф Поль де Бернарға йәшәү дәрте әйләнеп ҡайтты. Эстән генә һыҙып, әкренләп һүнә барған, ҡырҡҡа ла етмәгән Поль артабан да йәшәргә тейешлеген аңланы.

Йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ, тиҙәр.

Юҡ, был дөрөҫ түгел!

Ул быны белә.

Сөнки Ерҙә мәңгелек хәҡиҡәт үҙенең йәшәүен дауам итә.

Ер тормошоноң ығы-зығыларына, ваҡыты менән ялҡытҡыс бер төрлөлөгөнә, ҡабатланып торған яуызлыҡтарына ла ҡарамай, ҡайҙалыр унда, Йыһандың икенсе үлсәмдәрендә Мәңгелек үҙе һулыш ала.

Был һулышты йәнең менән тоя белергә генә кәрәк.

Һүнеп барған ҡуҙ кеүек йөрәгенә ҡабаттан йәшәү өргән был мәлде граф Поль де Бернар ғүмер буйы күңел түрендә һаҡлаясаҡ.

Ер йөҙөнә килеүен килгәс, йәшәргә тейешлеген дә беләсәк.

Сөнки картиналағы Эмилия уға шулай тип өндәште.

Һин янһаң, мин һүнмәм, тине.

Ошо иҫтәлекле төндән һуң граф Поль де Бернарҙың эштәре уңға китте. Ҡото юғала барған ҙур йорт та йәнләнде. Ә ул үҙе иһә, фамилияһы Франциянан ситтә лә билдәле булған тоҡомло аристократ нәҫеле, ил тормошондағы йоғонтоло сәйәси фигураларҙың береһенә әүерелде.

Уның тирә-яғындағы донъя үҫте һәм үҙгәрҙе.

Тик бер нәмә генә үҙгәрешһеҙ ҡалды.

Уның кабинетында, эш өҫтәленең ҡаршыһында һәр саҡ бер картина эленеп тора торған булды.

Ул “Асманға ашыу” тип атала.

Ул граф Поль де Бернарҙың берҙән-бер картинаһы.

Уны ни өсөн “Асманға ашыу” тип атағанын граф үҙе лә белмәй. Күңеленә тәүге килгән атаманы ҡушты ул.

Күңелгә тәүге килгәне – ул фәрештәләр ауазы тип тә әйтәләр бит.

Бәлки, шулайҙыр ҙа.

Сөнки картина яҙылған төн уның Йыһандың әллә ҡайҙағы икенсе ҡатламдарындағы Асманға ашыу мәле лә ине.

Был картинаны һатыуын һорап, графҡа әллә нисә тапҡыр мөрәжәғәт иттеләр. Хатта бик ҙур суммалар ҙа вәғәҙә иттеләр. Ләкин Поль де Бернар ризалашманы. Хатта тәү ҡарауға аҡылһыҙ тойолған хаҡтарға ла ризалығын бирмәне.

Сөнки ул ошо картинанан үҙенә йәшәү энергияһы алғанын белә ине.

Тиҫтерҙәренең йөҙҙәрен йыйырсыҡтар йырғыслаған, ә ул, Поль, һаман да күркәмлеген юғалтмай. Бының сәбәбе лә әлеге картинала түгел инеме икән?

Һуңғы һулышын алғанда ла ул кабинетында, эш өҫтәле артында буласаҡ. Йәше ап-аруҡ булһа ла, көс-ҡеүәтен юғалтмаған, сәстәре салланған ҡарт граф ил сәйәсәтенең бөткөһөҙ мәшәҡәттәре араһында ҡайнаясаҡ.

Ләкин, Йәшәү булғас, уның эргәһендә мотлаҡ рәүештә Үлем дә йөрөй.

Йәшәү менән Үлем был юлы тәүге тапҡыр бәхәсләшмәне.

– Һин уның менән бик оҙаҡ булдың, хәҙер инде минең сират, – тине Үлем, өҫтәл артында ашығып ниҙер яҙған графтың эргәһенә килеп.

Йәшәү, киреһенсә, графтан ситкәрәк китте.

– Был юлы бәхәсләшмәйем. Уға, ысынлап та, китергә ваҡыт. Барыһы ла Яҙмыш Китабындағыса.

– Был кеше ихтирамға лайыҡ! – Үлем хатта бер мәлгә генә баҙнат итмәй туҡтап ҡала. – Юғиһә, бынан утыҙ йыл әүәл үк алып китергә тура килер ине. Барыһы ла шуға табан барҙы. Ә ул үҙендә көс тапты!

– Минең хеҙмәт! – тип баҙнат итмәй генә һүҙ ҡыҫтыра Йәшәү.

– Килешәм дә… Тик Әҙәм үҙе һайлай… Йәшәргә теләүен дә, теләмәүен дә…

Үлем граф эргәһенә тағы ла яҡыныраҡ килә.

Йәшәү иһә, киреһенсә, ситкәрәк китә.

Үлем яҡыная.

Уның һайын Йәшәү ситкәрәк күсә бара.

Граф Поль де Бернар ҡапыл яҙыуынан туҡтаны. Йөрәген тотоп урынынан торҙо. Өҫтәле өҫтөндә торған ҡыңғырауҙы алып, камердинерын саҡырырға теләне лә кире уйланы.

Ул ҡапыл барыһын да аңланы.

Һуңғы тапҡыр ҡаршыһында эленеп торған картинаға күҙ һалды.

Урынынан торҙо, бер ситтәрәк ҙур гөл эргәһендә торған яратҡан креслоһына барып ултырҙы, күҙҙәрен йомдо һәм тынып ҡалды.

**15**

2009 йыл. Октябрь. Рәсәй. Өфө.

Күргәҙмә залына кеше байтаҡ йыйылғайны.

Ҡупшы киске күлдәктәге ҡатын-ҡыҙҙар, ошо маҡсат өсөн генә ҡайҙағылыр бөтмәҫ эш-мәшәҡәттәренән тартып сығарылған ир-егеттәрҙең беләгенә таяна биреберәк, тегеләй ҙә, былай ҙа үткән була. Үтеп барышлай, баштарын эйә биреберәк, таныштарын сәләмләргә онотмайҙар. Мәгәр шул арала ҡатын-ҡыҙ затының бәғзе берҙәренең башында “Күлдәгемдең шундай-шундай бренд маркалы икәнен, исмаһам, берәйһе аңланымы икән?” тигән борсолоу ҙа сағылмай ҡалмай. Аҡ күлдәктәре өҫтөнә ҡара күбәләк галстук таҡҡан официанттар йылғыр хәрәкәтләнеп күргәҙмәгә килеүселәргә шампан шарабы тәҡдим итә. Бындай сараларҙа уң ҡулыңа нәҙек тояҡлы бейек бокалды килешле итеп тотоп сама менән уртлай белмәһәң, дөйөм картинаны бер аҙ боҙоуың да бар.

Микрофондарын тотоп, арлы-бирле журналистар үтә. Тегендә-бында фотокамералар ялтлап ҡуя. Телекамералар ҡаршыһында иһә тотош спектакль уйнала: махсус саҡырып килтерелгән һәм, моғайын да, гонорарын алдан уҡ кеҫәһенә һалып ҡуйған берәй белгес ауыҙ һыуын ҡоротоп сәнғәт күгендә яңы йондоҙ ҡабыныуын шатлана-ҡыуана буласаҡ тамашасыларға хәбәр итә.

Бөгөнгө көн геройының, йәғни күргәҙмә хужаһының йөҙөн түгел, исемен дә хәтерҙә ҡалдыра алмай, иртәгә үк онотоуҙары бик тә мөмкин.

Һәм, моғайын, ул шулай булыр ҙа.

Унаң әһәмиәтенең бик самалы икәнен, бөтәһе үк булмаһа ла, күбеһе белә.

Ләкин бөгөн барыһы ла үҙенә тәғәйен ролде башҡара.

Беренсе тапҡыр ошондай сараға эләккәс, хәҙерге сәнғәттә бер нәмә лә аңламайым икән тип, Инессаның кәйефе бик ҡырылғайны. Уны оҙатып килгән Байрас ҡаршыларындағы картинаны бик ҙур иғтибар менән өйрәнгән ҡиәфәттә хәлдең асылын аңлатып бирҙе.

Егет ара-тирә зал яғына күҙ һалғылай, таныштарын баш ҡағып сәләмләй, ваҡыт-ваҡыт ҡулындағы бокалдан шампан шарабын уртлай һәм тауышын баҫа биребергәк был уйындың шарттарын төшөндөрә.

Асылда, барыһы ла бик ябай булып сыҡты.

Бындай шоу өсөн ни бары ике сәбәп булырға мөмкин.

Тәүгеһе – картиналар килем килтергән хәлдә һәм уларҙы алыу өсөн ниндәйҙер йүләрҙәр сиратҡа баҫып аҡсаларын сығарып һалырға әҙер торһа. Мәгәр бындай осраҡтар бик һирәк. Ләкин булғылай.

Икенсе осраҡта ошо күргәҙмәгә ҡуйылған әлеге ҡот осҡос талант эйәһенең артында ҡалын кеҫәле әфәнденең булыуы зарур. Ошо бай Буратино ойоштора ла инде әлеге балаганды. Ул быны күберәк килем өсөн түгел, ә үҙ баһаһын күтәреү өсөн эшләй.

Бизнес донъяһы иһә үҙ сиратында бындай шарттарға ла бик тиҙ ҡулайлашҡан. Ошо шоуҙар ваҡытында файҙаһы сығырҙай кешеләр менән танышып ҡалыу мөмкинлеге асыла. Саҡырыу билеттары ла бит күбеһенсә сәнғәткә ғашиҡ әҙәми заттарға түгел, ә ана шул эшҡыуарлыҡ даирәләре тирәһенә оҙатыла. Һәр тинен иҫәпләргә өйрәнгән эш кешеһе теләһә кемде фуршет менән һыйлап ултырырға йүләрме ни?!

Һәм йөрөйҙәр бит, йәмәғәт! Улай ғына ла түгел, саҡырыу билетын эҙләп йөрөүселәр табыла. Файҙалы танышлыҡҡа мохтажлыҡ йүгертә ундайҙарҙы.

Әлбиттә, ҡот осҡос талант эйәһенең шулай уҡ ҡот осҡос талантлы яҙылған картиналары хаҡындағы фекерҙәрең менән кемдеңдер ҡыҙыҡһыныуына ла әҙер булырға кәрәк. Был һыҙмалар иҫ киткес алама йә иһә күрәләтә мәғәнәһеҙлек булмаған осраҡта һоҡланыу белдерергә мөмкин. Бер аҙ маҡтағанда ла һис тә уҡаң ҡойолмаҫ. Әйҙә, хужа ҡыуанһын! Бушлай фуршет ашап, бер-ике йылы һүҙенде йәлләү – ул инде егетлек түгел, йәмәғәт!

Әгәр ҙә картиналар йә иһә скульптуралар күрәләтә мәғәнәһеҙлек икән, ул сағында ни эшләргә?

Иң мөһиме – уларға ҡарап, эйәгеңде уң ҡулыңа терәп, бер аҙ пауза тотоу. Был ваҡыт тәрән уйланыу позаһында бер аҙ тороу тәҡдим ителә. Унан йөҙөңә мотлаҡ рәүештә аҡыллы ҡиәфәт сығарып, был картиналарҙа тәрән фәлсәфәүи йөкмәтке булыуын белдерергә тейешһең. Шуның менән һинең өҫтөңдән йөк төштө тиергә лә мөмкин. Артабан инде файҙалы танышлыҡтар исемлеген арттырыу өҫтөндә ең һыҙғанып эшләй алаһың.

Европала уҡыған сағында Париждағы Лувр картиналар галереяһында ике-өс тапҡыр булған Инесса күктән был гонаһлы ергә шул рәүешле бик тиҙ төшөргә мәжбүр булды.

Был күргәҙмәнең саҡырыу билеты ла үткәндәге шикелле ике кешегә тәғәйенләнгәйне. Мәгәр Инессаның исеменә атап ебәрелгән. Рәссамдың исем-аты бер нәмә әйтмәһә лә, унаң артында тороусыһы бик тә таныш. Тимәк, саҡырыуҙы инҡар итергә ярамай. Кем белә донъяның нисек әйләнеп

китерен? Бәлки, бер заман үҙенә лә ошондайыраҡ саҡырыу яҙырға тура килер. Донъя – ҡуласа.

Бик тә Байрас менән барғыһы килә ине ҡыҙҙың. Матур киске күлдәктә егет менән зал буйлап үтеүен күҙ алдына килтереп, хатта күҙҙәрен йомоп хыялланып та ултырҙы. Мәгәр бер аҙҙан был уйынан кире ҡайтты.

Күҙҙәрҙә балҡыған бәхет-ҡыуанысты бик тырышһалар ҙа йәшерә алмаясаҡтар.

Сөнки иртәгә үк бөтә эш даирәләрендә улар араһындағы мөнәсәбәт билдәле буласаҡ. Һары прессаға ла эләкһә? Улар үҙҙәренән өҫтәп яҙырға ла күп һорамаҫ. Һәм бөтә был ығы-зығы үҙ артынан проблемалар ҙа эйәртеп килтерәсәк.

Тимәк, бер юл ҡала – башҡа ир-егет. Ләкин кем?

Бер аҙҙан Инессаның ҡарашы алдында ятҡан исемлектәге Сафиндың фамилияһы эргәһендә туҡтаны.

Ошо ҡарт төлкө менән барырға кәрәк! Үҫә башлаған ҡорһағы ҡасандыр унда булған элегантлыҡты, әлбиттә, бульдозер шикелле төрткөләп сығарып бөтөп бара. Ләкин ни эшләйһең, йәш әҙәм балаһының рөхсәтен һорап тормай.

Бер ыңғайҙан хөрмәтле вице-президенттың тел төбөн ҡапшап ҡарау ҙа урынлы булыр. Юғиһә, улар күбеһенсә эш буйынса ғына аралаша. Формаль булмаған шарттарҙа кеше көтөлмәгән яғы менән асыла. Яйы сыҡҡан һайын Данил Исмәғилович шахмат уйынын иҫенә төшөрә бит. Үҙе ниндәй шахмат партияһы уйнай башлаған икән, ҡарап ҡарайыҡ.

Ләкин Сафин, итәғәтле йылмайып, эше күплеккә һылтанды. Һәм икенсе минутта уҡ Инессаға оҙатып барыусыны табып та бирҙе.

– Минең урынға Эрик Таипов барһын. Бик төплө егет. Перспективалы. Сәнғәт менән дә ҡыҙыҡһына. Эшлекле даирәләргә уны күберәк ылыҡтырырға кәрәк. Йылғырлығы бар. Компанияға файҙа килтермәй ҡалмаҫ.

Сағыштырмаса яңыраҡ юғары звено менеджерҙары араһында күренә башлаған был егет Инессаның күңеленә ятып бөтмәй ине. Әллә нисек, бигерәк шылғаяҡ кеүек күренде уға Эрик. Ләкин Сафиндың уны күккә күтәреп маҡтауы ҡыҙҙы һағайтты. “Кем икән һиңә был Эрик? – тип эстән генә уйлап алды ул. – Асыҡларға кәрәк. Һинең иҫәп-хисабыңда уға ниндәй роль бирелгән?” Мәгәр ул илгәҙәк йылмайып, уйлағанының тап киреһен әйтте:

– Әлбиттә, Данил Исмәғилович! Булдыҡлы егеттәр ҙурыраҡ эштәр араһында ҡайнарға тейеш!

Тәғәйенләнгән ваҡытҡа Эрик үҙенең спорт машинаһын эре генә ҡиәфәттә ишек алдына килтереп туҡтатҡан булды. Инесса офис ишегендә күренеү менән үк, бөгөлә-һығыла уға уң яҡтағы ишекте асып, инеп ултырырға ярҙам итергә ашыҡты. Уның ҡыланышындағы яһалмалылыҡты күреп кәйефе бер аҙ ҡырыла бирһә лә, ҡыҙ итәғәтле йылмайып, рәхмәт әйтеү менән сикләнде.

Ләкин кәмит машина ҡуҙғалып китеү менән үк башланды. Эрик күргәҙмәгә бик ентекле әҙерләнгәнгә оҡшағайны. Имтихан бирергә йыйына, тиерһең. Һүҙ сәнғәтте юҡҡа сығарған авангардизмдың тетмәкәйен тетеүҙән башланды. Киң танылған бер нисә рәссамдың фамилиялары бик тырышып һанап кителде. Мәктәп программаһынан билдәле картиналар телгә алынды. Инесса баш ҡаға-ҡаға тыңланы.

Әллә арыны, әллә ялҡты, Эрик бер мәлгә тынып ҡалды.

“Википедиянан башҡалары хаҡында уҡырға өлгөрмәнеңме ни?” – тип һорауҙан үҙен көскә тыйып, Инесса уның сәнғәт өлкәһендә бик ҡыҙыҡһыныусан икәнлеген билдәләгән булды.

Әллә иронияны аңламаны, әллә ысынлап ышанды – Эрик дәртләнеп үк китте.

– Инесса Ғайратовна, һеҙ сәнғәтте бик яратаһығыҙ бит, – тип һалдырҙы.

“Тимәк, мәғлүмәт инде тупланған. Тик бына ниндәй маҡсатта?”

– Ә һин үҙең күргәҙмәләргә йыш йөрөйһөңмө?

– Юҡ та... Ә, эйе, – тип төҙәтергә ашыҡты Эрик. – Тырышам инде... Ваҡыт булмаһа ла.

– Ә картиналары бөгөнгө күргәҙмәлә күрһәтеләсәк рәссам хаҡында ниҙәр беләһең?

– Буласаҡ йондоҙ! – тип рухланып дауам итте Эрик. – Йә иһә яһаласаҡ йондоҙ... Айырма аҙ... Аҡсаң ғына булһын... Хәҙер ни... ундай әкәм-төкәм артынан килем дә эйәреп йөрөмәһә... йә иһә файҙа... Уларҙың хаҡы тишекле бер тин. – Эрик артығыраҡты ысҡындырып ташлағанын һуңлабыраҡ аңланы, ләкин әйткән һүҙҙе ҡабаттан ауыҙға төртөп керетеп булмай бит инде.

Икеһе лә шымып ҡалды. Ярай ҙа күргәҙмә үткәреләһе ергә килеп еткәйнеләр. Инесса Эриктың килеп машина ишеген асҡанын көтөп торманы, сыҡты ла бинаға табан йүнәлде. Был кәмит уның һарыуын ҡайната башлағайны инде. Шулҡа ниндәй генә батша кейеме ҡаплама, уның тәбиғәте шул килеш ҡаласаҡ. Ләкин әлеге мәлдә уларҙың икеһе өсөн дә тәғәйен ролдәр билдәләнгән, һәм улар уны аҙаҡҡаса уйнаясаҡ.

Эрик ишекте асып Инессаны алдан үткәрҙе. Улар ҡултыҡлашып киң баҫҡыстар буйлап өҫкә күтәрелде.

Еңелсә музыка уйнай. Ҡаршы алыусылар йылмайып, килеүселәрҙе тәбрикләй. Инесса менән Эрик та, йөҙҙәренә йылмайыу элэктереп, таныштарын сәләмләй. Ҡайһыларыныңдыр эргәһендә туҡталып, бер нисә һүҙ менән алышалар, бәғзеләре менән баш ҡағып ҡына иҫәнләшәләр.

“Бер-ике сәғәт түҙергә лә, китергә мөмкин”, – тип самалап алды Инесса.

Эриктың кем менәндер әңгәмәгә ҡатышып киткән мәлен файҙаланып, ҡыҙ ситкәрәк китте. Егеттең компанияһы уны ярайһы ләткәйне.

Күҙҙәре стенаға эленгән рәсемдәр буйлап шыуып үтә, ә мейеһе иһә көсөргәнеп уларҙағы мәғәнәне аңларға тырыша. Рәссамдың ҡоторонҡо фантазияһы тип аңларғамы быны, әллә форма артынан ҡыуыумы? Һәм, ғөмүмән, хәҙерге сәнғәт ҡайҙа табан бара?

Инесса Лувр картиналар галереяһында бер һүрәт ҡаршыһында оҙон-оҙаҡ баҫып торған мәлен иҫләне. Экскурсоводтың әйтеүенә ҡарағанда, был әҫәрҙең баһаһы бер нисә миллион евроға баһалана. Ундай ҙур суммалар хаҡында ишеткәндә, ирекһеҙҙән, был әҙәмдәр әллә аҡсаларын ҡайҙа ҡуйырға белә алмай яфаланалармы икән, тигән уй тыуа.

Ә сәбәп, бәлки, бөтөнләй башҡа юҫыҡтарҙа яталыр?

Иконаларҙы яҙыр алдынан да бит оҫталар оҙаҡ ваҡыт ураҙа тотҡан. Улар йәндәрен шул рәүешле ғәҙәти донъяның ығы-зығыһынан ҡотолдорорға тырышҡан. Һөҙөмтәлә ул оҫталарҙың тойомлау һәләттәре шул тиклем нескәргән, һәм яҙыласаҡ киндергә юғары даирәләрҙең моңо үрелгән.

Ябай киндер өсөн генә бер кем дә ундай хаҡ түләмәйәсәк.

Луврҙа Инессаны сихырлағандай үҙенә ылыҡтырып тотҡан был картина “Асманға ашыу” тип атала ине. Был граф Поль де Бернарҙың берҙән-бер картинаһы. Унда фәрештә затына тартымыраҡ йәш кенә ҡыҙ һүрәтләнгән. Уның реаль кеше икәнлегенә һис ниндәй шик ҡалмай. Мәгәр был һын рәссамды ниндәйҙер юғары даирә менән бәйләй. Иң ғәжәбе – быныһы ла шик тыуҙырмай. Граф уны рәсемендә нисек бирә алғандыр – әлеге көндә лә күптәр өсөн был сер булып ҡала килә.

Әле иһә Инесса ҡаршыһындағы рәсемгә текәлгән дә уйға ҡалған. Нимә аңлата икән был кеше һынындағы пропорциональ булмаған ҡул-аяҡтар? Йәнә лә бына-бына шартларға торған күҙ бәбәктәре? Күктәрҙән төшкән Йыһан энергетикаһы был рәсемдәрҙең ҡайһы мөйөшөнә эләгеп ҡалырға мөмкин?

– Фәлсәфәүи тәрәнлек бар был һүрәттә, – тип өндәште уның эргәһенә килеп баҫҡан кемдер.

Инесса тауыш килгән яҡҡа әйләнде һәм үтә таныш тойолған кешегә текләп бер нисә секундҡа ғына тын ҡалды. Танығас иһә, кинәт йөҙө балҡыны. Әгәр ҙә башкөллө шартлылыҡҡа ҡоролған спектакль эсендә йөрөп ятмаһа, бала саҡтағы шикелле ҡулдарын сәпәкәйләп һикергеләүҙән дә һис кенә лә тартынмаҫ ине.

Ҡаршыһында уның балалыҡ дуҫы Иршат баҫып тора ине.

– Иршат! Һин нисек бында?

– Эш буйынса. Ә һин үҙең?

– Шул инде. Әлеге шул эш.

Инесса йәнләнгәйне. Кинәт кенә әллә ҡайҙа, алыҫ-алыҫ йылдар ашаһында ҡалған бала саҡтың һулышы килеп ҡағылғандай итте. Унда бит барыһы ла, хатта бөтә донъя эскерһеҙ тойола. Бар нәмәнең тик һәйбәт тамамланасағына ышаныс йәшәй. Хыялдар мотлаҡ тормошҡа ашасаҡ. Изгелек мотлаҡ еңәсәк. Яуызлыҡ, һис шикһеҙ, үҙ язаһын аласаҡ. Башҡаса мөмкин түгел!

Әллә күпме йылдар үткәндән һуң балалыҡ дуҫын осратыу күңелдең иң-иң төпкөл ҡатламдарында баҫылып ҡалған яҡты тойғоларҙы һиҫкәндереп уятып ебәрҙе.

Ләкин улар хәҙер өлкәндәр ине шул.

Сәпәкәйләп һикергеләүҙән генә үҫмерлек дәүеренә лә әйләнеп ҡайта алмаҫтар.

Мәгәр икеһенең дә күҙҙәрендә сағылған дуҫлыҡ йылылығы барыбер ҙә донъяның матур мәлдәре етерлек булыуын дәлилләй ине.

Инесса менән Иршат, тирә-яҡтарында ни ҡылынғанын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышып, күргәҙмә залы буйлап атланы. Ара-тирә картиналар, скульптура һындары эргәһендә туҡтайҙар, уларға ҡағылышлы фекерҙәре менән уртаҡлашалар. Ләкин былар эргә-тирәләрендәге мөхиттән артыҡ айырылып, тейешһеҙгә иғтибарҙы йәлеп итмәү өсөн генә эшләнә. Асылда иһә әңгәмә юҫығы бөтөнләй икенсе йүнәлештә бара.

– Мин хәҙер автосалон тотам. – Иршат ҡаршыһына килгән кемделер сәләмләне. Ул кешене танымаһа ла, Инесса ла йылмайып баш ҡаҡты. – Армиянан ҡайтҡас, башҡа йүнәлештә лә эш башлап ҡарағайныҡ, табыш булманы. Үҙең аңлайһың, килем сығымды ҡапламаһа, тулҡын өҫтөндә оҙаҡ ҡалып булмай. Ике-өс тапҡыр аҙапланғандан һуң бер аҙ яйға китте. Авто-

салонды асҡанға ике йыл тулды. Бер аҙ көйгә һалып, үҙебеҙҙең клиенттар базаһын рәтләгәс кенә килем килтерә башланы. Шунан һуң күҙ асылып ҡалды. Юғиһә, тәүҙәрәк башты күтәреп тирә-яҡҡа ҡарарға ла ваҡыт ҡалмай ине. Интернет аша эш итергә өйрәндек.

– Ошондай сараларға йыш йөрөйһөңмө?

Иршат зал яғына ымланы.

– Бындағы халыҡтың күбеһе беҙҙең клиенттар. Улар менән ыңғай мөнәсәбәт тоторға тырышабыҙ.

Һүҙ бер аҙҙан Инессаның хәл-әхүәлдәренә, ул етәкләгән компанияның яңылыҡтарына, тора-бара бала саҡ хәтирәләренә күсте. Залдың икенсе башында картиналар ҡараштырған булып йөрөгән Эриктың ризаһыҙ ҡиәфәтен күреп ҡалған Инесса уның менән мөнәсәбәттәрҙе артабан да ҡатмарлаштырмаҫҡа булды. Был егеттең әлеге мәлдә пешка ролен үтәүенә өҫтән-мөҫтән ҡарау ярамай. Позицияһы уңайлы булһа, ундай фигуралар ҡөҙрәтле фигураларҙы ла сатраш таҡтаһынан шылдыра ала. Атаһы ҡабаттан көс-ҡеүәт йыйған мәлгә саҡлы бит компанияны һаҡлап ҡалырға кәрәк.

Инесса һәм Иршат визиткалары менән алышты һәм, артабан да бәйләнеш тоторға килешеп, йылы хушлашты. Ҡыҙ кәзәһе төкөй башлаған Эрик яғына йүнәлде һәм йылмайып килеп уны ҡултыҡлап алды.

– Йә, Эрик, күргәҙмә хаҡында фекерең нисек?

Инессаның илгәҙәк өндәшеүенән албырғап ҡалған егет ыҡ-мыҡ итте.

– Ә... былай... арыу ғына. Ҡарарлыҡ, – тигән булды ул, күрәһең, бүтән урынлы һүҙ таба алмай.

Юл ыңғайы башҡа рәсемдәрҙе лә ҡараштыра-ҡараштыра улар сығыу яғына йүнәлде. Һәр кем үҙенә тәғәйен ролде башҡарҙы, ә хәҙер инде ҡайтырға ла мөмкин ине.

## 16

Эриктың спорт машинаһы тигеҙ юлдан талғын елдереп ҡала ситендәге ҡасабаға килеп инде. Ике-өс ҡатлы коттедждар теҙелгән киң урам буйлап бара биргәс, күркәм итеп һалынған ике ҡатлы йорт эргәһенә килеп туҡтанылар.

– Йә, инде килеп еттек. – Инесса артҡы ултырғыстан үрелеп сумкаһын алды. – Компаньон булғаның өсөн рәхмәт!

– Инесса Ғайратовна, ә, бәлки, кофе менән һыйларһығыҙ? – тигән булды егет. – Һәр саҡ һеҙҙең менән был рәүешле кис үткәреү эләгеп тормай әле.

– Икенсе ваҡытҡа ҡалдырайыҡ, йәме, Эрик?

– Кафеға ла инергә теләмәнегеҙ.

– Һау бул, Эрик! – Инесса машинанан сыҡты ла еңелсә ҡул болғаны, унан туп-тура бейек ҡапҡаға табан йүнәлде. Ул был егеттең еләткес компанияһынан ҡотолоуына бик шат ине.

Ләкин үҙ сиратында Эрик та еңел һулап ҡуйҙы.

“Мөхәббәт химияһының бында молекулаһы түгел, атомы ла юҡ. Менделеев бабай үҙенең таблицаһы менән мәрткә киткәнгә оҡшаған”, – тип үҙ алдына һөйләнде ул. Тапҡыр һүҙе уның үҙенә лә оҡшап ҡалды, көлөмһөрәп ҡуйҙы, унан күңелле көйҙө һыҙғыра-һыҙғыра ҡырҡа вираж яһап, машинаһын килгән йүнәлешкә ҡабат бороп ҡуйҙы. Исмаһам, берәй тамашасы быны

күрҙеме икән, тигән шикелле, боролоп тирә-яғына күҙ һалды. Хәҙерге ҡала тибындағы замана ауылдарының етешһеҙлеге лә шунда – мал-тыуар тотмайҙар, тимәк, урамда кешенең әллә ни мәшәҡәте лә юҡ. Һыу – кранда, йылылыҡ – батареяла, хатта бәҙрәфтәре лә йорт эсендә. Шуға һәммәһе лә йә囙 эштә, йә йорт тауығы шикелле өйөндә. Тимәк, урамда йөрөүсеһе лә һирәк. Хатта юҡ дәрәжәһендә. Машиналарын да гараждың автоматик рәүештә асылған ишегенән елдереп алып сығып китеүҙәренә ҡарағанда, ул йорттарҙа кеше түгел, техника йәшәй тип уйларға мөмкин.

Шул рәүешле Эриктың, уның уйынса, спорт машинаһында юғары пилотаж күрһәтеүен тейешле баһалаусы табылманы.

Егет иһә буш урамға ҡарап бер нисә секундҡа ғына тын ҡалды ла, кинәт иҫенә төшкәндәй, телефон төймәләренә баҫҡыланы. Гүйә, уның шылтыратыуын күҙ ҙә ҡаш көткәндәр – телефонда шатлыҡлы тауыш ишетелде.

– Эрик! Мин һинең шылтыратыуыңды шул тиклем көттөм!

– Әлиә, матурым, һине нисек һағынғанымды белһәң икән! – тип һайраны Эрик.

– Һағынһаң, әллә ҡасан килер инең инде. Ә һин юғалдың да ҡуйҙың, – тигән үпкә ҡатыш наҙлы тауыш ишетелде трубканан. – Колледжда ла дәрестәр ваҡытында һине уйлап тик ултырам.

– “Икеле”ләр тейәмә тағы, һин бит минең буласаҡ кәләш, – тигән булды Эрик. Үҙе шул арала теге баштағы ҡыҙыҡайҙың был мәлдәге йөҙөн күҙ алдына килтереп көлөмһөрәп ҡуйҙы.

Әйткәне әллә ысынлап та көтөлмәгән тәьҫир яһаны – Әлиә бер мәлгә генә хатта телһеҙ ҡалғандай тойолдо.

– Эрик… һин… ысынлап әйтәһеңме? – тип ышаныр-ышанмаҫ тауыш менән һораны ҡыҙ, егет әйткән һүҙҙәрҙең шаяртыу булып ҡуйыуынан ҡурҡҡан шикелле.

– Ысынлап, бәгерем, ундай һүҙҙәр менән шаярмайҙар.

– Һуң, ундай тәҡдимде телефон аша әйтмәйҙәр ҙә инде.

– Хәҙер заманы шулай – бөтә нәмә йә телефон, йә Интернет аша хәл ителә. Йә, кәләш, көт, хәҙер барып етәм!

– Ярай, йәнем!

Эрик трасса буйлап ҡалаға табан елдерҙе. Ул, ҡыҙыу юл хәрәкәтенең көтөлмәгән сюрприздарына әҙер булырға тырышып, эленән-эле юлды байҡай, көҙгөләргә күҙ һала. Уның бөгөнгө планын бер нәмә лә боҙорға тейеш түгел. Бигерәк тә юлдағы көтөлмәгән хәл. Шуға ла күҙҙәре максималь көсөргәнеш менән трассаны байҡай. Ваҡытты инде лә юғалта алмай Эрик. Былай ҙа ике-өс аҙна бушҡа үтте. Инесса менән Байрас араһында ниҙер барлығын хәйләкәр төлкө Данил ағаһы ғына түгел, хәҙер үҙе лә күрә. Кәңәшмәлә ултырған булалар, үҙ-ара йылмайышалар, тағы ла шундайыраҡ сөсө-мөсө. Әлеге хәйерсе ҡармаҡсы был алтын балыҡты ҡаптырғанға бик тә оҡшағайны.

Эрик шуны тыныс ҡына күҙәтеп ултырһынмы?

Юҡ инде! Бына быныһы инде булмаҫ!

Егет күҙ ҡырыйы менән генә машина панелендәге сәғәткә ҡарап алды. Саҡ һигеҙ тулып килә, тимәк, әле ваҡыт бар.

Бөгөнгө көн барыһын да хәл итәсәк!

Әлиә уны ике урам киҫешкән урында көтөргә тейеш. Ул тәңгәлгә саҡлы

байтаҡ юл бар, ләкин ҡыҙ хәҙер үк йүгереп сығып шунда торһа ла, Эрик һис тә ғәжәпләнмәҫ ине. Ҡатын-ҡыҙ заты ҡолағы менән ярата, тиҙәр бит. Эрик был йөмләнең аҫтына бер түгел, ике мисәт һуға ала. Тәмле-татлы һүҙҙәр ҡарар күҙгә аҡыллы ғына тойолған ҡатын-ҡыҙҙың да зиһенен тиҙ томалай. Әлиә иһә был йәһәттән бигерәк тә сибек звеноға ҡарай. Хәйер, уның йәшендәге кисә генә тигәндәй мәктәп тамамлаған бала-сағанан тағы ни көтәһең?!

Һиҙенеүе Эрикты алдаманы – Әлиә юл сатында уны көтә ине инде.

Егет машинаһын туҡтатырға ла өлгөрмәне, ҡыуанысынан ҡояш кеүек балҡыған ҡыҙыҡай алғы ултырғысҡа инеп тә ултырҙы.

– Һаумы, йәнем? – тигән булды ул, телевизорҙағы сериалдарҙа күргән мөхәббәт күренештәренә оҡшатырға тырышып. Хатта тап шуларҙағы шикелле итеп, үрелеп Эриктың яңағынан да үбеп алды. Иренենә үрелергә ниңәлер батырсылығы етмәне. Мәгәр уйынан ғына: “Их, машинаға ултырғанымды, исмаһам, бер әхирәтем дә күрмәне бит, – тигән үкенес кенә йылпылдап уҙҙы. – Ә Эриктың үҙен күрһәләр, бөтөнләй шартларҙар ине! Беҙҙең төркөмдәге бер ҡыҙҙың да шундай шәп машиналы матур егете юҡ!”

– Һаумы, бәғерем! – Эрик иғтибар менән ҡыҙҙы баштан-аяҡ күҙҙән үткәрҙе. – Һин бөгөн бигерәк һылыу! Баҡса еләге шикелле.

Әлиә ҡыҙарынып керпектәрен түбән ҡаҙаны.

– Һин бигерәк инде, Эрик…

Ҡыҙҙың бала-сағаларса уңайһыҙланыуынан Эриктың күңеленә шик ғәләмәте үрмәләне.

“Ә, бәлки, кәрәкмәҫтер? Бигерәк йәш бит әле… Уйындан уймаҡ сығып ҡуйһа?”

Ләкин ул был икеле-микеле уйҙарын йәһәт кенә ситкә ҡыуҙы.

Юғары әхлаҡ нормаларын тотам тигән булып, фәрештәләй ҡыланған әҙәм заттарына муллыҡты ла, бәхетте лә өйөп биргәндәрен әлегәсә ниңәлер күргәне булманы. Тимәк, донъяһы шулай ҡоролған. “Бар яуапты минән түгел, ә донъяһын шул рәүешле итеп яһаған заттан һорағыҙ!” – тип ҡуйҙы ул үҙ алдына. Һәм ниндәйҙер бер мәлдә күңеленең төбөндә хатта үсәүгә оҡшаш хис уяна биреүен дә тойомланы.

Миҫал эҙләп йыраҡ йөрөргә түгел. Ана, ул үҙе үҫкән ғаиләгә күҙ һалыу ҙа етә.

Атаһы ла, әсәһе лә актерҙар ине уның. Хәйер, “ине” түгел, әле лә йөрөйҙәр ана шул сәхнәләрендә. Унда, әкиәткә ышанған йүләр тамашасы алдында, матур мөхәббәт тарихтары уйнайҙар, ниндәйҙер әхлаҡ ҡанундарын алға һөргән булалар. Ә үҙҙәре… Һәр тин өсөн ҡалтыранып йәшәгәндәрен дә иҫкә төшөрһәң…

Залдағы тамашасыға күренмәгән сәхнәнең теге яғындағы күңел ҡайтарғыс әкәмәттәрҙе иһә һөйләйһе лә түгел…

Һирәк-һаяҡ килгеләгән Данил ағаһының атаһы менән әсәһенә ни өсөн һауалы-мыҫҡыллыраҡ ҡарауының сәбәбен Эрик тәүҙә аңламай торғайны.

Һуңғараҡ ҡына төшөндө.

Аҡса тип күҙе тонған был донъяға саҡ ҡына булһа ла йоғонтоң булмаған башың менән юғары идеалдар хаҡында һөйләп йөрөүең көлкө икән ул.Бик теләһәң, бәлки, мөмкиндер ҙә, ләкин бит береһе лә ысынға алмаясаҡ.

Шул рәүешле атаһы менән әсәһе уның алдында абруйҙарын юғалтты ла ҡуйҙы.

“Изге урын буш булмай” тигәндәй, был урынды Данил ағаһы биләне.

Ә ағаһы йәшәй белә!

Мәгәр Данил ағаһы әйләнгән түңәрәктәрҙә еңелеүселәр сәхнәлә ҡала алмай.

Уларҙы ҡорбанға килтерәләр.

Әле лә бына уның эргәһендә Эрик алдында еңелгәнен таныған бер зат килә.

Тик ҡорбанға килтереләсәген генә белмәй.

Әлегә…

– Ой, Эрик, мин һине шул тиклем һағындым! Һин шылтыратҡас, нисек ҡыуанғанымды күрһәң! Эйе, ысынлап әйтәм, хатта иҙән уртаһында өйөрөлөп бейеп алдым, – тип ихлас тәтелдәне туҡтауһыҙ йылмайған Әлиә.

– Бына бит шылтыраттым, – тигән булды Эрик, үҙе күҙ ҡырыйы менән генә ҡыҙға ҡарап алды. Тейешле градусҡа етеп килә кеүек. Ҡыҙ заттарының башын әйләндереү практикаһынан сығып ҡарағанда, артабан аҙапланып тормағанда ла була. – Эш бик күп, йән киҫәгем! Икебеҙ өсөн дә тырышам бит. Һинең һымаҡ аҫыл затты ҡыйбатлы кейемдәрҙә генә йөрөтөргә тейешмен бит. Ә быуның өсөн күп эшләргә кәрәк.

– Беләм дә… – Матур һүҙҙәрҙән һәм хәстәрлекле тауыштан Әлиә бөтөнләй ирееп төштө. Ул үҙен ялтыр журнал тыштарындағы көйәҙ ханымдар шикелле кейенгән итеп күҙ алдына килтерҙе һәм ул матур киләсәктең ҡул һуҙымы ғына аралыҡта тороуына йәнә бер һөйөндө. – Кисә лә осраша алманыҡ…

– Ә бөгөн беҙ шуның ҡонон ҡайтарасаҡбыҙ! – тип киң йылмайҙы Эрик. – Беләһеңме, бәгерем, ни эшләйәсәкбеҙ?

– Әйт һуң…

– Бөгөн мин һине атай-әсәйем менән таныштырасаҡмын!

Әлиә гөлтләп тоҡанды.

– Бөгөн? Шулай тиҙ? Һуң, Эрик, минең бит юбкам да бик ябай, – тип борсола төштө ҡыҙ. – Ә уларға оҡшамаһам?

– Һинең һымаҡ аҫыл зат та оҡшамаһа инде?! Улар аҡылһыҙмы ни шундай килендән баш тартырға?

– Ой, Эрик, ысынлап әйтәһеңме? – Ҡаушауынан ни эшләргә лә белмәгән Әлиә бер өҫ-башына ҡараған булды, бер өҫтәге кескәй көҙгөгә үрелде.

Ҡыҙҙың юғалып ҡалыуын күргән Эрик уны тынысландырырға ашыҡты:

– Борсолма, былай ҙа бик күркәмһең. Һиңә ябай халат ҡаплаһаң да, батша ҡыҙҙарынан кәм булмаясаҡһың.

– Йә, ярай улайһа, – тип бер аҙ тыныслана төштө ҡыҙ. Тулҡынланыуын баҫырға тырышып, сәстәрен һыйпаштырҙы. – Йә, прическам нисек, ярарлыҡмы?

– Бик тә шәп! Барыһы ла бына тигән!

Машина күп ҡатлы йорт эргәһенә килеп туҡтаны. Эрик артҡы йөрөш менән уны ышығыраҡ урынға индереп ҡуйғас, ҡаушауы һәр хәрәкәтенән ташып-түгелеп торған ҡыҙға подъезд ишегенә ымланы.

– Ошо подъезға… Бишенсе ҡатта йәшәйбеҙ… Тик бөгөн лифт эшләмәй. – Ул үҙенсә, был бейек үксәләр менән шул сама баҫҡысты нисек үтер икән был ҡыҙ, тип самалай ине шикелле. Ләкин Әлиә аяғына кейгән туфлиҙары хаҡында, гүйә, оноткайны. Ҡыҙҙың башында бер генә уй – нисек тә Эриктың

ата-әсәһенә оҡшарға! Артабан инде бәхет ҡапҡалары уның алдында шар асыласаҡ.

Бөткөһөҙ тойолған баҫҡыстар буйлап өҫкө ҡатҡа күтәрелделәр. Менеп етеү менән Эрик ишек ҡыңғырауына баҫҡан булды. Бер аҙ ваҡыт көтөп торҙолар. Әлиә баҫҡыстар буйлап өҫкә күтәрелгәндә ауырайған тын алышын ипкә килтерергә тырыша. Буласаҡ ҡайны-ҡәйнә алдында аһылдап баҫып тороу килешмәй ҙә баһа!

Ләкин ишекте асыусы булманы.

– Әсәйем был ваҡытта өйҙә була торғайны, – тип аҡланғандай һөйләнде Эрик. – Хәйер, төпкө бүлмәлә булһа, моғайын, ишетмәйҙер. – Ул боролоп бит остары алланып киткән Әлиәгә күҙ ҡыҫты. – Хәҙер беҙ уға сюрприз яһайбыҙ! – Ул кеҫәһенән асҡысын алып ишекте асты һәм ҡыҙға инергә ымланы. – Йә, ин, тартынма! Хәҙер әсәйҙе саҡырам! – Эрик төпкө бүлмәгә йүнәлде. – Әсәй!

Бер аҙҙан егет бер аҙ борсоулы ҡиәфәттә ҡабаттан күренде.

– Әсәй, күрәһең, магазинға сыҡҡандыр. Атай ҙа оҙаҡламай ҡайта. – Ул ҡыйынһынған кеүек торған Әлиәне ары үтергә саҡырҙы. – Йә, ҡайтырҙар, борсолма. Бәлки, шулай булыуы яҡшыраҡтыр ҙа әле. Бер аҙ өйрәнә торорһоң. Күрәһеңме, барыһы ла беҙҙең өсөн ыңғай килеп тора?! – Эрик ҡыҙҙы яурынынан ҡосаҡлап үҙе менән зал яғына әйҙәне. – Үҙеңде иркен тот, өйөңдәге кеүек бул, йән киҫәгем. Ә хәҙер атай-әсәй ҡайтҡанға саҡлы һинең ошо йортҡа тәү тапҡыр аяҡ баҫыуыңды тантаналы рәүештә билдәләйәсәкбеҙ. Саҡ ҡына көт, яраймы? Сюрприз!

– Мин сюрприз яратам, – тип яуапланы Әлиә. Ул бер аҙ тынысланаа төшкәйне.

– Улайһа, түҙемле генә көт. Мин хәҙер!

Эрик аш бүлмәһенә сыҡты, өҫтәге шкафтан үрелеп ике фужер алды. Һыуыткысты асып, унан асылған мускат шарабы шешәһен тартып сығарҙы ла яртылаш ҡына итеп фужерҙарға ҡойҙо. Ләкин уларға һалынған иҫерткес төрлөрәк кимәлдә ине.

– Йә бутап ҡуйырмын, унан – ҡых! – операцияға – крышка! – тип һөйләнде ул үҙ алдына. Һаҡ ҡына барып зал яғына күҙ һалды.

Әлиә журнал өҫтөндә ятҡан фотоальбомды ҡараштыра. Йүләркәй, тап уның өсөн әҙерләп ҡуйылғанын аңламағандыр ҙа әле. Әйҙә ултырһын, йәнәһе лә, буласаҡ ҡайныһы менән ҡәйнәһенең сәхнәлә балҡыған мәлдәренә һоҡланып.

Атаһы менән әсәһе фотоальбомда килеш тә үҙҙәренә тамашасы таба беләә!

Ни тиһәң дә, донъя йүләрҙәргә ҡытлыҡ кисермәй!

Ә Эрик, ул ялтырауыҡтарҙың ысын хаҡын үҙ ваҡытында аңларға өлгөргән замана кешеһе, башҡа юлдан китәсәк.

Еңеү өсөн бар ысулдар ҙа ҡулайлы!

Егет бына ике-өс көн инде түш кеҫәһендә йөрөткән бәләкәй флакондағы йоҡо порошогын фужерҙарҙың береһенә ҡойҙо, ҡалаҡ алып уны бутаны ла уларҙы тотоп зал яғына йүнәлде.

– Йәнем-бәғерем, һинең ошо йортҡа тәүге тапҡыр аяҡ баҫыу минуттарың ғүмерлеккә хәтеребеҙҙә ҡаласаҡ. Мәңге бергә булыу өсөн! Беҙҙең бәхет өсөн эсәйек! Төбөнә төшкәнсе!

Бер-береһенән күҙҙәрен алмай фужерҙарҙағы шарапты һуңғы тамсыһынаса эстеләр. Ул арала Эрик талғын музыка ҡуйып ебәрҙе. Егеттең ҡосағында үҙен бәхеттең ете ҡатындағылай тойған Әлиә музыка ыңғайына әйләнде лә әйләнде. Бер аҙҙан аяҡ-ҡулдары тыңламай башлаһа ла, был татлы төшөнән һис кенә лә сыҡҡыһы килмәне. Эрик иһә уның ҡосағында йоҡлай башлаған ҡыҙҙы бер аҙҙан ике ҡулына күтәреп алды ла үҙенең бүлмәһендәге карауатҡа алып барып һалды. Уның, ысынлап та, йоҡлап киткәнен тағы бер тапҡыр тикшергәс, телефонын алып уны видеокамера режимына көйләп ҡуйҙы ла сисенә башланы.

## 17

1943 йыл. Май. Смоленск өлкәһе.

– Немецтар! Немецтар килә!

Ун-ун ике йәштәр самаһындағы өс-дүрт малай кемуҙарҙан ауыл яғына елдерҙе. Оҙаҡ ваҡыт һәр ишетелгән тауышҡа тертләп, һағайып йәшәгән ауылдағы һәммәһе тигәндәй бер юлы хәрәкәткә килде. Шартлап тәҙрә ҡапҡастары ябылды. Ҡатын-ҡыҙ ҡош-ҡортон кетәгенә ҡыуып индерергә аҙапланып сыр-сыу килде. Еткән ҡыҙҙары булғандар үҙ ғәзиздәрен ҡабаланып иҙән баҙына төшөрә һалды.

Бер аҙҙан тирә-йүндә һиллек урынлашты. Ташландыҡ ауылмы ни! Ара-тирә тәҙрә ҡорғандарының бер аҙ һелкенеп ҡуйыуынан ғына уларҙың артында кемдәрҙеңдер һағайып күҙәткәнен шәйләргә була.

Моторҙар гөрөлдәүе яҡында ғына ишетелә ине инде. Бер аҙҙан ауыл осонда мотоколонна үҙе лә күренде.

Колонна ҙур ғына. Уртараҡ тәңгәлдә брезент менән көпләүле ике машина ла бар. Улар туҡтау менән үк, япма аҫтынан ике тиҫтә самаһы һалдат ергә һибелде. Тирә-яҡ ят телдә һөйләшкән тауыштар, өҙөп-өҙөп биргән бойороҡ, күмәк кеше бер урында йыйылған ваҡытта була торған геүләү менән тулды.

Кузьма-Демьянск ауылы оло юлдан бер аҙ ситтәрәк урынлашҡан. Был төбәк әллә ҡасандан немецтарҙың тылында булһа ла, һалдаттарҙың ошо тирәлә байтаҡтан күренгәне юҡ ине. Әйтеүҙәренсә, фронт һыҙығы әллә ни алыҫ түгел. Ваҡыты-ваҡыты менән йыраҡта миналар шартлағаны, бомбаларҙың ярылғаны шаңдау һымаҡ килеп ишетелә. Һауанан әле был, әле теге яҡҡа самолеттар осоп үтеп кенә тора.

Стратегик яҡтан ауылдың әлегәсә һис ниндәй ҙә әһәмиәте булманы тиерлек. Ғәскәрҙәр төрлө йүнәлештәрҙә үтә торҙо, танк колонналары, мотопехота туҡтауһыҙ тигәндәй ағылды. Ләкин барыһы ла оло юл буйлап. Апаруҡ алыҫта, йылға ашаһында ятҡан Кузьма-Демьянск ауылының үкереп алға ынтылған ауыр техникаға ла, ғәскәрҙәргә лә әллә ни кәрәге булманы. Ләкин бөгөн иртән оло юл үткән ҙур күперҙе шартлаттылар. Ә инде бер аҙҙан ошо йылға аша һалынған тағы ике кескәйерәк күперҙе лә һаҡ аҫтына алырға бойороҡ килде. Тиҙҙән ҙур һөжүм көтөлә. Бер ниндәй ҙә тотҡарлыҡ булырға тейеш түгел. Өҫтәүенә, бындағы туғайлыҡ өс-дүрт саҡрымдан һаҙлыҡҡа әүерелә. Уның аша техника түгел, йәйәүле лә үтә алмай.

Былтыр йәй “СС” отрядтары был тирәне партизандарҙан тотошлай таҙартҡайны. Әле килеп йәнә баш ҡалҡытҡанға оҡшайҙар. Әле тегендә, әле бында һөжүм итеүҙәре йышайҙы.

“Тыныслана белмәгән ниндәй халыҡ был?” – тип эсе бошоп уйлана Герберт. Унынса, һуғыш – ул хәрбиҙәр эше. Граждан халыҡ был яу уйындарына ҡыҫылмай, тыныс ҡына йәшәргә тейеш. Бөйөк Германия Францияны яулаған мәлдә французлар һәнәк тотоп танкыларға ҡаршы ташланманы ла баһа! Һөҙөмтәлә Париж ҡан-ҡойошһоҙ баш һалды. Емертелмәне, яндырылманы. Уның халҡы ла һәүетемсә тып-тыныс йәшәүен дауам итә. Ә бындағы ҡырағай халыҡ менән һис нисек тә уртаҡ тел табырлыҡ түгел. Баштан уҡ шулай булды. Яйын табып, хөсөтлөк ҡылырға ғына торалар. Әллә илдәрен шул тиклем яраталар, әллә әҙәмсә аралашһалар, үҙҙәрен дә дошманға һанап ҡуйырҙар тип ҡурҡалар – аңламаҫһың.

Әле лә бына улар килеп ингән ауылда, исмаһам, берәй әҙәм заты күренһә икән! Барыһын да үләт ҡырған тиерһең!

Ә, юҡ, яңылышты – урам буйлап һылтыҡлап кемдер килә ине.

– Герр офицер! – тип өндәште ул Гербертҡа, күрәһең, уның башҡасараҡ кейемдә булыуынан самалап. Урта йәштәрҙән күптән уҙған һәм байтаҡтан ҡырынмағанға хатта үҙ йәшенән дә ҡартыраҡ күренгән был әҙәм баҫҡан урынында тапанып ыҡ-мыҡ итте, унан башынан кәпәсен алып ҡулында ыуғыланы. – Мин ни… ошо ауылдың старостаһы… Кондратий булам.

– Пальдисты саҡырығыҙ! – тип бойорҙо Герберт.

Сөнки ул ҡаршыһына баҫып нимәлер ләпелдәгән был ҡарттың һөйләнеүенән бер нәмә лә аңламаны. Сәйер, ошо икһеҙ-сикһеҙ илдә йөрөүҙәренә ике йыл була, мәгәр телдәре элек нисек ҡара урман булһа – әле лә шул килеш. Ярай ҙа, ротаһында латыш егете Пальдис бар. Атаһын большевиктар үлтергәнгә үтә үсле был егет ап-аруҡ русса һупалай. Урындағы халыҡ менән аралашырға кәрәк булһа, файҙаһы бик тейә.

– Герр обер-лейтенант! – тип башлаған Пальдисты Герберт ҡул ымы менән туҡтатты.

– Һора әле был әҙәмдән. Кем ул, нимә әйтмәксе була. Тик ҡыҫҡа тот, ваҡыт самалы.

Пальдис әлеге әҙәм менән нимә хаҡындалыр һөйләшеп алды. Уның ошо ауылдың власы икәнлеген аңлағас, мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы. Ләкин ҡаршыһында торған обер-лейтенанттың һынамсыл ҡарашын күреп, йөҙөн үҙгәртә һалды.

Мәгәр әлеге мәлдә обер-лейтенант Герберт Шульц өсөн был староста бик тә кәрәкле зат ине. Отрядты тиҙерәк урынлаштыра һалырға кәрәк. Өҫтәүенә, ике күпер ҙә кисекмәҫтән һаҡ аҫтына алынырға тейешле.

Ул һалдаттар өсөн иркенерәк ике-өс йорт табырға бойороҡ бирҙе, үҙе иһә отрядтың күпселек өлөшөн алып йылға яғына йүнәлде. Ошо мәлдән алып Кузьма-Демьянск ауылы билдәһеҙ ваҡытҡа немец һалдаттарының төйәгенә әүерелде.

**Рәсүл**
**БАЙГИЛДИН**

# ЯРҺЫУ ЙЫЛДАР ҮТЕР, ЯҠТЫ ЯҘҘАР ЕТЕР...

Повесть

**16**

– Аһамайым да һағы әпәкке, – теле асыла башлаған Рәсим кукуруз оно ҡушып бешерелгән икмәкте ташлап ебәрҙе.

– Ҡалай ул, тәм айыра. Элек был икмәк булһамы... Э-э-й, балам, беҙ күргәндәр... – Сәбилә урындыҡ ситенә тәгәрәгән ярты телем күмәсте балаға кире тотторҙо.

– Аһамайым, аһамайым... – Сабый ҡулындағы икмәкте тағы ташларға йәтешләнде лә, ҡәртәсәһенә ҡарап, туҡталып ҡалды.

– Кеше аяғы һилләнде, мин Асия еңгәйгә барып киләйем. Бәлки, бөгөн бойҙай икмәге эләгер, – ҡашығаяҡ тирәһендә булышҡан Гөлйемеш магазинға сығырға йыйына башланы.

– Мин дә, мин дә ... – Фәүзиә әсәһенең янына йүгерҙе.

– Хәҙер Хәмдиә лә эйәрәм, тей бит. Өйҙә генә булып тороғоҙ, мин тиҙ генә әйләнәм, – әсә йәһәтләп ишеккә атланы.

Былтырғы ашлыҡтың бөтөүенә, он ларының бушауына ике-өс ай булып китте инде. Шуға магазинға ҡарап торалар. Икмәк магазинға ла өҙлөк менән килә. Илдә иген юҡ икән, сит илдән һатып алалар икмәкте, тигән һүҙ йөрөй халыҡта.

Юлдыбайҙа, үҙҙәре кеүек, Бәләкәй Уза йылғаһын һыулап ултырған урамда әсәһе, ҡустылары менән йәшәгән Әлибайға “ағай” тип өндәште бәләкәйҙән Гөлйемеш. Ул кәләш алғас, еңгәй бүләгенә лә инеп сыҡты өйҙәренә. Шунан бирле Асияны еңгәй тип йөрөй. Йәштәр Юлдыбайҙа оҙаҡ торманы, Матрайҙа төпләнделәр. Асия магазинда һатыусы булып эшләй, Әлибай клубта кино күрһәтә. Шул еңгәһе арҡылы Гөлйемеш икмәктән өҙөлмәй килә хәҙер. Магазин асылыуға киндер моҡсайын, аҡсаһын кешегә күрһәтмәй генә еңгәһенә тоттора ла, кискә табан барып ала. Хәҙер элекке кеүек иркен

*(Аҙағы. Башы 1-се һанда.)*

һатылмай икмәк – ҙур сиратҡа тороп саҡ ала уны халыҡ. Бер ҡулға икене генә бирәләр. Йыш ҡына талаш сыға. Икмәк бөтөнләй килмәгән саҡтар ҙа булғылай.

Кеше һуңғы осорҙа магазинда аҙыҡтың муллығына өйрәнеп алғайны. Ҡасан барһа ла, теләгәнен алып ҡайтты. Ярты йыллап инде – өҙлөк китте. Хаҡтары ла күтәрелде. Һуғыштан һуң лавкала аҙыҡ-түлек гел арзаная ине, ә быйыл, бар ғәмде аптыратып, киреһе сығып тора. Шуға халыҡ шомлана. Америка аҫтыртын ҡылып ята, тип һөйләй радио, гәзиттә лә был турала яҙалар.

– Ялтыр баш Никита кукурузы менән һемәйтте илде, – тип әрләй ил башлығын Ғилметдин, кукуруз оно ҡушып бешерелгән һарғылт икмәкте ауыҙына алған һайын.

– Батшаны әрләп ней. Берәйһе ишетеп ҡалһын, башыңды төрмәлә серетерҙәр, – тип хафаға ҡала быңдай саҡта Сәбилә.

– Батшаның һөйәктәре әллә ҡасан сереп бөткән, әсәй... Онотоорға ваҡыт уны!

– Һеҙ, сикрутәр, тип әйтһәгеҙ ҙә, ил хужаһы батша булып ҡала инде. Башҡа кем булһын һуң? Батшаға һүҙ тейгеҙергә беҙ гел ҡурҡа торғайныҡ...

– Батшаны ҡолаттылар, быныһын да ҡолатырға кәрәк, – Ғилметдин ҡуйырҙан-ҡуя торған кеше түгел инде.

Мәүлетдин менән дә һүҙгә килешеп киттеләр бер көн.

– Икмәк ашата башланы, совхоз асты, аҡса бирҙертә, тип хатта ярата торғайның Хрущевты, хәҙер эт урынына әрләйһең, – тине Мәүлетдин ағаһына, мәрәкәләгән һымаҡ.

– Уға ышанһаң, ун ете йылдан коммунизмға барып етергә тейешбеҙ. Рәсим улым ҙурайып етһә, кәкрәс коммунизмға эләгә инде... Эйе, эләгер, эләкмәй ҙә!.. Вис киреһе сығып тора. Хаҡтар артты, икмәк бөттө... Коммунизм тип, аслыҡҡа бороп алып китеп бара нишана. Ышанмайым мин уға хәҙер...

– Һы... Ҡалай һин тиҙ һыуындың...

– Ялтыр башты яратырға матур ҡыҙ түгел ул...

– Яраттың да баһа...

– Нимә ҡаңғыраһың, салага!.. Ҡолаҡ төбөңә берҙе алғың киләме? Хәҙер бирәм, – гәзит ҡарап урындыҡта ятҡан Ғилметдин, әтәсләнеп, тороп уҡ китте.

– Ярай инде, ағай, шаяртҡанды белмәйһеңме әллә. Бына тыңлап ҡара әле, – Мәүлетдин, эргәһендә торған магнитофонды ҡабыҙҙы.

Унда икәүһенең бәхәсе башынан алып аҙағына тиклем яҙылғайны.

– Минең тауыш ҡайһылай ҡыҙыҡ ҡына ул, – тип балаларса аптырап алды тәүҙә Ғилметдин.

– Тауышың да ул... Ә нимә һөйләйһең һуң?

– Шунан нимә?..

– Һуң яҙылған да баһа...

– Шунан...

– Элек быныӊ өсөн бер һүҙһеҙ стенаға терәгәндәр... Расходҡа сығарғандар... Атҡандар...

Ҡустыһының ҡайҙа һуҡтырғанын саҡ аңлап алған Ғилметдинде һуғышыуҙан өйҙәгеләр көскә тыйып ҡалды. Мәүлетдин, шаяртыуҙы аңламайһың, ағай, тип магнитофон таҫмаһындағы яҙмаһын юйҙырта һалды.

Ике йыл тота инде Мәүлетдин ауылда быға тиклем күрелмәгән замана мөғжизәһен – ауырлығы бер боттан ашыу, радиоһын да тотҡан, пластинкаһын да уйнатҡан, магнитофонға ла яҙҙыртҡан һәм дискыға уралған таҫманан яҙмаларҙы әйләндергән “Казань-2” тигән музыка комбайнын. Динамигын өҫкә күтәреп ҡуйһаң, тауышты ярты ауылға яңғырата үҙе.

Бер көн почтаға ят әҙәм килеп инде лә Мәүлетдингә шул мөғжизәне һатып алырға тәҡдим иткәйне. Мәүлетдин ышанмай, икеләнеп торғас, уны эшләтеп тә күрһәтте. Шунан бер айлыҡ эш хаҡына торошло (80 һумға) әйберҙе һатып алырға йөрьәт итте егет. Һәм отолманы ла һымаҡ. Магнитофонлы агрегатты клубҡа алып сығып, йәштәрҙе бейетһенме, ҡунаҡтарҙа табын түренә ҡуйып бар халыҡты хайран итһенме – былай ҙа ауылда беренсе булып йөрөгән егеттең баҙары тағы ла юғарыраҡ күтәрелде. Ҡайһы саҡ ипләп кенә кешеләрҙе яҙҙыртып ала ла, аҙаҡтан тыңлатып, тағы дан ҡаҙана.

Шул аппараты менән ипһендерҙе ағаһын Мәүлетдин.

Сталин заманының теҙ быуындарын ҡалтыратҡан, йөрәкте өҙгән ҡурҡыуын ҡанына һеңдереп өлгөрмәгән быуын кешеһе ул Ғилметдин. Шулай ҙа ҡустыһының шаяртыуы эҙһеҙ үтмәне – уйлағандарыңдың барыһын да яр һалып йөрөү яҡшыға барып бөтмәҫен аңланы егерме һигеҙ йәшлек ир. Уйламаған, күрмәгән, белмәгән яҡтан алып килеп тондороуҙары, боғаҙҙан алыуҙары бер ни тормай икән хәҙерге заманда, тип уйланы. Ҡайһы яҡтан алһаң да, был тормоштоң кәртәләрен йырып сығырмын тимә. Ирек бар – ауыҙыңды үлсәп ас, эшең бар – мул әжере үҙең өсөн түгел, аҡсаң бар – осон-оҫҡа ялғарлыҡ, ғаиләң бар – ярлы, ғүмерең бар – маҡсатһыҙ... Теләгәненә, хыялланғанына өлгәштем генә тиһә, күренмәгән сиккә барып терәлә лә, ары китә алмай ҙа ҡуя. Тракторсы булырға хыялланды – “Беларусь”тан төшмәй хәҙер, ҡулға аҡса алып эшләйем тине – айына ике тапҡыр бирәләр уны совхоз кассаһынан, кәләш тураһында уйланды – бай ғаиләнән һылыу ҡыҙға өйләнде... Ҡыуан, йәшә, бәхетле бул ине уға – юҡ, килеп сыҡмай.

– Минең йырға ҡушылмайһығыҙ! Көйҙө боҙаһығыҙ әтеү, – ҡунаҡта Ғилметдин үҙе генә яңғыҙ йырларға ярата, табындаш дуҫтарын ҡаты киҫәтә шуға баштан уҡ.

Хәмерҙән еңелсә илергән башы ауыр уйҙарҙан арынған, күңеле күтәренке, тәненең талсығын һыпырып алғандар:

*– Диңгеҙҙең дә була төрлө сағы,*
*Бер дауыллап ала, бер тына,*
*Раушаниям, бәғерем,*
*Бер дауыллап ала, бер тына,*
*Күңелдәрем һиңә ынтыла.*

*Аҡсарлаҡтар оҫҡан Ағиҙелдең*
*Туғайҙарын яңғыҙ гиҙәһең,*
*Раушаниям, бәғерем,*
*Туғайҙарын яңғыҙ гиҙәһең.*
*Сәскәләрҙе кемгә өҙәһең?*
*Сәскәләрҙе кемгә өҙәһең?*

Йыр ирҙең булмышын асманға осора. Их, диңгеҙ... Их, Ағиҙел... Ә Раушания һуң? Кем ул? Нишләп Раушания? Ә Гөлйемеш һуң? Хыялыйҙар булырһың былай йырҙан!..

Мәжлестең дә, байрамдың да ғүмерҙәре ҡыҫҡа: тағы уйҙар, саң-туҙанлы ауыр эш, ҡыҫынҡы йортта ғүмер кисереү... Һәм алда тағы ла – ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа еңеллек биргән йырлы ла, моңһоу ҙа эске табындары...

...Аҡ икмәк алған Гөлйемеш магазиндан дәртле баҫып ҡайтып инде өйгә. Балаларҙы ҡыуандырайым, тип уйланы ҡәнәғәт төҫтә. Өҫтәүенә, аҙ ғына кәнфит тә үлсәткәйне еңгәһенән.

**17**

1963 йылдың май башы. "Башҡорт" совхозының Юлдыбай бүлексәһендә кукурузсылар семинары бара. Аҡъярҙан райондың партия комитеты секретары Ғилман Ғирфан улы Яппаров, башҡарма комитет рәйесе Әхтәм Сәлимйән улы Мәҡсүтов, башҡа түрәләр килгән. Баҫыу башына бағаналар ҡаҙып ултыртылып, улар араһында тарттырылған туҡымаға ҙур алһыу хәрефтәр менән "Дадим Родине 50 центнеров кукурузы-чудесницы с гектара!" тигән лозунг яҙып эленгән. Бер рәткә теҙелгән тракторҙарға ла кукурузды данлаған плакаттар беркетелгән.

Сиҙәмселәр төбәге Хәйбуллала "икенсе икмәк" тип нарыҡланған был культураны үҫтереү технологияһын тейешенсә үҙләштергәндәр, ярайһы тәжрибә туплағандар. Ә ике йыл элек кенә ойошҡан "Башҡорт" совхозында эш рәтен белеп етмәйҙәр. Партияның талабы ҡаты – сәсеүлектәрҙең кәм тигәндә өстән бер өлөшөн кукуруз биләргә тейеш. Уңыштың юғары булыуы мотлаҡ. Шуға иң уңдырышлы ерҙәр ошо культураға тәғәйенләнгән. Матрай, Юлдыбай тарафтары районға яңы ҡушылды. Кисәге колхозсыларҙы тәүҙә эш алымына өйрәтеп алыу кәрәк.

– Иптәштәр! Бөйөк Ленин партияһы беҙҙе тура юлдан коммунизмға әйҙәй. Яуап итеп беҙ удар хеҙмәт өлгөһө күрһәтәбеҙ, еңеү артынан еңеү яулайбыҙ. Ауыл хужалығының төп бурысы – илде туйындырыу. Сиҙәм күтәреп, Хәйбулла районы эшсәндәре икмәкте бөгөн биш тапҡырға күберәк игә. Коммунистар партияһы, зирәк етәксебеҙ Никита Сергеевич Хрущев икенсе икмәкте – кукурузды – етештереүҙе тағы ла арттырыу бурысы ҡуя. Кукуруздың һәр гектары 30 центнер уңыш биргән хәлдә, ауыл хужалығының малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ тармаҡтары өҫтәмә рәүештә һәр гектарға ҡарата 7 центнер сусҡа ите, 85 центнер һөт, 40 мең дана йомортҡа етештерәсәк.

Кукурузды үҫтерә белергә кәрәк. Шунда ғына һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Никита Сергеевичтың аҡыллы һүҙҙәрен килтермәй мөмкин түгел ошо урында. Ул һәр ваҡыт: "Советую вам выращивать кукурузу, как самую урожайную и лучше всего оправдывающую труд культуру, но при условии, если вы эту культуру знаете. Если же не умеете выращивать, то сначала научитесь", – тип ҡабатлай. Был – зирәк, тәрән аҡыллы, бай фекерле етәксе һүҙҙәре!

Никита Сергеевич, кукурузды квадрат-оя ысулы менән сәсеү иң отошлоһо, ти. Хатта Американың атаҡлы кукурузсыһы Гарст та был йәһәттән беҙҙең етәксе алдында үҙен өйрәнсек һымаҡ тоя һәм уның тәрән белеменән хайран ҡала. Йәғни баҫыуҙа кукуруздың һәр төбө 70-кә 70 сантиметрлы квадраттың мөйөштәрендә урын алырға тейеш.

"Башҡорт" совхозы игенселәре! Бөгөн һеҙҙе "Хәйбулла", "Матрай", "Аҡъяр"

совхоздарының иң оҫта кукурузсылары эш алымына өйрәтәсәк. Эйе, быға тиклем һеҙ ҙә кукуруз сәстегеҙ. Тик юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә алманығыҙ. Сөнки белемегеҙ түбән, тәжрибәгеҙ самалы.

Баҫыу башында “СКГК-6” һәм “Т8-2А” сәскестәре тора. Тәүге агрегатта, орлоҡ сәсеү тәрәнлеген көйләү өсөн, секторҙар буйлап, бәләкәй тәгәрмәстәрен әйләндереүсе механизмды кәрәгенсә шылдырабыҙ. Ә икенсе сәскес ҡатмарлыраҡ. Орлоҡто тәрәнерәк сәсеү өсөн уның штанг пружиналарын ҡыҫабыҙ, шул уҡ ваҡытта бәләкәй тәгәрмәстәрҙекен бушатабыҙ…

– Районның беренсе секретары эш нескәлектәрен механизатор-агрономдан былайыраҡ белә… Вәт, дә! – “Башҡорт” совхозы директоры Николай Петрович Павлов Мәҡсүтовтың ҡолағына шыбырҙаны.

– Шунһыҙ булмай. Обкомдан Нуриев үҙе шундай талап ҡуя, – тине уныһы, яуаплап.

Ә Яппаров телмәрен дауам итте: “Тумаласлы үлсәү тимерсыбыҡтары баҫыуҙың ҡырынан ҡырына теүәл 16,8 метр аралыҡ ҡалдырып һуҙыла… Сәскестәр трактор сергаһының уртаһына тағыла. Был ваҡытта агрегаттың рамаһы горизонталь хәлдә булырға тейеш… Сәсеүҙе башлар алдынан механизатор тракторҙы, ҡуйылған билдәләргә тапҡырлап, сәскестәрҙең орлоҡ төртөү моронларын контроль һыҙатҡа тап килтереп, туҡтата… Һуҙылған үлсәү тимерсыбығы тумаластар тотоу ояһына (узлоуловителгә) һалына… Трактор сигнал буйынса талғын ғына ҡуҙғалып китә. Ул, агрегатты тигеҙ тартып, тик икенсе тиҙлектә бара. Башҡа тиҙлектәргә күсеү тыйыла… Орлоҡтоң тейешле тәрәнлектә, теүәл һәм нормаға еткереп сәселеүен тикшереү өсөн, 20 метр үткәс, агрегат туҡтатыла, һәм ипле генә хәрәкәттәр менән (сәселгән орлоҡто урынынан ҡуҙғатып ҡуймаҫ өсөн) бер рәттәге 10 оя асыла… Асылған ояларҙың үҙәгенән бау тартыла. Ул үлсәү тимерсыбығының тумаласына тап килеп сығырға тейеш. Әгәр тап килмәһә, тумаластар тотоу ояһы йә алға, йә артҡа күсерелә… Тапҡырлағандан һуң трактор тағы 15 – 20 метр үтеп туҡтай һәм сәсеүҙең дөрөҫ барыуы ҡабаттан тикшерелә…”

– Был тиклем сурыҡҡан әҙәм кем ул? – Юлдыбайға, ҡайны йортона һуғылып, семинарҙың башына һуңлаған Ғилметдин Рәфҡәт дуҫына өндәште.

– Район хужаһы… Секретарь…

– Йылайырҙыҡына оҡшамаған да баһа…

– Ниндәй Йылайыр? Йылайыр юҡ бит инде… Аҡъяр… Хәйбулла…

– Яппаровмы әллә?..

– Шул шикелле…

Яппаров, һүҙҙән туҡтап, тамаҡ ҡырҙы, шунан:

– Хәҙер, иптәш механизаторҙар, алдынғы кукурузсылар мин һөйләгәндәрҙе практикала күрһәтәсәк. Шунан улар күҙәтеүендә бер буй үтәһегеҙ ҙә, үҙ аллы сәсеп күрһәтәһегеҙ.

Иптәштәр! Хәйбулла районы игенселәре! Быйыл беҙҙең алда үтә яуаплы бурыс тора – дәүләт заданиеһын икеләтә арттырып үтәргә тейешбеҙ! Партия һеҙгә ышана. Алға, коммунизмға, иптәштәр! – тип телмәрен ялҡынлы һүҙҙәр менән тамамланы ла, сигналсыларға ҡарап, ҡул һелтәне.

Ялан ситендә флаг тотоп торған ун кеше күтәргән ҡулдарын киҫкен аҫҡа төшөрҙө һәм ҡабаттан күтәрҙе. Был әҙерлеккә команда ине. Тракторҙар ҡабыҙылды. Семинарҙа ҡатнашыусылар, төркөм-төркөм булып, баҫыу ҡырына теҙелде. Агрономдар, агрегаттар башҡарған һәр алымды тасуирлап

аңлатып, кукуруз үҫтереүҙең заманса технологияһы тураһында ҡабаттан һөйләргә керешеп китте.

Бына тракторҙарға ултырырға сират “Башҡорт” совхозы механизаторҙарына етте. Һөйләгәнде тыңлап, күрһәткәнде ҡарап торғанда барыһы ла ябай һәм аңлайышлы кеүек ине. Эшкә тотонғас, буталдылар, билдәләрҙе күрмәй үтеп киттеләр, рычагтарҙы яңылыш тарттылар. Был тиклем ентекле, эҙмә-эҙлекле эш-хәрәкәт ятын уларға. Туҡта, тикшер, үлсә, көйлә һәм... тағы шуларҙы кире ҡабатла. Ә ҡасан сәсергә һуң? Крәҫтиән һәр саҡ ябайлыҡҡа ынтыла, уға тәбиғи, аңлайышлы ғәмәл яҡын. Тупраҡҡа төшкән һәм күмелгән орлоҡто асып ҡара, шунда, ерҙә, нимәнелер үлсә, ниндәйҙер иҫәп-хисап эшлә... Юҡ, батмай, бармай бындай төпсөрлөк ер кешеһенә.

– Туҡта!.. Баҫ тормозға!.. – Яппаров, контроль һыҙатҡа етмәй борола башлаған трактор юлын киҫә була, ҡулын болғай-болғай һөрөлгән ерҙән йүгерҙе.

Механизатор күрҙеме уға ҡарай ярһып килгән кешене, әллә бер буй сәсеп бөттөм тип уйланымы – тракторын туҡтатты. Тик кабинанан үҙ ыңғайына төшә алманы – уны һөйрәп төшөрҙөләр.

– Һин... Һин... – механизаторҙы иҙеүенән ҡармап тотҡан Яппаров асыуынан сәсәне. – Партияның эшенә... Партияның талабына төкөрөүеңме был?.. Контроль һыҙатта туҡтарға, сәскесте, билдә ҡанаттарын күтәрергә тейешһең, һиңмай!.. Мең тапҡыр тылҡынылар быны һиңә бөгөн. Ә һин... – районның беренсе секретары ҡараға батҡан ер кешеһенә киҙәнде, тик һуҡманы. Механизаторҙы этеп ебәрҙе лә, өмөтһөҙ ҡулын һелтәне һәм шәп-шәп атлап машинаһы яғына ыңғайланы. Семинарҙа ҡатнашыусылар уны башҡаса күрмәне.

Дәүләт крәҫтиәнде үҙһенмәй шул. Кулактарҙы тамырынан ҡоротһалар ҙа, үҙенсә, аҫтыртын, әүеш-тәүеш итеүгә әүәҫ кулак фиғеле йәшәй бирә ауылда. Өйрәтеүгә бармай, яңыны алмай, әйткәнде ҡабул итмәй ул. Кисәге колхозсынан нисек совхоз эшсеһе әүәләргә? Никита Сергеевич дөрөҫ әйтә – иң элек уның йорт хужалығын тартып алырға кәрәк. Кәзәһе генә түгел, һыйыры ла булмаһын ҡураһында. Ул эшләргә, ҡайтып ял итергә һәм тағы дәүләткә тир түгергә тейеш!..

– Иван Исаев кисә Сибайҙа нефтебазала ишетеп ҡайтҡан. Заправкала сәләркә бушатып торғанда һөйләне. Тыңлағыҙ, – Ғилметдин сәй эскән тимер көрөшкәһен яңы тирткән йәшел үләнгә ҡуйҙы ла, аҙыраҡ пауза тотоп, көләмәс башланы.

Хрущев сусҡа ферамаһына килгән, ти.

Сусҡалар уға ҡарап:

– Хру-хру-хру, – тип тауышлана икән.

– Нимә ашатаһығыҙ уларға, – тип һораған Хрущев.

– Кәбәк, иптәш Хрущев, – тиҙәр икән.

– Кукуруз ашатығыҙ, икенсе килгәнемдә исемемде тулыһынса әйтерлек булһын, – тигән Никита.

Сауҡалыҡта өйкөм-өйкөм ултырып төшкө аш ашаған семинарҙа ҡатнашыусыларҙың бер төркөмө гөр килеп көлөшөп алды.

– Һинеке пүстәк, миңә Орскиҙан ҡайтҡан ҡоҙам һөйләне, – көләмәс һөйләшеү дауам итте.

– Нишләп һатыуҙа аяҡ кейеме юҡ? – тип һорай икән берәү магазинда.

– Ялан аяҡ Американы ҡыуып етеп, үтеп китергә еңелерәк булһын өсөн, – тигән уға ливер колбасаһына сиратҡа баҫҡан халыҡ.

Бер мәл сауҡалыҡ араһына һибелеп ултырған барлыҡ халыҡ мәҙәкселәр янына йыйылды.

– Бер аяҡ менән беҙ коммунизмда торабыҙ, иптәштәр, – ти икән Хрущев.

– Тарбайып оҙаҡ торорбоҙмо икән, иптәш Хрущев? – тип һорай икән унан ҡарт большевик.

– Ха-ха-ха, – дәррәү көлөү тауышы шаңдау булып кире ҡайтты.

– Миңә лә Орск жиганы һөйләне... – Һәр кем ишеткәнен ғәм алдына сығарырға ынтылды.

Түрәләр табыны уратаһында ултырыусыларҙы механизаторҙарҙың сәйер күңелләнеп китеүе һағайтты. Мәҡсүтов ҙур түңәрәк булып өйкөлөшкән халыҡ эргәһенә килде.

– Хрущев ҡуяндан нимәһе менән айырыла? Кем әйтә?.. Белмәйһегеҙ!.. Яуап: ҡуян буш һүҙ һөйләп йөрөмәй...

– Ха-ха-ха...

Эштең ниҙә икәненә төшөнгән Мәҡсүтов ҡапыл аҙап ҡалды. Үҙенең яҡынлағанын белдереп, тауышланырға кәрәк булған уға. Ил башлығын хурлаған көләмәсте ишетте, тимәк, киҫкен сара күрергә тейеш. Ул бит – бындағы власть. Тик ни эшләргә тейеш район башҡарма комитеты рәйесе был хәлдә? Эргәһендә милиция юҡ һөсләтергә, ә үҙе ни ҡыла ала? Ишетмәмеш-күрмәмеш булыу хәйерле.

– Иптәштәр, ниндәй шау-гөр бында? Семинарҙы дауам итәбеҙ... Төшкө аш тамам! – тип, яңы көләмәс башланмаҫ борон, көслө тауыш менән һөрәнләне Мәҡсүтов.

**18**

Ҡышҡы һыуыҡта, яҙғы бурандарҙа йәйәүләп тә, ылыуға һарығып та ярты йыл Аҡъяр юлын тапаны Мәүлетдин. Йәй аҙағында егерме бише тула, етәр, башлы-күҙле булырға ла ваҡыт.

Теге һөйләшеүҙән һуң телефонистка Светлана менән яҡындан танышты. Оҡшатты йәштәр бер-береһен. Бергә булыу тураһында уйынлы-ысынлы һүҙ ҙә сыҡҡылай башлағас, тәүәккәлләне Мәүлетдин – Мөхәмәтнәжип ағаһы менән килештеләр ҙә, гөрләүектәр сылтырап аҡҡан март аҙағында автобус менән Аҡъярға юлландылар.

Буласаҡ ҡайныһының күңеленә хуш килде Матрай ауылы почтаһы начальнигы. Ҡыҙын бирергә ризалашты. Туй көнөн торараҡ билдәләргә һөйләштеләр. Тик бик мажаралы килеп сыҡты был сәфәр. Салт ҡояшлы яҙғы көндө кискә табан күҙ асҡыһыҙ буран алмаштырҙы. Яусылар ҡайта алмай ҡамалып ятып ҡалды Аҡъярҙа. Аҡман-тоҡман ҡотороնһа ла, көн һайын юлға сыҡтылар. Ылау булмағас, кире фатирға ҡайттылар. Шулай аҙна аҙапландылар ҙа, һилерәк бер көндө Матрайға йәйәүләп сығып киттеләр. Туранан-тураға тартып, саҡ ҡайтып ауҙылар.

– Көнөн һөйләшеп ҡайттым, июлдә кәләш алам, әсәй, – тине ҙур ғаилә самауыр тирәһенә йыйылған бер мәлдә Мәүлетдин.

– Бик мәслихәт, улым, – тине ҡыуанған Сәбилә.

– Уныһы шулай ҙа, тик килененде ҡайҙа алып ҡайтырға? Бында урын юҡ, – ағаһына һораулы ҡарашын төбәне ҡусты кеше.

– Күңел һыйһа ни, урын табылыр, – Сәбилә аңын-тоңон уйламай яуап бирҙе.

Ғилметдин аңланы кинәйәле һүҙҙе лә, үҙенә төбәлгән ҡарашты ла. Эйе, ваҡыт инде башҡа сығырға. Арттан етә килгән ҡустыға урын бушатырға кәрәк. Йола, ағай бурысы ҡуша быны. Оҙаҡлап китте шул атай йортонда. Яраған эш түгел был. Ана, Мөхәмәтнәжип ағаһы бер йыл да торманы әсәһе менән, шунда уҡ үҙ ояһын ҡорҙо.

Урамдың түбәнге осонда Шәрифә әбейҙең өйө буш тора. Күҙе насарланғандан бирле Хөрмәт туғанында көн күрә ул. Йортон һаталар икән, тип һөйләйҙәр. Йәтеш инде ул йәтешлеккә, шулай ҙа ярап торор ине. Нисәмә йыл аҡса алып эшләй, аҙлап йыйғанда ла тултырыр ине. Шулай ҙа тинләп, һумлап бол туплау – уның өсөн ғәрлек. “Крохобор” тиҙәр ундайҙарҙы ауылда. Тормош мулыраҡ, табындар байыраҡ була башлап, ирҙәр араҡыға әүәҫләнгәс, тәүҙә ауылдың МТС осонда, совхоз килгәс, тотош Матрай башҡорттары араһында таралған был насар һүҙҙе бер кемдең дә үҙенә йәбештергеһе килмәй. Бигерәк тә Ғилметдин кеүек зимагор холоҡло яндырай ирҙәр.

Хәйер, башҡа сығыу тураһында һүҙ бер бөгөн сыҡмай. Юлдыбайҙағы ҡайны-ҡәйнә юҡ-юҡта шуны күтәрә. Билдәле: айырым йәшәһәләр, тапҡандары үҙҙәренә булыр ине, тигән уйҙы ҡыуалар.

– Бисәкәй, ултыр, давай, Юлдыбай киттек, – Ғилметдин, ергә лә төшмәҫтән, тракторының ишеген генә асып, тупһаға сыҡҡан Гөлйемешкә ҡысҡырҙы.

– Эсеп алһа, ошоноң шул булыр инде, – тип һуҡранды ҡатын.

Эш бушағыраҡ саҡта һуҡмыш ир кисләтеп шулай Юлдыбайға ҡунаҡҡа йөрөргә ярата. Ҡайныһынан әрләнгәс, һүрелә төшкәйне, тағы бына батырланып алған. Ҡойоп ямғыр яуып үткәс, сәсеүҙең туҡтап торған сағы шул.

– Әйҙә, тиҙ бул. Мыштырҙама... Ҡайны ҡарттан кәңәш кәрәк. Мәүлетдин өйҙән ҡыуа ла баһа...

– Һине ҡыуған кеше юҡ. Өйләнәм, тип кенә әйтте...

– Кәләш алғас һуң, барыбер башҡа сығырға кәрәк, – Ғилметдин, әсәһенең итәгенә йәбешеп торған Рәсимде күтәреп, тракторға ыңғайланы.

Гөлйемешкә, өйгә инеп, тиҙ генә йыйынып сығыуҙан башҡа сара ҡалманы. Күнегеп бөткән инде иренең был ҡылығына.

Йырғысланған, мәтеһе аҡтарылған юлдан трактор кәйелеп-кәйелеп китә. Баланы күкрәгенә ҡыҫҡан ҡатын бер ҡулы менән иренә сытырман йәбешкән:

– Иплерәк барһаңсы, – тип ала үҙе әйләнгән һайын.

Тик бысраҡ юлды йырып сығыу хәстәренә, тиҙлек ҡомары ихтыярына бирелгән ир кеше, уны ишетмәй, төртөүенә яурынын ғына йыйырып ҡуя.

Юл, Яманһаҙ һаҙлығын урап, Күстәнә үренә тартылған урында Ғилметдин шәп килгән “Беларусь”ты ҡапыл борҙо. Тайғаҡ батҡаҡта уның артҡы тәгәрмәстәре кинәт кәйелеп китте һәм үҙ ыңғайына ҡабырға менән хәрәкәт итеп, юл йырынына барып терәлде. Шәп кәйелеп киткән ауыр техника, хәрәкәт ыңғайына ауышты һәм ҡолай башланы. Гөлйемеш “ай” тип кенә ҡысҡырып өлгөрҙө. Ҡайҙа тотонорға, ҡулындағы бәпесен нисек имгәтмәҫкә – уйламаны быларҙы ҡатын, ә һеләүһен ниндәй хәлдә лә аяғында баҫып ҡалған, көсөгөн һаҡлай алған кеүек, ҡараңғы мәхшәрҙә терәк тапты, ҡулына

таянды, яурыны менән этенде, аяғын терәне һәм ҡабырғаһына ятҡан трактор кабинаһынан балаһын имен-аман алып сыҡты.

Ҡашының өҫтө ярылған Ғилметдиндең ҡан баҫҡан йөҙө күренде ерҙә ятҡан трактор ишегенән:

– Именһегеҙме? – Ир айнығайны.

– Битеңә нимә булды? Лысма ҡан... – Шаңҡыуҙан илай ҙа алмай торған ҡатын телгә килде.

– Нишләп һыуланып китте тиһәм, ҡан икән, – битен ҡулы менән һыпырҙы Ғилметдин.

Ир тракторҙы әйләнеп ҡарап сыҡты. Ҡатын баланы тынысландырҙы. Бермә-бер һүҙ сыҡманы икәү араһында. Ғилметдин – ғәйеп, Гөлйемеш үпкә тойғоһо кисерҙе.

Ҡараңғылыҡты ут көлтәһе ярҙы. Әгәр шәп килһә, аунап ятҡан тракторға барып менә ине ҙур машина.

– Какого черта на ровном месте?.. Пьяный, что ли?.. Фу-у, как из бочки... – түрәгә тартым ҡиәфәтле эшләпәле әҙәм Ғилметдингә яҡын уҡ барҙы ла, кире сигенде.

– Да, вот бысраҡ... – тип мығырҙаны Ғилметдин.

– Еще жена с ребенком тут... Как посмел, гад?.. Угробить решил, а? – баяғы түрә Ғилметдиндең яңағына тондорҙо. – Барахтайся в грязи сам! Поехали!.. – Балаһын күтәргән Гөлйемеште машинаға ултырттылар ҙа ҡуҙғалып киттеләр.

Сәбилә, батҡаҡҡа буялып бөткән килене менән ейәнен күреп, аптырауға ҡалды. Гөлйемеш хәлде һөйләп биргәс, Рәсимде ҡосаҡлап илап ебәрҙе:

– Үҙен дә, киленде лә харап ҡына итә инде. Балаларҙы уйлап та бирмәй, – тип үкһене әсә.

Иртәгеһенә, ат егеп, Хисмәт менән Хәлимә Матрайға килеп төштө. Кисәге хәл тураһында хәбәр Юлдыбайға ла барып ишетелгәйне. Ике ауыл бер хужалыҡҡа ҡарай, һүҙ тиҙ йөрөй шуға.

## 19

Хисмәттең йорт хужалығы төплө һәм бай һанала ауылда. Һуғышта төрлө ҡәүемдең нисек тормош ҡороуын күреп, күҙе ҡыҙып, сәмләнеп йөрөгәйне ул. Немец менән чехҡа еткерә алмаһа ла, хәлле урыҫтыҡынан кәм түгел донъяһы хәҙер. Өс йыл элек яңы өй бөтөрөп сыҡты. Нигеҙен бейек ҡорҙо, башын тимер менән көпләтте. Мунсаһы, келәте, мал кәртәһе – барыһы ла буралап эшләнгән. Өй уратаһы бейек таҡта ҡойма менән тартылған. Хрущев ауылдарҙы төҙөкләндерергә әмер биргәс, ағас алыуы еңеләйҙе. Ҡырын ҡараусы ла юҡ әрһеҙләшеп йорт-ҡура яңыртыусыларға. Уландары ла – ярҙамсылары ла – булғас ҡул аҫтында, килештерҙе, яҙҙан ҡара көҙгә тиклем өс быуа тотондолар ҙа бөтәйтеп тә ҡуйҙылар ҡаралтыһын. Үҙе генә түгел, унан килә тағы ике-өс быуын ҡыуанып йәшәр унда.

Ике һыйыр, тиҫтәләгән һарыҡ, байтаҡ тауыҡ, ҡаҙ-өйрәк көтәләр. Бейә аттан бер ваҡытта ла айырылғаны юҡ. Шул арҡала бесән-һаламы, ашлығы ҡайтып тора, малы көр, ҡош-ҡорто ишле. Хәлимәһе һауған һөттөң бер тамсыһын ҡалдырмай эш итә, себештәрҙе үлтермәй баға, йөндән ойоҡ-бейәләй генә бәйләмәй, ә кейеҙ ҙә, быйма ла баҫа. Бейәне һауып ҡымыҙ

бешә. Күп итеп картуф үҫтерәләр. Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем эш өҫтөндә улар. Өй эсендәге олоһоноң да, кесеһенең дә үҙенә тәғәйен бурысы, эше бар.

Үҙ хәстәре менән булып, Гөлйемеште ярҙамһыҙ ҡалдырҙылар һуңғы арала. Шул йәнен әсетә ата менән әсәнең. Кейәүҙән уңдым, тип әйтә алмай Хисмәт. Төҫ-башы, лайыҡлы эше, таһыллылығы юҡ түгел Ғилметдиндең. Тик донъя көтөргә барымһыҙ. Ни эшләптер, мал табам, тип ынтылмай. Дәртһеҙ кеше. Әрһеҙ "Беларусь"та эшлә лә, ошоға тиклем үҙ йортоңдо һалып сыҡма инде. Аптырарлыҡ хәл.

Хисмәт ныҡ асыулы килде Матрайға. Юл буйына Хәлимә менән дә һөйләшмәне.

Өй бураһынан саҡ ҡына күтәренке транса ҡыйыҡ, бәләкәй тәҙрәләр, балсыҡ менән һыланған өй ҡабырғалары, тауыҡ кетәгендәй солан – ҡыҙы Гөлйемеш биш йылдан ашыу тора ошонда. Арыраҡ күҙ ташлаһаң – ситән кәртә, таш мунса, һайғау менән тартылған ишек алды, үтәнән-үтә сыҡмалы ел-ҡапҡа. Бер ни үҙгәрмәгән, әйтерһең, ваҡыт туҡтап ҡалған ошо ихатала.

– Төкәтмә һуғып та ҙурайтып алырға була ла баһа өйҙө, – тип һуҡранды Хисмәт атын ҡоймаға бәйләгән ыңғай.

Алсаҡ Сәбилә ҡоҙағыйы, Гөлйемеш ҡыҙының ҡыуаныслы йөҙө, балаларҙың күстәнәскә шатланыуы – бер ни ҙә иретә алманы Хисмәттең асыуын. Ҡоро ғына иҫәнләшкәс, өйҙө эстән дә, тыштан да ҡарап сыҡты, ишек алдындағы булған ҡаралтыны күҙҙән үткәрҙе, бағаналарға, урҙаларға, ҡоймаларға, күпмегә түҙерлек былар, тигәндәй, усы менән һуҡҡылап үтте. Баш ҡына сайҡап ҡуйҙы шунан.

Сәй эскәндә, ниһайәт, телгә килде:

– Башҡа сығарырға кәрәк йәштәрҙе, ҡоҙағый, – тине, Сәбиләгә төбәп. – Хәйер, өс балалы кешеләргә, "йәш", тип әйтеп булһа инде.

Ҡапыл бойоғайып киткән Сәбилә өндәшмәне. Өйҙә ауыр тынлыҡ урынлашты. Хәлимә лә, иренән үтеп, һүҙ ҡатманы.

– Хаҡына ҡарап, берәй йәтеш йорт алып бирерлек рәтебеҙ бар. Шул ниәт менән килдек, – тип дауам итте һүҙен Хисмәт.

Тракторын ҡолатып, хужаларҙан әрләнгән, буласаҡ премияһынан ҡолаҡ ҡаҡҡан, бисәһе менән улын харап итә яҙғанға йән ғазаптары кисергән Ғилметдин ҡайны менән ҡәйнә алдына башын эйеп килеп баҫты. Эйе, ғәйепле. Булдыҡһыҙ ир, яуапһыҙ атай булғанға ла, эскегә әүәҫлеге, холоҡһоҙ ҡыланыштары өсөн дә. Белә, аңлай: тормошон башҡасаға үҙгәртеп ебәрергә кәрәк уға. Тик нисек? Алаша ат кеүек, башын баҫып, мисәүгә егелһенме, дуҫтарынан айырылып, туймаҫ ҡомаҡ төҫлө, тапҡанын, ҡулы һәрмәп алырлыҡ бар нәмәне йортона ташыһынмы, кулак ише малын ишәйтһенме, совхоз эшенән бушаған арала баҡсаһында соҡонһонмо? Юҡ, ятмай ундай тормош күңеленә! Башҡаса ҡалайтырға һуң? Был һорауға яуабы юҡ. Хәҙер, бөгөн-иртәгәнән дә ҡалмай, башҡа сығырға, өйҙө төшәсәк киленгә бушатырға кәрәк – башын ауырттырған хәстәр әле шул ғына.

Һиҙә Ғилметдин – ҡайны менән ҡәйнә ҡушарлап бушҡа килеп ултырмай. Саҡырылмағандар ҙа баһа. Хәл белергә, яңы һалдырылған тостан бер күнәк он, йә булмаһа бесәнгә тип һуйылған тәкәнең бер ботон, балаларға күлдәк-

ыштан алып ҡәйнәһе яңғыҙы килә, ғәҙәттә, ат егеп. Кейәүенә лә берәй бүләге була гел. Шуға ярата уны Ғилметдин, ихтирам итә.

Яңылышмаған Ғилметдин: “Берәй һатлыҡ йорт юҡмы ауылда?” – тип һораны ҡайныһы, сәләмен алғас та.

Шәрифә әбейҙең өйө иң ҡулайы инде. Ошо уҡ урамда, әсәһенән алыҫ түгел. Белешкәйне – хаҡын да бесмәй әбейҙең күҙ терәп торған туғаны.

Хөрмәт Ишембәтов менән һөйләшеп, иҫәп-хисап өҙөү шарттары тураһында килешеп, алдағы йомала күсеп сығырға һүҙ беректереп, ҡайтып китте Хисмәт менән Хәлимә. Яңы аҡса менән биш йөҙ һумға баҫты йорт.

Хисмәттең юлы төшмәне Матрайға күсенгәндә. Хәлимә самауыр, ҙур табаҡ, ике тәрилкә, сүмес, бер күнәк он, тәҙрәләргә ҡорғанлыҡ тауар алып, үҙе генә килде. Сәбилә ике тимер сеүәтә, дүрт стакан, биҙрә, туҫтаҡ бирҙе килененә. “Беҙҙә генә йәшәһәгеҙ ни булған, киленкәйем. Балаларҙы һөймәй нисек түҙермен инде”, – тип оҙаҡ илауланы бейеме әйбер йыйғанда. Гөлйемештең һаҡлыҡ аҡсаһы өҫтәл, ике балалар ултырғысы һатып алырға етте.

Мал ҡураға ингән мәлдә, көҙгөһөн, Хисмәт үҙе быуаҙ тана алып килеп япты ҡыҙы менән кейәүенең аҙбарына.

## 20

Әмир Ҡотләхмәт улы Ғафуров йәй башында пенсияға китте. Алтмыш йәше тулды уның. Яҙмышына зарланмай уҙаман. Ҙур урындарҙа эшләне, Матрай районы башҡарма комитетын етәкләне, хатта БАССР Юғары Советы Президиумында вазифа биләне. Хәтәр заманға тура килде тормошо, түрәлеге. Ни хәтлемде баштан үткәреп, хәҙер пенсия ашап ятыу – үҙе бер бәхет инде, уйлай китһәң. Туғандары, иптәштәре, хеҙмәттәштәре араһынан бик күптәр НКВД ҡулынан язаланып һәләк булды, һуғышта башын һалды, төрлө ғәйеп ташланып, эштән бушатылды, партиянан сығарылды. Партияның ҡаты ҡулы уға ла йоғондо. Молотов, Маленков, Каганович һәм улар яғына ауған Шепилов, партияға ҡаршы төркөм төҙөп, Хрущевҡа ҡаршы сыҡҡайны. Ҡарт большевик Каганович тураһында түрәләр алдында абайһыҙҙан йылы һүҙ ысҡындырғаны өсөн ул 1957 йылдың аҙағында эштән бушатылды. Зыя Нурый улы Нурыевтың яңы ғына обкомға беренсе секретарь итеп тәғәйенләнгән сағы ине. Бүтән эш бирмәнеләр. Ситкә сығып китергә тура килде Ғафуровҡа. Орскиҙа машина эшләү заводының ярҙамсы предприятиеһы бюроһы начальнигы булды. Ике йылдан кире ҡайтты. Тик башҡаса юғары вазифалар биләй алманы. Хәйбулла районының кино селтәрҙәре директорынан юғарыраҡ урын сыҡманы. Район башҡарма комитетының план комиссияһы рәйесе вазифаһынан пенсияға китте.

Булдыҡлы йәш партия функционеры, перспективалы милли кадр булараҡ, әлбиттә, кәләште мәрйәнән алды. Улар бит башҡа милләт, башҡа дин тип тормай, әгәр һиндә матур тормош вәғәҙә итә алырҙай ирҙе күрә икән, үҙҙәре артыңдан йөрөп кейәүгә сыға. Әмир Ҡотләхмәт улының башын әйләндерҙе шундай бер һылыу. Бәлки, йәшәп тә китерҙәр, бергә ҡартайырҙар ине – балалары булманы. Шуға айырылыштылар.

Икенсе ҡатыны Мөхлисә – Шишмә тарафтарынан, татар ҡәүеме ҡыҙы.

Шәфҡәт туташы. Утыҙ туғыҙынсы йылда өйләнештеләр. Бер ҡыҙ һәм ул үҫтереп буй еткерҙеләр.

Әле Әмир Ҡотләхмәт улы ҡыуанысլы мәшәҡәттәр солғанышында – ҡыҙы Светлананы кейәүгә бирә.

Буласаҡ кейәү оҡшаны уға. Үҙ башҡорто, маҡсатлы, теремек, иплe холоҡло, ҡулы эш белә. Март айында, бурандан ҡамалып ҡайта алмай ятҡанда, боҙоҡ радиоалғысты йүнәтеп ултыртты егетең.

Туйҙы бер яҡта ғына ике быуа – туғандар һәм йәштәр өсөн – үткәрергә һөйләштеләр.

Ишек алдына таҡтанан эшләп ҡуйылған оҙон өҫтәл артында иллеләп кешегә урын етте. Ауыл туйҙары аш төрлөлөгө менән маҡтана алмай. Иттең йәнең теләгәне, эйе, табаҡлап ҡуйыла, ҡорото, һалмаһы, сәйгә сәксәк-бауырһағы – шунан арыһы бик һирәк. Әмир Ҡотләхмәт улы – урындарҙа вазифа биләгән кеше – ауылса үткәрә алмай ине берҙән-бер ҡыҙының туйын. Ашхананан ҡаҙ тултыртты, тауыҡ боттары ҡыҙҙыртты, төрләндереп колбаса, тоҙланған балыҡ телдерҙе, йәшелсә турамалары эшләтте. Эсемлектең дә төрлөһө булды: аҡ араҡыһы, ҡыҙылы, шампаны, татлы һыуы, ҡымыҙы. Коньяк тигәнен дә ҡуйған хатта тәмләп ҡарарға. Район башҡарма комитеты рәйесе Әхтәм Сәлимйән улы Мәҡсүтовтың да кейәүгә туғанлығы асыҡланды. Уны ла саҡырғас, кимәл юғары булырға тейеш, тип уйланы төп ҡоҙа.

– Анауһы нимә икән? – Төп ҡоҙағый булараҡ иң түрҙә ултырған Сәбилә бер кемгә лә төбәмәй генә һорай ҡуйҙы.

– Колбаса ул, ҡоҙағый, – тигән яуап ишетте.

– Сусҡанандыр инде, – татып ҡарарға бик теләп тә, быны булмаҫтай ымһыныу икәнен аңлаған бала шикелле төшөнкө төҫтә әйтте быныһын төп ҡоҙағый.

– Колбаса булғас, сусҡа инде, ҡоҙағый, – тине баяғы тауыш эйәһе.

Өҫтәлдәге һыйҙың муллығына, төрлөлөгөнә хайран ҡалып ултырған, ғүмерендә лә күрмәгәндәренә шикләнеп текләгән Сәбилә кәләште Мәүлетдиндең, ысынлап та, бик мәртәбәле ғаиләнән эләктереүен яңы саҡ төбөнә төшөп аңланы. Мул томошта йәшәгән түрә атаһының берҙән-бер ҡыҙын нисек Матрайға ярлы йортҡа алып ҡайтырҙар инде – шулай хафаланып уйланды. Шул уҡ ваҡытта улының ҡандай ҡыҙҙы ҡарата алыуына ғорурланып ултырҙы. Төшөп ҡалғандарҙан түгел шул Райман ҡартының уландары.

– Тәтәсәй! – шатлыҡтан йөҙө ҡояштай балҡыған Рәсимдең башы хасил булды өҫтәл аҫтынан.

– Балаҡайым, нисек таптың мине? – Сәбилә Ғилметдин улы менән Гөлйемеш килене ултырған яҡҡа баҡты.

Гөлйемештең һораулы ҡарашын тотто ла, Рәсимде өҫкәрәк күтәрҙе. Бала миндә, тип яуаплауы ине килененә. Оҙаҡ сыҙап ултырманы Рәсим, ҡартәсәһенең итәгенән шыуып төштө лә, тағы өҫтәл аҫтында юҡ булды. Күпмелер ваҡыт үткәс, әсәһенең алдында күренде уның башы. Ирмәк табып, өҫтәл аҫтынан ике арала йөрөй бирҙе сабый. Ә ололар байрамы ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Төртмә һүҙ, ҡара ҡаршы йырлашыу, уҙҙырып бейешеү – ике яҡ ҡоҙалар араһында сәмле бәйге барҙы, бер-берен һынау аша туғанлашыу йолаһы атҡарылды. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа башҡорт туйҙарының да түренә менеп ҡунаҡлаған аҡбаш шешәләр, бушап, берәм-берәм өҫтәл аҫтына тәгәрәне, ә уларҙың эсендәге зәһәр шыйыҡсаның илерткес көсөнән кешеләр

бәйһеҙләнә, аңһыҙлана барҙы. Был юҫыҡта ла сәмле алыш барҙы: ҡоҙалар ҡаршы яҡты иҫертеп йығыр өсөн тырышты.

Әмир Ҡотләхмәт улы:

– Туғандар, һәр кемдең үҙ мәйеле, тигәндәй ҡыуалатмай ғына һыйлашайыҡ, байрамды мәғәнәһеҙләмәйек, – тип әленән-әле ҡабатлаһа ла, табынды мәҙәниле итеп, эскелеккә баҫым яһамай ғына үткәрергә өндәһә лә, туйҙы үҙ ыңғайына бора алманы.

Мәжлес заманына күрә ауылса, егерменсе быуаттың икенсе яртыһында башҡорт ҡәүеме араһында таралған йолаға ярашлы барҙы. Өҫтәлдең йә теге, йә был башында:

– Йә әле, ҡоҙа, күрһәт егетлегеңде... Ошо ҡырлы стаканды төп күтәреп эсеп ҡуйһаң ғына, ҡоҙа, тип әйтәм үҙеңә... Мәләдис!.. Артынса ҡана һоғондорайым һимеҙ иттән... – тигән һымағыраҡ эсергә ҡыҫтау, бер-береһен һыйлау ауаздары яңғырап торҙо.

Туйҙың өсөнсө көнөнә генә хужаларҙан ҡайтырға рөхсәт булды. Самолет Өфөгә осҡан ваҡытҡа тура килгәнгә күрә, Шишмә тарафынан килгән ҡунаҡтар матрайҙар менән бергә өйҙән ҡуҙғалды. Оҙатышыу, яңы туғандар менән хушлашыу оҙаҡҡа һуҙылды шуға.

Бына “Ан-2” самолеты моторын ҡабыҙҙы һәм осорға йәтешләнде.

– Ҡоҙаларҙы ҡайтармайым! – Ғилметдин осорға йыйынған самолеттың ҡанатына барып йәбеште. – Ҡайтармайым! Төшөгөҙ, давай!..

Ике милиционер Ғилметдинде самолеттан саҡ йолҡоп алды.

– Ғафуровтың ҡунағы булмаһағыҙ, ун биш суткаға алып барып яба инек. Мә, алығыҙ хулиганығыҙҙы, – тип туғандарына тапшырҙылар уны.

## 21

Зәкиә Юлдыбай урта мәктәбенең туғыҙынсы класын тамамланы. “Кем булырға теләйһең?” – тип һорағайны остазы Зөлхизә Шарафулла ҡыҙы: “Штукатур-малярға барам, төҙөлөштә аҡсаны күп түләйҙәр”, – тине ҡыҙ. “Бәләкәс кенә буйың менән нисек раствор күтәреп эшләмәксе булаһың? Һиңә уҡытыусыға барырға кәрәк!” – класс етәксеһе Зәкиәгә асыуланды.

Ҡыҙҙың башында киләсәге хаҡында аныҡ ҡына уй юҡ. Ул үҙенең алдағы тормошон бер нисек тә күрмәй. Иптәштәренең күбеһе уҡытыусы булам, тигәс, ҡарышҡан кеүек яуап бирҙе Зөлхизә Шарафулла ҡыҙына. Аҙаҡтан әхирәте Әлимә менән шарҡылдап көлөшөп алдылар.

Матрайға ҡайтырға тип автобусҡа сыҡҡанда Рәфҡәт килде оҙатырға. Һүҙҙәре – еңел-елпе, ә үҙенең күҙҙәре һағышлы ла, уйсан да, бирелмәгән һорауға яуап көтөп ала алмағанға күрә, һаҡ та.

– Нимә йоторҙай булып текләйһең? Зәкиәне ауылда егете көтә, – ох, ошо Әлимәне, егет булһа туҡмап ташлар ине уны Рәфҡәт. – Шаяртам, ул бисура кемгә кәрәкһен Матрайҙа.

– Бирермен мин һиңә бисураны, – Зәкиә әхирәтенә юрый ғына һуғып алды.

Рәфҡәт тә ҡыҙҙар ыңғайына шаян һүҙҙе күтәрмәкләй. Ә сәғәт телдәре кетелдәп китеп бара. Бына автобус та килде.

– Хат яҙырмын, – тип кенә әйтә алды хушлашҡанда Рәфҡәт.

Зәкиә ризалығын белдереп баш ҡаҡты.

Көн бысрап торған март айында шул Әлимә арҡаһында танышып

киткәйнеләр Рәфҡәт менән Зәкиә. Ашхананан яңғыҙ ғына ҡайтып килгәнендә училищела тракторсылар курсында уҡып йөрөгән курсантҡа ҡар бәрҙе Әлимә. “Трактарис – ҡара крис”, – тип тел күрһәтте ыңғайына. Эргәһендә барған Зәкиә селтерәтеп көлөп ебәрҙе. Йәтеш буйлы, тумалаҡ аҡ йөҙлө ҡыҙ һушын алды ла ҡуйҙы егеттең. Уның ыңғайы Әлимә ташлаған сираттағы ҡар йомарламы Рәфҡәттең башына килеп тейҙе.

– Ах, һеҙ шулаймы әле, – тип егет тә ҡар алды.

Ҡыҙҙар, ҡасып, Әлимәнең апаһы Әҡлимә эшләгән амбулаторияға инеп китте. Рәфҡәт арттарынан эйәрҙе. Шулай танышып китте улар.

– Еңгәй, ә һин Ғилметдин ағайҙы ярataһыңмы? – тип һорай ҡуйҙы бер көн Зәкиә Гөлйемештән.

– Йәшәгәнебеҙгә инде алты йыл. Яратыуы ни тағы?.. – тип яуапланы көтөлмәгән һорауға йәш ҡатын. – Туҡта-туҡта, бикәсем, әллә күҙең төшөп йөрөймө берәй егет йоратына?..

– Бар шунда берәү... – Зәкиә еңгәһе тирәһендә бушҡа уралмай ине шул, серҙәш кәрәк уға.

– Йә?!..

– Урман яғынан...

– Ауылда бөткәнме ни улар?

– Был шундай сибәр, еңгәй... Бөҙрә баш, күҙҙәре әллә зәңгәр, әллә йәшкелт... Урманда ағас араһында күләгәлә йөрөгәнгә шулаймы икән әллә?.. Беҙҙекеләр бит ҡояшҡа ҡаҡланып бөткәндәр, самауыр торбаһы шикеллеләр... Хат яҙам тигәйне былай...

– И-и-и, бикәсемде, сабыр ғына итеп көтәһең инде хатын улай булғас, – Гөлйемеш Зәкиәне ҡыҫып ҡосаҡланы.

– Бәпес ҡасан була? – ҡыҙ Гөлйемештең беленеп торған эсен һыйпаны.

– Көҙгә табан, ахыры...

– Еңгәй, һин бәпесләп тик йөрөйһөң, хәҙер ней... теге... балнисҡа барып тапмаһаң да була бит...

– Кит әле, йүләр, теләһә нәмә һөйләп торма...

– Теләһә нәмә түгел... Аборт була ул... Беҙ ҡыҙҙар менән шулай һөйләшеп йөрөйбөҙ... – Еңгәй менән бикәстең серләшеүен эштән ҡайтып ингән Ғилметдин боҙҙо.

Зәкиә Матрайҙа тағы ике-өс көн торҙо ла, Түш ауылына, Рауза апайҙарына китте. Туғаны Заря менән улар яҡын серҙәштәр. Баязит еҙнәһе, башҡаларға уҫал булһа ла, балдыҙына ипле. Түштә Зәкиәгә иркен һәм рәхәт шуға ла.

Рауза – һатыусы. Юлдыбайҙағы эшен бында ла дауам итә. Ҡыҙҙарға ла өйрәтә һөнәре серҙәрен. Башың урынында буш сүлмәк булмаһа, эшләргә лә, тешләргә лә була был урында, ти ул.

– Асия апайың да, мин дә һатыусыбыҙ. Зарланмайбыҙ. Кешелә булмаған беҙҙә бар. Икмәкһеҙ ҙә ултырғаныбыҙ юҡ. Ҡороп ҡалғыр Хрущев ғәм халыҡҡа кукуруз ашатһа ла, беҙ бойҙай ононан өҙөлмәйбеҙ. Һиңә лә, Зәкиә, беҙҙең юлдан барырға кәрәк. Билдәләрең яҡшы, Өфөлә уҡып алырһың. Ҡағыҙ юллап бирәм, Мәҡсүтов еҙнәйгә инәм Аҡъярҙа, – тип Зәкиә ҡарындашына өгөт-нәсихәт уҡыны. Ысынлап та, бер көн кооператив техникумына юллама алып ҡайтты Рауза. Тик был тырышлығы юҡҡа ғына булды.

– Мин Зарина апай менән Салауатҡа уҡытыусыға уҡырға барам. Зөлхизә

Шарафулловна, һинән һәйбәт педагог сыға, тине, – тип икенсе яҡҡа бороп алып китте ул үҙ яҙмышын.

Салауат та насип булмай сыҡты Зәкиәгә. Зарина апаһы училищела эштәрен бөтөп ҡайтырға булғайны, әле бер генә имтихан биргән Зәкиә лә әйберҙәрен йыйып вокзалға китте лә барҙы.

Шулай ҙа ҡайҙа барып һуғылырға белмәгән ҡыҙға яҙмыш бәғерһеҙ булманы – Сибайҙа педагогия училищеһы асыла икән, тигән хәбәр таралды ауылда. Зәкиә таусылар ҡалаһына юлланды һәм уҡырға инде.

Алтмыш өсөнсө йыл Сәбиләнең ғаиләһе өсөн ҙур ваҡиғаларға бай булды. Ғилметдин башҡа сыҡты, Мәүлетдин кәләш алды, Зәкиә Сибайҙа асылған уҡытыусылар училищеһына уҡырға инде.

Мәүлетдин кәләште Матрайға алып ҡайтманы, Аҡъярға үҙе эшкә күсте. Шулай итеп, ун биш йәштәге елғыуар Нуретдин улы менән генә торҙо ла ҡалды Райман ҡарттың илле биш йәшлек тол ҡатыны.

## 22

Яңы 1964 йылды Ғилметдин менән Гөлйемеш Юлдыбайҙа Төхвәттәрҙә ҡаршыланы. Ҡышҡы салт аяҙ матур көн ине. Төнө лә һил һәм йондоҙло булды.

Ҡайнағаһы менән Ғилметдин төнө буйы йырлашып ултырҙылар. Төхвәт бигерәк моңайып:

*– Китә ҡаҙҙар, китә ҡаҙҙар,*
*Китә ҡаҙҙар Донбасҡа.*
*Мин дә уйлап торам әле*
*Шул ҡаҙҙарҙан ҡалмаҫҡа, –*

тип йырланы.

Оҙатҡанда ҡунаҡтарын ҡосаҡлап иланы, нишләптер. Бигерәк моңһоу тамамланды шулай байрам. Ауыр тойғо менән ҡайтты Гөлйемеш Юлдыбайҙан.

Барыһы ла Аллаһ ҡөҙрәтендә. Кешегә алда буласаҡтары, күрәсәктәре ҡараңғы. Белергә ынтылыу, күрәҙәселек – диндә тыйылған ғәмәлдәр. Барыбер, ҡайһы саҡ ниндәйҙер хикмәт менән әҙәм балаһының күңеленә тыйылған йыһан мәғлүмәте, һиҙемләү төшөрөлә. Төхвәттең дә уғата моңайыуы, болоҡһоуы, бәхилләшкән кеүек хушлашыуы юҡтан булмаған икән. Айырылышыуҙарына бер ай ҙа дүрт көн тигәндә, 4 февраль көнө, 36 йәшендә йөрәктән ҡапыл мәрхүм булып ҡалды Гөлйемештең яратҡан ағаһы, туғандарының ярҙамсыһы, күҙ терәп торған кешеһе.

– Атайым ҡайҙа? – Төхвәт төш мәлендә төп йортҡа килеп инде көтмәгәндә.

– Берәй йомошоң бар инеме әллә, улым, – Хәлимә баш балаһына аптырабыраҡ текләп ҡуйҙы.

Ошо мәлдә улы килене Дилбәр менән һыуға бара, ғәҙәттә. Колхоз урамынан Кесе Уза буйындағы ҡоҙоҡҡа төшәләр гел. Атай йорто эргәһенән үтһәләр ҙә, эш араһында ғына йөрөгәс, һуғылмайҙар, тәҙрәләргә ҡарап ҡына уҙалар.

– Күрәйем тигәйнем… Йомошом юҡ-юҡлыҡҡа, былай ғына, – тине Төхвәт яуап итеп. – Был кәртишкәгә нисәнсе йылда төшкәйнек әле? – Рам эсендәге фотоға төртөп күрһәтте.

Унда Хисмәттең ҙур ғаиләһе теҙелеп баҫҡан. Килене Дилбәр, ейәнсәре Лена ла бар.

– Ҡасан, тип ней, Хөрмәт армияға киткәйне... Ул ғына юҡ кәртишкәлә. Нисәнсе йыл була һуң?..

– Илле ете икән, әләйһә... Ваҡыт тигәнең үтә шул. Бәпес кенә булып ултырған Лена ла, ана, икенсе класта уҡып йөрөй...

– Ҡуйсы инде, улым...

– Ярай, әсәй, хуш. Инде, тип атайға әйтерһең. Кисҡорон бригадир Сәйфетдин ағайға барып сығырға кәрәк... Бесән алырға трактор биргәйне, риза итмәй булмай, – тип хушлашып сығып китте Төхвәт.

Бригадир Сәйфетдин менән ул иркенләп ултыра алманы. Араҡыны рюмкаларға ҡойоп, донъя хәлдәре хаҡында әңгәмә башлағайнылар ғына, ҡыҙ бала килеп инде.

– Сәйфетдин олата-а-а-й, и-и-ы-ы... – Бала һыңҡылдап илауҙан тыйылырға тырышып өндәште. – И-ы-ы... Атайым, әсәйемде-е-е үлтерә-ә-ә!.. Туҡма-а-а-й!.. Тиҙерәк барығыҙсәле. А-а-а!.. – Ололарҙың йыйынғанын да көтөп тормай, йылп итеп кире сығып китте хәсрәтле ҡыҙ.

– Ҡустым, һин ултырып ҡына тор. Барып киләйем. Эсеп алһа, шул Факилдың холҡо юҡ. Семйәһенә көн күрһәтмәй. Бахыр Сафура нисек түҙәлер... Мин хәҙер... Депутат булғас, ней, шулайтып йөрөтәләр, – кейенгән ыңғай һөйләнә-һөйләнә сығып китте йорт хужаһы.

Төхвәт үкһеп илаған баланың йөҙөнә ҡарап, уның кескенә йөрәгенә инеп оялаған ҡайғының ни тиклем сикһеҙ булыуын күрҙе һәм ҡапыл күңеле болоҡһоно, хатта түшенең һул яғы семетеп сәнсеп ҡуйҙы. Ауыл тормошо әллә ниндәйгә төрләнде лә ҡуйҙы һуңғы йылдарҙа. Һуғыш осоронда, унан һуңғы йылдарҙа аслыҡ-яланғаслыҡ менән айҡашҡан кешеләр ихласыраҡ, маҡсатлыраҡ ине. Эшләргә, табырға, астан үҙеңә лә үлмәҫкә, яҡындарыңды ла әжәл тырнағына бирмәҫкә – шуның менән яттылар, шуның менән иртә таңдан торҙолар. Тамаҡ икмәккә туйынып, өҫ-баш бөтәйеп ҡалғайны, ауылдаштарының күҙе тоноҡланды, эш-хәрәкәттәре һүлпәнләнде. Уның ҡарауы, кәйеф-сафа ҡороуға әүәҫләнеп алдылар. Тәүге мәлдәрҙә күңел өсөн генә бал ҡойоп ҡунаҡ була торғайнылар, хәҙер араҡыға ороналар, уныһы шул тиклем зәһәр, әзмәүерҙәй ирҙәрҙе аяҡтан йыға, аҡыл-зиһенен алып, иҫәрләтә, ә ҡайһы берәүҙәрҙе ғифриткә әйләндерә. Ундай ирҙән, атайҙан ҡатыны ла, балалары ла ыҙа сигә.

Эсеү хәҙер ҡунаҡта ғына түгел.囧 Эштә лә, урамда ла, һәр йортта ла. Кемделер риза итәм тиһәң – араҡы ҡой. Башҡа төрлө сара юҡ был хәлдә. Аҡса бирһәң, кешенең йөҙөнән көлгән кеүекһең. “Нисек инде, мин дуҫымдан, туғанымдан, ауылдашымдан аҡса алып торайым? Мине кемгә ҡуяһың? Крохобор түгел мин. Әйҙә, ултырт яртыңды. Бергәләп төпләп ҡуйһаҡ, күңелле әңгәмәләшеп ултырһаҡ – хаҡы шул ярҙамымдың”, – тиҙәр ауыл ирҙәре, үҙ баһаһын аҡсанан юғары ҡуйып. Төхвәт тә уйнағандан ярты ҡыҫтырып инеп ултырмай бригадир Сәйфетдин ағаһына.

Төхвәттең күҙ алдына тағы ла йәшенән тыйыла алмаған ҡыҙ бала килеп баҫты. Шул ыңғайҙа йөрәге ҡыҫылды. Был юлы нығыраҡ, оҙағыраҡ тотто низер күкрәге аҫтынан.

Юҡ, дөрөҫ бармай был тормош. Кеше башҡаса йәшәргә тейеш.

Ирке лә юҡ бит әҙәм балаһының. Төрлө яҡлап ҡыҫып алғандар ҙа ебәрмәйҙәр, бауҙа тоталар. Бәлки, шуға ла араҡыға йоғона халыҡ. Ҡайны ҡарты намаҙ уҡығанда уның ни ғәйебе бар ине һуң? Юҡ, ғәйепләнеләр,

халыҡ алдында рисауай иттеләр, эштән алдылар. Байғош ҡыҙ бала хәҙер атаһынан йәбер күрә, ә ҙурайғас уны ире төпәләйәсәк, дәүләт, партия һәр яҙыҡ аҙымы өсөн язаһын бирәсәк. Юҡ, тормош дөрөҫ бармай...

– Ыһ, – Төхвәт йөрәген тотто. – Һыу... Кем бар? Һыу... – тауышы саҡ-саҡ сыҡты.

– Ағай, нишләй? Ни булды? – төпкө яҡтан килеп сыҡҡан үҫмер өҫтәл япмаһын һыпырып ултырғыстан иҙәнгә ҡолаған иргә ҡото осоп ҡарап ҡатып ҡалды.

Төхвәтте йөрәк өйәнәге йыҡҡайны. Ҡайтып еткән өлкәндәр, ат егеп, дауаханаға алып киттеләр уны. Хәбәр дауаханаға ла барып еткәйне. Табип урам уртаһында ҡараны йөрәге тотҡан Төхвәтте. Уколдар эшләне.

– Саҡ ҡына һуңлаттығыҙ, Сәйфетдин ағай... Әрәм генә булды ла ҡуйҙы бит Төхвәт Хисмәтович, йәп-йәш көйө... – Табиптың көсһөҙлөктән күҙҙәре йәшләнде.

## 23

1964 йылдың 17 апрелендә Советтар Союзында донъя күргән барлыҡ гәзиттәрҙең – “Правда”нан алып иң төпкөл район баҫмаһына тиклем – беренсе битендә Никита Сергеевич Хрущевтың портреты, уға 70 йәшлек юбилейы менән ҡотлау һәм Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһында Указ баҫылғайны. “Тоғро ленинсы, совет халҡының лайыҡлы улы!”, “Партияға һәм халыҡҡа революционерса хеҙмәттең сағыу өлгөһө!” – ошондай яҙыуҙарҙан асылған гәзиттәрҙең тәүге бите.

– Тапҡандар кемгә Алтын Йондоҙ бирергә... Никитаның 70 йәшенә минең дә бүләк бар, әләйһә, – кисә тыуған быҙауға Никита тип исем ҡушам, – төшкө ашҡа ҡайтҡан Ғилметдин ҡулындағы гәзитте хатта иҙәнгә ташлап ебәрҙе.

– Ошоноң теле башына етә инде, – Гөлйемеш иренең башбаштаҡлығы менән килешмәне.

Мәскәүҙә, юғары даирәләрҙә лә, башҡа һүҙҙәр әйтелде КПСС Үҙәк Комитетының беренсе секретары, СССР Министрҙар Советы рәйесе, өс тапҡыр Социалистик Хеҙмәт Геройы, инде килеп Советтар Союзы Геройы тураһында.

Ҡотлауҙар иртәнән башланды.

Ленин тауҙарындағы хөкүмәт дачаһына Үҙәк Комитет Президиумы ағзалары һәм секретарҙары ағылды. Ҙур зал кешеләр менән шығырым тулды. Сағыу апрель ҡояшы уйнаған иконсе ҡатҡа күтәрелгән имән баҫҡыстан көттөрөп кенә байрамса кейенгән Никита Сергеевич киң йылмайып килеп төштө. Ҡунаҡтар уға уҡталды, кемуҙарҙан ҡотлауҙар яуҙырҙылар, ҡулын ҡыҫырға, ҡосаҡлап алырға ашыҡтылар. СССР Юғары Советы Президиумы рәйесе Леонид Ильич Брежнев Хрущевты күкрәгенә ҡыҫты һәм оҙаҡ итеп иреренән, битенән үпте.

Байрам өҫтәле артында ла Леонид Ильич тәүге ҡотлау һүҙен әйтте.

– Йөрәк дәрте ташып торған һеҙҙең сәйәси һәм дәүләт эшегеҙ, оло тормош тәжрибәгеҙ һәм тәрән аҡылығыҙ, сикһеҙ энергияғыҙ һәм революционер ихтыярығыҙ, ҡаҡшамаҫ принципҡа нигеҙләнгән тормошҡа ҡарашығыҙ барлыҡ коммунистар һәм бөтә совет халҡының тәрән ихтирамын һәм һөйөүен яуланы. Беҙ һеҙҙең менән ҡулға-ҡул тотошоп эшләүебеҙгә, партия

тормошон һәм дәүләт ҡоролошон ленинса хәл итеүегеҙгә ҡарап, һеҙҙән өлгө алыуыбыҙға сикһеҙ шатбыҙ... – Һүҙен тамамлап, оратор йәшләнгән күҙҙәрен һөрттө һәм юбилярҙы тағы ҡосағына алды.

Ихлас ҡул сабып алҡышлау, урындан ҡысҡырып әйтелгән матур ҡотлау һүҙҙәре оҙаҡ тынмай торҙо.

Торараҡ Леонид Ильичҡа тағы һүҙ бирҙеләр.

– Ҡәҙерле Никита Сергеевич! Партия Үҙәк Комитетының һәм СССР Юғары Советы Президиумының лайыҡлыларҙан лайыҡлы булған һеҙгә Советтар Союзы Геройы исеме биреү тураһындағы Указды уҡып ишеттереүҙе һәм наградаларҙы – Ленин ордены менән Алтын Йондоҙ миҙалын – тапшырыуҙы миңә йөкмәтеүенә сикһеҙ шатмын. Был яуаплы бурысты атҡарып, оло тулҡынланыу кисерәм... Һеҙ Сталиндың шәхес культын фашлауға ҡыйыу башланғыс бирҙегеҙ... Бөгөн партия һәм йәмғиәт тормошонда ленинса нормалар тергеҙелде, үлмәҫ Ленин рухы үҙенең тоғролоғо һәм сафлығы менән кире ҡайтты... – тине ул.

Орден менән миҙалды ил башлығы түшенә таҡҡас, уны тағы ҡосаҡларға һәм үбергә кереште.

Юбилей тантанаһының рәсми өлөшө Кремлдең Екатерина залында үтте. Советтар иленең юғары даирәләре, сит ил етәкселәре һәм илселәре йыйылғайны унда. СССР Министрҙар Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары Анастас Микоян совет етәкселәре исеменән ҡотлау һүҙе уҡып ишеттерҙе:

– Һөйөклө Никита Сергеевич, һеҙҙең барлыҡ ғүмерегеҙ – Ленин партияһына һәм совет халҡына эскерһеҙ хеҙмәт итеү өлгөһө. Һеҙҙең етәкселек аҫтында партия Ватаныбыҙҙы бығаса күрелмәгән иҡтисади, оборона һәм идеологик-сәйәси үрҙәргә күтәрҙе, халыҡтың тормош хәлен яҡшыртыуҙа ҙур ҡаҙаныштарға өлгәште...

Маҡтау телмәренең һәр бөгөлөшөн оҙайлы алҡыштар оҙата барҙы.

Ун биш минутҡа һуҙылды Анастас Микоян уҡып ишеттергән ода. Шунан сит ил делегациялары ҡотланы. Социалистик система ҡоролошона ҡараған бик күп илдәр үҙҙәренең иң юғары наградаларын Никита Сергеевичтың түшенә ҡаҙаны. Матур, ихлас үтте тантана. Бик ҡәнәғәт ҡалды юбиляр. Ул үҙенең тиңе булмаған лидер, дәүләт башлығы икәненә тағы бер тапҡыр инанды һәм алдағы эштәренә көс алды.

## 24

– Һөйөнсө, Сәбилә еңгәй, враш Фатима апай килә ята һиңә ҡунаҡҡа...

– Ошо Гөлгөнә һөйөнсөләр ҙә йөрөр инде... Башымдағы яулығымды һыпырып бирмәһәм...

Фатима Байгилдина – хәҙер яңынан Анастасия инде. Репрессияға дусар булғандарҙы аҡлай башлағастар, ул Ырымбур өлкәһендәге туғандарын эҙләп тапты. Егерме йылға өҙөлгән тормошон яңынан ялғап алып китте.

Оноттҡайны Фатима мәрйәлеген дә, тыуған төйәген дә, туғандарын да. Ул – башҡорт бисәһе Фатима, ике башҡорт балаһының әсәһе ине. Уларға тиклемдәре хәтеренән юйылғайны. Бүтәнсә тормошо булмағайны уның.

Сталин культын фашлаған тәүге хәбәрҙәр килә башлағас, ҡатын һиҫкәнде, әйләнгән һайын сәбәпһеҙ бошондо.

Һүҙ юҡ, золомдо фашлау – ил өҫтөндәге сиге булмаған ҡыуаныслы ваҡиға. Уға, репрессиянан ҡасып ҡотолған кешегә, ҡағылмай үтмәйәсәк үҙгәрештәр

еле. Шулай булғас, нишләп бошона, һипһенә ул? Изгеләрҙән-изге тыуған төйәгенә юл асыла ла баһа. Ҡан ҡәрҙәштәре менән күрешәсәк бит. Атаәсәһе, бер туғандары яҙмышын, ниһайәт, беләсәк, иҫәндәрен ҡосағына аласаҡ...

Тик... Фатимаға кирегә ҡайтыу кәрәкме һуң?..

Ошо һорауға яҡынлашып ҡуя ла, утҡа ҡағылғандай, артҡа сигенә ҡатын. “Эйе” тиһә лә, “юк” тип яуаплаһа ла ҡурҡыныс, өшәнес булып тойола аҙағы.

Егерме йыл ғүмере, алмалай йәшлеге ошонда үтте. Уларҙы йөкмәп Хмелевкаға сығып китә алмай Фатима. Йәшәлгән йылдары ошонда, башҡорт илендә, ҡаласаҡ. Иң ҡәҙерле нәмәңде ҡалдырып китеүҙәр, ай-һай, мөмкинме икән?

Ауырлыҡтар, ҡыйынлыҡтар төшһә башына, күңеле үҙ урынында булмаһа ул бит Аллаһы Тәғәләгә өндәшә хәҙер. Мөнәжәттәр сығарып йырлап йөрөй хатта:

*– Йәшәйем мин, иман нуры менән*
*Күңелдәрҙе сафлап, сафланып,*
*Сабырлыҡҡа, әҙәп һәм хаҡлыҡҡа*
*Һәр аҙымда киләм таянып.*

*Хаҡ Тәғәлә һаҡлап тора мине*
*Хыянаттан, йәбер-золомдан,*
*Изгелектән үрә тормошомдо,*
*Тайпылдырмай тура юлымдан.*

*Ауыр уйҙар баҫһа күңелемде,*
*Йыуанамын яңы таңымдан.*
*Бирсе, Хоҙай, түҙемлектәр миңә,*
*Айырмасы изге доғамдан.*

Хмелевкала кәрәге булмаясаҡ Фатиманың күңеленә һеңгән башҡорттоң матур теле лә, моңо ла, Хаҡ Тәғәләһе лә...

Ныҡ уйланды ҡатын. Төн йоҡоларынан яҙҙы. Ай яҡтыһында ҡыҙына оҙаҡ текләп тора, армиялағы улының фотоһына баға, шунан, уфтанып, кире түшәгенә ауа. Ул – ярай... Ә балалары?.. Тыуған тупрағынан, туған халҡынан уларҙы айырып алып китергә хаҡлымы әсә? Анастасия-Фатима үҙ ирке менән килеп сыҡманы сит тарафтарға. Замана елдәре, ҡан эскес ҡәһәрле власть ҡыуҙы, ҡасырға мәжбүр итте. Вилор менән Светланаға ундай яҙмыш теләмәй ул, ихтыярһыҙлап ситкә алып китә алмай уларҙы. Сит илдә мал да ерҫәй, тимәйҙәр бит юҡҡа.

Аҡыл менән йөрәк шулай айҡашты. Ярты йыл, йыл үтеп китте.

– Ҡыҙым, һин бынан күсеп китергә риза булыр инеңме? – Көтөлмәгән һорау менән баланы ҡурҡытып ҡуймайым тип, ипле генә өндәште бер көн Светланаға.

– Һуң, мин былай ҙа уҡырға китәм инде быйыл, – ун бише тулған үҫмер ҡыҙ әсәһенең тел төбөн аңламаны.

– Ысынлап та, һин китәһең бит... Орскиға барырһың. Ә мин янына... Ә ағайың армияла... Ир булған инде, үҙе хәл итер...

Йән тартмаһа ла, ҡан тарта шул. Халыҡ белмәй әйтмәй. Ошо һөйләшеүҙән

һуң ялғай алмаған остарҙы ялғаны ла ҡуйҙы Фатима. Йән ғазаптарынан арынды. Ҡан хәтере еңде унның күңел кисерештәрен. Сабырһыҙланып китте, хәрәкәте, һөйләше киҫкенләште. Кешеләргә мөнәсәбәте үҙгәрҙе шул мәлдән.

– Мынау Байгилдинаны әллә ен алыштырҙы инде, гәрбөйән булды ла киттесе, – тип аптыраны дауаханаға юлы төшкән халыҡ.

1957 йылдың йәйендә тыуған яғына барып әйләнде. Июлдә Светлананы Орск машиналар эшләү техникумына уҡырға индерҙе. Август аҙағында күсенеп китте.

Фамилияһы Байгилдина ҡалһа ла, ата-әсәһе ҡушҡан исемен кире алды.

Һағынмай түгел, һағына Матрайҙы, иренең туғандарын Анастасия-Фатима. Хәләлен, Зыяитдинен дә, ныҡ юҡһына.  Ике йылға бер тапҡыр булһа ла килеп әйләнә. Кире күсеп килерҙәй була ҡайһы саҡ. Ҡан тегендә тартһа ла, йәне бында унның. Бындағы эскерһеҙ ябайлыҡты, итәғәтле мөғәмәләне, ихласлыҡты һағына. Юҡ улар тегендә. “Нишләп шул басурмандарыңды әйләндерә лә һөйләйһең”, – тип әйтеп һала ҡайһы саҡ яңы әхирәттәре. Үҙе лә күреп йөрөй башҡа ҡәүем кешеһенә сыҡҡан ҡатындарҙың тормошон. Төрлөсә йәшәйҙәр. Күпселек осраҡта олоғая бара айырылышып ҡуялар барыбер ҙә. Ир генә бирә алған хәжәткә мохтажлыҡтан кейәүгә сығып, балалары таралышып бөткәс, кәрһеҙ нацмен ирен ҡыуып сығарғандарҙы рәткә осрата Анастасия-Фатима. “Түҙҙем... Етәр! Эшкинмәгән нәмәнең өҫтөн йыуып, тамағына ашатып ултырырға мин ялсы түгел”, – тип ебәрәләр. Табип булғас, ҡулынан бындай ир-ат байтаҡ үтте. Туҡмап йорттан ҡыуылған тешһеҙ ҡарт этте хәтерләтә улар: баштары эйелгән, кәүҙәләре ергә сүккән, күҙҙәре һүнгән, төҫ-ҡиәфәттәре, өҫ-баштары ныҡ таушалған, үҙҙәренә йомолғандар, бер һүҙ тартып алып булмай ауыҙҙарынан.

Урыҫҡа сыҡҡан мосолман ҡатындарына ла иғтибар итә. Уларҙың да йөҙөндә бәхет саҡҡыларын күргәне юҡ. Шуға: “Балаларымды ситкә алып китеп яңылышманыммы”, – тип уйлап ҡуя, хафаланып.

Анастасия-Фатиманың алтын сәсле Светлана ҡыҙы урыҫ мөхитен ҡабул итте. Ә Вилорҙы Башҡортостан тартты. Башҡортлоғо еңде уны. Армиянан һуң, ҡайтып, Сибайға эшкә урынлашты.

## 25

30-сы һанлы Октябрьский техник училищеһының армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан курсанттарын уҡыу йортоноң Ҡыҙыл мөйөшөнә йыйҙылар. Залда Байгилдин Мәүлетдин дә бар. Ул былтыр быраулаусы ярҙамсыһы һөнәре буйынса уҡырға инде бында.

Аҡъяр почтаһына ревизор-контролер итеп эшкә алғайнылар. Гел район буйлап сапты, ауылдарҙа айлап ятып эшләне. Элек яңғыҙ башына 80 һум да ҙур аҡса һымаҡ тойолһа, хәҙер алған 100 һум – таҡа-тоҡа ғына. Кәләше Светланаға ике тапҡыр аҙыраҡ сыға эш хаҡы.

Әмәлгә ҡалғандай, район гәзитендә, Октябрьский ҡалаһына бураулаусыға уҡырға саҡырып, иғлан килеп сыҡты. Ҙур аҡса алып эшләй икән нефтселәр. Ҡайныһы, кәләше менән кәңәшләште лә, тәүәккәлләп, юлға сыҡты ла китте. Сара тимер юл станцияһына ылау менән барып етте. Унан Силәбе аша Өфөгә поезд менән килде. Туймазыға ла тимер юлдан барҙы, ә артабан автобусҡа ултырҙы. Быйыл сентябрҙә ҡулына диплом ала инде.

Залда – иллегә яҡын кеше. Директор үҙе, ир уҡытыусылар, тағы ла

милиция полковнигы һәм КГБ офицеры бар. Бер ни ҙә аңламаған егеттәр бер-береһенә ҡараша һәм бер ни ҙә белмәгән мәғәнәлә иңбаштарын йыйыра.

– Хәрби хеҙмәт үткән ир-егеттәр булараҡ, һеҙгә мөһим дәүләт заданиеһы йөкмәтелә, – тип һүҙ башланы директор. – Барыһын да аңлатырҙар. Бер аҙнаға милиция ҡарамағына күсәһегеҙ...

Баҡһаң, ошо арала ҡалала мөһим сара үтә, егеттәргә халыҡ дружинниктары бурысы йөкмәтелә икән. Уларға иртәгәһе көндән, алмашлап, милиция менән берлектә урамдарҙы, баҡса-скверҙарҙы ҡарап йөрөү, 10 августа сара үткән урынды ҡамап тороу бурысы ҡуйыла.

Мәүлетдингә сираттағы дежур нәҡ сара үткән көнгә төштө. Нисек кенә сер итеп тотһалар ҙа, өс көн элек халыҡ араһында шаҡ ҡатырғыс хәбәр таралды. “Башҡортостанға Никита Сергеевич Хрущев килә, Октябрьскийҙа ла туҡтала икән”, – тип мөйөш һайын һөйләнеләр.

Ҡаланың Нефтселәр йорто алдындағы майҙандан көнө буйы кеше өҙөлмәне. Урам тулы халыҡ. Бинаға яҡын уҡ килмәһендәр, юғары ҡунаҡҡа үтергә юл ҡалдырһындар өсөн йыуан арҡан менән сик билдәләнгән. Дружинасы егеттәр, шул арҡанды тотоп, йәнле ҡойма шикелле баҫып тора. Армияла посҡа баҫҡандағы кеүек, икешәр сәғәт һайын алмашыналар.

Көн кисләүгә тартты. Халыҡ та, тәртип тотоусылар ҙа арыны.

Мотоциклда килгән милиция хеҙмәткәрҙәре күренде.

– Сәскәләр ташламаҫҡа!.. Сәскәләр ташламаҫҡа!.. – Яндауҙағы капитан рупор аша бер туҡтауһыҙ ошо һүҙҙәрҙе ҡабатлай ине.

Артынса асыҡ башлы ҡара хөкүмәт машинаһы пәйҙә булды. Ул Нефтселәр һарайына яҡын уҡ етеп туҡтаны. Халыҡ алға ынтылды, көслө баҫым дружинасы егеттәрҙе бер-ике аҙым сигенергә мәжбүр итте. Килеп еткән милиция хеҙмәткәрҙәре ярҙамы менән шул позицияла нығындылар.

Юғары түрәләр машинанан төштө. Хрущев беше ебәк туҡыманан тегелгән һарғылт-һоро костюмда, аҡ эшләпәлә ине. Башҡортостан етәксеһе Нуриев унан бер тотам ҡалманы. Саҡ ҡына алға сығып, ишаралап, эскә үтергә әйҙәне ололарҙан-оло ҡунаҡты. Халыҡ менән аралашыуға әүәҫ Никита Сергеевич, ҡул ғына болғаны ла, тупһаға күтәрелеп, ишектән инеп юғалды. Халыҡ, был нимә булды әле, тигәндәй, бер мәл генә өнһөҙ торҙо ла, геү килеп, алға ынтылды. Әйтерһең, махсус рәүештә әҙерләнеп килгәндәр – ҡайҙандыр бысаҡтар хасил булды. Бер нисә урындан ҡырҡып өҙөлгән арҡан хәҙер халыҡ өсөн кәртә түгел ине. Был тиклем тәүәккәллекте көтмәгән милиция, дружинниктар юғалып ҡалды. Шул арала кешеләр Нефтселәр һарайының тупһаһына барып етте.

– Иптәштәр, тәртипте боҙмағыҙ! Тынысланығыҙ!.. Кәңәшмәнән һуң Никита Сергеевич һеҙҙең менән осрашыуға сығасаҡ, – ҡаланың эске эштәр бүлеге начальнигы Рифат Мәүлиев, бинаның балконына сығып, рупорҙан ҡысҡырҙы.

Залда Башҡорт АССР-ы обкомы һәм хөкүмәте, нефть тармағы етәкселәре һәм баш белгестәре йыйылғайны. Илгә 46 миллион тонна нефть, йәғни сығарылған “ҡара алтын”дың 20 проценттан ашыуын биргән республикаға килеп ултыра Никита Сергеевич.

– Миңә, Уралда кукуруз насар үҫә, тигән булалар. Алдаҡсылар!.. Бөгөн Туй... Э-э-э... Туй...

– Туймазы, Никита Сергеевич, – Нуриев ярҙамға килде ил башлығына.

– Туймазыла кукуруз баҫыуын күрҙем... Хай-хай, ниндәй початоктар... Мына былай, – Хрущев, киң костюмының еңен өҫкә һыпырып ебәрҙе лә, беләгенең буйына еткереп, кукуруз сәкәненең миҡдарын күрһәтте. – Эйе, тап шулай, – тип өҫтәне, киң йылмайып.

Хужаның күңеле көр ине. Зал йәнләнеп геүләп алды был ихласлыҡҡа.

Шунан Хрущев кәңәшмәнең кукуруздан бик алыҫ темаға ҡағылыуын иҫенә төшөрҙө.

Партияның химия сәнәғәтен үҫтереү буйынса ҡарарын тормошҡа ашырыуҙа Башҡортостан мөһим урын тота. Бында нефть һәм тәбиғи газ табыла. Өфөлә, Салауатта ер майын тәрән эшкәртеү һөҙөмтәһендә яғыулыҡ ҡына түгел, ә стирол, пластмасса кеүек үтә кәрәкле сеймал да етештерәләр. Америкала нейлондан кейенеп йөрөй халыҡ. Үҙ күҙҙәре менән күрҙе ул. Арзан яһалма туҡыма совет халҡын баштан-аяҡ яңынан кейендереү өсөн бик тә кәрәк. Нефть һәм химия тармағы минераль ашламалар ҙа бирә. Ә был инде – мул уңыш нигеҙе һәм тамағы туҡ халыҡ, тигән һүҙ. Бигерәк тә кукуруз баҫыуҙарына килешер ине ул. Хәҙер элекке шикелле тупаҫ көс менән генә хакимлыҡ итеп булмай. Сталиндың был аҙымын үҙе фашланы. Башҡа юлдар, ысулдар кәрәк. Былтыр, ана, икмәк етмәй башлағас, алтынға алыштырып сит илдәрҙән иген алырға мәжбүр булдылар. Ике йыл элек Новочеркасск пролетарийҙары, “Ит, май бирегеҙ!” – тип, лозунгылар күтәреп, урамға сыҡты. Хатта: “Хрущевтың үҙен иткә оҙатырға!” – тип ҡысҡырғандар, тинеләр. Ҡорал менән баҫтырырға тура килде был боланы. Һалдат формаһы кейгән эшсе һәм крәҫтиән балалары эшсе һәм крәҫтиәндәргә атты – 26 кеше үлде, 87-һе яраланды. Аҙаҡтан бола күтәреүселәрҙе әйҙәп йөрөгән тағы 7 кешене суд ҡарары менән үлем язаһына хөкөм иттеләр, 105 дәүләт енәйәтсеһе 10 – 15 йылға төрмәгә ябылды. Совет кешеһе бер-береһенә атырға тейеш түгел. Был коммунизм идеологияһына тап килмәй. Шуға ла иң элек халыҡ туҡ, торлаҡлы һәм кейенгән булырға тейеш. Ул – Никита Сергеевич Хрущев – көнө-төнө тик шул хәстәр менән генә йәшәй. Тик күп осраҡта уның башланғыстарына аяҡ салалар. Саботаж күп әйләнә-тирәһендә!

– Нефть һәм химия беҙгә, совет халҡына, алға ынтылыш өсөн киң юлдар аса, иптәштәр!.. – Трибунанан, осоп-ҡунып, күренмәгән кемгәлер төйнәлгән йоҙроғон сөйә-сөйә бер сәғәттән ашыу телмәр тотто ил башлығы. Сығыш яһаусыларҙы әйләнгән һайын бүлде, һорауҙар бирҙе, белешмәләр алды. Ике сәғәт тигәндә кәңәшмә тамамланды.

Хрущевты артҡы ишектән имен-аман сығарҙылар ҙа, машинаға ултыртып Туймазыға алып киттеләр. Артабан юлы Өфөгә ята ине уның.

Октябрьский халҡы ҙур ҡунаҡтың уларҙан ҡасып китеүен белмәй ҙә ҡалды. Алданыуҙарын һиҙгәс, ныҡ тауыш ҡуптарҙылар, бинаға көс менән баҫып инергә уҡталдылар. Тик бер ни ҙә килеп сыҡманы. Сөнки был ваҡытҡа күрше райондарҙан милиция бүлектәре хеҙмәткәрҙәре, тәртип һаҡсыларының һанын бермә-бер арттырып, тулы составта ҡалаға килеп еткәйне.

Ҡала урамдары төн уртаһына ғына һилләнде. Майҙанда, яу яланындағылай, башы йәмшәйгән “Волга” машинаһы, юғалтылған аяҡ кейемдәре, эшләпәләр, туҙрап ятҡан сәскә гөлләмәләре ятып ҡалды. Барлыҡ әйберҙәрҙе милиция мотоциклдары яндауына йыйып һалдылар. Өс йөк булды ла ҡуйҙы.

– Ҡарале, мынау сәскәләргә тимер болт бәйләнгән, – Мәүлетдин, нишләп

ауыр икән тип, гөлләмәне таратып ебәргәйне, башы йәтеш бәшмәктәй тимер килеп төштө ергә.

– Башҡорттарҙан сәләм хаты булған да баһа был Никитушкаға, – тине кемдер ҡараңғынан.

**26**

Никита Сергеевич урынында ултырып сыҙаған етәксе түгел шул. Үҙ күҙҙәре менән күргеһе, үҙ ҡулдары менән тотоп ҡарағыһы килә бөтә нәмәне лә. Илдең һәр тарафында ла тик унынса булыуын, түрәләрҙең тик унынса эшләүен теләй. Шуға өҙлөкһөҙ юлда. 1964 йылдың июнь башында – Ленинградта; 4 – 18 августа Һарытау, Волгоград, Дондағы Ростов, Төньяҡ Осетия, Татарстан, Башҡортостан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстанда; 14 сентябрҙә – Кубинкала; 23 – 25 сентябрҙә Байконурҙа (Тюратамда) булды. Ҡайҙа осто, ҡайҙа поезда барҙы, ҡайҙа карапта йөҙҙө. Арыуҙы ла, талыуҙы ла белмәне.

Сит ил башлыҡтары менән дә аралашырға ярата ул. Ил төбәктәренә сыҡмай торған арала Мысырға (9 – 25 майҙа), Дания, Швеция, Норвегияға (15 июнь – 6 июлдә) сәйәхәт ҡылды.

– Йөрөһөн, әйҙә, беҙгә ҡулайыраҡ та шулай, – тине Леонид Ильич Брежнев дәүләт именлеге комитеты рәйесе Владимир Ефимович Семичастный менән сираттағы osрашыуында. – 70 йәшендә ҡандай ҙурлап ташланыҡ та, хәҙер уны эштән ситләтеүҙе халыҡҡа нисек аңлатырбыҙ икән?.. “Тәрән аҡылығыҙ, сикһеҙ энергияғыҙ һәм революционер ихтыярығыҙ, ҡаҡшамаҫ принципҡа нигеҙләнгән тормошҡа ҡарашығыҙ тәрән ихтирам һәм һөйөү яуланы”, – тип донъя яңғыраттым бит... Тфү, ошо һөйәкһеҙ телде... Владимир Ефимович, әйҙә, башҡа юлын ҡарайыҡ. Әйтәйек... Э-э-э... Мәҫәлән... Э-э-э... Теге ней, кешенең... бәлә-ҡазаға ла тарыуы ихтимал бит. Авария, мәҫәлән...

Әңгәмә ялғанып китмәй, Үҙәк Комитеттың беренсе секретары урынбаҫары һүҙҙәре һауала эленеп ҡалды.

– Был аҙымға бер ваҡытта ла бармаясаҡмын, – тине Семичастный оҙаҡҡа һуҙылып киткән паузанан һуң. – Уны... Һин әйткән бәлә-казаны, нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?..

– Мәҫәлән, самолеттың һауала шартлауы ихтимал...

– Юҡ-юҡ, башҡаса был турала бер һүҙ ҙә ишетергә теләмәйем. Беренсене пленум аша урындан алырға, тип алдан һөйләштек, мин шул позицияла ҡалам, – тип тамамланы әңгәмәне дәүләт хәүефһеҙлеге өсөн яуап биргән генерал.

Етмеш йәшен тултырған, ун бер йыл дауамында донъялағы иң ҙур, иң ҡеүәтле дәүләтте етәкләгән Никита Сергеевич Хрущев, ауыл Советы рәйесенән алып Политбюро ағзаларына тиклем совет чиновниктарынан һәм партия функционерҙарынан, барлыҡ халыҡ ҡатламдарынан айырылып, үҙ донъяһында ғына йәшәгәнен аңламай ине әле. Магазин хаҡтарын ҡырҡа күтәргәне, икмәктән өҙгәне өсөн ике йыл инде уны телдән төшөрмәй ҡарғайҙар. Район, өлкә һәм республика етәкселәре бөтмәгән реформалар, совнархоздар өсөн яратмай Кремль хужаһын. Политбюро, Үҙәк Комитет ағзалары беренсе секретарҙың уларҙы эшкә һанамағанын, тупаҫлығын, мин-минлеген өнәмәй. Күҙе бар һәр кем күрә – бөйөк һәм ҡеүәтле дәүләт сит илдәрҙән йылдан-йыл нығыраҡ ҡалыша бара.

“Үҙгәрештәр кәрәк” тип юҡ-юҡ та әйтелгән ярым-йыртыҡ һүҙ остоҡтары,

ниндәйҙер фекергә ялғана барып, февраль айҙарында “Хрущевты төшөрмәйенсә тороп, илдә хәл үҙгәрмәйәсәк” тигән рәүешле теүәл бер һығымтаға килтерҙе. Йоҡлай алмай уйланып ятҡанда, кеше аяғы һилләнеп, кабинетта кистәрен яңғыҙ ултырғанда, ял итеп, тәбиғәт ҡосағында иркенләп йөрөгәндә яһаны уны үҙе өсөн һәр кем. Ауыҙ асып әйтә торған нәмә булмағанға күрә, эскә йомолдо.

Үҙәк Комитет секретарҙары Николай Викторович Подгорный менән Леонид Ильич Брежнев икәү-ара Завидово һунарсылыҡ биләмәһендә йыш ҡына аулаҡлап сетерекле мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшергә күнеккән. Әлбиттә, һауала эленеп торған, ил ағаларының күңелен өйкәгән, эстән кимергән мәсьәлә лә бер мәл ҡуҙғатылырға тейеш ине. Һәм шулай булды ла.

– Беренсенең артабан да етәксе булып ҡалыуы ил өсөн үтә хәүефле, – тип башланы һүҙҙе Брежнев үтә ипле, үтә һаҡ тауыш менән. Подгорный, әллә ҡасан көткән хәбәрен ишеткән кеүек, ҡыҙыҡһыныуы менән, хатта дәртләндергән шикелле үҙенә ҡарағас, ҡыйыуыраҡ дауам итте һүҙен. – Атом һуғышына килтерә яҙған Берлин, Кариб кризистары тик уның арҡаһында сыҡты. Илдә лә тыныслыҡ юҡ. Реформалар артынан реформалар – болғап болғайбыҙ кешеләр тормошон. Халыҡ асыулы шуға. Новочеркасскиҙа пролетарийҙарҙы аттыҡ... Оҙаҡҡа бармаҫ, бәлә сығыр башыбыҙға... Иптәштәрҙең ҡылын тарткылап ҡарарға ине, Коля. Ни уйлайҙар икән был турала?

Подгорный, бер килке тынып торғас, әйтелгән фекер менән риза булыуын, илде ҡотҡарырға кәрәклеген әйтте. Ил етәкселегенең иң юғары даирәләренә ингән ике арҡадаш эргә-тирәләге иптәштәренең кәйефен белергә, иң элек дәүләт именлеге комитеты рәйесе Семичастныйҙы үҙ яҡтарына ауҙарырға килеште.

Шулай башланғайны дәүләт түңкәрелешенә әҙерлек.

Беҙ тоҡта ята буламы – имеш-мимештәр Никита Сергеевичҡа барып етте. Тәүге сигнал сентябрь уртаһында булды.

– Подгорный менән Брежнев һиңә ҡаршы эш алып бара, – тине улы Сергей уға. – Игнатовтың элекке һаҡсыһы Галюков иҫкәртте был турала.

– Подгорный менән Брежневмы? Шелепин, Игнатов, тиһеңме тағы? Ышанмайым! Улар төрлө кешеләр. Бер ваҡытта ла бер төптән эшләй торғандары юҡ, – тип, улына ышанманы Хрущев.

Ике көн үтте. Кискеһен, ғәҙәттәгесә, Ленин тауҙарындағы дачаның Мәскәү йылғаһына ҡарап торған баҡсаһында беседкала ултырғанда, Никита Сергеевич был һүҙгә кире ҡайтты.

– Һинең хәбәреңде Подгорныйға әйткәйнем, һеҙҙең башығыҙға ундай фекер ҡайҙан килде ул, тип көлдө лә ҡуйҙы, – тине улына.

– Никита Сергеевич, шулай ҙа тикшереп ҡарарға кәрәк мәғлүмәтте. Кем әйтмешләй, ут янмай төтөн булмаҫ, – тип әңгәмәгә ҡушылды киске сәйгә ингән Хрущевтың тоғро арҡадашы Анастас Микоян.

– Әтеү, ал, әйҙә, был эште үҙ өҫтөңә, – тип фатихаһын бирҙе уға хужа.

Башҡаларҙан шул тиклем юғары күтәрелгән Никита Сергеевич Хрущевтың ергә төшкөһө, ғәйбәт тыңлағыһы, йомошсо малай кеүек эргәһендә ураланған, мыҫҡыллы һүҙҙәрен, әсе төрттөрөүҙәрен, аяуһыҙ әрен “ыһ” та итмәй йотҡан Политбюро ағзаларының, Үҙәк Комитет секретарҙарының ығы-зығыһын

белгеһе лә, күргеһе лә килмәй. Брежнев, Подгорный... Шуларҙан ғына ҡурҡырға ҡалды инде хәҙәр!.. Маңҡа малайҙарҙан!..

– Иртәгә ялға китәм. Дилбегәне бушатмағыҙ мин юҡта... Шуны ла белеп ҡуйығыҙ: барыһын да беләм... Һеҙ, дуҫҡайҙарым, миңә ҡаршы niҙер уйлайһығыҙ, ахырыһы. Ҡарағыҙ уны, бер-бер нәмә сығарһағыҙ, эт көсөктәре кеүек иҙеп ташлаясаҡмын! – 30 сентябрҙә, Пицундаға ялға китер алдынан, Үҙәк Комитет Президиумы ултырышын йыйып, Никита Сергеевич шулай тине, оҙон өҫтәл артында ултырыусыларға һынамсыл текләп.

**27**

Ултырыштан баштарын баҫып сыҡты Президиум ағзалары. Сөнки улар фетнәлә ҡатнашырға ризалыҡ биргәйне инде.

Брежнев үҙенә урын тапманы. Фашлаған! Бөтәһен дә белә хужа! Ошо уйҙан йөрәге өҙөлөп төшә, сәстәренең төбө земберләп китә, аҡылы томалана.

– Коля, зинһар, иртән иртәрәк инеп сыҡ әле ЦК-ға, – кемгә өндәшергә белмәй, үҙе кеүек фронтовик, партия Мәскәү ҡала комитетының беренсе секретары Егорычевҡа мөрәжәғәт итте ул.

Етәкселәр араһында йәш һаналған Егорычев (44 йәш) иң тәүгеләрҙән булып Хрущевҡа ҡаршы төркөмгә ҡушылғайны.

– Коля, Хрущев пленум әҙерләгәнебеҙҙе белә... Уға барыһы ла мәғлүм! Ул беҙҙе юҡ итәсәк!.. Аттырасаҡ!.. – Брежневтың ирендәре ҡалтыранды, күҙҙәре йәшләнде. – Бөтәһен дә белә! Аямаясаҡ!..

Сал Кремлдең ҙур бер кабинеты хужаһы, бала кеүек, һыҡтап илап ебәрҙе.

– Ҡуйығыҙсы, Леонид Ильич, һөртөгөҙ күҙ йәштәрегеҙҙе... Беҙҙе бер кем дә аттырмаясаҡ. Белеп ҡуйығыҙ быны!.. Пленумға әҙерлек – хилафлыҡмы ни ул? Енәйәтме? Партияға ҡаршы беҙ нимә эшләйбеҙ? Бер ни ҙә эшләмәйбеҙ! Пленумға әҙерлек кенә бара. Яҙыҡ юлға төшкәнбеҙ икән, иптәштәр төҙәтер, яңылышаһығыҙ, тиерҙәр. Шул ғына... – Утты-һыуҙы кискән өлкән иптәшенең шул тиклем дә ҡаушауына, ҡурҡыуына иҫе китеп аптыраны Егорычев.

– Юҡ, һин уны насар беләһең, ул бөтәбеҙҙе лә аттырасаҡ... – Брежнев һаман тынысланманы.

– Теге заман түгел хәҙер, – тип саҡ ипкә килтерҙе уны Егорычев.

Партия пленумына әҙерлек тамамланды. Фетнәселәр Үҙәк Комитет Президиумы ағзаларының барыһын да үҙ яҡтарына ауҙарыуға өлгәште. Көнө лә билдәләнде – 13 октябрь. Инде Пицундала ялда ятҡан Хрущевты саҡырып ҡайтараһы ғына ҡалды.

Боласылар үҙҙәренең сираттағы кәңәшмәһенә Брежневтың фатирында йыйылды.

– Юҡ, юҡ, мин шылтырата алмайым, кисә генә һөйләштем уның менән. Һиҙенеп ҡуйыр эштең ниҙә икәнен, – Подгорный телефон трубкаһына ҡағылыуҙан ҡырҡа баш тартты.

– Леонид Ильич, һеҙ ҡалаһығыҙ инде, – тинеләр бүлмәләгеләр бер тауыштан.

Брежнев ҡапыл ағарынып китте. Ирендәре күгәренде. Һуйырға алып китеп барған башмаҡ кеүек, йәлләнгес, төшөнкө ҡарашын арҡадаштарына йүнәлтте.

– Пицунда сымда, йә инде, Леонид Ильич, – Семичастный асыуланып өндәште был юлы.

– Никита Сергеевич, беҙ бында пленум йыйырға ҡарар иттек... Һеҙҙең ҡатнашыуығыҙ мотлаҡ... – Быны ҡалтыранған тауыш менән саҡ-саҡ әйтә алды Брежнев. – Юҡ, юҡ, мәсьәлә бик етди, һеҙһеҙ булмай... Никита Сергеевич, пленум саҡырылған инде... Был дөйөм ҡарар... Һеҙҙең ҡатнашыуығыҙ мотлаҡ! – Иптәштәренең тәүәккәл йөҙө уға көс бирҙе, тауышы ҡатыланды, етди төҫ алды.

Брежнев трубканы һалды ла хәлһеҙләнеп диванға ултыра төштө.

– Йә!..

– Ярай, тине. Микоян менән уйлашырбыҙ, тине...

Хрущев Мәскәүгә ҡайтырға булды. “Брежнев ныҡ тулҡынлана, күрәһең, ысынлап та, етди тартҡылаш бара ЦК-ла. Әгәр, Сергей әйткәнсә, мәсьәлә уның яҙмышына ҡағыла икән, әллә ҡасан 1953 йылда Берияны ҡулға алған шикелле уны ла зинданға ябып ҡуйған булырҙар ине. Ундай ҡурҡыныс һиҙелмәй, тимәк, эш башҡасараҡ тора”, – тип уйланы фетнә ҡорбаны.

“Внуково” аэропортына самолет көн үҙегенә килеп төштө. Ғәҙәттә, уны Политбюро ағзалары тулы составта оҙатып ҡала һәм ҡаршы ала, ҡайҙа китһә лә, ҡайҙан ҡайтһа ла. Был юлы ике генә кеше һерәйеп баҫҡан. Былдай башбаштаҡлыҡҡа Хрущевтың үте ҡайнаны.

– Башҡалар ҡайҙа? – Ҡул биргән Семичастныйға тәүге һорауы шул булды уның.

– Улар Кремлдә... Һеҙҙе көтәләр, – тине генерал.

Никита Сергеевич үҙенең кабинетына инде. Ишек яғына 24 баш боролдо. Сал төшкән сәстәр, олпат сырайҙар, етди ҡараштар.

Коммунистар Партияһы Үҙәк Комитетының беренсе секретары рәйес урынына ултырҙы. Быға тиклем булмағанса ғәжәп тынлыҡҡа, тура ҡараштарға, һауала эленеп торған көсөргәнешкә иғтибар итте Никита Сергеевич.

– Йә, ниндәй мәсьәләне минһеҙ ҡарай алмайһығыҙ? Нимә тураһында һүҙ?.. Тыңлайым, – тип өндәште хужа Үҙәк Комитет ағзаларына һәм ағзалыҡҡа кандидаттарға, Үҙәк Комитет секретарҙарына.

– Һигеҙ йыллыҡ нимә була ул, тип һорай иптәштәр. Был турала бер кем менән дә кәңәшләшмәй 22 сентябрҙә Президиум ултырышында сығыш яһанығыҙ... – Брежнев тәүге мәсьәләне күтәрҙе.

Артабан совнархоздар, обкомдарҙы икегә бүлеү тураһында аңлатмалар талап иттеләр. Шунан Хрущевтың етәкселек стиленә күстеләр. “Асылда коллектив етәкселек беҙҙә юҡ. Мин, мәҫәлән, үҙем өс йылдан ашыу Президиум ағзаһы булып торам һәм ошо ваҡыт эсендә бер тапҡыр ҙа үҙ фекеремде әйтә алманым. Тик аҡырыу, әр генә ишеттем. Сыҙап торғоһоҙ мөхит бында. Күҙ алдыбыҙҙа Хрущевтың шәхес культы тыуҙы. Сталин культынан бер ҙә кәм түгел ул”, – тип, был ҡаңғырыҡтың төп асылы тураһында РСФСР Министрҙар Советы рәйесе Геннадий Иванович Воронов әйтте башлап.

Ауыҙҙарына һыу уртлаған шикелле йөргән Үҙәк Комитет Президиумы ағзаларын алмаштырғандар тиерһең – барыһын да иҫтәренә төшөрҙөләр, йөҙөнә бәреп әйттеләр. Хәлдең ни тиклем киҫкенлеген аңламаған Хрущев тәүҙә ҡысҡырып еңергә маташты, шунан, һәр ғәйепләүҙәргә репликалар ташлап ултырҙы ла бер мәл тынып ҡалды. Дүрт сәғәт буйы туҡтамай тәнҡитләнеләр беренсе секретарҙы.

Президиум ултырышы иртәгәһенә дауам итте. Тағы бик күп ғәйепләүҙәр ишетте Никита Сергеевич. Уның осо ла ҡырыйы ла булмаҫ кеүек тойолдо уға. Сталинға тиңләп ҡуйҙылар, ил эсендә булған барлыҡ етешһеҙлектәрҙе, халыҡ-ара кимәлдәге юғалтыуҙарҙы уның иҫәбенә индерҙеләр.

– Хрущевты биләгән бөтә вазифаларҙан да бушатырға! – Брежнев Президиумда яңғыраған барлыҡ сығыштарҙы шулай йомғаҡланы.

Бына башын баҫып ултырған Хрущевҡа һүҙ бирелде.

– Һеҙҙең менән көрәшергә минең көсөм юҡ. Теләмәйем дә... Кем минән йәбер күргән, бөтәгеҙ алдында ла ғәфү үтенәм... Миңә ҡайҙа йәшәргә үҙегеҙ хәл итегеҙ, ниндәй ҡарар булһа ла ризамын... Мәскәүҙән күсеп китергә лә хатта... Пленумда күҙ йәштәренә быуылып сығыш яһарға йыйынмайым, ғариза тексын әҙерләгеҙ, ошонда уҡ ҡул ҡуям... Башҡа төрлө хәл итмәй (төрмәгә япмай, атырға хөкөм сығармай, тип аңланы арҡадаштары был һүҙҙе) отставкаға сығырға рөхсәт иткәнегеҙ, тәнҡитегеҙ, күп йылдар бергә эшләгәнебеҙ өсөн рәхмәт... – тине ул төшөнкө тауыш менән.

Ә пленум 14 октябрҙә киске алтыла асылды.

Ашығыс саҡырыуҙың сәбәбен белә алмай йонсоған юғары йыйында ҡатнашыусылар – СССР Юғары Советы депутаттары, төбәктәр һәм эре предприятиелар етәкселәре, академиктар, генерал һәм маршалдар – сәхнәгә Хрущевтың Үҙәк Комитет ағзаларының артынан эйәреп иң аҙаҡтан сыҡҡанын күргәс, эштең айышына төшөндө. Үҙенән башҡаны һанға һуҡмаған ил етәксеһе ситкәрәк ултырҙы ла, ҡулын эйәгенә терәне.

Суслов ике сәғәт дауамында доклад тотто. Уны бүлдереп, залдан Хрущевты ҡәһәрләгән тауыштар ишетелде. “Ул бөтә үзбәк халҡын мыҫҡыл итте!” – тип ҡысҡырҙы, трибунаға яҡынлап, Үзбәкстан Юғары Советы Президиумы рәйесе Насреддинов.

Ғаризаһын уҡып ишеттерҙеләр.

Көн тәртибенең икенсе мәсьәләһенә күсеп, Подгорныйҙың тәкдиме менән бер тауыштан Леонид Ильич Брежневты партияның беренсе секретары итеп һайланылар.

**28**

Магазиндан аптырап ҡайтып инде Гөлйемеш. Аптырарлыҡ та шул. Иртән Асия еңгәһенә ҡалдырған икмәк моҡсайын алайым тип өйҙән сығып күп тә үтмәне, Файза ҡарсыҡ осраны.

– Ҡарале, килен, бөгөн әллә беҙ белмәгән берәй байраммы? Һайлау көнөндә лә алып булмаған индий сәйе, аҡ икмәк тулысы лавкала, – тине ул, ғәжәпләнеп. – Бер кем белмәй ни булғанын, аптырағандан һорайым шуға...

Гөлйемеш аҙымын тиҙләтте. Магазин алдында халыҡ гөж килә:

– Бөгөн касманавтарҙы осорғандар, радия һөйләп тора... “Восток” була торғайны, бынығы – “Восход”, тейсе. Өс кешене бер ыңғай осорғандар. Мәйтәм, әллә улар, Хоҙайҙың һаҡлыҡ ыскылатын табып, беҙгә аҡ ҡаластар ебәреп ятамы, хи-хи...

– Ауыҙыңдан ел алғыр, улай шаяртып ней...

– Әтеү быға тиклем булмаған нәмәләр ҡайҙан килеп сыҡҡан? Йә, әйт...

– Ҡайҙан беләйем мин...

Магазин эсендә лә күңелле шау-шыу. Асия еңгәһе моҡсайын буш көйө бирҙе:

– Йәнең теләгәнен үҙең һайлап ал, килен.

Өсөнсө көн тигәндә генә был муллыҡтың сәбәбе асыҡланды – баҡһаң, ил башлығы алмашынған да баһа. “В связи с преклонным возрастом и ухудшением состояния здоровья...” – тип ҡош телендәй генә хәбәр яҙҙылар гәзиттәрҙә Хрущевтың етәкселектән китеүе тураһында.

– Әһ-ә-ә, бушаткан урынды! Осорғандар!.. – тип шат йөҙ менән килеп инде эштән Ғилметдин. Һамаҡлап, тыпырҙатып баҫып, иҙән уртаһында бейеп тә алды. – Хәҙер ҙә мандымаһаҡ, йәшәргә лә кәрәкмәй был донъяла!

Шул ыңғай башындағы фуражкаһын иҙәнгә күтәрә һуҡты ир.

Быҙаулыҡ ярына терәлеп ултырған, ул замандағы башҡорт ауылы күҙлегенән ҡараған хәлдә лә йәтешерәктәр рәтендә торған йортта йылдан ашыу йәшәй инде Ғилметдиндең ишле ғаиләһе. Дүртенсе балаһы Руслан ошонда тыуҙы. Сабыйға Ғайзулла мулланан Нурислам тип аҙан ҡысҡыртҡайнылар ҙа, атаһы, ул иҫкергән исем, Руслан була улым, тип метрика алып ҡайтты.

Аҙбарҙа – һыйыр, башмаҡ, быҙау, ике һарыҡ бәрәстәре менән, тиҫтәләп ҡош-ҡорт. Биш йәшлек Фәүзиә, ҡапҡа башына менеп ултыра ла, көноҙоно урам яңғыратып йырлай. Хәмдиә менән Рәсим етәкләшеп кенә ҡартәсәләренә барып киләләр көн һайын. Сәбиләнең дә ике өй араһында эҙе һыуынмай. Юлдыбайҙан каникул ваҡытында Зәйтүнә менән Көнһылыу ҡунаҡҡа килеп ҡайта. Йыш ҡына Хәлимә ат егеп килеп төшә. Мул күстәнәстәре менән хәл белергә. Камзул кеҫәһенән тәм-том өҙөлмәгән, балалар телендә ҡартөләсәй йөрөгән Хәлимәнең әсәһе Хәҙисә ҡарсыҡ та йыш ҡунаҡ бында.

Ғилметдин көнө буйы эштә. Гөлйемеш ошо бәләкәй генә йорт хужалығын алып бара, балалар баға. Быйыл “Башҡорт” совхозы мул уңыш йыйып алды. Ғилметдингә тейгән премияға бер ҡат кейенделәр, һауыт-һаба, йорт йыһаздары алдылар.

Тормош башҡаға төрләнергә тора хәҙер. “Хозрасчет индерәләр совхозда, эшеңә ҡарап өҫтәп түләйҙәр, план өсөн премия яҙалар бының был яғына”, – тип ҡыҙығып һөйләп ултырҙы Ғилметдин бер көн. Ҙур йыйылыш булған икән, шунда әйткәндәр райондан килгән кешеләр. Элгәре көн ауыл халҡын да клубҡа йыйып алдылар, күп итеп хәбәр һөйләнеләр. Икәүләшеп барҙы Ғилметдин менән Гөлйемеш. Йорттарға яңынан электр сымы һуҙабыҙ, урамдарға һыу үткәрәбеҙ, асфальт һалабыҙ, яңы клуб, мәктәп, балалар баҡсаһы, ике ҡатлы йорттар төҙөйбөҙ, тип күҙ ҡыҙҙырып һөйләне олпат түрәләр. Берәүһе хатта Өфөнән килгән икән, тип әйттеләр аҙаҡтан.

– Былайға киткәс, беҙгә лә ҙурыраҡ өй ҡарарға кәрәк, бисәкәй. Аҡсаһын һәйбәтләп бирә башлаһалар ней, алырбыҙ... Ана, ер һөрөүгә айырым түләйбеҙ, тип торалар, – Ғилметдин шулай дәртләнеп атланы ҡайтыуға.

Йәш ирҙе түрәләрҙең вәғәҙәләре ҡанатландырҙы, матур һүҙҙәре яҡшы тормошҡа өмөт уятты.



**Иҙрис НОҒМАНОВ**

# УРЫҪ БАҘЫНДА УН ДҮРТ КӨН

Хикәйә

**Беренсе көн**

Ҡайҙалыр, яҡында ғына, мылтыҡтан аттылар.

Йөрәген усына йомоп тигәндәй килгән ҡалтағай саңғылы ир – сәйер юлсы – һиҫкәнеп, йыуан ҡайын артына ышыҡлана һалды. Ҡурҡыуҙан түгел, һаҡлыҡ өсөн. Бындай ғына атыш тауышын ишеткәне бар уның, хатта унан былайырағын, хатта күп тапҡыр, әммә ләкин барыбер шикләндерә. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙе өсөн әллә ни тырышып ятмай, дөйөм эш тип борсола. Уны эләктерә ҡалһалар, ошоға ҡәҙәре шундай ыҙалыҡ, ауырлыҡ менән башланып, атҡарыла килгән барлыҡ тырышлыҡтары “һә” тигәнсе юҡҡа сығасаҡ. Арҡаҙаштарының бар уй-ниәттәре емерелеүендә ул, тик ул ғына ғәйепле булыр. Шуның өсөн, эҙ сығармайым, тип егеүле аттан да баш тартты, яҙғы өҙәремдә теҙ өҫтөнән епшек ҡар ярып ҡайҙа йәйәү, ҡайҙа саңғыла барырға булды. Алағарай осоро бит, ҡары ла, көнө лә ышанысһыҙ. Тәүгеһе “шәкәрләнеп” ятһа, икенсеһе ҡырҡҡа үҙгәрергә генә тора. Яҙғы көн – ятаҡыл. Шулай ҙа иртәнге туңғаҡта әле йөрөргә була. Һәм бына, инде иллалла менән килеп еттем тигәндә...

Суғыртмаҡлы ҡарт олон ышығындағыға оҙон-оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Ул ниндәйҙер аңлайышһыҙ шыштырлауға, кемдеңдер ауыр ушылдауына әйләнеп ҡарай һалды. Ҡаршыһындағы ҡуйы ҡайынлыҡ менән ҡапланған

---

*Иҙрис Ноғоманов кесе йәштән ижадҡа тартыла, нәҫерҙәр, уймаҡ хикмәттәр, хикәйәләр яҙа, һуңынан повестарға, романдарға тотона. Уның әҫәрҙәре абруйлы баҫмаларҙа донъя күрә, “Ауыл хикәйәләре”, “Әсәйгә бүләк” “Ғүмерлек һағыш” тигән китаптары баҫыла. “Һаҡмарбаш” исемле тарихи романы айырыуса ныҡ танылды.*

*2014 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

түбәләстән мөгөҙһөҙ үгеҙ болан төшөп килә ине. Көпшәк тәрән һырынтыла, гүйә, йөҙөп бара. Тын алған һайын борхоп, морононан ҡанлы күбек сәселә. Күренеп тора – хәле мөшкөл. Әллә артынан бүре төшкәнме? Юҡ икән, был яҡтарҙа марал тип аталған хайуандың ҡабырғаһынан да ҡан һарҡа. Яралы. Тимәк, баяғы атыуҙың һөҙөмтәһе булыуы мөмкин. Тимәк, кемдер һунар итә. Беҙҙең юлсы, күкрәген киреп, иркенерәк һуланы: ябай бер һунарсы унының өсөн ҙур ҡурҡыныс тыуҙырмаҫ.

Күп тә үтмәй, дерелдәгән тирле тәненән ҡайнар боҫ бөркөлгән үгеҙ туҡтап ҡалды. Ҡалтыранып оҙаҡ тора алманы ул, күҙҙәрен алартып, әкрен-әкрен генә ҡабырғаһына ауҙы ла, сәйер ыһылдап, ғазаплы өн сығарҙы. Боландың артынан ҡыуған “әжәл” дә тиҙ арала пәйҙә булды. Ул ағас артындағын шәйләмәй. Унын ике күҙе ҡорбанында. Түңәрәк, ҡоңғорт йөҙөндә ҡәнәғәтлек: ит булды былай булғас! Биленән кәкре бысағын ала һалып, йәнгә талаша башлаған кейекте салып ебәрҙе. Уныһы, хуш, яҡты донъя, хуш, тыуған ерҙәрем, тигәндәй, яҙғы ҡуръяҡ – боҙға һыҙырылып бөткән нәфис алғы тояҡтарын болғаштырҙы ла тынып ҡалды. Муйыны тапҡырындағы селт аҡ ҡар шабырлап аҡҡан ҡан ҡыҙыллығына буялды. Ризыҡҡа яҙһа, ысынлап та, байтаҡ ит булды. Бигерәк тә “Яҙ көнө ялман ҡойроғо ла аш” тигән мәлдә.

“Юлсы” йәшенеп торған урынынан сығып, арыуҙан ҡорбаны өҫтөнә лыпын ултыра төшкән һунарсыға яҡынлашты. Уң ҡулы терһәге ямаулы иҫке генә көпө кеҫәһендә. Унда, ул-был хәл була ҡалһа, тип дуҫтары көсләп тигәндәй тотторған револьвер. Ҡорал хужаһын яҡларға һәр ваҡыт әҙер. Саңғыларын сисеп ҡалдырған “юлсы” шуның өсөн дә әллә ни шөбһәләнеп торманы, бата-сума тура атланы. Бар донъянан ҡәнәғәт даланлы һунарсы шунда артына әйләнде. Ҡабаланмай ғына, тыныс ҡына.

– Һин кем?! – урта йәштәрҙәге ирҙең бөркөт ҡарашы етди, ҡуңыр күҙҙәре уҫал ҡыҫыла төшкән. – Туҡта, атам!

– Өлгөрһәң, ат, – “юлсы” тыныс ҡалды.

Текләшеп тора биргәс, яҙғы тут һуҡҡан ҡоңғорт сырайҙары буйтым яҡтыра төштө. Ахыры бер-берен сырамыттылар.

– Мин бит һине санала килә тип көтәм... – һунарсы йылмайғандай итте.

– Ана нисек, хатта көтә инеңме? – “юлсы” әллә ысынлап, әллә яһалма, ғәжәпһенде. Таныһа ла шикләнде буғай. Бәлки, һынап ҡарамаҡсылыр.

– Кисәге көндән бире.

– Төпкөл урманда ла көтәләр икән...

– Ништәп йәйәү? – һунарсы тегене ишетмәгән кеүек һораны.

– Атта йөрөп ялҡытты, – тип мәғәнәле көлөмһөрәне “юлсы”.

– Ә, аңданым, ат юлы шик тыуҙырыуы бар.

– Хаҡ әйттең, зирәк икәнең.

– Ни сәбәптән һуңданың тием? – быныһын һунарсы тупаҫыраҡ өндәште.

– Ғәфү ит, тотҡарлыҡ килеп сыҡты, ауылда – ҡыҙылдар.

– Бүре йыҡҡыр хаяһыҙҙар, ҡайһы арала өлгөрәләр тиһең. Кисә генә – тегендә, бөгөн – бында, – һунарсы асыу менән төлкө кәпәсен сисеп битен һыпырҙы, – шәйләмәнеләрме былай?

– Ағаслыҡ ҡырына инеп өлгөрҙөм.

Электән бөтөнләй таныш-белеш түгел был икәү бына ошолай, күптәнге әшнәләр кеүек, һөйләшеп китте. Хәйер, таныш булмаһалар ҙа, бер-береһе

хаҡында бик яҡшы хәбәрҙар ине улар. Икеһенең дә түшендә күрер күҙгә ентекләп ҡарағанда ғына күренер тамға – тейешле урынға баҫылған ағас төймә. Шулар булмағанда, бер-беренә сәләм дә бирмәҫтәр ине шәт.

– Алыҫ бараһыңмы? – тип рыя ғына ҡыҙыҡһынды йонсоуы соғол йөҙөндә сағылған “юлсы”.

– Пашти килеп еткәнең инде.

– Ә быны ҡайҙа итәң? – юлсы боҫорап ятҡан болан түшкәһенә ымланы, – ошонда ташлап китмәйеңдер бит?

– Һин нимә? Анауындай ризыҡты...

– Аңланым.

– Хәҙер киләләр... минең эҙҙән. Һуйып алырҙар.

– Киләләр?! Кемдәр? – “юлсы”ның тауышында хәүефләнеү билдәһе ишетелеп ҡалды, сырайы ҡараңғылана төштө.

– Ҡурҡма, үҙебеҙҙең кешеләр – уландарым. Шулай ҙа күҙҙәренә салынмай тороуың хәйерле булыр. Киттек.

Ҡарағай ярҡа келәтле, һаҙ мүге менән мүкләп уҫаҡтан буралған йәтеш кенә аласыҡ эсе йылы, хатта бер аҙ тынсыуыраҡ та ине. Арып-талып ҡайтҡан кешенең хыялы. “Юлсы” еүеш кейемдәрен сисеп түрҙәге ағас сөйгә элде.

– Мейес артына, сыуалға йәй, тиҙерәк киберҙәр, – хужа кеше уның билендәге һәлмәк кенә тойолған күн билғауға иғтибар итте. Бик ҡәҙерләп һаҡлағанға оҡшай. Әммә төпсөнөп торманы.

Бәләкәй генә тәҙрә уйымы тәңгәлендәге иҫке өҫтәлгә, сыжлап, оло еҙ ҡомған менеп ҡунаҡланы. Һүҙ ҡушышмай ғына сәй шөрпөлдәттеләр, һыуһын ҡандырҙылар. Икеһе лә нык сарсаған, ярайһы талсыҡҡан ине. Төрлө шифалы үләндәрҙән торған ҡайнар сәй көстәрен тиҙ ҡайтарҙы, телдәрен асты.

– Ул-был әйберҙәре булыр, тигәйнеләр, – аласыҡ хужаһы ҡыҙыҡһыныуын белдерҙе.

– Бер-ике көндән килтерерҙәр. Ә әлегә ошо тирәлә ышыҡ урын йәтешләй тороу кәрәк, ҡар-һыу төшмәҫлек итеп.

– Урын? Ошонда бармаймы ни?

– Бында хәүефле. Юл эсе.

– Исеме генә юл инде. Ҡыштың көнө бында эт тә йөрөмәй.

– Һин, мин йөрөп ятабыҙ ҙа...

Кинәйә менән ҡыҫҡа ғына итеп ишек шаҡынылар. “Юлсы” етеҙ хәрәкәттәр менән сыуал артындағы көпөһөнә үрелде.

– Борсолма, мосафир, үҙебеҙҙекеләр, – тине һунарсы тыныс ҡалып, шулай ҙа ҡыҙыҡһынды. – Кем унда?!

– Атый, итте әпкилдек.

– Ана, келәткә элеп тороғоҙ бер ал һанын, аҙаҡ үҙем йүндәрмен. Ҡалған түшкәһен апҡайтығыҙ. Ҡарағыҙ, һаҡ булығыҙ, – ишекте асмай ғына шулай өндәште, – сәй эсеп тормайығыҙҙыр бит? – Быныһын исем өсөн генә һорағандай булды.

– Туҡталмабыҙ, шәй, ҡараңғы төшә.

– Яҡшы улайһа. Тура һуҡмағыҙ, үҙебеҙҙең урау юлдан ҡайтығыҙ. – Үҙебеҙҙең һүҙенә баҫым яһап әйтелде.

– Атай, тегендәрәк ниндәйҙер ят саңғы эҙҙәре...

– Ярай, ярай, барығыҙ, берәй һунарсы йөрөп яталыр.

“Юлсы” атай кешенең уландары менән шулай ҡорораҡ мөғәмәлә итеүенә аптырай биреп ҡуйҙы. Уныһы ошоно һиҙгәндәй аңлатма индерҙе:

– Әлегә белмәйерәк торһондар тиеүем. Һинең турала.

Бынаһы ла хаҡ.

Апрель кисе оҙон булһа ла, ҡараңғыһы ҡапыл ябырыла. Шуның өсөн һунарсы ҡабаланды. Сәйҙән һуң әле һыуынырға ла өлгөрмәгән итте турап, алдан әҙерләнгән ағас мискәлә тоҙланылар. Тәһәрәтләнгәндән һуң йәнәш баҫып йәстү, фитр үәжеб намаҙҙарын башҡарҙылар.

– Бына шулай йәшәп ятабыҙ инде беҙ – башҡорттар, – тип ҡуйҙы ҡәнәғәт хужа, “һуҡыр” шәмде һүндереп йоҡларға ятҡас.

– Нисек һуң йәшәйеш-мәғшиәт, кем?.. – ҡараңғы мөйөштән күн билғауын башы аҫтына һалған “юлсы”ның ҡарлыға төшкән йонсоу тауышы ишетелде.

– Нөғәмән булырмын, Ҡорманай бай тоҡомо, – һунарсы үҙен шулай таныштырҙы, әммә ҡайтарып тегеһенең исем-шәрифен һорашып торманы. Кәрәк тапһа, мөҙҙәте еткәс үҙе әйтер. Бәлки, әйтергә ярамайҙыр ҙа, кем белә.

– Ана нисек, хатта бай тоҡомонан, – ҡунаҡ ғәжәпһенде.

– Элекке бай... – тегеһе асыҡлыҡ индерҙе.

– Ә хәҙер?

– Хәҙер барыһы ла тигеҙ, тиҙәр. Бөтөнләй үк бөлдөрмәһәләр ҙә, тигеҙҙәнеләр. Эшһеҙ тора алмағанын да, эт ялҡауын да, тип-тигеҙ итеп.

– Нөғәмән ағай, ошолай оҡшаймы әллә? Ауыр түгелме?

– Ауыр тип, бирешмәйбеҙ ҙә ул. Башҡорт борон-борондан шулай көн иткән инде. Тик мынауы болаһы ғына...

– Шойҡаны тейәме?

– Теймәгән ҡайҙа. Үҙәге тап беҙҙең төйәктә булһын да.

– Кемдәре күберәк ыҙалата?

– Барыһы ла килешкән, – хужа кеше көрһөндө, – бер көн үҙҙәрен аҡ тип атағандары килеп баҫа, икенсе көн – ҡыҙыл атлылары. Былары бигерәк ҡаты ҡылана. Яңылыш ҡына берәй һүҙ өсөн дә атып йығырға күп һорамайҙар. Үҙәккә үткәрҙеләр инде, хаиндар.

– Ә тегеләре?

– Улары, нисектер, миһырбанлыраҡ кеүек. Шулай ҙа, атмаһалар ҙа, барыбер шарылдатып талайҙар.

– Миһырбанлыраҡ, тиһең инде?.. – “юлсы” уйсан шымып ятты.

– Уныһын да әйтер инем...

– Үҙең ни менән мәшғүлһең?

– Мына ошонда туҙ һыҙырып, дегет ҡайнатып ятам. Был ҡараңғы төбәк “Урыҫ баҙы” тип атала.

– Ни сәбәптән “Урыҫ баҙы”?

– О-о, уның тарихы-ы. Бүгәс батша менән Салауат батыр яуы осорона барып тоташа.

– Шулай уҡмы? Ҡыҙыҡ икән, һөйлә әле.

– Тейешле-тейешһеҙгә ныҡ йәбер-золом күрһәткән алпауытының башын тишә һуғып ҡасҡан бер меҫкен урыҫ, яуаптан ҡурҡып, бынан үрҙәрәк ташландыҡ айыу ояһында боҫоп ятҡан. Күпмелер торараҡ, уға икенсеһе

килеп ҡушылған. Уларҙы йәйләүгә сыҡҡан башҡорттар табып һыйындырған. Тәүгеһенән хатта ауылыбыҙҙа урыҫтар араһы таралған...

– Ә икенсеһе?

– Икенсеһе – боҙоҡ әҙәм, аяу белмәҫ Тимаш баярҙың күҙ-ҡолаҡ шымсыһы булып сыҡҡан. Ҡуйынына алған ауыл халҡына ҡырғын һала яҙған. Ошаҡ еткереп. Ярай әле, кешеләр Уралтауға ҡасып ҡотолған. Карат әтрәте шулай ҙа ауылға үрт һалып киткән. Аңлайһыңмы, ҡыш башында? Төбәктең атамаһы шул мәлдән "Урыҫ баҙы" булып ҡалған.

– "Урыҫ баҙы", Тимаш баяр... Эйе, урыҫтың да төрлөһө бар...

– Ә яҫтығың аҫтындағы? – тип ҡыҙыҡһына ҡуйҙы Нөғәмән туранан-тура, – бәлки, берәй ышаныслыраҡ урынға йәшерергәлер?

– Алтын, – "Юлсы" шулай уҡ ябай ғына итеп дөрөҫөн әйтте, гүйә, бөтәһе лә алтын ҡәмәр тағып йөрөй, – булырмы һуң урындың ундайы?

– Урманда иң ышаныслы урын – ағас ҡыуышы.

– Ысынлап та, нисек әлегәсә баш етмәгән?..

Ошолай байтаҡ ваҡыт әшнәләрсә һөйләшеп яттылар. Әммә үткән көн ауырлығы баҫтымы, икеһе лә бер юлы тигәндәй әүен баҙарына китте.

***

"Юлсы" әлеге сәфәренә сараһыҙлыҡтан сығып китте. Уны, кеше үлтереүҙә ғәйепләп, артынан ҡыҙылдар ҡыуа килә. Ырымбур төрмәһенән имен-аман ҡотолғандан һуң башҡорт иленең төпкөлөнә китте. Көрәште дауам итеү маҡсатында булдыҡлы ғына ике кешеһен алдан ебәреп Тамъян-Ҡатай биләмәһендә ойоштороу эштәрен башланылар. Унда Әхмәт ауылы кешеһе, исеме ярайһы билдәле, бик шәп, үҙе белемле, үҙе абруйлы мулла йәшәй икән, ана шуны үҙҙәренең яғына ауҙарып ышаныслы хеҙмәткәр итеп тәғәйенләнеләр. Уныһы, тиген илһөйәр түгел икән, тотам да ҡарышып торманы, шунда уҡ ризалығын бирҙе. Ул ғынамы, үҙе артынан тағы ике кешене әйҙәне.

– Тик шуны бел, ағай, эш үтә лә хәүефле, "тегеләр" һиҙеп ҡалһа, аяу көтмә. Үҙеңде лә, ғаиләңде лә... – тип киҫәтте уны "Юлсы", асығын әйтте.

– Кафыр илеңде, ер-һыуыңды тапап, бысратып йөрөгәндә, хәүеф-мәүефенә ҡарап торош юҡ инде, уландар, – Юламан мулла уны шулай бүлдерҙе, – бер беҙҙең генә баштан үтмәгән, үҙегеҙ ҙә шул хәлдә лә баһаң.

Шуның менән һүҙ бөттө. Артабан "Юлсы"ны был төбәккә лә, алдан һөйләшеп ҡуйған буйынса, Юламан ебәрҙе. Ул ошо ҙур булмаған ауылдың имам-хатибы ла икән. Башта "Юлсы", ниндәйҙер муллаға ышанып булырмы, тип икеләнә биреп тә ҡуйғайны, әммә уның үҙен күреп һөйләшкәс, шик-шөбһәләре юҡҡа сыҡты. Бөтмөр зат булып сыҡты уныһы. Килешелгәндәрҙең барыһын хәстәрләп ҡуйған. Уңайлы ғына аулаҡ фатир йүнләгән, бәйләнеш тотор өсөн ныҡлы кешеләрен тапҡан, хатта ана урманда ла ышыҡ урын әҙерләгән. Быныһы хаҡында "Юлсы" өндәшмәгән дә ине бит әле. Урынеренә барғас хәстәрләргә уйлағайны. Эйе, алдан күреүсән булып сыҡты Юламан. Ундайҙар менән эш итергә була.

## Икенсе көн

"Юлсы" тороу менән эште ҡайғыртты.

– Йә, ҡайһы урынға ҡорабыҙ ышыҡты.

– Хәҙер күрһәтәм. Эскә сәй йылыһы төшөрәйек тә.

Ҡулына балта тотҡан һунарсы үҙенә генә билдәле ергә, төлкөнән ҡасҡан ҡуян ише, “эҙ яҙлыҡтырып” алып барҙы: ҡар кисеп бер нисә шыр һаҙлыкты, ҡуйы ҡайын ҡатыш ҡарағай урманын үттеләр, тау аша төштөләр.

– Бына ошонда, – һунарсы түңәрәк ағаслыҡ эсендә туҡталды, – алдан белгән кеүек һайлап ҡуйған инем.

– Алдан күрә белеү – ҙур һәләт, – “юлсы” уны мәртәбәләп ебәрҙе.

Урын үтә лә уңайлы ине, “юлсы”ға оҡшаны. Оҙаҡҡа һуҙмай ғына лапаҫ-түбәлек эшләнеләр, ян-яғын да, өҫтөн дә ҡыйыҡлап һыҙырылған әҙер туҙ менән яптылар. Ишек тә туҙҙан. Эсен ҡарҙан таҙартып, уртаға йомро ағастан ҙур ғына өҫтәл ишараты торғоҙоп ҡуйҙылар. Төш мәленә ниәт иткән эштәре тамам булды.

– Ҡорамалдар имен-аман ғына килеп етһә... – тип ҡуйҙы “юлсы” ҡайтып барышлай.

– Ауылды сығып алыуы ғына инде, – һунарсы уны тынысландырғандай итте, – был яғына зым-зыя юҡ булаһың да ҡуяһың.

– Бирһен Хоҙай.

– Ә әйберҙәрегеҙ ауыр булырмы?

– Байтаҡ һәлмәк.

– Йөкмәп кенә килтергәндә тием.

– Ат-санаһыҙ килеп сыҡмаҫтыр.

Һүҙ күсермәле типография хаҡында бара ине. Ҡулайлама, ысынлап та, ауыр ғына, уйылтып яткан ҡарҙа уны йөкмәп килеүе...

– Ярай, – тип ҡуйҙы Нөғәмән аҙ ғына уйланып ултырғас, тубыҡтарына һуғып, – тәүәккәлләрбеҙ. Ат менән.

Ҡулдан әйләндерелә торған типографияны әҙер урынға урынлаштырыуы ауырлыҡ тыуҙырманы. Тик бына ауылдан аласыҡҡа ат юлы килеүе хәүефле. Ураu-урау йәшертен юлдан булһа ла.

***

Кис арманһыҙ булып түшәккә ауғас та йоҡо алманы. Әллә ҡасанғы ла, күптән түгел дә булып үткән ваҡиғалар теҙмәһе күҙ алдына килеп баҫты...

Йәшертен юлдар... Күп, бик күп булды бит улар “юлсы”ның ошоғаса тормошонда. Нимәнән башландымы? Барыһына ошо көтөлгән түңкәрелеш “ғәйепле”. Атай малы етерлек, өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ тигәндәй, ҡырын төшөп, өйөндә генә тик ятырға ла мөмкин ине, Нөғәмән ағай әйтмешләй, бай тоҡомона. Юҡ шул, тәбиғи булмышы быға юл ҡуя буламы. Ваҡиғаларҙың ҡайнап торған үҙәгендә ҡатнашып өйрәнгән. Ундай әҙәм нисек итеп, ни йәне менән сыҙап ултырһын өйөндә. Бөтә ил, ярты ғаләм шаулап-гөрләп торғанда...

Хәлдәр ҡырҡыулашып, кафыр заттары бөтөнләй шашына башлағас, алағарай баштарында кәңәш ҡорҙолар ҙа, болдарын билдәренә бәйләп, бер кемдең башына ла инеп сыҡмаҫ Һаҡмар йылғаһы буйындағы Әхмәт ауылына юлланырға ҡарар ҡылдылар. Алтын-көмөштән торған болдо үҙең менән алып йөрөү, әлбиттә, хәүефле, әммә ләкин уны ҡалдырып китерҙәй кешеһе табылманы.

Ул хәҙер төрмәнән ҡасҡан һанында. Ә ниңә, ысыны шул, төрмәнән ҡасты. Тик бына үҙҙәрен “ҡыҙыл” тип атағандар, ул беҙҙең командирҙың башына

етте, ул мотлаҡ тотолорға тейеш, тип артынан ҡыуа төштөләр. Йәшерен-батырыны юҡ, ҡан еҫен тойоп алған ҡыҙылдар ҡулына эләкһәң ундай ғәйепләү менән иҫән ҡотолоу хаҡында уйлама ла. Командир һынлы командирҙың башы өсөн баштан һыйпамаҫтар. Ошоно асыҡ аңлай һәм тотолмаҫ өсөн барыһын эшләйәсәк. Уны ҡармаҡлау өсөн Мәскәүҙең үҙенә саҡырҙылар бит, итәғәтле генә итеп. Әммә ҡарт төлкө тоҙаҡтың ҡайҙа, ҡайһы һуҡмаҡҡа ҡоролғанын шунда уҡ һиҙеп алды…

**Өсөнсө көн**

Белгән кешегә нимә, баҫма ҡорамалды көйләп ебәреү менән эшләй ҙә башланы. Станокты килтергән, ир ҡорона ингән Динислам “дегетсе ярҙамсыһы” сифатында бында ҡалды. Оло тоҡтағы ҡағыҙ йомарлам төргәктәрен йәйеп, ҡырҡҡыслап ниндәйҙер өндәмәләр баҫырға тотондолар. “Юлсы” уларҙы, листовкалар, тип атаны. Нөғәмән һүҙҙең ни аңлатҡанын белмәһә лә, эске аңы менән төшөнә: бик кәрәкле, мөһим ҡағыҙҙар булырға тейеш. Шулай булмағанда, “юлсы” башын ошо рәүешле ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып йөрөр инеме? Тимер-томорон ошо тиклем ҡәҙерләр инеме? Ҡатынын да шул ҡәҙәре наҙламайҙыр әле…

– Һин, Нөғәмән ағай, исемемде әйтмәгәнгә үпкәләмәйеңдер бит, – “юлсы” көтмәгәндә шулай тине. Эш уртаһында.

– Юҡ, ҡустым, миңә һинең исем нимәгә? Кәрәк булһа әйтер инең, әйтмәйһең, тимәк, кәрәк тапмайың, тимәк, ярамай.

– Хаҡ фекерләйең, – “юлсы” уға мөләйем ҡараш ташланы, – мәле еткәс, барыһы тураһында ла белербеҙ ҙә, ишетербеҙ ҙә, күрербеҙ ҙә. Ә хәҙергә мине Ғариф тип атап тор. Уңайлыҡ өсөн.

– Ғарифулла… Һәйбәт исем…

Тәмле ит еҫе бөрккән киске ашҡа ултырыуҙарына ишек шаҡынылар. Юҡ, аласыҡты һелкетеп ныҡ дөһөрләттеләр. Көтөлмәгәнлектән ҡуҙғый төшкән Нөғәмән ишеккә барҙы.

– Кем?..

– Атый, иртә таңдан ҡыҙылдар бында килергә йыйына. Имеш, һиндә кемдер йәшенеп ята…

– Аһ, хаяһыҙҙар! Ҡайҙан белдең?

– Лоҡман ҡустым һөйләшеп торғандарын ишеткән.

– Мәлендә килеп һәйбәт иттең, – атай кеше келәне күтәрҙе.

Аласыҡҡа ҡыҙара-бүрткән үҫмер килеп инде.

– Был минең өлкән улым – Хәйривара, – тип таныштырҙы Нөғәмән, – үҙебеҙ Вара тип кенә йөрөтәбеҙ. Ышаныслы малай.

– Күреп торам. Тик малай түгел, егет бит инде. Шәп егет.

– Нисек килдең?

– Саңғы менән тура һуҡтырҙым, Һаҡмар үҙәне буйлап.

– Һәйбәт иткәнең. Сәйгә туҡтайыңмы?

– Әҙер булһа, ҡуй тимәҫ инем, – билғауын сисә башлаған Вара йылмайып ҡуйҙы, – ныҡ сарсатты.

– Килгән юлыңдан ҡайт, хәүеф-хәтәр тойолһа, артабан да шулай хәбәр һалып торорһоҙ. Бушҡа сабауыллап йөрөмә, сит күҙҙәргә салынмаҫҡа тырыш, иң мөһиме – миндә, Динислам ағайыңдан башҡа, бер кем дә юҡ. Аңлайһыңдыр? – тиргә батҡан улы, ара-тирә Ғарифуллаға күҙ һирпештереп,

сәй шөрпөлдәткән арала Нөғәмән оҙайлы ғына өгөт-нәсихәт уҡып алды. – Исем өсөн ана тоҙаҡтарҙы йөкмәп ал, бер-бер хәл була ҡалһа, ҡуяндан ҡайтып киләһең...

– Ҡыҙылдарҙы бында Хәйрулла эйәртергә йыйына, ти.

– Хәйрулла? Мөртәт, емтек көҫәгән ҡоҙғон ише һаман шул ҡылығын ташламай икән. Заттары менән ошаҡ еткереп тамаҡ туйҙырҙылар.

Тире табанлы ауыр саңғыларын эләктергән Вара егет ҡараңғылыҡҡа инеп сумғас та аласыҡҡа инделәр.

– Йә, нисек итәбеҙ? – Ғариф Нөғәмәнгә һораулы ҡарашын төбәне.

– Кәрәк булһа, тип уйлап ҡуйғаны бар ине тағы ла...

– Әйт.

– Бынан биш саҡрымлап ары, Һаҡмар үрендә, минең дегет ҡайнатҡан йәнә бер соҡор бар. Шунда ет тә, бер-ике саҡрым үткәс, юлыңдан кире кил. Йылға буйына төш, ҡалыныраҡ көрттө өңөп ин, ҡарағай ылыҫы йәй ҙә, ауыҙҙы эстән көпләп, шым ғына ят. Башҡа яҡҡа эҙ сығарма.

– Ә һин? Ә Динислам?

– Мин бында ҡалам. Һиңә ышыҡ булып. Динислам – минең ярҙамсым. Беҙ бит туҙ һыҙырабыҙ, дегет ҡайнатабыҙ...

Ғарифулла уға һоҡланыулы ҡараш атты.

Еүеш ҡар аҫтында һалҡыныраҡ, әммә тыныс. Уйларға, фекерләргә, хәтер ептәрен тағатырға бер кем ҡамасауламай. Рәхәт.

***

Өфөнән иң яҡын дуҫы Әмир менән иреү ҡарҙы ярып санала ҡуҙғалдылар. Яман күҙҙәргә салынмаҫ өсөн төн ышығында ғына. Ҡатай кешеләре тау башҡорттары кейемен табып бирҙе. Юл аҙабы – гүр ғазабы, һин дә мин килә ятҡанда аттары байтаҡ киң бер йылғаның ыуала башлаған боҙона баҫыуҙан ҡырҡа баш тартты. Күпме генә этләнмәһендәр, төшөрә алманылар аҡыллы хайуандарҙы алдаҡсы боҙға. Ылауҙы кире боророға тура килде. Артабан йәйәү киттеләр. Ул тирәләр күпмелер дәрәжәлә таныш ине. Ҡатыны ошо яҡтыҡы. Таныш-белештәре лә байтаҡ. Хәлдәре бөтөп шуларҙың береһенә барып инеүҙәренә, хәрби кейемдәге бер әҙәм пәйҙә булды һәм үҙенең артынан эйәреп барырға ҡушты. Ҡәтғи рәүештә. Шымсылары ихатаға ингәндәрен күреп ҡалған икән, хәйерһеҙ.

Төрлө хәйләһен, һылтауын табып билдәрендәге алтынды йәшерә һалдылар. Сөнки тентеп уны таба ҡалһалар, эштәре харап. Комиссарға алып килделәр. Унһы һәр төрлө һорауҙары менән оҙаҡ ваҡыт ныҡ йөҙәтте, әммә артыҡ бер ни ҙә әйттерә алманы. Бер бүлмәгә индереп яптылар ҙа һаҡсы ҡуйҙылар. Әмәлгә ҡалғандай, һаҡсы – элекке ат ҡарағы – уларҙы таныған булып сыҡты (Хоҙайҙың хикмәте!). Урыҫтар киткәс тә ул ҡолаҡтарына шыбырланы:

– Ҡурҡмағыҙ, уҙамандар, ебәрмәһәләр, мин ҡотҡарырмын...

Һай башҡорт саялығы! Үҙе тураһында уйлап та бирмәй. Артабан хатта егеүле ат таптылар. Тик ҡыуаныстары оҙаҡҡа барманы, Сермән ауылына тиклем генә булды. Ағиҙелдең боҙо тош-тош урындан уйыла башлаған ине. Шығай тигән ауылға тағы йәйәү килеп инделәр. Төйәк табып йоҡлап ятҡандарында дөһөрләп йылғаның боҙо китә башланы. Шау-гөр килгән ауыл халҡы төнгө тамашаға ашыҡты, ә быларҙа тамаша ҡайғыһымы, арып

арманһыҙ булғандар. Аҙағыраҡ ишетеүҙәренсә, арттарынан һиҙеп ҡалған милиция төркөмө төшкән булған, әммә ҡайнап ятҡан йылғаны аша сыға алмағандар. Шулай итеп, үҙ йылғалары, быуаттар буйына башҡорттоң терәге лә, туйындырыусыһы ла, һаҡлаусы-яҡлаусыһы ла булған, мәле менән уҫал, мәле менән миһырбанлы Ағиҙел уларҙы тағы бер бәләнән йолоно. Ғәжәп бит! Ә ҡурҡыу белмәҫ ат ҡарағы һаҡсының яҙмышы билдәһеҙ ҡалды...

## Дүртенсе көн

"Хаяһыҙҙар" оҙаҡ көттөрмәне, ҡораллы биш һыбайлы таң һарыһынан килеп тә етте. Башына йондоҙло бүрек кейгән ҡыҙмаса, шуның өсөн дә ҡыҙмалы урыҫ Нөғәмәндең яғаһынан алды.

– Кемде йәшереп тотаң бында, ҡарт ишәк?! Ҡайҙа ул?! – күҙҙәре самаһыҙ аҡайған урыҫ ҡулында алтатарын уйнатты.

– Күреп торам, шыпа тәрбиәң юҡ икән. Һин минең улым тейеш кешеһең, иптәберәк ҡыланһаң булмаймы атаң рәттәш менән?

Эргәһендәге тылмасы һүҙҙәрен урыҫсаға ауҙарҙы.

– Ах, йолҡош, һиңә ипләберәк ҡыланыу кәрәкме әле ищеү?! – тегеһе тағы ла нығыраҡ енләнеп китте, әммә яғаны ысҡындырҙы, этеп ебәрҙе. – Тағы кем бар бында, тием?! Кемде йәшереп тотаң?

– Ярҙамсым бар.

– Ҡайҙа ул?

– Ана, туҙ һыҙыра.

– Саҡыр!

Ас бүре ҡиәфәтле Хәйрулла тигәндәре алға сыҡты.

– Юҡ, был түгелдер. Был беҙҙең ауылдыҡы.

– Башҡа кеше юҡмы? – йәнә Нөғәмәнгә ябырылдылар.

– Юҡ.

Ошо соп-сонтор ғына "юҡ"тың күп кешенең яҙмышын хәл итерен Нөғәмән асыҡ аңлай. Мәгәр Ғарифты табып алһалар, Динисламдың асылда кем икәнен белә ҡалһалар... Бындағы барыһының да, хатта өйҙәгеләренең дә баштары китәсәк. Китеп кенә ҡалһа ярай ҙа, ошонда ятып серемәһә.

– Урман яғына саңғы юлы үтә, – һыбайлыларҙың береһе ҡысҡырып ҡыуаныслы хәбәр һалды.

– Ҡайҙа апара ул юл?

– Беҙҙең икенсе эш урынына.

– Ә саңғы юлы?

– Кисәге көн үҙем йөрөгәйнем.

– Алдашһаң ҡара уны...

Аласыҡтың аҫтын-өҫкә әйләндереп тентенеләр ҙә лауылдашып саңғы юлынан киттеләр. Нөғәмән йөрәген усына йомған килеш тороп ҡалды: Яраббым, үҙең һаҡла! Көллөбөҙҙө лә.

Һыбайлы ҡыуғын төш етеүгә әйләнеп килде. Аттары аҡ күбеккә төшөп, үлемесле арыған, яшыҡ ҡабырғалары буйлап күбекле шыбыр тир аға. Шулай ул Уралтау. Был һиңә ҡары арлы-бирле генә ятҡан ялан ер түгел. Бындағы тығыҙ ҡар һырынтылары ай-һа-айй!

– Ныу, ҡартлас! – йондоҙло Нөғәмәнгә ҡарап ыҫылданы, – был юлы анһат ҡотолдоң. Әммә ләкин алдан ҡыуанма, еп күпме генә сырмалмаһын, барыбер осо килеп сыға.

– Үҙең, ҡартлас, тип тораң, үҙең миңә ышанмайың. Оло һүҙен тыңламаған, оролған да бәрелгән, тейҙәр беҙҙә.

– Һин дә килешкәнһең! – ҡыҙмалы был юлы Хәйрулланы ла ҡыҙҙырып алды, – әллә бар, әллә юҡ артынан йөрөтәң мине.

– Валлаһи бар, – тегеһе тубыҡланыр хәлгә етеп аҡланырға тотондо.

– Үҙең күрҙеңме?

– Үҙем күрмәнем, ышаныслы кешеләр...

– Ул, асыҡ ауыҙ, кешеләрең дә үҙеңә иш... ышаныслыҙҙар. Сәй эсерәңме? – был юлы теге Нөғәмәнгә иплерәк, йомшағыраҡ мөрәжәғәт итте.

– Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ. Яҡшымы-яманмы кеше бит, уның өсөн ишек һәр уаҡыт асыҡ, ҡомған ҡайнап ултыра.

– Көләң инде... – ҡыҙмалы ауыҙын мыҫҡыллы салышайтты.

– Ништәп көләң...

– Яман яҡшы кешеләр, тип.

– Ул көлөү буламы?

– Беҙҙән тиҙерәк ҡотолоу өсөн...

Көн бушҡа уҙҙы. Бөгөн бер бит тә баҫманылар.

– Тегеләр соҡорға барып етә алмаған, – тип йылмайҙы ҡараңғы төшәрәк арманһыҙ, әммә йылмайып ҡайтып ингән Ғариф, – бер тәрән үҙәктә аттарын сумырып көноҙоно этләнгәндәр.

– Йөрөгән ереңде белмәһәң шулай килеп сыға ул, – Нөғәмән дә ҡәнәғәт ҡалды. – Үҙҙәре лә бер эш ҡыйратманылар, беҙгә лә ҡамасау яһанылар, хаяһыҙҙар.

– Ярай, ағый, баш һау ҡалғас булды, – ифрат ҡәнәғәт Ғариф күкрәк тултырып һуланы, – Хоҙайҙың көнө тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ, иртәгә икеләтә тир түгергә тура килер.

Ныҡ арыған булһа ла, уның күңеле күтәренке ине.

***

Башы мендәргә терәлеүгә Ғарифтың хәтирә сылбыры артабан ялғанды.

...Иртәнге намаҙҙан һуң шунда уҡ Шығайҙан сығып киттеләр. Изге күңелле яҡташтарының ярһыу арғымаҡ егелгән ләжәнкәһендә. Аҡшамға инде төрлө хәүеф-хәтәр аша ҡасандан ынтылған Әхмәт ауылында инеләр.

Бында ла кешеләр киң күңелле, ҡунаҡсыл булып сыҡты. Әлбиттә, араларында шикләнеп ҡырын ҡарағандары ла табылды. Әммә ундайҙары күп түгел. Алдан һөйләшелгәнгә күрә, Юламан мулла уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алды. Ул, хатта, дошман хәрәкәте хаҡында алдан хәбәр ебәреп тороусыларҙы ла ҡуйып өлгөргән, афарин!

– Типография-шипографияғыҙ урмандағы аласыҡта йәшерелгән, – тине ул сәй артында, – ныҡлы урында.

– Шапирограф, – Ғариф уны әҙәпле генә төҙәтте.

Шул рәүешле, уйламағанда, Тамъян-Ҡатайҙағы бер кем белмәгән, тарихи Уралтауға һыйынып, урманға төрөнөп ятҡан Һаҡмар буйындағы бәләкәй генә Әхмәт ауылы һәм уның тирә-яғы күтәрелештең, башҡорттоң сираттағы күтәрелешенең, бер үҙәгенә әүерелде лә китте...

**Бишенсе көн**

Ихлас туҙ һыҙырып маташҡан Динисламдың күҙ ҡырына ниндәйҙер хәрәкәт салынып ҡалды. Шулай ҙа ул һиҫкәнмәне, ҡапыл ғына боролоп

ҡараманы, күрмәмешкә һалышып, аҫтыртын ғына күҙәтергә ҡарар итте. Ағастан ағасҡа ышыҡлана килгән әҙәм шөйлә яҡынлашҡас ҡына таныны. Ҡаса-боҫа Хәйрулла яҡынлаша ине. Аяҡтарында ҡалтағай, ҡулында һыңар көбәкле һунар мылтығы. Ҡаныҡты бит, ҡәһәрең.

Әҙер туҙҙарын йөкмәгән Динислам аласыҡ яғына ыңғайланы, Хәйрулла ҡомағай – шыпырт ҡына уның артынан. Динисламдың ниәте – ошаҡсыны нисек тә тотҡарлау, Нөғәмән менән Ғарифтың эҙҙәренә юлығырға юл ҡуймау.

– Ҡуҙғалма, атып йығам!

Динислам ҡағылған ҡаҙаҡ ише хәрәкәтһеҙ ҡалды, әммә артына боролманы. Йыртҡыстың күҙенә ҡарарға ярамай.

– Әйт, ярпы, шымсығыҙ ҡайҙа боҫоп ята? Һуңғы тапҡыр һорайым, – Хәйрулла мылтыҡ көбәген уның күкрәгенә терәне лә, ныҡ итеп төрттө. Ауыртыуҙан тегеһе хатта сирылып ҡуйҙы.

– Кемде әйтәң, Хәйри ағай?

– Нимә, мине тинтәккә һанайығыҙмы?

– Юҡсы.

– Тенәүге көн килеп инде ул ауылға, шул уҡ кисте саңғы менән ошо яҡҡа сығып китте. Эҙҙәре тап һеҙгә алып килә...

– Йөрөп ятҡан әҙәм әҙме ни урманда. Берәй һунарсы, йә солоҡтарын барлап йөрөгән умартасы булғандыр.

– Алдашма!

– Алдашмайым, валлаһи! Ана анауында бер кейекте йыҡҡандар, шуның эше түгелме икән?

Унда-бында туҙғып ятҡан эсәк-ҡарын ҡалдыҡтарына, ҡан таптарына ҡарап торғандан һуң Хәйрулла ҡайҙалыр ҡуҙғалырға итте.

– Сәй ҙә эсмәй китәңме ни, Хәйри ағай?

– Ҡамасау итмәҫ ине.

Аласыҡҡа инделәр.

– Ошто то һин, ҡустым, бик таҫма телдәнәң әле, йылмандайың, ниҙер йәшерәң, ахыры, – Хәйрулла өҫтәл артында мәкерле йылмайҙы, – әллә, мәйтәм, үҙеңде ошонда дөмпөлдәтергә лә китергә инде...

– Ни өсөн, ағый, мин нимә йәшерәйем һинән?

– Теге заттың ҡайҙа икәнен әйтмәйең дә...

– Әллә кемде таптыраң ул...

– Бисәң тол, балаларың етем ҡалыр, тип уйҙамайыңмы?

Ошо рәүешле ҡапаҡлай-ҡапаҡлай Динисламдың мәтрүш сәйен һөрпөлдәтте Хәйрулла.

– Әйтһәң, үҙеңә оло бүләк тәтер ине, әйтмәһәң – үкенерһең, – ул сығып барышлай әллә әүрәтте, әллә янаны, Динислам аңламаны.

– Ярай, хуш.

– Хуш итмәй тор әле, ярпы, ә Нөғәмән ҡайҙа?

– Ул... ул теге, икенсе соҡорҙа, туҙ һыҙырырға... – тәне эҫеле-һыуыҡлы булып киткән Динислам тотлоҡто.

– Нимәһенә ҡобараң осто? Әллә... – Хәйрулла аҫтыртын ҡыланды. Динисламдың зитына тейер өсөн. – Алып бар ул соҡороғоҙға.

– Кисә барҙығыҙ ҙа...

– Көләң инде.

– Юҡ, уйҙамайым да.

– Беҙ барып етә алманыҡ, ҡар тәрән, аттар бата.

– Шулай уҡмы ни? – Динислам башын тинтәккә һалып маташты.

– Әйҙә, йыйын, бөгөн саңғыла барабыҙ.

– Минең мында эш бар, эш тығыҙ... – йыуаш Динислам бөтөнләй ҡойолоп төштө: былай барһа, харап бит.

Әмәлгә ҡалғандай, ошо мәл аласыҡ ишеге асылып китте лә, ныҡ тирләгән Нөғәмән килеп инде. Төҫө ҡасҡан Динислам иркен һуланы.

– Ҡунаҡ бар икән, – тигән булды Нөғәмән ҡоро ғына.

– Нимә, көтмәгән инеңме? – Хәйри уҫал йылмайҙы.

– Урманда ҡунаҡ көтөп яталармы? Һин дә инде...

– Ә тегенең ҡайҙа?

– Кемде әйтәң?

– Кәйкәндәмә!

– Беҙ бында икәү генә.

Хәйрулла аласыҡтан енләнеп сыҡты ла боттарын кирә баҫып урманды тыңлап торҙо, әммә бер ни ҙә ишетә лә, күрә лә алманы. Ахыры килгән юлына төшөп ҡайтыу яғына ыңғайланы. Ыңғайланы, әммә ҡайтманы, бер аҙ барғандан һуң ышыҡланып күҙәтә башланы.

– Сәләм, туған!

Көтөлмәгәнлектән ҡото алынған Хәйрулла йылп боролоп артына ҡараны. Унда, револьверын төбәп, асыулы Ғариф тора ине.

– Нимәңде юғалттың әле һин бында? – ул уҫал итеп һораны, – аяҡ аҫтында сырмалып киләң дә етәң, киләң дә етәң...

– Ы–ы, миңә... ни... дегет ҡыуғандарҙы күҙәтергә ҡушылған.

– Дегетте ҡыумайҙар, ә ҡайнаталар, туғаным. Бир әле мылтыҡты.

Шөр ебәргән Хәйри мылтығын һона һалды.

– Бына шулай яҡшыраҡ булыр, – Ғариф ҡоралды яурынына элде, – ә хәҙер аласыҡҡа атла, ҡапыл бул, тыңлаусан бул, юғиһә...

Юғиһә ни булырын Хәйрулла асыҡ төшөндө.

Аллы-артлы инеп килгән Хәйрулла менән Ғарифты күреп, Нөғәмәндең күҙҙәре упайҙы. Динисламдың ҡурҡыуы йөҙөнә сыҡҡан ине: әллә Ғарифулла ағай ҙа шымсымы?

– Бына күҙәтсегеҙҙе алып килдем, – тип йылмайҙы Ғариф, – тик ул нишләптер, ағас артынан боҫоп ҡына күҙәтә... Әллә һеҙҙән ояла инде?

– Кем һуң уны тәғәйенләгән күҙәтсе итеп? Беҙгә күҙәтсе кәрәкмәй, унһыҙ ҙа эшебеҙ гөрләп бара, – Нөғәмән мәғәнәле йылмайҙы.

– Мин дә шулай уйлайым, – Ғариф Хәйригә баш иҙәп, уҫал ҡараш ташланы, – йә, туған, һөйләп ебәр, нимәгә кәрәк булып киттем һуң һиңә?

– М-мин һине бе-ббелмәйем, – Хәйри тотлоҡто.

– Мин теге, һин эҙләгән кеше.

Эштең ҡайҙа барғанын аңлап алған Хәйри бөтөнләй ҡойолоп төштө. Ҡурҡаҡ йән. Уның ҡулдарын артҡа бәйләп аласыҡ баҙына тыҡтылар.

– Йәшәгең килһә, шым ғына ултыр, – тине Ғариф ҡаты итеп.

Хәйерһеҙ Хәйри менән осрашыу күңелдәрен бер аҙ ҡырһа ла, кәйефтәре насар түгел ине: бөгөн байтаҡ эшләп ташланылар. Былай барһа, ваҡытында өлгөрәсәктәр. Берәй әтнәкәһе генә килеп сыға күрмәһен. Динисламдың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ ҡайтып, иркен һуланы.

***

...Урыҫ телендәге текстарҙы, Иҙел башынан килгән белгестәр исеме аҫтында, ауылдан алыҫ булмаған кантон идараһында махсус ҡорамалда баҫтырҙылар, төркисәләрен ҡулдан яҙып күбәйттеләр. Олоҫта урыҫ яҙмаһын аңлаусылар юҡ иҫәбендә ине, шуның өсөн әллә ни ҡыҙыҡһыныусы ла булманы. Исеме күптәргә билдәле Юламан мулланың да абруй ярҙамы нығ тейҙе. Яҙма-һыҙмаларын, мөрәжәғәттәренең күп өлөшөн һаҡлаған урындары – ауыл мәсетенең ҡыйыҡ аҫты. Иң ышаныслы, аулаҡ урын. Темәс тарафтарынан бәйләнеш тотоусылар килеп алып киткәнсә борсолмаҫҡа була.

## Алтынсы көн

– Һин, Ғарифулла ҡустым, әйт әле, кемдәр ул аҡтары? Ҡыҙылдары кемдәр? – тип һүҙ башланы Нөғәмән фитр-үәжеп намаҙынан һуң баштары һалам яҫтыҡҡа терәлгәс, – нимәгә кәрәк булды ошо низағ, үҙ-ара талаш-тартыш? Асылда бит бер ил, бер милләт кешеләре, хатта ағай-эне берен-бере ҡыра. Ҡара аңым менән ошоно һис аңдай алмайым.

– Һи-и, Нөғәмән ағай, быларҙы аңлатыуы бик оҙаҡҡа һуҙылыр...

– Ә һин ҡыҫҡаса ғына булдырып ҡара.

– Үҙең беләң бит инде әҙәм асылын, әҙәмиәт башынан уҡ һәр кем икенсеһенән өҫтөнөрәк, туғыраҡ, боллораҡ булырға, етәкселек итергә, етешерәк йәшәргә ынтыла, ошолар хаҡына залимлыҡ ҡыла, яуызлыҡ эшләй. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан шуға барып етә, ул хатта ата-әсәһен, яҡындарын танымай башлай. Бына әлеге заман ошоларҙың иң юғары нөктәһелер тимен.

– Ә ҡыҙылдар, аҡтар?

– Ана шулар инде яман әҙәм асылын сағылдырыусылар. Икеһе лә власть, хакимлыҡ, тип ынтыла, бер-береһен аталар, киҫәләр, ҡыралар. Шуныһы ҡыҙыҡ, ике яҡтың да үҙенсә, йәнәһе, ғәфү итерлек сәбәптәре, дәлилдәре бар. Аҡтары – ҡолатылған батшаны ҡабат йомшаҡ хәнәфиенә ултыртырға маташһа, үҙҙәрен ҡыҙыл тип атағандары – ошоға ҡырҡа ҡаршы. Һәр ике яҡ та үҙҙәрен хаҡлы һанай, ә ябай кеше, халыҡ яфа сигә.

– Ә һин үҙең кемдәрен хаҡлы һанар инең?

– Был үтә ҡатмарлы, бик сетерекле мәсьәлә, туғаным. Уға әле генә, ҡапыл ғына яуап биреп тә булмай. Әлегә ҡыҙылдарға ҡаршы көрәш алып барабыҙ. Сөнки улар халыҡҡа, бигерәк тә башҡорт халҡына ҡаршы залимлыҡ ҡыла, уның иреген, хоҡуғын ҡыҫа. Динен мәсхәрәләй. Тупаҫ рәүештә. Ә тегеләре ил, бөйөк империя мәнфәғәтен яҡлайбыҙ, тип лаф ора, ҡыҙылдарҙы ошо илдең хас дошманы һанай, шул уҡ ваҡытта иҫке ҡоролошто кире ҡайтарыу, бай ҡатлам мәнфәғәте яҡлылар. Әммә был ике ҡараштың тиҙ арала ҡырҡа үҙгәреп китеүе лә бар.

– Тимәк, аҡтар яҡлы...

– Әлегә шулайыраҡ килеп сыға.

– Ә теге беҙ ташҡа баҫҡан ҡағыҙҙарҙа нимә яҙылған?

– Ул өндәүҙә ҡыҙыл террорға, йәғни ҡыҙылдарҙың мәғәнәһеҙ ҡаты, оятһыҙ ҡыланышына ҡаршы нисек көрәшергә өйрәтелгән.

– Барыбер төшөнә алмайым, – Нөғәмән ауыр көрһөндө, – үлтереш-ҡырылышһыҙ тыныс ҡына аңлашып булмаймы икән ни? Кешеләр бит аңһыҙ бүре менән аңра һарыҡ түгел. Уларға Хаҡ Тәғәләбеҙ аҡыл, зиһен биргән.

Уйҙап, фекерҙәп эш итһендәр өсөн. Киләсәк хаҡына, балаларыбыҙ хаҡына булһа ла.

– Ана шул аҡыл менән зиһенде тейешле йүнәлештә ҡуллана белмәү касафаты инде бөгөнгө ҡыйралыш.

– Эйе, әҙәмиәт үҙенә-үҙе аяҡ сала. Аңлы көйө.

– Хаҡ әйттең.

– Ә бына, ҡустым, батша ҡолатылды, хәҙер ул юҡ тиһең, был нисек була инде? Башһыҙ көйө йәшәп буламы ни?

– Унынына ҡайғырма, ағай, урыҫта “изге урын буш тормай”, тигән әйтем бар. Иле булһа – батшаһы табылыр. Батшалыҡ өсөн үлемесле ыҙғыш әле киләсәктә буласаҡ. Тик ул батша – батша тип аталмаҫ.

– Нисек улай?

– Ғәмде тынысландырыр өсөн икенсе исем табырҙар.

– Алдаштырырҙар, тимәк?

– Шулайыраҡ килеп сыға.

Һалҡын баҙға боҫҡан Хәйри бер тауыш та сығарманы.

***

“Хәйрулланы ни эшләтергә?” Йоҡларға ятыу менән Ғарифтың башына ошо уй килде һәм оҙаҡ ҡына тынғылыҡ бирмәне. Тота килеп әләк еткереүсе ошаҡсыны ирекккә ебәреп булмай бит инде, бында бикләп ҡуйыу ҙа хәүефле, өҫтәүенә, тәрбиәләп тороуы мәшәҡәт. Бер тере көйөк булды лаһаң. Тере көйөк?.. Әллә... Юҡ, мосолман мосолмандың ғүмерен ҡыйырға тейеш түгел. Ислам ҡанунына ярашлы. Ярай, кистән иртә хәйерлерәк, иртәгәһен уйлашырҙар.

Юламан мулла төнгә ҡалып нәфел намаҙы башҡарған мәлдә үҙе тәғәйенләп ҡуйған бәйләнеш тотоусы егеттәрҙең береһе пәйҙә булды. Темәстән килгәндәр икән, әҙер ҡағыҙҙар артынан.

**Етенсе көн**

Сираттағы көн бик бола булмаҡсы.

Таңға ҡырпаҡ ҡар яуған ине. Аласыҡҡа иртә менән таныш булмаған үҫмер килеп инде. Көҙөкләнеп киткән Ғарифуллаға шулай уҡ аптырай төшкән Нөғәмән төшөндөрә һалды:

– Был минең кесе малай, Варанан бәләкәйе – Ғилметдин.

Был ваҡыт Ғилметдин ҡурҡыныс хәбәр еткерҙе:

– Атый, ауылда яу ҡупты, һалдаттар ҡоторона.

– Нимә булды? – Нөғәмән борсолоп һораны.

– Ҡыҙылдар яҡты Хәйри ағай ғәйеп булған. Байтаҡ кешене тотоп таш һарайға бикләнеләр.

– Ә ниңә ағаң килмәне?

– Ул да таш зинданда. Ҡыҙыл командир әйтә, Хәйриҙең ғәйеп булыуында атайығыҙ ғәйепте, ти.

– Ана хатта нисек. Эштәр хөртәйә былай булғас, – Нөғәмән йылп итеп Ғарифуллаға ҡараны, – көтмәгәндә бында ла килеп сығыуҙары бар бит хаяһыҙҙарҙың. Ништәйбеҙ?

– Бөгөнгә бер ни ҙә эшләп тормабыҙ, йәш ҡар иҫке юлдарҙы ҡаплаған, аласыҡтан эҙ сығармай тороу хәйерле.

– Ә Ғилметдинден эҙҙәре? Ә баҙҙағы?..

– Бер-бер хәл була ҡалһа уның эргәһенә төшөрмөн. Ә эҙҙәргә килгәндә... улың һиңә ашарға килтергән...

– Был юлы тикшерһәләр, баҙҙы ҡарамай ҡуймаҫтар бит.

– Беҙ һалам аҫтына сумып ятырбыҙ.

– Ярай, әләйһәң, – Нөғәмәндең күҙендә осҡон уйнаны, – бер кемгә лә әйтмәҫмен тигән инем...

– Нимәне?

– Баҙҙың уң яҡ мөйөшөндә йәшертен юл – мөгәрәп бар. Әлбиттә, әллә ни ҙур түгел, һуңғы сиктә шунда ултырып торорһоғоҙ. Унда эҙләргә бер кемдең дә башына килмәҫ тип уйлайым.

– Рәхмәт, ағай, һин булмаһаң, ни ҡылыр инем икән?

Был юлы һыбайлылар күп ине. Сана менән иҫке һалам да килтергәндәр, унынһы нимәгәлер?.. Улар һай-һайтлап аласыҡты ҡамауға алды. Ҡаршы сыҡҡан йондоҙло бүрек, шинель кейеп, билен ҡайыш менән быуған башлыҡтары Нөғәмәндең тағы көпө яғаһынан һелкте:

– Сволочь, ҡайҙа Хәйри?!

– Белмәйем, мин уға ҡарауыл түгел, үҙемдең хәсрәт баштан ашҡан – Нөғәмән битараф тыныслыҡ һаҡларға тырышты.

– Алдайың, сволочь! Һинең генә эш был.

– Нимәһенә, ысвулыш та, ысвулыш, тип екеренәң әле, улым, хәйерһеҙ Хәйриҙең ҡайҙа йөрөгәнен мин ҡайҙан белергә тейеш? Белгем килеп тә тормай.

– Ай, хәйләкәрһең, ҡарт, хәйләң үҙ башыңа етмәгәйе...

– Белмәгәс, белмәйем, тием инде.

– Шулаймы? Ә был эҙҙәр кемдеке? – шинелле ыҫылдап саңғы юлына төртөп күрһәтте, – таң менән кем килде һиңә? Ул бында нимә эҙләп йөрөй?

– Улым ашарға әпкилде. Ана, аласыҡта тора биштәре.

– Килһен әле бында.

Ҡурҡа төшкән Ғилметдиндән дә бер ни әйттерә, бер ни асыҡлай алмаған башлыҡ бөтөнләй енләнде.

– Аласыҡты тентергә! Бет эҙләгән кеүек тентергә! – тип фарман һалды ул.

Тентенеләр, яҡын-тирәне эҙләнеләр, келәткә инделәр, баҙға ла төштөләр, әммә һөҙөмтәһе булманы. Хәйриҙең бында үҙе түгел эҙе лә юҡ. Был мәлдә ул ауыҙына револьвер көбәге ҡапҡан көйө дер ҡалтырап һалҡын мөгәрәптә ултыра. Аҙ ғына тауышы сыҡтымы – Ғарифтың бармағы тәтелә.

– Аласыҡҡа үрт һалырға! – сығырынан сыҡҡан командир яман итеп аҡырҙы, – бер нәмәләре лә ҡалмаҫлыҡ итеп ҡарап тороп яндырырға!

Нөғәмәндең йөрәге жыу итте: мөгәрәптәгеләр янып үлмәгән хәлдә лә, төтөнгә тонсоғоуҙары бар. Нисек итергә?

– Ә мин ҡалайтып йәшәргә тейеш? Мин дә бит ил эшен башҡарам, – тине ул өмөтһөҙлөккә бирелә барғанын тойоп, – мин олоҫҡа ялыу менән барам.

– Һа-һа-һаа, ялыу менән бара берәү, хөрәсән, – һауалы башлыҡ мыҫҡыллы көлдө, һыбайлыларҙың ҡалғандары уға ҡушылды, – бына ялыуҙы күрһәтәйем әле үҙеңә, башҡорт ярпыһы.

Теге санала килтерелгән һаламдың әтнәкәһенә Нөғәмән яңы килеп төшөндө...

Ҡоро һалам гөлт итеп ҡалды. Ҡурап бөткән иҫке аласыҡ бүрәнәләрен дә ялҡын тиҙ ялманы. Ут өйөрмәһе ҡоторонған һайын Нөғәмәндең йөрәге күкрәгенән сығырҙай булып туланы: шулай уҡ ҡотола алмаҫмы Ғарифулла?! Әжәлен эҙләп килеп сыҡҡан буламы ул бында? Әжәлдең дә ниндәйе! Дошманыңа ла күрһәтмәһен.

Хәлдәрҙең иң киҫкен мәлендә ярһыған сапҡын килгәне күренде. Ул етер-етмәҫ аҡырып һөрән һалды:

– Ауылды аҡтар баҫты! Тиҙерәк ярҙамға!

Һалдаттар күҙ асып йомған арала юҡ булды. Ниндәйҙер Хәйри ҡайғыһы китте. Уларҙа хәҙер баш ҡайғыһы. Аттарының осалары ғына күренеп ҡалды.

– Тағы осрашырбыҙ әле, ҡартлас! – тип ҡысҡырҙы башлыҡтары, сабып барышлай артына боролоп.

– Әйҙә, әйҙә, һыпыртыуыңды бел, суҡынмыш кафыр, – Нөғәмән ауыҙ эсенән асыулы һөйләнде.

Атайлы-уллы епшек ҡар ташлап ялҡынды тиҙ һүрелттеләр. Мөгәрәптәгеләр, байтаҡ ҡына төтөн йоторға өлгөрһә лә, бирешмәне.

Артабан нисек йәшәргә? Торлаҡһыҙ ҡалай итмәк?

Әмәлгә ҡалғандай, көндәр ҡапыл йылытып ебәрҙе лә, шаулап ҡар ҡуҙғалды. Әллә ҡасандан көлдәп һалына килгән туҙҙан тағы ышыҡ урын әтмәләнеләр: ваҡытлыса йәшәп торор өсөн бара инде.

## Һигеҙенсе көн

Ғариф бында аяҡ баҫҡаны бирле тәүге тыныс көн булғандыр. Эштәре лә ырап барҙы. Төшкө тамаҡҡа ла туҡталып тормайса, бик күп баҫтылар. Уларҙы бөгөн бер кем дә борсоманы. Тик бер мөйөштән ҡулдары бәйле Хәйри генә асыулы йыртҡыс ҡараштары менән күҙәтте.

Төн уртаһында сәйер геүләүгә һиҫкәнеп уяндылар. Ҡойоп ямғыр яуа ине. Епшек ҡар менән ямғыр һыуы ҡушылып боҙонан әрселә алмай аҙапланып ятҡан Һаҡмарҙы ҡуҙғатҡан. Ярҙарына һыймай урғылып-ашҡынған ошо даръя геүләй икән.

– Беҙҙең тораҡты килеп баҫмаҫмы? – Ғарифтың тауышында борсолоу ғәләмәте ишетелде.

– Ташҡын бында уҡ килеп етә алмай ул, – Нөғәмән тыныс ине.

– Ә теге яҡҡа нисек сығабыҙ?

– Әлегә йөрөмәйерәк торорға тура килер.

– Оҙаҡлап китмәһә ярай ҙа.

– Оҙаҡламаҫ, Һаҡмар ағышы етеҙ, ташҡыны тиҙ ҡайтыусан.

– Уның ҡарауы, беҙгә хәҙер ҡыҙылдар ҡурҡынысы янамай.

– Эйе, ваҡыттыса булһа ла.

Иртән ажғырып, аҡъялланып ятҡан буръяҡ даръяға бер талай ҡарап торған Ғариф моңланып алды:

*Шаулап ҡына ятҡан Иҙел аша*
*Тәфтиләүҙәр кисеү табалмай...*

Ә ҡыҙылдарҙың шул суҡынмыш Тәфтиләүҙән ҡайһы ере артыҡ? Унан былайыраҡ булмаһалар әле. Аҫаба башҡорт ерендә шул уҡ ут, шул уҡ ҡырғын, аһ-зар, ҡайғы-хәсрәт. Берәй заман аҙағы булырмы бының? Ни өсөн, ни сәбәптән шул тиклем бәхетһеҙһең һин, халҡым?! Ожмахҡа алыштырғыһыҙ ерең-һыуың, мәңге ирек даулаған, азатлыҡҡа ынтылған

ҡәүемең, буйһонмаҫ халәтең, һынмаҫ рухың арҡаһындамы? Ғарифтың, иркенән тыш, күҙ йәштәре сырҡырап сыҡты...

## Туғыҙынсы көн

– Нимәһенә беҙ мынауы бүгәйҙе бушҡа аҫрайбыҙ әле, – Ғарифулла шымтайып ҡалған Хәйригә эйәк иҙәне, – эшләп ашаһын.

– Нимә эштәтмәксеһең унан? – Нөғәмән ғәжәпләнде.

– Кил әле бында, туған, – Ғариф Хәйриҙең ҡулдарын сырмаған бауҙы систе, – ҡара уны, һыпыртырға маташма, минең ҡорал яҡында, тот ошоно, – станоктың кәкре тотҡаһына күрһәтте, – ҡабаланмай ғына әйләндер.

Өсәүҙән дүртәү яҡшы – ошонан һуң эш бөтөнләй көйләнде, ырап китте. Ҡурҡыуҙан барыһына ла әҙер Хәйрулла тиргә батып ихлас эшләне. Бер көндә өс көнлөктө үтәнеләр.

– Бик шәп кешеһең икән һин, туған, – киске тамаҡ артында Ғариф тегене хатта маҡтап алды, – тик шәплегеңде дөрөҫ ҡуллана ғына белмәйең. Бөтә ағзалары теүәл, аҡылы камил, һап-һау иргә хәбәр еткереп, әләкләшеп йөрөү – килешеп етмәгән кәсеп. Башыңда кәпәс йөрөтәң икән, уға лайыҡлы булып ҡала бел, ир дәрәжәһенең бәҫен төшөрмә, ышаныслы бул.

Ышанмслы бул, тиһә лә ышанманылар, аш аҙағынан ҡабат ҡайынға ҡуша бәйләп ҡуйҙылар.

Кис йылы ине, элекке торлаҡтарына ҡайтып торманылар. Ошо уларҙы ҙур бәләнән ҡотҡарҙы. Һалҡында кәкрәйешеп ятҡандарында һил төн ҡараңғылығын ярып аҡырышыуҙарға һиҫкәнеп уяндылар. Уларҙың ярым янған аласығын килеп баҫҡандар ине. Кемдәр? Шарт-шорт мылтыҡтан ата башланылар. Нөғәмәндең баш осонан йәҙрә һыҙғырып үтте.

– Хаяһыҙҙар, беҙҙе эҙҙәйҙәр, – тине ул шым ғына.

– Ҡыҙылдар! – тип бышылданы Ғариф.

– Ярай әле, ҡары юҡ, эҙҙәр күренмәй хәҙер, – һиҫкәнеп уянған Динислам да һүҙгә ҡушылды. Ҡупым ҡиәфәт ала һалған бер Хәйрулла ғына өндәшмәне. Уның тулған ай ише түңәрәк, һимеҙ йөҙөнә кинәйәле йылмайыу менән йәшерен тантана бәреп сыҡты. Ҡыуанысынан ҡысҡырыр ҙа ине әле, Ғариф кеҫәһендәге ҡоралдан шөрләне. Ҡәбәхәт булһа ла, ғүмер аяулы, хаяһыҙҙың да йәшәгеһе килә.

Ярһыған һыбайлылар, ташҡын шауына дәрт биреп, тын урманды байтаҡ ваҡыт яңғыратты. Тәртипһеҙ атышыуҙарына ҡарағанда, иҫеректәр ине. Аласыҡ ҡалдыҡтарына ҡабат үрт һалып, ут яҡтыһында алйоттарса ҡыландылар.

## Ун беренсе, ун икенсе көндәр

Ярһыу йылға ышығында үткән шөйлә тыныс, нәтижәле тәүлектәр булды. Ян-яҡтарына алан-йолан ҡаранмай ғына, бер хәүеф тоймайынса баҫтылар ҡағыҙҙарын. Иҫерек ҡыҙылдар төркөмө киткәндән һуң Хәйрулла ла нисектер йомолоп-шиңеп ҡалды. Ҡотолоуға өмөтө һүрелде, буғай. Уның хәҙер аяҡ-ҡулы бәйһеҙ, ул ихлас эшләй. Һәр хәлдә, шулай күренә. Эшләүен эшләй, ә нимә эшләгәнен үҙе белмәй. Белмәгәне хәйер ҙә Хәйриҙең.

– Ғариф ҡустым, өйләнгәнеңме үҙең? – төшкө сәй артында Нөғәмән көтөлмәгән һорау бирҙе.

– Ниңә ҡыҙыҡһынаң әле, ағай? – Ғариф көлгән булды, – әллә берәйһен ҡоҙаламаҡсыһың?

– Була ул, – тегеһе ихласлап китте, – ирмен тигән ир буйҙаҡ йөрөргә тейеш түгел мосолманда. Үтәр ғүмерен заяға үткәреп. Ана күрше ауылда минең балдыҙ...

– Рәхмәт, ағый, – Ғариф әйтеп бөтөрөргә бирмәне, – минең ҡатыным бар. Әйткәндәй, һеҙҙең олоҫтан.

– Беҙҙең? Кем ул?

– Ул Асҡар ауылында йәшәй.

– Ништәп бер барып күрмәйең? Яҡын бит. Эсеңдә йәнең юҡтыр...

– Йәнем дә бар, йөрәгем дә әрней, әммә ярамай. Хәүефле. Бер күрәм, тип мең бәләгә тарытаһым килмәй яҡындарымды. Ваҡыты ла ул түгел.

– Ул сағында биғәйбә, – Нөғәмән оло ғәйеп яһағандай ғәфү үтенде, – үҙ мәйелең. Үҙең беләң инде ни эштәргә.

***

Был төндә Ғарифтың төшөнә әллә ҡайҙағы түгел, бынан утыҙ саҡрымда йәшәп ятҡан йәш, матур ҡатыны керҙе. Йә көлөмһөрәп, йә моңһоу ҡарашын төбәп тик тора. Муйырылған күҙҙәрендә йәштәре күренмәһә лә, илап та алды шикелле. Таңғы ҡараңғыла саусып киткән Ғариф сикәһе буйлап ҡайнар тамсылар тәгәрәгәнен тойҙо. Тағы күҙ йәштәре... “Кайҙан иҫкә төшөрҙө Нөғәмән ағай?”

### Ун өсөнсө көн

– Инде еткәндер, ағый, – Ғарифтың көр тауышында ҡәнәғәтлек ишетелде, – хәҙер инде ипләп кенә, кәлдәп кенә тоҡтарға тултырһаҡ.

– Уныһына ғына ҡалһа... – йонсоуҙары еткән Нөғәмән менән Динислам да ифрат ҡәнәғәт ине.

Листовкаларҙы тейешле урындарға үтә лә ҡәҙерләп һалдылар. Ни тиһәң дә, ваҡыты менән үлемесле ҡурҡыныс аҫтында ҡалып, ҡай саҡ, хатта, аслытуҡлы, төн йоҡоларын йоҡламайса, мең ғазап аша башҡарылған ауыр хеҙмәт емеше бит. Башҡорт халҡына өндәмәләре. Ә өндәмә икәнен улар хәҙер асыҡ белә. Яҙғы ҡараңғы төндәрҙә Ғариф барыһын да йәшермәй аңлатҡан ине. Таңға ҡарай шәп аттар егелгән ылау тоҡтарҙы алып китте.

Иртәгәһен, киске сәй артында, Нөғәмән эсен ҡытыҡлап торған һорауҙы бирмәйенсә түҙә алманы шикелле:

– Алтын, тинең, нимәгә ул?

Яуап ҡыҫҡа, әммә асыҡ булды:

– Киләсәктә ҙур эштәр өсөн кәрәк буласаҡ ул, ағый.

Шуның менән һүҙ бөттө.

### Ун дүртенсе көн

– Быны ни эштәтәбеҙ? – Нөғәмән иҫке һалам йәйелгән арбаға менеп ҡунаҡлаған Ғарифуллаға һораулы ҡараш ташланы.

– Дүрт яғы ҡибла...

– Нисек?

– Ҡайҙа теләй шунда китһен...

– Ә беҙ?.. Беҙҙе һатасаҡ бит ул.

– Кемгә, ҡыҙылдарғамы? Улары Мәскәү яғына ҡарап ҡойроҡтарын һыртҡа һалды, ә аҡтары беҙгә теймәҫ. Әлегә...

– Ышанмайым мин Хәйригә.

– Ағый, ә йылғаны нисек аша сығам һуң мин? – Ғариф һөйләшеүҙе икенсегә бора һалды. Күрәһең, Хәйри уны шул ҡәҙәре екһеткән ине.

– Уң яҡ ярҙы таштамай биш саҡрым тирәһе барһаң, унда күпер булыр. Һәйбәт күпер. Сыҡҡас та уңға тарт. Оло юлдан йөрөмә, үҙең беләң... – бер аҙ уйланып торғандан һуң, – әллә оҙатып ҡуяйыммы? – тине Нөғәмән.

– Бына быныһы ярамай.

Пар ат егелгән ылау яҙғы батҡаҡта ауыр ҡуҙғалып китеүгә Нөғәмән менән Динислам моңһоуланып ҡул болғаны. Үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмағандай ҡатып торған Хәйрулла ни уйларға ла белмәне: ысынмы-бушмы, уны тере ҡалдырҙылар. Ниндәйҙер аҫтыртынлыҡ ятмаймы бында? Уйлағаны хаҡ сыҡты: ауылға барып инеү менән уны эләктереп алдылар ҙа ҡасандыр нахаҡ яла тотҡондары яфа сиккән зиндандың таш диуарына терәнеләр... Аҡтар ошаҡсы ялағайҙарҙы яратмай икән...

Көндәрҙең, дөрөҫөрәге, төндәрҙең береһендә Нөғәмәндең тәҙрәһенә мылтыҡтан атып киттеләр. Хужа кеше ырғып тороп тышҡа йомолдо, әммә ҡараңғыла бер кемде лә күрмәне, шылт иткән тауыш та ишетелмәне. Ҡурҡып ҡуҙғыған ғаиләһен көскә тынысландыра алды ул. Ярай әле, ҡатыны Тайба баҫалҡы, күндәм холоҡло, сарғалап йөрөмәне. Бер нисә көндән ошо уҡ хәл Динислам тәҙрәһе менән дә ҡабатланды. Нөғәмән һиҙеп алды: Хәйрулла затының эше. Ҡусты кешеләре аҡ һалдаттар атҡан ағайҙары өсөн үс ала, ҡон ҡайтара. Шулай ҙа асыҡтан-асыҡ осрашырға ҡурҡалар, аҫтыртын ҡыланалар. Ни тигән тоҡом һуң был? Элек башҡорттар араһында ундайы булмаған бит. Кәрәк икән, тура ҡарап әйткән, былар ише арҡаға бысаҡ ҡаҙап, арҡаға атып йөрөмәгән.

Нөғәмән үҙ уландарына ла, Динислам ғаиләһенә лә һағыраҡ, абайыраҡ булырға ҡушты.

***

Байтаҡ ваҡыттар үткәс, Нөғәмән әллә ни алыҫ булмаған Темәс ауылына саҡырыу алды. Кем саҡыра, нимәгә саҡыра, тәғәйен генә әйтелмәгән. Әммә бөтөнләй үк билдәһеҙ ҙә түгел. Ҡағыҙ киҫәгенә төшөрөлгән ике төймәгә ҡарап төҫмөрләргә була: был – Ғарифулла.

Нөғәмән барып ингәндә Темәс урамдары оло баҙар эше гөж килә ине. Халыҡ ҡайнай, халыҡ геүләй, әммә был баҙар ҙа, йәрминкә лә түгел. Кемдер бейек урынға баҫып ялҡынлы телмәр тота, ҡолаҡтары ҡарпышыраҡ, еңел, оҙон кәүҙәле яшыҡ ҡына егет шиғыр һөйләй. Матур һөйләй, думбыраһына ҡушылып йырлап та ебәрә, йөрәктәргә үтерлек, күңелдәрҙе иретерлек итеп.

– Ағай, шәпме! – таныш һымаҡ тауыш ишетеүгә Нөғәмән боролоп ҡарай һалды. Күҙлек кейгән, мыҡты кәүҙәле, хәрби кейемдәге ҡарағусҡыл мыйыҡлы ир, йылмая биреберәк, ҡулын һоноп уға ҡаршы килде, – һай, үҙемдең арҡаҙаш! Һаҡмар һыуы уҙаманы! Нисек килеп еттең?

– Мин һеҙҙе белмәйем, – Нөғәмән аптырай төштө.

– Хәйрулла ни хәлдә әле?

– Уны аттылар... аҡтар.

– Шулай уҡмы? Ә малайҙарың, ә Динислам, ә Юламан ағай?

– Бәрәкәт! Ғарифулла ҡустым, һинме? Шулай ҙа үҙгәрә алыр икән кеше.

– Мин хәҙер түгел, теге мәлдә үҙгәргән инем.

Ҡосаҡлаштылар, арҡа ҡағыштылар.

– Саҡырыуҙы инҡар итмәгәнең өсөн рәхмәт.

– Саҡырғанға бар, ҡыуғандан ҡас, тиҙәр беҙҙә.

Йылмайыштылар.

– Һинекен күп ашаным, ағай, әйҙә, мин дә бер һыйлайым әле үҙеңде, бурыс булып ҡалмаһын.

Майҙан ситендәге оло кейеҙ тирмәгә инделәр, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне.

– Был ни тигән тантана һуң? – тип ҡыҙыҡһынды Нөғәмән.

– Беҙҙең ғәскәр ҡыҙылдар яғына сыҡты бит, шуны байрам итәбеҙ.

– Ә теге мәл, аҡтар, ти инең... – Нөғәмән ғәжәпһенде.

– Эйе, ағай, донъялар үҙгәрә, донъяһы менән аңдар ҙа, ҡараштар ҙа үҙгәрә. Заманаһы шулай, тере ҡалыу өсөн, йәшәү өсөн, халыҡты һаҡлап ҡалыу өсөн нисек тә яраҡлашырға кәрәк. Ваҡытлыса булһа ла...

– Барыбер аңдай алмайым мин был заманды, – Нөғәмән кеткелдәп көлгән булды, – әллә аңым шулайыраҡ, әллә...

***

– Был кем ул? – майҙанға килгәс Нөғәмән, уңайын табып, эргәһендә торған ирҙән һораны.

– Һа, бабай, шуны ла белмәйеңме? Был бит үҙебеҙҙең Зәкиебеҙ! Әхмәтзәки Вәлидов! Ишеткәнең юҡмы ни?

Булмаған ҡайҙа! Нөғәмәндең күҙ алдына Һаҡмар һыуы буйындағы күркәм генә урында ҡайнап торған мажараларға бай ҡурҡыныс та, ҡыҙыҡлы ла ваҡиғалар теҙмәһе килеп баҫты. Булды ла үтте шул данлы ла, шанлы ла, ялҡынлы ла көндәр. Урыҫ баҙындағы ун дүрт көн.

Бәйән ителгән ваҡиғаларға бер быуаттай ваҡыт үткәс, яҡшылыҡ менән зауыҡтың, арҙаҡлыҡ менән бөйөклөктөң ҡәҙерен белгән Әхмәт ауылы кешеләре белем усағы – мәктәп бинаһының кирбес диуарына оло хөрмәт йөҙөнән ошондай һүҙҙәр яҙылған мәрмәр таш беркетте:

*Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы*
*улы Әхмәтзәки Вәлиди*
*суверенлы Башҡорт Республикаһы*
*ойоштороу эштәре менән*
*1918 йылдың яҙында*
*Әхмәт ауылында булған.*

Киләсәк быуындар белһен, иҫләһен һәм онотмаһын өсөн.



**Лариса**
**АБДУЛЛИНА**

# МИҢЛЕ БУРАНБАЙ

Хикәйә

Ғүмер буйы заводта инженер булып эшләгән Буранбайҙың пенсияға сығыр алдынан ғына ҡулындағы миңе үҙен белдертә башланы. Бер эштән дә тартынып тормаған ир башта иғтибар итмәҫкә тырышып ҡарағайны ла, уйлаганса килеп сыҡманы. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡулындағы таптың барлығын да онотоп бөткәйне. Беләгенә тыш яҡлап яткан йомарланған йоҙроҡто хәтерләткән был көрән тамға үҙен белә-белгәндән бирле бар һәм һис ҡасан борсоғаны юҡ. Миңме – миң: ҡысытмай ҙа, һыҙламай ҙа, йыл миҙгелдәренең үҙгәреше лә тәьсир итмәй. Хәҙер инде итмәй ине...

Бер көндө Буранбай йоҡонан уянып, миңенең төҫө үҙгәреүенә иғтибар итте. Эшенән һуңлатып ҡына ҡайтҡайны, бәлки, күҙҙәр арығандыр, шулай күренәләр, тип уйлап та өлгөрмәне, йыуыныу бүлмәһенә килеп ингән ҡатыны ҡысҡырып ебәрҙе.

– Атаҡ-атаҡ! Был нимә тағы? Кислотаға бешеп ҡайттыңмы әллә?

– Юҡсы, – тиеүҙән бер ни ҡалманы. – Иртәнән кеше ҡулын тикшергәнсе эшең менән бул – тип өҫтәп ҡуйҙы.

Әммә эсендә ниндәйҙер шомло тойғо яралғандай итте: берәй насар сир булып ҡуймаһын тағы.

---

*Лариса Абдуллина – шағирә, тәржемәсе, журналист. Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Яҙыусылар (2007) һәм Журналистар (2002) союздары ағзаһы. Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты (2008), Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, киң мәғлүмәт саралары өлкәһендә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге, халыҡ-ара ТӨРКСОЙ премияһы лауреаты.*

Көн артынан көндәр үтә торҙо, тик ҡулдағы миңе элгәре ҡыҙарғандан-ҡыҙарҙы. Ә бер көндө хатта унан ҡан бүленеп сыҡты. Инде ҡасандан бирле бар балнисҡа, тип тылҡыған ҡатыны алтмышты ҡыуам тип торманы, иларға керешеп киттесе.

– Ғүмер буйы һин үҙеңде генә уйланың... Гел һинеңсә йәшәнек. Хәҙер инде балаларҙы башлы-күҙле иткәс, мине ташлап китергә йыйындыңмы! – Тик Буранбай ғына нишләргә белмәне. Ул үҙен, әйтерһең, уйлауҙан, һөйләшеүҙән мәхрүм ителгән кеше кеүек тотто. Ярар, балнисҡа барҙы ла, ти, унда нимә тип әйтһендәр инде? Хәҙер бит донъя тулған һатып алынған дипломлы белгестәр менән. Ундай юл менән һатыусы булып эшләргә була, ә бына ни йөрәктәре менән кеше һаулығы һағына баҫалар икән, тип әсенгәне бар Буранбайҙың.

– Берәй үлән төнәтмәһе юҡмы шунда? – тине ул, ҡулдарын һелтәп оҙон-оҙаҡ низер һөйләгән ҡатыны тынып ҡалғас.

– Шуны әйтәм дә һуң, Буранбай. Һис булмаһа, тоҙ күленән алып ҡайтҡан һыу менән сайҡап ҡарайһыңмы әллә? Тәбиғи нәмәнең барыбер зыяны теймәҫ ине әле...

Ҡатыны балкондан алып ингән һыу менән миңен ниңә сайҡаған көнгә төштө ир: ҡулы әле ҡысытты, әле әрнеп һыҙланы, ә ҡыҙыл тап хатта шешкән һымаҡ тойолдо уға. Был көндө Гөлбикә уның күҙенә салынмаҫҡа тырышты. Ире эшләгән заводтан лаборантка хеҙмәтенән пенсияға сыҡҡан ҡатын бына инде бер нисә йыл хаҡлы ялда. Ул, ваҡытын бушҡа әрәм итмәйем тип, мәсеткә сығып йүгерҙе.

Тереһыу тапҡан кешеләй ҡайтып ингән ҡатынын күргәс, башта Буранбай ҡыуанғайны, сәбәләнеүсән булһа ла, хәстәрлекле икәнен яҡшы белә уның. Тик өшкөрөлгән тоҙ алып ҡайттым, тигәнен ишетеп, ныҡ йәне көйгәндә әйтелә торған һүҙен ысҡындырмай булдыра алманы: сепрәк баш! Бер тапҡыр тоҙло нәмә менән булышты бит инде, нимә тип алып ҡайтты икән инде уны?!

– Муллаға бөтәһен дә һөйләп бирҙем, ул шулай кәрәк, тине. Һиңә ярҙам итәйем тип йөрөгән баш, ә һин ҡысҡырынаһың. – Ҡатын өҙгөләнеп иренә ҡараны. Һуҡранғанды бөтөнләй яратмай Буранбай. Тамам йәне көйөп, тышҡа сығып китте.

Бәй, бәй, был ни хәл? Һис ҡамасауламаған, хатта барлығы ла беленмәгән миңдең әле килеп көндән-көн боҙолоуы ғәжәпләндерҙе генә түгел, тамам хафаға һалды уны. Былай булмай, берәй сара күрергә кәрәк. Ғүмерҙә балнис юлында йөрөмәгән, ауырыу-һыҙлауҙың ни икәнен дә белмәгән кешене был хәл тамам мөйөшкә терәне. Миңе көндән-көн боҙола, бер ниндәй төнәтмә лә, мазь-крем да ярҙам итмәй. Иртәгә заводтың табибына күренергә кәрәк булыр, моғайын. Өлкән йәштәге ҡатын ул, дөрөҫ кәңәш бирә белер әле.

Табибәнән башы түбән эйелеп килеп сыҡты Буранбай: тиҙ арала район поликлиникаһына мөрәжәғәт итергә ҡушып, йүнәлтмә бирҙеләр. Яман шешкә әйләнеп ҡуймаһын, тип ҡурҡытты бит әле табип телефондан кәңәшләшкән арала шәфҡәт туташы. Бына һиңә мә! Ауыртмаған башҡа тимер таяҡ тигәндәре ошомо икән? Былай нәҫелдәрендә ундай-бындай сир менән яфаланғандар юҡ-юҡлыҡҡа, әммә ғүмер буйы заводта эшләүен иҫәпкә алғанда, кем белә, етмәһә, һуңғы йылдарҙа экология тип саң ҡағалар... Ҡуй инде. Нимә генә булып бөтөр икән? Бәлки, әлегә хафаланырлыҡ урын

да юҡтыр. Ана бит тәжрибәле Асия Фәнүзовна үҙен бик тыныс тотто, етмәһә, район поликлиникаһына күренгәндән һуң яңынан үҙенә килеп китеүен һораны... Теләһә ниндәй сәбәп табып, үҙен йыуатырға тырышыуын аңлай ине Буранбай. Ярар, ни булһа ла булыр, Хоҙай ҡушмаған эш булмаç, тип йүнәлтмәләрен тотоп ҡайтып китте.

Өйҙә дүрт күҙ менән көтөп торған ҡатыны подъезға уҡ ҡаршы сыҡҡан.

– Йә, нимә тип әйттеләр? Дауаханаға ятырға ҡушманылармы? Ҡушҡандарҙыр инде ул? Бынау хәтлем хәлгә аптырап ҡалғандарҙыр әле?

Ҡатын һорау биреп, яуабын да үҙе табырға тырышҡандай тотто үҙен. Фатирға килеп инмәйсә, Буранбай бер ни өндәшмәне. Ир йүнәлтмәләрен күрһәткәс, Гөлбикә өҙмәне лә ҡуйманы, әйҙә, хәҙер үк барайыҡ, былдайында сират ҙур булһа, түләүлеһенә инәйек, бәлки, ваҡытты һуҙырға ярамайҙыр, тине ул. Һуңғы һүҙҙе ишеткәс, Буранбай уйға ҡалды. Ысынлап, бәлки, оҙон-оҙаҡҡа һуҙырға ярамайҙыр?!. Донъя хәлен кем белә, ана, күрше цехта бер ир эсем яна, эсем яна, тип йөрөгән, әммә табиптарға күренмәгән. Тамам ауыр хәлдә дауаханаға илткәндә, эш үткән булған инде: ашҡаҙанында яман шеш тапҡандар. Меçкенең ярты йыл эсендә ер ҡуйынына инеп ятты. Буранбайҙың ҡатыны үҙен бик тәүәккәл тотто. Улар көрһөнә-көрһөнә поликлиникаға барып ингәндә, һыу буйы сиратта кем-кемдең артынан булыуы хаҡында ҡыҙыу бәхәс бара ине. Көтөп торманылар. Ә инде түләүлеһендә күңелде тынысландырырлыҡ хәбәр әйтмәнеләр: әле еүешләнеп, әле ҡанһырап торған миң берәүгә лә оҡшап етмәне генә түгел, киреһенсә, тиҙ арала онкология үҙәгенә мөрәжәғәт итергә ҡуштылар. Ҡатын эштең етди төç алыуын күреп, ирен тынысландырырға булып китте. Уй, Аллам, эй, яратмай уның ошо холҡон Буранбай: табылған бит бер ҡайғы уртаҡлашыусы. Берәй көтөлмәгән хәлгә тарыһаң, Гөлбикәне генә саҡыр инде: хәҙер анализын да бирә, кешеһен дә таба, барыһын көйләй, бөтәһен тынысландыра башлай.

Онкология үҙәге... Был һүҙбәйләнеш улар өсөн аяҙ көндө йәшен һуҡҡан һымаҡ яңғыраны. Буранбайҙы тереләй ерләп ҡуйҙылармы ни! Унда берәүҙәр мөрәжәғәт иткән, икенселәр дауаханаһында ята, өсөнсөгә операция эшләгәндәр һәм башҡаларҙы ишеткәне бар-барлығын. Тик үҙенә ҡағылмағас... Унда теләһә кемде ебәреүҙәре ихтимал, тик уны түгел кеүек ине. Хәйер, ғүмүмән, ул хаҡта уйлап ҡарағаны булдымы икән? Астың хәлен туҡ белмәй тигәндәй, күршеһе яман шештән вафат булды, ә Буранбай уның ни сәбәпле, нисек ул хәлгә тарыуын белешеп тә торманы. Төбөнә тоҙ ҡоймайым тиһә лә, ҡайғыларын уртаҡлашып аҡса биреүен бирҙеләр, ә бына ҡатыны, балалары менән һөйләшеп ултырырға ваҡыт тапманы... Тапманы тип, ваҡыт тапты ул, нисектер төпсөнгән кеше һымаҡ күренергә теләмәне. Үҙеңдең өçтөңә бәлә ишелмәйсә, кеше хәлен аңлайһыңмы ни инде!..

Башта Буранбай эшенән һорап китеп, өйөндә үҙен онкоүҙәккә әҙерләне. Иртән тороп, Үҙәк каналдарҙың береһендә барған Малаховтың һаулыҡ тураһындағы тапшырыуҙарын ҡараны, тире ауырыуҙары хаҡында белешмәләргә күҙ һалды, әммә береһендә лә миңдәрҙе ентекле өйрәнгән мәҡәлә тапманы. Һүҙ ыңғайында ғына фекер әйтелә, тик ауырыуға тәғәйен анализ биреү юҡ. Тик әҙерлек өсөн был ваҡыт ҡына уға етмәй булып сыҡты. Етмәһә, Асия Фәнүзовна көн дә тиерлек шылтыратып, хәл һорашып тора. Буранбай “больничный” алды. Әммә оҙайтырға барған һайын яраһына

тоҙ һалып ҡайтарҙылар. Ошо рәүешле йөрөй торғас, сираттағы отпуск көндәре лә үтеп китте. Ә миң әллә ниндәй зәңгәрһыу төҫтәргә инеп, шешкәндән-шеште. Мин үлергә әҙер, тигәнгә тиң күрҙе онкоүҙәккә барырға риза булыуын Буранбай. Әммә нишләмәк кәрәк... Етмәһә, Гөлбикәһе үҙен ғәҙәттәгенән дә тынысыраҡ тоторға тырышыуында ниндәй мәғәнә ятыуын аңлай ине ир. Ярар, ни булһа ла булды тип, дауаханаға юлланды улар.

Бәй, бында ла һыу буйы сират икән дә баһа! Был хәтлем халыҡ ҡайҙан йыйылған һуң, тип һорап та өлгөрмәне ҡатыны, шунда уҡ яуабы ла ишетелде: бөтә республиканан, күрше төбәктәрҙән инде. Бөгөн табипҡа эләкмәйәсәктәре көн кеүек асыҡ ине. Бер яҡтан Буранбай быға ҡыуанып та ҡуйҙы, бында аяҡ баҫыуын "үҙләштерергә" ваҡыт кәрәк әле. Ҡатыны ул арала төрлө таныштарына шылтыратты, үҙҙәренә кәрәклекте белдермәй генә ярҙам һораны. Хәйер, июнь башында кемде тота алаһың инде: күпселек халыҡ ялда, баҡсала... Сиратты көтөргә тура килде.

Унын ҡарауы, Буранбай бында бик күп яңылыҡ ишетте. Баҡтиһәң, Рәсәй халҡының 37 проценты яман шештән үлә икән! Әлбиттә, araларында ирҙәр күберәк. Күпме генә миңдәр тураһында һорашып ҡарамаһын, сираты етеп килгән бик мәғлүмәтле йыуан ҡатын да кәрәкле генә һүҙ әйтә алманы. Һуңғы һөйләмен бөтөнләй теленән сығармаһа ла була ине: "Беҙҙең күршенең ҡыҙыл миңенә ошонда операция эшләгәйнеләр, бер ай ҙа торманы, меҫкенең. Миңдәрҙе киҫергә ярамай ҙа инде". Тынысландырҙы... Бына һиңә диагноз! Гөлбикәһенең был ҡатынға йәне көйҙө, саҡ талашып китмәнеләр.

Биопсия, анализдар, рентген барыһы ла Буранбайҙың файҙаһына түгел ине. Табиптар уның миңен күреп, тамам аптырашҡа ҡалды. Хатта иң тәжрибәлеһе лә нимә тип яуап бирергә, ниндәй диагноз ҡуйырға белмәне. Бөтәһе лә бер фекергә килде: миң тотош организмға зыян килтереүе ихтимал, шуға күрә мөмкин тиклем тиҙ арала унан арынырға кәрәк. Берәүҙәр – лазер, икенселәр химия ысулы, өсөнсөләр тәнгә таралмаҫ борон, бәлки, ҡулды киҫеү кәрәктер, тигән тәҡдим дә индерҙе. Тик бер өлкән йәштәге табип ҡына барыһына ла ҡаршы сыҡты: ҙурыраҡ ҡалаларҙағы клиникаларға барырға кәрәк, уларҙа медицина ҡорамалдары алдынғыраҡ технологияларға нигеҙләнгән, бәлки, аллергия ғыналыр, тине ул һүҙен тамамлап.

Ул арала Гөлбикә реклама гәзитенән бер иғлан табып, шунда барып киләйекме әллә, тине иренә. Аптыраған өйрәк күлгә арты менән сума тигәндәй, нишләргә белмәгән Буранбай теләр-теләмәҫ кенә ризалашҡандай итте. Ә үҙенең имсе-томсо юлында һис йөрөгөһө килмәй. Хәҙер күптәр үҙен халыҡ табибы тип иғлан итеп, аҡса һуҡҡанын яҡшы белә ул, әммә нимәлер эшләргә кәрәк ине. Ярар, күңеле ятмаһа, сығыр ҙа китер. Етмәһә, ҡатыны әйтеүенә ҡарағанда, уларҙың заводының бухгалтеры улының бүҫерен шул мари Амалияла дауалатып алған икән. Унынһын ҡайҙан ишеттең, тип торманы Буранбай. Бәлки, бухгалтер ҡатын үҙе тәҡдим итеп шылтыратҡандыр әле, сөнки заводта бөтәһе булмаһа ла күптәр Ҡаранаевтарҙың ниндәй бәләгә тарыуын беләләр. Буранбай быңдай һығымтаға һуңғы арала хәл белешеүҙәр  йышайып киткәндән һуң килде.

Имсе ҡатын оҙон-оҙаҡ һөйләп баш ҡатырып торманы, бары тик быуынбыуындан килгән сир булыуын һәм тиҙ арала һис көтөлмәгән һөҙөмтә биреүен генә әйтте. Улай булмаһын өсөн нимә эшләргә тейеш икән инде

Буранбай? Һеҙгә бер нәмә лә ярҙам итә алмаясаҡ, был һеҙҙең күрәсәк, тыуған яғығыҙға ҡайтығыҙ, бәлки, файҙаһы булыр, тине ул оҙатҡанда. Бына, исмаһам, ҡыуандырҙы! Юл буйына ҡатыны менән һөйләшмәй ҡайтты Буранбай. Ул тәҡдим итә икән тип, нишләп имсегә китеп барҙы икән? Артыҡ хәбәр эсте бошора, тигәндәй, теләһә кемде тыңлап йөрөргә берәй малай-шалайҙыр шул ул! Ҡатынының да ихлас ярҙам итергә тороуын аңлай, әммә теләһә ниндәй эсте бошорорлоҡ һүҙҙәргә әҙер булмай сыҡты уның күңел торошо.

Ҡарт табиптың кәңәшен тотоп, инде белгертмәйем тигән балаларына ла хәбәр итеп, Ҡаранаевтар Екатеринбургҡа юлланды. Ҡыҙҙарының бергә уҡыған әхирәте ошо ҡаланан ине, табиптарға күренергә ярҙам итер әле, тип өмөт итте ир менән ҡатын. Күмәкләшеп тырыша торғас, бында килеүҙәренә алты көн тигәндә Буранбайҙы саҡ ҡабул иттеләр. Ул арала миң бөтөнләй эренләп, еҫләнеп китте. Профессор бик итәғәтле кеше булып сыҡты: ваҡытты һуҙып тормағыҙ, Мәскәүгә йәки Питерға барығыҙ, беҙҙә берәү ҙә дөрөҫ диагноз ҡуя алмаҫ, баш ҡалаларҙа аппаратура көслөрәк, әгәр теләһәгеҙ, таныш табиптарҙың телефонын да бирә алам, ғәфү итегеҙ, башҡаса бер нисек тә ярҙам итә алмайым, шуныһы көн кеүек асыҡ – миңдән арынырға кәрәк, тине ул.

Миңдән арынырға кәрәк, тигәненә тамам аптыраны Буранбай. Әсәһе, киреһенсә, бала саҡтан миңгә ҡағылырға ярамай, ул Хоҙай билдәһе, ти торғайны. Бына һиңә аптыраш! Туҡтале, туҡта! Һуң уларҙың нәҫелендә бындай миңлеләр бар ҙа инде, улар нисек йәшәп ята икән? Ошо мәлдә Буранбай ике-өс кенә түгел, хатта бер туғандары менән күптән күрешкәне, һөйләшкәне юҡлығын иҫенә төшөрҙө. Оят булһа ла, бөгөн үк апаһына шылтыратып, хәлен белергә кәрәк. Яҙ көнө төшөнә лә ингәйне бер мәл.

Оҙаҡ һөйләштеләр апаһы менән. Күберәге өлкән кеше гөрөлдәне. Баҡтиһәң, операциялар үткәргән икән. Мин дә ауырып торам, тип әйтергә теле әйләнмәне Буранбайҙың. Бары тик, апай, теге миңең нисек, тип һорай алды. Нисек булһын, ҡасан юғалғанын да белмәй ҡалдым мин уның, тине. Минеке әллә нишләп һыҙлап торған кеүек әле, тигән булды Буранбай. Ана, ауылға ҡайт та шишмә һыуында йыуын, бер ни ҡалмаҫ, тип көлгән булды апаһы. Бәлки, ысынлап та, тыуған яғына ҡайтып урарғалыр, күптән ата-әсәһенең ҡәберенә лә зыярат ҡылғаны юҡ. Буранбайҙы уйҙарынан ҡатынының, баҡсаны һатып алыусы таптым, ике көндән Мәскәүгә юлланырбыҙ, тигән хәбәре бүлдерҙе. Гөлбикәһе, әйтерһең, тап ошо хәл өсөн йәшәгән, тамам асылып китте: ул табиптар эҙләй, баҡса һата, билеттарға заказ бирә... Буранбай ғына үҙ йәненә урын тапманы. Нимә булды һуң был ҡулдағы тап менән?

Мәскәүҙә лә, Питерҙа ла бер үк хәбәр яңғыраны – тиҙ арала ҡулды киҫергә кәрәк, сөнки был миң организмды зарарлай. Һирәк осрай торған сиргә диагноз ҡуйыусы ла табылған: родогор. “Минең практикамда һеҙ өсөнсө кеше, – тине академик Зеленович, – тәүге икәү Ҡаф тауы яғынан килгәйне. Береһе уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдар уртаһында, икенсеһе теүәл туғыҙ йыл үткәс, мөрәжәғәт итте. Шул уҡ хәл. Тап һеҙҙең кеүек бәләгә тарығандар. Тауҙа, тау буйында йәшәгән халыҡтарҙа ғына була был сир. Шуға ауырыуҙың атамаһы ла “родогор”. Миңдән ҡотолорға кәрәк, ул организмды зарарлай. Минеңсә, уны яндырыу (прижигание) мөһим, сөнки

ҡулды киҫеү мәсьәләне ыңғай хәл итергә ярҙамлашыр, тип өмөт итеп булмай. Ҡулдағы был тап шуның менән ҡурҡыныс – уның тотош организмға таралыуы бар. Ә был инде, үҙ сиратында, фажиғәгә алып килә. “Тәндең өлөштәрен юғалтмайынса ла миңдән ҡотолорға мөмкин бит, иптәш Белявский“, – тине ул ассистентына ҡарап, ҡеүәтләү көткәндәй. Ҡаф тауҙан килеүселәрҙең яҙмышы менән ҡыҙыҡһынғас, Буранбайҙың кикреге шәлпәйеп төшә яҙҙы. Тәүгеһе миңен яндырған ваҡытта уҡ яҡты донъя менән хушлашҡан, икенсеһе тәүгеһененең хәле нимә менән тамамланғанын белгәс, ҡанһыраған миңе менән кире ҡайтып киткән. Хәҙер технологиялар үҫеште, һеҙгә уңыш йылмайыр, тип уйлайбыҙ, тиһәләр ҙә, Буранбай миңен яндырыуға риза булманы. Унан бигерәк ҡатыны ҡаршы сыҡты. Улай ғына ла түгел, Гөлбикә иртәнән һуңғаға алған билеттарын алыштырып, шул көнөндә үк Өфөгә остолар.

Ҡайтып төшөүен төштөләр, әммә бында ла уларҙы билдәһеҙлек көтә ине. Нимә эшләргә белмәй ултырғанда, улдары шылтыратты. Баҡтиһәң, Австрия клиникаларының береһендә тап миңдәрҙе, сөйәлдәрҙе өйрәнеүсе ғалим бар икән, ул атаһына шунда мөрәжәғәт итеп ҡарарға кәңәш итте. Тик үҙ ғүмерендә сит илгә сығыу түгел, ул хаҡта уйлап та ҡарамаған Буранбай бер ни тиклем баҙап ҡалды. Хатта Гөлбикә лә ҡаушаңҡыраған төҫлө булды. Улар нимә әйтһен инде, бында, үҙ илендә, үҙ ереңдә диагноз ҡуя алмағанды... Тик Сурағол ныҡышмалы булып сыҡты. Үҙ ғүмерҙәрендә балалары иңдәренә бәләләрен һалмаған, һәр мәсьәләне үҙ-ара кәңәшләшеп хәл итеп өйрәнгән Буранбай менән Гөлбикә улдарының тәҡдименә башта ғәжәпләнде. Күңелдәре лә тулып китте...

– Атай, иҫләйһеңме, техникумда уҡығанда, осрашыуға немец студенттары килгәйне. Береһен мин үҙебеҙгә ҡунаҡҡа алып ҡайтҡайным. Ике йыл элек шул егетте Интернеттағы социаль селтәр аша табып алғайным. Уға һинең сиреӊ тураһында әйтһәм, Европа дауаханаларында мөмкинлектәр ҙурыраҡ тип, бер клиниканың адресын бирҙе. Тик ҡабул итеү, дауалау ҡиммәт – йөҙ мең евро. Баҡсағыҙҙы, фатирҙы һатып булһа ла барырға тырышырға кәрәк, ҡулымдан килгәнсә мин дә ярҙам итермен, донъяла иң ҡәҙерлеһе – ғүмер! – тине ул.

Тик Сурағол баҡса аҡсалары ярты йыл эсендә ил буйлап таралып бөткәнен белмәй ине шул. Улының хәстәрлекле мөнәсәбәтенән эсенә йылы йүгерҙе Буранбайҙың. Тышҡа күҙ һалды. Бәй, тамсы тама түгелме?! Улар ҡатыны менән әле бер, әле икенсе табипҡа яҙылған, йөрөгән арала көҙ, ҡыш үтеп, яҙ етеп килә лә баһа. Ҡубырға әҙерләнгән ҡутыр шикелле ҡатҡан миңе һаман һыҙлай ине әле, әммә ул кәмемәне лә, ҙурайманы ла, әйтерһең, хужаһы менән бергә ваҡиғалар ағышын күҙәтте.

Ҡайҙан тапһын инде ябай инженер, етмәһә, пенсияға китергә йөрөгән ҡарт белгес ундай аҡсаны? Тик улы аптырап тормаған, Интернет селтәренә ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Атаһының иҫәбенә бына аҡсалар яуа башламаһынмы! Кем – ун, икенсе берәү – илле, өсөнсөләр мең һум һалып булһа ла, тотош Башҡортостан, күрше төбәктәрҙә йәшәүселәр ҙә ҡушылғас, йәйгә тиклем йыйҙы улар кәрәкле аҡсаны.

Ғүмерҙә кешегә бәлә һалып өйрәнмәгән Буранбай керер урын тапманы, нисек инде уға бөтә ил менән аҡса йыялар? Быныһы инде уның өсөн үлеп терелеү булды. Ир урамға сыҡманы, телефонын бөтөнләй сүплеккә

бырағтырҙы. Ниңә кәңәшләшмәне икән, ә, улы? Был мәлдә уға Гөлбикә ярҙамға килде: балабыҙ һиңә ярҙамға килгән, ә һин уға үпкә белдерәһең, миңә ундай мөнәсәбәт күрһәткәне юҡ әле, тине иламһырап...

Бына инде Австрияға юлланыр көн дә килеп етте. Бармаҫҡамы икән әллә, тип тә уйлағайны Буранбай. Анау хәтлем кешене борсоп, уйға һалып, үҙенсә итеп әйткәндә, кеше көлдөрөп йөрөгөһө килмәгәйне, әммә миңе лә ҡыҙыҡ итеп тота бит: әле һыҙлауҙан туҡтай, инде әжәлем шунандыр, күнәйем тиһә, йөрәгенә төшөп һыҙлай, ҡан тама башлай. Ә бер көн тынысланайым тип балыҡ тоторға сыҡҡанда, бер ҡарт менән танышып, күңеле лә күтәрелеп  ҡайтҡандай итте. Уның ҡатынына сит илдә  бауырына операция эшләгәндәр икән. Бик уңышлы үтте, әле һин дә мин донъя көтәбеҙ, тине бабай. Бына бит – Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң, кем белә, бәлки, Буранбайға ла уңыш йылмайыр?!.

Яҡшы ҡаршыланылар сит илдә. Башта бер табип ҡараны, ғәжәпләнеүе йөҙөнә сыҡҡайны. Үҙ телендә кемдәр менәндер һөйләшеп алды, икенсе көнгә табиптар һаны өсәүгә етһә, өсөнсө көнгә тотош взвод булды, тиергә мөмкин ине. Тәржемәсенең һөйләгәндәрен тыңлап, Буранбай тамам йығылып китә яҙҙы.

– Һеҙ сирле түгел, һеҙ бик үҙенсәлекле ҡанлы кеше. Ундайҙар Рәсәйҙә күпме икән? Миңегеҙгә бөтөнләй ҡағылырға ярамай. Ул Хоҙай бүләге, генетик тамға! Ер шарындағы айырым ҡәүем вәкилдәрендә генә була был миң. Уны һаҡларға кәрәк. Хәҙерге көндә медицина бик алға китте, шуға күрә кешеләрҙең физиологияһы ғына түгел, рухиәте лә тәрән өйрәнелә. Әйткәндәй, боронғо замандарҙа ла шулай булған, әммә кешелек үҙенең үҫеш этабында был һәләтен юғалтҡан. Бөгөн рухи медицина яңынан тергеҙелә. Һеҙ – Ер шарының уникаль кешеһе, ер йөҙөндә рухи таҙалыҡты һаҡлаусыларҙың береһе, рухи тамырҙарығыҙ менән бәйләнеш өҙөлгән. Әлеге мәлдә рухиәтегеҙ ҙур зыян күргән, шуға күрә миң ҡанай башлаған. Һеҙгә Ватанығыҙға ҡайтып, Ер кендегенә барырға кәрәк, иң ҙур тауығыҙға менегеҙ, иң таҙа шишмәнән һыу эсегеҙ, иң ҙур күлдә һыу инегеҙ, иң тар тарлауыҡтан үтегеҙ, иң саф урманға инегеҙ, иң тигеҙ далала таң ҡаршылағыҙ – ауырыуығыҙҙан бер ни ҙә ҡалмаҫ! Тик шуныһын онотмағыҙ: алған кисерештәрегеҙ хаҡында иң бәләкәй туғанығыҙға һөйләргә, ә иң ҡарт туғанығыҙҙың хәлен белергә онотмағыҙ! Клиника һеҙҙән аҡса алмай, ошо сумманы тыуған ерегеҙҙә изге урындарҙы һаҡлауға тотоноғоҙ! Насип итеп, беҙгә лә уларҙы күрергә яҙһын! Сәләмәтлек теләйбеҙ һеҙгә!

Буранбай табиптар янынан башы әйләнеп килеп сыҡты. Гөлбикәһе уның күҙенә ҡарап, илап ебәрҙе.

– Нимә булған? Хәлең шул тиклем насармы ни? Нишләп өндәшмәйһең?

– Гөлбикә, әле йәшәйбеҙ икән! Һинең кеүек ут бөрсәһе ҡатыны булған кеше ауырый тиме ни!? – тине ир ҡатынын ҡосаҡлап, һәм миңе ҡанай башлағандан алып йыйылып йөрөгән күҙ йәштәренә ирек бирҙе.

Ҡатыны уның һүҙҙәренә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне, әммә аҡсаларын кире килтереп тотторғас, аптырашҡа ҡалды. “Ә ниңә Рәсәйҙә тик ҡулды ҡырҡыу, йә миңде яндырыу хаҡында һөйләнеләр икән, ә, Буранбай?” – тигән булды ул самолетҡа ултырғанда. “Белмәйем, аңламайым,” тиһә лә, уныһын Буранбай аңлай ҙа кеүек ине... Бәлки, тойған ғыналыр...



**Хәйҙәр ТАПАҠОВ**

# ХӘТЕРҘӘГЕ ХӘТИРӘЛӘР

## *Атайым*

Минең наҙлы, аҡыллынан аҡыллы, эшсән, сибәр күңелле, сыҙамлы, сабыр, тыйнаҡ, инсафлы өс әсәйем булғанлығы хаҡында әйткәнем дә, һөйләгәнем дә бар. Шул ныҡлы, нигеҙле өс таған ҡоршауында, уратаһында яратылып, һөйөлөп үҫтем.

Ә бына атайым хаҡында бер ҡасан да, бер тапҡыр ҙа асыҡлыҡ индереп, ентекләп яҙманым. Урынһыҙлыҡҡа, форсат сыҡмауға һылтанып сергә төрөлгән сетерекле һөйләшеүҙе кисектерә килдем, ситләтеп үттем, һүҙҙе икенсегә борҙом, ҡайырҙым, иртәгәге көнгә ҡалдырҙым. Сәбәбеме? Аныҡ, төйөрөм яуабым юҡ, мине әле лә ниндәйҙер эске тойғо тотҡарлай, тамағымдың төбөндәге түгел, күңелем түрендәге иҫке, йөйлө төйөр әйтеремде әйтергә, асылып китергә ирек бирмәй. Ҡусҡарҙай йомарланып ҡабырсағыңа боҫһаң да, үҙеңдән үҙең ҡасыу мөмкин түгел, ҡоролған мылтыҡ ҡасан да булһа донъя гөрһөлдәтә бит әле, йәнең төбөнә боҫҡан һүҙ ҙә, теләйһеңме быны, әллә юҡмы, иртәме-һуңмы, барыбер бер килеп тышҡа урғыла.

---

*Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, мәҙәниәт хеҙмәткәре Хәйҙәр Тапаҡов 1955 йылдың 20 февралендә Йылайыр районының Һабыр ауылында тыуған. Сибай медицина училищеһын, Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультетын тамамлай.*

*Хәйҙәр Тапаҡов – повестар, хикәйәләрҙән торған тиҫтәләгән йыйынтыҡ авторы. 1999 йылдан Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

Атайым һәйбәт, тәрән фекерле, киң даирәле, ихтирамлы, абруйлы кеше ине, дөйөмләштереп ҡылыҡһырлаһаң – ил-йорт хәстәрен хәстәрләгән, ҡайғыртҡан арҙаҡлы уҙаман; һуғыш ветераны, Башҡорт кавалерия дивизияһында эскадрон командиры, бихисап орден-миҙалдар кавалеры. Һуғыштан ҡайтҡас, утты-һыуҙы кискән яугирҙы бер тауыштан колхоз рәйесе итеп һайлап ҡуйғандар, шунан оҙаҡ йылдар ауыл Советына етәкселек иткән. Ғәжәйеп осраҡ, белеме – башланғыс дүрт класс ҡына, ауырлыҡ менән хәреф танып, этеп-төртөп уҡый, әммә яҙыу-һыҙыуға килгәндә наҙандың наҙаны, томана, хәлбуки хужалығы бар күрһәткестәр буйынса ла районда алдынғынан иҫәпләнгән, күсмә ҡыҙыл байраҡ та күсмәҫлек итеп колхозға бирелгән, шуғалырмы, кәңәшмәләрҙәге урыны – тантаналы президиум түрендә, гелән өлгөгә ҡуйып маҡтайҙар үҙен, байрамдарҙа, эшкә йомғаҡ яһағанда билдәләмәй, бүләкләмәй ҡалдырмайҙар. Уҡыуға шыпа барымы булмаһа ла, йылдың йылы “Правда”ны алдырҙы, сығышында йыш ҡына шул гәзиттәге берәй ҙур түрәнең әйткәндәренә һылтанма яһай, әллә ижекләп үҙе уҡыған, әллә берәйһе уҡып ишеттергән, Хоҙай шаһит. Күрмәлекле, фартауай етәксе булараҡ, шәп ат егеп йөрөргә яратты: уйынсыҡтай итеп эшләнгән, асыҡ япмалы көймәгә тартым ыҡсым кырандас, ян-тирәһенә сәскәле буҫтау беркетелгән ләжәнкәле сана, дегет һеңгән көмбәҙле сбруй, ушҡырып тыбызыҡлаған өйөр айғыры, буяулы дуға инде зеңгер, йәғни уға көмөш ҡыңғырау тағылған, ишетегеҙ, күтөгөҙ, кәттә түрә килә ята! Үҙе һуң, үҙе, туйға ҡуҫтарланған кейәү егетенән һис тә кәм түгел, өҫтөндә күкрәк тапҡырына икенсе дәрәжә “Ватан һуғышы” ордены (ул саҡта был награда юбилей ҡалайы кимәлендә түгел ине әле, шуға оло батырлыҡ өлгөһө булып иҫәпләнде) тағылған, затлы буҫтауҙан тектерелгән погонһыҙ китель, билендә ике телле яҫы ҡайыш, ҡара геләфи салбар, аяҡтарында ҡуныстары гармундай йыйырынҡы, баҫҡан һайын шығырҙап тауышланған хром итек. Йомро башындағы һарғылт сәстәре матур итеп алынған, йыйнаҡ итеп, ҡырын һалып тарап ҡуйылған, сәгер күҙҙәре осҡон сәсеп һәр нәмәне үтә тишерҙәй итеп, һынап ҡарай. Кейеменә гелән үтемле иҫәпләнгән “Тройной” одеколонын мул итеп бөркөр ине. Тәртип, бөхтәлек яратҡан кеше булараҡ, һәр саҡ фуражкаһының, кәпәсенең эсендә энә менән еп йөрөттө; төймәһе төшһә, берәй ере сөй-фәләнгә эләкһә, башҡаларға бәләһен һалмай, үҙе ҡаҙай, ямай. Салғынан эшләнгән үткер бәке менән ентекләп ҡырынмайынса, йоҡа сикәләрен вазелин менән йомшартмайынса, төҫ-башын рәткә килтермәйенсә урамға, халыҡ араһына сығып күренмәй. Ҡиәфәте үҙ-үҙенән ҡәнәғәт, кәйефе һәр саҡ күтәренке, бит-йөҙө табала ирегән һары майҙай йылмайыуҙан йәйелгән ине уның, әллә донъяһы ысынлап та теүәл, әллә башҡалар алдында һыр бирмәй ҡыланды, белмәҫһең. Теүәллек, йыйнаҡлыҡ, тапҡырлыҡ талап иткән ауыл күрке, күргәҙмәгә ҡуйыр зат, борон йәшәһә бейек, семәрҙәренә алтын ялатылған һарайҙа батшалар янында ғына көн итер ине, билләһи! Уның маһир ойоштороусы, ялҡынлы оратор булыуы хаҡында әле лә һөйләйҙәр. Отчетты ла бер нәмәгә күҙ һалмай, һәр һанды, фактты башында тотоп, сәғәттәр буйы һөйләгән, уны мауығып, мөкиббән китеп, онотолоп, ышанып тыңлағандар. Һуң доклад яҙыр, уны уҡыр рәте булмағас ҡайһылайтһын, үҙенсә тырыштырғандыр шунда. Мәжлестә инде моңло итеп йырлап та ебәрә, ойота баҫып бейергә лә төшөп китә, үҙе тәпәнсе, көрәгәсе, тик уның эсеп иҫергәнен, ҡыҙмаса

йөрөп урынһыҙ хәбәр һатҡанын бер тапҡыр ҙа күрмәнем, ишетмәнем. Мәжлестә иң яратҡан, урын-еренә еткереп башҡарған һыйлау йолаһы – балыуанлыҡ, ихласлығын күрһәтергә теләп ҡунаҡтарына ҡулы менән итле һалма һоғондороуы. Саҡырылғандар ҙа бер минут та һуңға ҡалмай килеп етә, сәбәпһеҙ тотҡарландыңмы – бикләнгән ишек алдында тора ла ҡалаһың. Бына атайымдың тулы булмаған портреты, уның ҡылыҡ-фиғелен, холҡон белгәнсә үҙем һүрәтләнем, белмәгәнемде яҙа-йоҙа ишеткәндән өҫтәнем.

Пенсияға сыҡҡас, оло әсәйем менән күрше ауылда йәшәне, кәртә тултырып мал бағыуҙан, ер яптырып ҡош-ҡорт аҫрауҙан тыш, бал ҡорто тотто, таҡтанан эшләнгән, түмәрҙән өңөлгән бихисап умарталары картуфлығын ҡырлатып теҙелгәйне. Кәртә-ҡура тирәһе лә төҙөк, ҡараулы. Хаҡлы ялдағы тормошон ҡасандыр өлгө иҫәпләнгән хужалығы, биләмәһе кимәлендә тоторға ынтылғандыр, күрәһең. Күпме генә ҡырталашһаң да, бирешмәҫкә маташһаң да, ғүмер тигәнең бармаҡтар араһынан ҡойолған ҡом рәүешендә, ҡартайған көндә буш ҡалған ҡушусыңды елгә ҡуйып япа-яңғыҙың тора ла ҡалаһың. Өйөр айғыры мөсһөҙ, бахыр алаша хәлендә ҡалһа, уны оноталар, йүгәнен һыпырып, дағаларын ҡуптарып алып иреккә ебәрәләр, сөнки әлеге мәлдә бәйгелә икенселәр елдерә, икенселәр алдынғылыҡты бирмәй. Дан етәксене лә ваҡыт үтә килә оноттолар, тағы ла бер нисә йылдан бөтөнләй күҙ уңынан төшөрөп ҡалдырҙылар. Ул шулайтып үҙ донъяһына бикләнде, дүрт мөйөшөнә ҡарап ҡалды, һуңғы йылдарында урамға сығып күренмәне, йыйылыштарға барманы, ауылдаштары менән аралашманы. Дүрт мөйөш, билдәле дүрт тарафтан ҡыҫа, хәлде, ҡарыуҙы ала.

Ҡарт алаша, тигәндәй, аттар ҙа илай икән ул. Бер тапҡыр шундай күренеште күреп тетрәндем: ҡарт ат дерелдәп ялан кәртә уртаһына баҫҡан, мороно осонан йылтырап һеләгәйе һарҡа, эрен баҫҡан күҙҙәренән йәштәре субырҙай, тамағы төбөнән һыңҡылдауға тартым өн быуылып сыға. Аттар тәүлек әйләнәһенә ятмаҫ өсөн яратылған, ғүмер баҡый аяҡ өҫтө йәшәйҙәр ҙә көтмәгәндә гөрһөлдәп ауып йән дә бирәләр.

Хикәйәләүемдән ирекһеҙҙән тайпылам тағы. Беҙҙең ауылда атты иптәш, юлдаш, дуҫ итеп Ғәлимйән бабай йәшәне, Батисов ине уның фамилияһы, төҫө көңгөрт булғанлыҡтан, ҡыҫҡартып, Ҡара Батис тип кенә йөрөттөләр. Дөйөмләштереп шуны ғына әйтәм, тышы ҡара иҫәпләнһә лә, эсе аҡ, эшлекле, бөтмөр кеше ине ул. Ҡайҙа барһа ла, атын эйәртеп етәкләй, менә, йә егә. Миңә ҡалһа, Батис бабай шул аты менән ҡуша тыуған да, әле лә игеҙәгенән айырыла алмай йөрөп ята һымаҡ. Табип амбулаторияһында эшләгәндә ул миңә ҡабул итеүгә килде. Үпкәһендә йөрөткән йәҙрә ярсығы урынынан ҡуҙғалғанлыҡтан, ныҡ бирешеп, бөтөрөнөп киткәйне, ҡаҡ һөйәккә ҡалғайны. Бында ла үҙе түгел, кесе улы етәкләп килтергән. Хәлен һорашҡайным, ҡара ҡомғандай йөҙөн йыйырып былай тине: “Аяҡтарымды көскә ҡымғырлатып ығышам әле шунда, энә йотҡан бурҙайҙай тертәңләйем, темеҫкенәм, барына ҡул һелтәп ятып ҡына ҡуйыр инем дә, башҡаса тора алмауҙан ҡурҡам!” Хәҙер уйлап ҡуям, минең атайым да егәрле аттан төшөп, ҡараҫҡылай ҡорсаңғы хәлендә ҡалғас, моғайын да, йәштәрен субырҙатып, ғорур, башбирмәҫ йән булараҡ аяҡ өҫтө йән биргәндер, күҙаллауымса, моғайын да, шулай иткәндер…

Эйе, ул минең атайым ине, ғәзиз, ҡәҙерлегә иҫәпләнер атайым… һәм асылда бер кем дә түгел. Таныш кимәлендәге ят кеше, сит ғаилә башлығы.

Кем ғәйепле? Моғайын да, беҙҙең бала сағыбыҙҙы тартып алған, бәхетебеҙҙе урлаған ҡәһәрле һуғыштыр. Һуғыштан һуң ирҙәргә ҡытлыҡ килде, азаматтары яу яландарында ятып ҡалды, ҡайтҡандары ла аҡһаҡ, унан ҡалһа туҡһаҡ, ә ғаилә ҡорорға, бала табырға ымһынған ҡатын-ҡыҙҙар быуа быуырлыҡ, сиртеп һайлап ал…

Ғүмер бүләк иткән яҡыныма ғәйеп ташларға, рухын рәнйетергә йыйын-майым, сөнки йәнемә тап киләме-юҡмы, тәнемдә уның ҡанын йөрөтәм дәһә, йәнә һис ҡасан насарлыҡ, хаслыҡ ҡылмаған, һиңә яратып, танһыҡлап баҡҡан кешене нисек яманламаҡ?! Ҡан көҫәгән үсле бүреләй күктәге айға ҡарап олоноң ни ҙә оломаның ни, ә ул ҡараңғы төндө юл тоҫмаллатыр кимәлдә яҡтырта, әммә йылыһы ғына юҡ. Барыр һуҡмағыңды тоҫмаллайһың да бит, юлдашһыҙ сәфәргә сығыуы, юлда йөрөүе еңелдән түгел. Юлдашһыҙҙарҙың хәлен яңғыҙҙар ғына аҡлай, белә һәм тоя…

Атайым һирәк-һаяҡ беҙгә килә лә мине тубығына ултыртып алып ҡыҫып-ҡыҫып һөйә, таҡыр маңлайымдан һыпыра, арыҡ арҡамдан ҡаға. Ситкә тартылам, ятһынам, тәнемдән аңлайышһыҙ зымбырлау йүгереп үтә, сөнки беләм, бына ул бүләктәр, күстәнәстәр тотоп килгән, әле ирәйеп китеп йәйелеп ултыра, тик оло бәлә, ескәй бала өсөн фажиғә шунда: был ваҡытлы күренеш, яһалма ирәбелек, бер аҙҙан, аҡса түләп театр спектаклен, филармония концертын ҡарап күңел асырға килгән тамашаһы ише ул беҙҙе ташлап үҙ ғаиләһенә ҡайтып китәсәк, билдәле мәлгә ҡәҙәр беҙҙе онотасаҡ, хәтеренән сығарасаҡ. Әле өйөбөҙ эсендә аңҡыған ир еҫе лә яйлап юҡҡа сығасаҡ. Еҫтәргә килгәндә, ҡатын-ҡыҙҙыҡы йортҡа йылылыҡ, нур килтерһә, ирҙеке – ныҡлыҡ, көс-ҡеүәт өҫтәй, ана шул әйткәндәрем бергә ҡушылып ғаилә ҡотон, ейгән аштың бәрәкәтен хасил, тәшкил итә.

Шулай ташландыҡҡа ҡалып, терәк-таянысһыҙ үҙемдең көскә, әрһеҙлеккә ышанып үҫтем. Ә әсәйемдең иңендә тотош хужалыҡ ауырлығы: иртәнән ҡара кискә ҡәҙәр эштә. Шулай булһа ла, тамағыбыҙҙы ас итмәне, етемлегебеҙҙе ете-яттарға күрһәтмәне, сыйырсыҡ ояһылай йортобоҙҙа гелән нур уйнаны, унда йылы һәм яҡты булды. Өҫтөбөҙҙө бөтәйтеү бер эш, ә бына йәнселгән күңелде ҡоршау күпкә ауырыраҡ. Ҡатын-ҡыҙ ни тиклем генә өлгөр, сымыры булмаһын, һис ҡасан ир-атты алмаштыра алмай, һыйырҙы эйәр йәмләмәй, гүзәл заттар ҡоронда була тороп яулыҡты кәпәскә алмаштырыу килешкән эш түгел.

Тиҫтер малайҙар менән эләгеп, талашып, көҙгө әтәстәрҙәй һуғышып китеү – бала саҡ өсөн ғәҙәти хәл. Еңелмәҫкә, иң мөһиме – иламаҫҡа, ҡанаған еремде күрһәтеп йәлләтмәҫкә тырышам, мөйөшкә ҡыҫырыҡлап сараһыҙланған сәүек көсөктәй тештәрҙе ыржайтып уҫал һуғышам, йоҙроҡтарҙы, аяҡтарҙы эшкә ҡушып хәрәкәткә ебәрәм, күҙемә нимә эләгә, шуны алып бәрәм, елгәрәм, ене ҡуҙғыған шайтандай ҡыланам. Ниһайәт, этеп алып барған баҫымдан еңелгән малай шыңшып мәрхәмәт һорай: “Атайыма-а-а әйтә-ә-әммм!..” Миңә шул ғына кәрәк тә, еңеүсе ҡиәфәтендә, бөйөрҙәремә таянып ебәреп, урам яңғыратып һөрәнләйем: “Бар, әйт! Ҡайтып ошаҡла ла, етәкләшеп килегеҙ, икегеҙҙең дә кәрәгегеҙҙе бирәм, һыу эскеһеҙ итәм!” Аллам һаҡлаһын, ололарға ҡул күтәреү, ҡырын һүҙ әйтеү ҡайҙа?! Йоҙроҡло ҡулым күтәрелгән хәлдә лә, ир көсөн еңә булам тағы, һөйләйем хәбәр, самаһыҙ лөғәт һатам, буш ҡыуыҡтай маҡтанам шунда. Атайыңды алып кил, тип талап итеүем атайлыларға көнләшеүҙән әйтелгәндер, күрәһең.

Көҙ етһә, етем балаларға кейем-һалым өләшәләр, кемгә итек, кемгә кәпәс, кемгә фуфайка, тигәндәй. Ярай әле, мәсхәрәгә ҡалдырып дөйөм линейкала тоттормайҙар, дәрес барышында берәмләп саҡыртып бирәләр. Ни тиһәң дә, танауға еҫ керә башлаған саҡ, ҡыҙҙар алдында оят. Шулай итеп, был хәйриә сараһына шәхесемде түбәнһетеү, мыҫҡыл итеү һымағыраҡ ҡараным. Бирелгән әйберҙе ер тишегенә инерҙәй булып теләкһеҙ генә ҡабул итәм дә йәшереп-боҫороп алып ҡайтып урындыҡ аҫтына ырғытам. Бер көн килеп сыҙамым һынды, ниһайәт, томолдороҡ кейергә теләмәй сығынлаған ҡонандай булмышым баш күтәрҙе, итектәрҙе уҡытыусылар бүлмәһенә ырғытып сығып киттем. Ике көн барышында класс етәксеһе ләм-мим, бер һүҙ өндәшмәне, төпсөнмәне лә, тыныслыҡта ҡалдырҙы. Өсөнсө көн һуңғы дәрес алдынан мине мәктәп директорына саҡырттылар. Әмәл юҡ, аяҡтарҙы көскә һөйрәп киттем, теләкһеҙ генә кабинет ишеген шаҡыным. Барып инһәм – өҫтәл түрендә теге кирза итектәр. Эйе, бер ырғытҡанды алдым ти алмай ҙа, үҙ төкөрөгөңдө ҡабаттан ялау егетлек түгел. Яңы ҡапҡаға инергә теләмәгән бәрәндәй ҡулдарымды ҡаушырып, аяҡтарымды киреп бойондороҡһоҙ ҡиәфәттә баҫтым. Директор Рауил ағай күҙлеге өҫтөнән ҡарап эргәһенән урын күрһәтте:

– Хәлдәрең нисек, якобинец? – тине ул оҙайлы тынлыҡтан һуң. – Тарих уҡытыусыһы булараҡ француз түңкәрелешен хәтергә төшөрөп ултырыуы.

– Иҫ китмәле шәп! Аяҡ кейемдәрем туҙмаған, тишелмәгән әлегә, иҫкерә ҡалһа, алып бирер кешем бар! – Әңгәмәнең ни хаҡында барасағын һүҙһеҙ ҙә төшөнөп, арҡыс-торҡос хәбәр һалдым. – Ә быны Йыһангир олатайға бирегеҙ, ҡыуаныр, исмаһам, ә һеҙ үҙ сиратығыҙҙа сауаплы булырһығыҙ!

– Сауаплы, имеш, хөрмәтле мулла-монтағай, мәленән алда сыпраңламай тор, йәме?! – Директор йоҡа, тәбәнәк кәүҙәһен күркәләй ҡабартып уҫал бүлдерҙе лә тауышын йомшарта төшөп һораны. – Армияла һалдаттар нимә кейеп йөрөй әле?

– Билдәле инде!

– Хеҙмәт итергә һин дә әҙерләнәһеңдер, йыйынаһыңдыр, моғайын?

– Һис һүҙһеҙ!

– Шулай булғас, был итектәрҙе хөкүмәт бүләге итеп ҡабул ит!

Кабинеттан сыҡҡансы дәрес башланғайны. Теманы аңлатҡан уҡытыусы ишек төбөндә торған миңә екһенеп ҡараны:

– Ҡайҙа йөрөйһөң бығаса һуңлап?!

– Рауил ағай саҡыртты.

– Ҡулсырһың, бәйелһеҙһең бигерәк, тәртип боҙғанһыңдыр тағы?

– Юҡ, Армияға барырға, һалдат булырға йыйынам. Бына, военкоматтан ебәргәндәр! – Оялмайынса ҡулымдағын юғары күтәрҙем.

Башҡалар кибеттән һатып алынған тимер сана, шәп саңғыла, ялтыр конькиҙарҙа шыуа, ә миңә һырғалаҡҡа алтын ҡуллы балта оҫтаһы Нуретдин еҙнәм сана-саңғыны, быймаларға ҡайыштар ярҙамында беркетмәле шыуғысты ағастан тәсәйҙәй күркәм итеп эшләп бирә, ҡулдан әтмәләнгәнде мөрхәтһенмәүемде күреп һалпы яҡҡа һалам да ҡыҫтыра: “Ни тиһәң дә, кибеттән алған сифатһыҙ, үҙеңдекенә етеү ҡайҙа?!” Буштан килгән бүләккә бүкмәйҙәр, ғәҙәттә, бүкһәң, һемәйеп ҡалыуың бар, шуға өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрәм. Ағас ҡорамалдарын үҙемсә ҡулайлап алам шулай ҙа, сана, саңғы, эйгес табандарына боҙ ҡатырам, шулай итһәң, башҡаларҙан һис тә ҡалышмайһың, хатта уҙып та киткеләйһең ҡайһы саҡ.

Ауылдың урта төшөндә бер ишле ғаилә йәшәне, шунда аралашырға барам йыш ҡына. Балалары арыу һымаҡ, ә бына атай кеше эш яратманы, ялҡау, елкәһе йоҡа булды, ҡатыны ла – силәгенә күрә ҡапҡасы – ауыл ғәйбәтен һағыҙҙай сәйнәй, ағыу телле. Бер көн уйын барышын ситтән күҙәтеп торған, йәнем ҡабул итмәгән, үҙ сиратында мине ек күргән теге хужабикә һәммәһенә ишеттереп йыландай саҡты: “Ас-яланғас етемәктәр ҙә булдымы кеше, улар бит бур, уҫал, алама, бетле…” Шул түбәнһетеүҙән һуң эргәмдәгеләр әллә ерәнеп, әллә бысраҡ йоғоп ҡуйыуҙан һипһенеп ситкә тартылды. Ғәрлегемдән һарай мөйөшөнә барып һыйынып сеңләгәнем хәтерҙә…

Бесән осоро етһә, үтмәҫ, көйләнмәгән салғы менән яңғыҙым бесән сабам, ботаҡ һаплы һәнәк менән бакуйҙы йыйып күбәгә ултыртам. Күбәләрҙе тарттырыу өсөн ат ҡайҙа, уны теләнселәп кемгәлер аҙна самаһы иртәнән алып ҡара кискәсә бил бөгөргә кәрәк. Ҡойолған кәбәнде лә ер аяғы ер башынан һайғау ташып кәртәләйһең, билдәле инде, көсәнеп һөйрәп, ярай әле, ауыл ҡарты Йыһангир ярҙамға килә. Һантыйға хисаплаһалар ҙа, аҡылы теп-теүәл, зиһенле, эшсән, әҙәпле ине ул. Арығансы эшләйбеҙ ҙә, киндер ашъяулыҡ йәйеп ебәреп, Тәңре ебәргәнен уртаға ҡуйып, баҡырсала сәй ҡайнатып табын хәстәрләйбеҙ. Хоҙай Тәғәлә, ғәҙәттә, ике йомортҡа, дүрт бөртөк мундир картуф, ярты йомғаҡ май, түтәрәм арыш икмәген юллай. Шуларҙы ғәҙел бүлешеп тәғәмләнәбеҙ. Ул икмәк валсыҡтарын сәсмәй, ауыҙ тирәһен өҙлөкһөҙ ҡулъяулығы менән һөртөп, ашыҡмай, ҡарһаланмай ғына ашай, һығылып торған табын артындағы зыялы ҡунаҡ тиерһең! Ысынбарлыҡта ул бит ауыл, мир ҡарамағында, кеше көнлө, тамағы ла аслы-туҡлы, мәгәр ошо хәлендә лә әҙәм сифатын һаҡлап, ысын кеше булып ҡала белә. Олатай бесән сабыуҙа ғына түгел, олоно менән һөйрәтеп килтерелгән, мәтегә ҡатып бөткән утынды бысырға, ярырға, өй ҡырлауына ташып өйөргә ярҙам итә, картуфты ла икәүләп ҡаҙып алабыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, алыштырғыһыҙ ярҙамсым, уң ҡулым. Унһыҙ ҡайһылай итер инем икән?!

Йыһангир олатай хаҡында һүҙемде дауам итеп, тағы ла бер бала саҡ хәтирәһен өҫтәмәксемен.

Бер саҡ малайҙар йыйылышып алып, ауыл осондағы ҡайын ҡыуышына оялаған ҙур һағыҙаҡ күсен туҙҙырҙыҡ. Ярһыған бөжәктәр беҙгә ташлана, беҙ инде үҙ сиратыбыҙҙа талсыбыҡтарҙы ҡылыстай болғап тегеләргә ынтылабыҙ. Сағылып-таланып бөттөк, иллә ҡуйыр рәт-самабыҙ юҡ. Шулай пыр туҙышып йөрөй инек, көтмәгәндә ҡапыл эргәбеҙҙә Йыһангир олатай пәйҙә булды. Ул тыныс ҡына атлап килде лә туҙырап ятҡан балауыҙҙарҙы берәмтекләп сүпләп йыйып кире ағас ҡыуышына тултыра башланы, үҙе күсте тынысландырырға теләгәндәй ауыҙ эсенән ниҙер төңрәнә. Малайҙар кемуҙарҙан шаулашырға тотондо: “Дүрәк! Алйот! Иҫкә ярым! Һантый! Ярты аҡыл!” Мин дә уны ҡайғыртып һөрәнләйем: “Олатай, боҫ, сағылаһың бит!” Ул ашыҡмай ғына эшен ослағас, эйәртенешеп урам буйлап киләбеҙ. Һүҙ башланым:

– Әйҙә, бөгөн беҙҙә ҡун! Түр яҡтағы иҙәнгә әсәйем урын йәйеп бирер, мин урындыҡ ҡырлауына ятырмын.

– Юҡ, хәҙер Зәйнуллаларға барам, иртәгә Латифҡа, шунан Әхтәригә, һеҙгә етергә ап-аруҡ көндәр бар әле.

– Сиратыңды боҙ ҙа ҡуй!

– Ярамай.
– Ниңә?
– Әҙәпһеҙләнеп сиратты боҙһаң, ҡәҙер китә.
– Нишләп бая һиңә һағыҙаҡтар теймәнеләр у?
– Улар ҙа бит яҡшы менән яманды айыра. Һәр нәмәнең йәне бар, зиһене лә. Кешелә ҡан аға, ағас олононан һут йүгерә, әҙәм бала таба, үҫемлектәр емеш бирә. Бына шулай ул тормош тигәнең, һәр нәмә мәңгелек тәртипкә ҡоролған. – Ул кинәт нимәнәндер ҡыҙыҡ табып һыны ҡатып көлөп ебәрә лә ары дауам итә. – Тереклеккә хаслыҡ, тәбиғәткә насарлыҡ ҡылмағандар матур йәшәй ул… Һин бер ҡасан да кешегә ҡул күтәреп һуҡма, бер килеп туҡмағың үҙеңә кире әйләнеп килеп бәрер, шуны онотма!

Йыһангир ҡарт аҡыллы дәүерҙә һантыйға хисапланып йәшәне, бөгөн аҡылдан шашҡан көнитмештә аҡыллы булып йәшәй алыр инеме икән? Юҡтыр. Ә теге саҡ уның әҙәмгә ҡул күтәрмә тигән һүҙҙәре минең өсөн тормош ҡанунына әүерелде. Уртыңды сәйнәйһең дә сыҙайһың, маңлайыңа яҙылған яҙмышыңа яҫҡынһаң, үҙеңдең бер килеп эт типкеһендә ҡалыуыңды көт тә тор!

Сабынлығыма урман эсенән, яттар күҙенән ҡасырып берләмдән бүре һуҡмағын һалдым, сөнки оло юлдан велосипедлы, матайлы тиҫтерҙәр елдерә. Нишләп мин уларға һағырға тейеш әле, кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың да?!.

Шулайыраҡ үҫтем, әммә, шәхесем етем булһа ла, булмышым, күңелем бөтөн килеш ҡалды. Егет ҡорона ингәс әле бер көн әсәйем сулала һорай ҡуйҙы: “Улым, атайың бик билдәле кеше булды, әллә уның фамилияһына күсәһеңме? Теләй ҡалһаң, тиеүем дә…” “Юҡ, әсәй, мине бит һин тәрбиәләнең, ауыҙыңдағы һуңғы телемеңде өҙөп ҡабып әҙәм иттең, шулай булғас, үҙебеҙҙең фамилияла ҡалам. Шикләнмә, исемеңә, тоҡомобоҙға тап төшөрмәм!”

Һәм иң оло, Тәңре кисермәҫлек гонаһым – атайымды ерләшмәнем, ҡәберенә тупраҡ ырғытманым, сөнки уның вафатын һуңлап ҡына ишеттем. Хәҙер үҙемә үҙем ҡат-ҡат һорау бирәм дә аныҡ ҡына яуап ала алмайым: “Әгәр вафатын мәлендә ишетһәм, барыр инемме икән, әллә юҡмы?!” Атайымдың үлем хәбәре лә илатманы, ҡайғыға һалманы, күңелемде кем менәндер бәйләп тотҡан еп өҙөлгәндәй итте бары. Иламауым ҡатылыҡмы, бәғерһеҙлекме? Бәлки. Улай тиһәң, ауыл ҡарты Йыһангир үлгәндә күҙҙәрем йәшләнде, йәнем иңрәне. Олатайҙың үлеменә ышанманым, әле лә ышанмайым. Юҡҡа ғына уға Йыһангир тип исем ҡушмағандар бит, ул бары мәле еткәс асманға ашҡан да, киң, йондоҙло Йыһанды айҡап, гиҙеп бөгөн дә йөрөп ята һымаҡ. Урыҫтарҙа “Чтобы узнать человека, надо с ним пуд соли съесть” тигән мәҡәл бар, ә беҙ Йыһангир ҡарт менән күтән һурпаһын ғарҡ булғансы саманан ашырып һемергәйнек, шуға ла ул миңә яҡын, ҡәҙерле.

Атай, тигәндәй, өйләнгәс, ҡайным минең өсөн атайға әүерелде, бер юлы ике яуаплы, мәртәбәле дәрәжәне тотто. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, ул эргәһенә мине ултырта, аҡыл өйрәтеүҙән алда иң әүәл ипле генә итеп кәңәш һорай. Ҡунаҡта саҡта төнө буйы минең менән көңгөр-ҡаңғыр килеп сыға, йорт тирәһендәге берәй эшен эшләһәм, йүгереп килеп икенсе остан йәбешә. Бер саҡ ул етди сирләп киткәс, алып килеп ҡала дауаханаһына урынлаштырҙым. Белгестәр ҡарап, тикшереп, анализдар әҙер булғас, дауалаған табибы еңемдән тартып бер яҡ ситкә алып китте:

– Готовьтесь к худшему… Максимум три дня…

Ҡайным да һиҙенде буғай, эргәһенә барғайным, уратып һүҙ башланы:

– Кейәү, һин үлемдән ҡурҡаһыңмы ул?

– Тормош матур бит, йәшәйек әле, ҡайҙа ашығырға?

– Тимәк, ҡурҡмайһың… – Ул үҙенсә һығымта яһаны ла өҫтәп тәҡдим итте. – Әжәлдән ҡурҡмайым тигәс, әйҙә, минең янда ҡунып йөрө, ни тиһәң дә, яңғыҙ ҡалғы килмәй…

Ул өс төн оҙоно тормошон һөйләне, ә мин тыңланым… Дүртенсе көн иртәнсәк ҡарашы әллә күпмегә теремекләнгәйне, өмөтлө итеп былай тине:

– Мин үлемде кисектерергә, бирешмәҫкә, һинең һүҙеңде йыҡмаҫҡа булдым… Йәшәйек әле… Бар, ҡайт, арығанһыңдыр, ял ит, рәхмәт һиңә!

Ҡайным тағы ла өс йыл самаһы йәшәне.

Ошо хәлдән һуң үҙем өсөн һуңлаған хәҡиҡәтте астым: ир кеше ярҙамға ла, әпәүләүгә лә, күтәрмәләүгә лә мохтаж түгел, ауыр саҡта уға бары терәк һәм таяныс кәрәк!

Юбилей осоронда ижад кисәмде Сибай хакимиәте үтә лә ҙурлап, олонан ҡубып, филармония залына арҙаҡлы ҡунаҡтар саҡырып уҙғарҙы. Сара алдынан көндәлек мәшәҡәттәрҙе теүәлләп, ҡала буйлап килә инем, теге күп балалы апайҙы тап иттем, ул фоторәсемем төшөрөлгән афишаға ҡарап онотолоп тора ине, мине күреп сырамытҡас, йәнә кинәйәләп төрттөрҙө:

– Китсе, һин дә инсан булып киткәс!

– Эйе, уйсан инсан.

Яуабым оҡшаманы булыр, үкенгәндәй, үртәлгәндәй ҡул һелтәне теге:

– Атайлы килеш тә минекеләр серек йомортҡалай эшкә ашманы, береһенән йүн дә, мәғәнә лә, рәт тә сыҡманы, ҡоромағыр, ә һин үҙ көсөң менән әҙәм булып киттең!

“Апай, йомортҡаларҙың сереккә әүерелеүендә әтәстән ғәйре тауыҡ ғәйепле, насар, еткелекле баҫмағанһығыҙҙыр, ә минең ас бетем башымда түгел, йөрәгемдә булғандыр ул!” – тип саҡ әйтеп ысҡындырманым.

Ҡатынымдың ғәҙәте бар, улыбыҙ һорау бирә ҡалһа, гел бер нәмәне ҡабатлай, тыҡый: “Атайыңдан һора иң тәүҙә, ул нимә тип әйтер!” Ә мин былайыраҡ тием: “Улым, һин бала түгел инде хәҙер, ауыртмаған яғыңа ят, үҙең нисек теләйһең, шулай хәл ит, әгәр мин һинең урыныңда булһам, ошо ерҙә былайыраҡ итер инем…” Шулайыраҡ ситләтеп, кинәйәләп теләгемде әйтәм. Беләм, уға иң әүәл минең фекерем, тормошҡа ҡарашым, ошо, әлеге аныҡ хәл-ваҡиғаға мөнәсәбәтем мөһим, минең әйткәндәрем ҡайһы саҡ уға терәктер ҙә.

Бер саҡ мәртәбәле йыйында мине түргә ҡуҡрайтып ултыртып ҡуйып, алған дәрәжәләремде, исемдәремде теҙеп атап, күккә ашырып ҙурлап ташланылар. Маҡтауға, ҡупыртыуға үтә лә һаҡсыл ҡараштамын, тейешен генә ишетәм, саманан аштырған фәстереүҙәрҙе ҡолағым һыртынан үткәрәм. Ҡайтып килгәндә улым үҙ баһаһын бирҙе: “Дәрәжәләрең, исемдәрең миңә нимәгә ул, һин бары миңә атай, яҡшы атай!” Ошо әйтелгәндәр теге күтәрмәләүҙәрҙән әллә күпмегә юғарыраҡ ине.

Атайым хаҡында бер кәлимә генә һүҙ әйтергә йыйынғайным да, көллөһө хаҡында теҙеп яҙып алдым да киттем: атайым, Йыһангир олатай, Нуретдин еҙнәй, Батис ҡарт, ҡайным һәм килеп үҙем. Шулай итеүем, бәлки, дөрөҫтөр ҙә, сөнки беҙ бит барыбыҙ ҙа – атайҙар. Төрлө фиғелле, буй-һынлы, һөнәрле

ир-аттар. Уларҙан күп нәмә талап та ителмәй, бары тәрән итеп, күкрәк тултырып алған һулыштай, туҡтауһыҙ ярһып типкән йөрәктәй өҙлөкһөҙ кәрәк булып балаларының эргәһендә булһындар, ҡалһындар, абынып китә күрмәһендәр, тип ҡурсалап, борсолоп, еңел булмаған, соҡор-саҡырлы тормош һуҡмағынан ғәзиздәрен етәкләп барһалар шул еткән, һәм илаһи нәҙер – һис ҡасан яҡындарына хыянат итә күрмәһендәр. Хыянат иң ауыр гонаһтарҙың береһе – ул ғәфү ҙә ителмәй, кисерелмәй ҙә.

Приют янынан үтешләй ете-һигеҙ йәштәр самаһындағы бер ир баланы күреп ҡалдым. Ул күккә өмөтләнеп төбәлгәйне. Бала күңеле әкиәттәргә, мөғжизәләргә ышаныусан, табыныусан, бәлки, малай, торна суҡышында бала түгел, атаһының, йә әсәһенең осоп килеүен көткәндер, кем белә...

Минең изге инаныуым – бер ғаилә, бер атай, бер әсәй һәм күп балалар. Әсә – күктәге ҡояш булһа, атай – ер үҙәге, ер күсәре. Ҡояш һәр ваҡытта ла йылыта, әммә ләкин ер күсәренән ысҡына ғына күрмәһен, ул саҡта йәшәйеш селпәрәмә килер! Һәм һуңғыһы – атай берәү генә була, ул бүленмәй, ситбашҡа сәселмәй, ваҡланмай торған изге төшөнсә!

## *Эҙҙәр*

Беҙҙең ауылда буран сыҡһа, бөтә булған көрттө урамға килтереп тултыра. Шуға күрә көн боҙолғанда эшкә бер сәғәт самаһы алдан сығам. Мәктәптән арыу уҡ йыраҡ йәшәгәс, көрт ярып барғансы ваҡыт үтә лә китә.

Урамға сығып, мәктәп яғына ыңғайлау менән башҡа өйҙәрҙән дә кешеләр сыға башлай. Мине генә көтөп торғандар тиерһең. Улар – минең уҡыусыларым. Ваҡ-ваҡ ҡына атлап, балаларҙың аҙымына самалап, юл ярып алдан төшәм, ә тегеләр, ҡаҙ бәпкәләре һымаҡ, минең арттан эйәрә. Боролоп-боролоп ҡарайым: минең артымдан уҡ эҙемде күмергә өлгөргән буранда яҙлыҡманылармы былар, арыманылар микән? Юҡ, мин ярған юлдан ғына киләләр…

Хәҙер ниндәй генә эшкә тотонһам да, ҡайҙа ғына барһам да, эшемде еренә еткереп эшләргә, һәр аҙымымды самалап, үлсәп баҫырға тырышам. Артыма боролоп ҡараһам, уҡыусыларым минең эҙҙәремә генә баҫып киләләр һымаҡ тойола.

## *Моңһоҙ йәшәү*

Мәскәү метроһынан үткән саҡта бер яҡ ситкәрәк баҫҡан ялбыр сал сәсле скрипкасыны тап иттем. Ҡаҡса буйлы, ябай урам музыкантына шыпа ла оҡшамаған зыялы ҡиәфәтле ир ҡатмарлы классик әҫәрҙе еренә еткереп, оҫта итеп башҡарҙы. Йәмрәй йөҙлө, сиңерткә сиреүендәй ябырылышып, йыбырлашып унда-бында үткән-һүткәндәр уға ҡарамай, иғтибар ҙа итмәй ҡайҙалыр ашығалар, исмаһам, берәйһе бер аҙға ғына янында туҡталып уйнауға ҡолаҡ һалһасы, моңға тартылһасы. Юҡ! Аҙаҡтан метрола донъя кимәлендә бик билдәле скрипкасының сығыш яһауын ишеттем. Бәлки, теге саҡ күргән музыкантым ул булғандыр, кем белә...

Яңы йыл алдынан гитарасы егет көн ағышында, өс-дүрт сәғәт самаһы супермаркет алдында йырлап торҙо. Бында ла шул, Мәскәүҙәге хәл....

Күңелһеҙ һығымтаға килдем: ҡулланыусылар һәм аҡса ҡолдары менән тулған йәмғиәттә йәшәп ятабыҙ икән дә баһа. Һәммәһен тамаҡ туйҙырыу

уйы ғына ҡыуа икән унда-бында, уларҙы матурлыҡ, нескәлек, моң йәлеп итмәй. Күҙ тоноп матди килемгә табыныуҙы, аңһыҙ хайуан ише өҙлөкһөҙ тамаҡ артынан сабыуҙы бер ниндәй ҙә әхлаҡ ҡалыптарына, рухи сиктәргә һыйҙырып булмай! Юғарыға, камиллыҡҡа ынтылыу, нәфислек тыуҙырыу, үҙенән аҙаҡ яҡты эҙ ҡалдырыу әҙәм балаһының төп тормош ҡануны түгелме ни?!.

## *Баш эймәү*

Юлсырмын. Туҙанға батып, кейемдәремде сырыштырып, бысратып, бушаған ҡапсығымды болғап ҡайтып инәм дә бер аҙ ял иткәндән һуң тағы сәфәргә йыйына башлайым. Уңғансы кейем таҙартылған, үтекләнгән, ҡапсығым да ниғмәттәр менән нышып тултырылған. Күңел дә туҡ, кәйеф тә күтәренке. Әсәйем, ғәҙәтенсә, ауыл осона сығып оҙатып ҡала. Бер ни тиклем ара киткәс ҡайырылып ҡарайым, ул юл ситенә баҫҡан да башын эйеп тора... Хәҙер ҡайтһам, төйәгемдәге ҡайындар баштарын эйеп тәлгәштәрен болғап ҡалалар. Мәғрур ҡарағайҙар, Аҡ Таш сусағы ғына нисек бар шулай. Улар баш эйеү өсөн яратылмаған.

Бер ҡайтҡанында улым һорай ҡуйҙы:

– Атай, һеҙ мин юҡта нимә менән шөғөлләнәһегеҙ ул!

– Нимә менән тип, һәр ата-әсәнең йәшәүе билдәле, баланы ҡаршы ала, шунан оҙата, аҙаҡ көтә...

Тел төбөмдө, кинәйәмде аңламаны ғәмһеҙ, вайымһыҙ көлөп кенә ҡуйҙы.

Улымды тағы юлға оҙатырға сыҡтым. Йән һығылып күңел болоҡһоһа ла, тура баҫып тороп ҡалдым. Ҡаялар сыҙамлы, ҡарағайҙар баштарын эймәй. Һәр хәлдә, шуларға оҡшарға тырышам...

## *Ҡар йомарсығы*

Ул акушер-гинеколог булды. Билдәле, оҫта, абруйлы акушер-гинеколог. Күренергә, тикшерелеү үтергә теләгән ҡатын-ҡыҙ уны эҙләп ер аяғы ер башынан килер ине, кабинеты ҡаршыһында гелән оҙон сират, тик ағайыбыҙҙың бер ҡырын яғын өҫтәп әйтмәү мөмкин түгел – ул ни гел һуҡмыш та ҡырын һалмыш. Эш мәлендә лә, башҡа ваҡытта ла. Солоҡтай дәү кәүҙәһен уҡлау йотҡандай тура тотоп, ҡыҙара бүртеп тик йөрөй, еҫе сыға тимәһәң, эскәнлеген һиҙмәҫһең дә. Баҫалҡы холоҡло, һәр саҡ кешенең ыңғайына йөрөгән баш табип алыштырғыһыҙ белгестең был хилаф ҡылығына бармаҡ аша ҡараны, күрмәмешкә һалышты.

Акушер-гинеколог мине тәү осрашҡандан, танышҡандан уҡ үҙ итте. Яҡын күреүен ул былайыраҡ аңлатты:

– Шуны айырып әйтер инем, мырҙа, һин – замечательный и неповторимый әңгәмәсе.

Ҡупыртыу йәнемә майҙай яғылһа ла, ҡаршылашып маташам:

– Была һиңә яңылыҡ, тигәндәй, мин улай уҡ замечательный, өҫтәүенә, неповторимый түгелмен һымаҡ.

– Яҡшы әңгәмәсе насарынан шул яғы менән айырыла, ул һөйләүсене урынһыҙ бүлдермәй, дәғүә белдермәй, түҙемле генә итеп өнһөҙ-һүҙһеҙ аҙаҡҡаса тыңлай белә.

– Тыңлай, түҙә һәм өнһөҙ-һүҙһеҙ үҙенсә генә һығымта ла яһай.

– Быныһы инде – уның шәхси эше!

Баш баҫып, кәрәк ерҙә эйәк ҡағып йөпләп, ҡыҙыҡ урындарҙа ҡаш сөйөп, ҡыҙғаныс күренештәрҙә маңлай сирылтып аптырай белгән “замечательный” тыңлаусы булһам, ул – алыштырғыһыҙ хикәйәсе. Хас та бер шаршаулы пьесаны яңғыҙы башҡарған актер! Мауығып китә, бирелә, онотола, башҡарған роленә мөкиббәндән инә. Ҡатыны менән Ер шарының күпселек илдәрендә булған, тәбиғәтен күргән, урындағы халыҡтың үҙенсәлекле йәшәүе менән ҡыҙыҡһынып танышҡан. Шул сәфәренән шаҡы-шоҡо, беҙҙең ҡарашҡа ят кейем-һалым алып ҡайтҡан да бик йыш ҡына шуларҙы эшкә кейеп килә, бер ҡараһаң, башында – Боливиянан алып ҡайтҡан киң тирәсле эшләпә, икенселәй күрһәң, өҫтөндә сыбар Таиланд күлдәге, ауыҙында баш бармаҡ йыуанлыҡ Бразилия сигараһы. Килештерә, шартына килтерә инде. Саҡ ҡына буш ваҡыты булдымы, “Ашығыс ярҙам” станцияһына килеп, күндәм тыңлаусыһын эҙләп табып, сәйәхәт мәлендә күргәндәрен тамшанып һөйләргә тотона. Ә мин, төпкөл ауыл балаһы, картуф баҡсаһынан ары китмәгән кеше булараҡ, мауығып китеп тыңлайым.

Яйын тап килтереп, ул мине өйөнә лә алып ҡайтты. Матур йәшәйҙәр, етеш, һәр нәмә үҙ урынында. Ҡунаҡ аҙ ултыра, күп һынай, тиҙәр бит, мәгәр шул арала был өйҙән ниндәйҙер йәнде өшөткән һалҡынлыҡ килеүен тойҙом. Хужабикәнең йөҙөнә лә уңмаҫлыҡ дәрәжәлә һағыш һеңешкән. Хужа шул һалҡынлыҡты йылытырға теләпме, бер ярты араҡы, ҡырлы стакан сығарып өҫтәлгә ултыртты ла хәбәргә күсте. Ә мин өшөгән кешеләй ҡулдарымды ҡаушырып тынып ҡалдым.

Бер көн эштән сыҡтыҡ та ҡайтыу яғына йүнәлдек. Март аҙаҡтары. Көн салт аяҙ, ҡар шаулап ирей, тау битләүҙәренән гөрләүектәр йүгерә. Болот әҫәре ҡунмаған зәңгәр күк йөҙө, байыу яғына ыңғайлаған көләс ҡояш йәнде ашҡындыра, кәйефте күтәрә. Юлдашым ғына нишләптер эсенә йомолған да, ҡалын ирендәрен ҡымтып, һарғылт ҡаштарын йәмерәйтеп килә, көндәгесә һүҙсән дә түгел. Ике бала юл ҡырлауындағы япмаһы йоҡарып сыбарлана барған битләүҙә уйнап йөрөй. Бәләкәс ҡыҙыҡай ҡар тәгәрәтә, ә үҫмер йәшендәге малай шул йомросайҙарҙың береһен икенсеһенә ҡуйып Ҡыш бабай әүәләп маташа. Һын ҡыш менән яҙ араһындағы сик бағанаһы һымаҡ та ҡабул ителә, сөнки миҙгелдең бер бите ҡояш, икенсеһе ай мәле, бына хәҙер ихласлап йылыта, эңер төшөү менән һәммәһен шыҡыйтып, шыҡырайтып туңдырып та ҡуйыр әле. Туҡталдыҡ. Балаларҙың самими мәшғүлләнеүҙәрен бер килке тамаша ҡылдыҡ.

Акушер-гинеколог, ниһайәт, телгә килде:

– Әгәр бөтәһе лә һәйбәт барһа, тыуасаҡ улым анау малай йәшендә булыр ине, моғайын, икенсе балам, ҡыҙым да ошо ҡыҙыҡай самаһында… Хәҙер күпме генә тырышһаҡ та, ни тиклем оҫта булһам да, үткәндәрҙе кире ҡайтарып булмай. Яҡты донъяға тыуырға ынтылып шыҡҡан яралғының ғүмерен ҡыйыу – үҙе үк оло гонаһтыр. Ә минең операция кабинеты аша көнөнә тиҫтәгә яҡын ҡатын-ҡыҙ үтә ине. Ҡатыныма үҙем аборт яһаным. Ике тапҡыр. Йәнәһе лә йәшбеҙ, беҙгә бала нимәгә әлегә, өлгөрөрбөҙ һуңғараҡ та. Бер нисә тапҡыр һөйләнем бит инде, тағы ҡабатлайым, өҙлөкһөҙ сәйәхәт ҡылдыҡ, донъя күрҙек. Ел ҡыуыу ҙа бер килеп ялҡыта икән ул. Үҙгебеҙгә үтеп бала һөйгөбөҙ килде. Һуңлағанбыҙ, һуңлау ғына түгел, ошо ҡулдарым менән ғаиләбеҙ ағасының тамырына балта сапҡанмын.

Бына шулай, мырҙа. Хәҙер араҡы менән ҡайғыны йыуырға итәм. Белеп, маңлайыңа киртеп ҡуй, гонаһ менән тапланған күңелде бер ниндәй шыйыҡса ла йыуып төшөрә алмай! Эскелектең нимә менән барып бөтөрө билдәле.

Һүҙһеҙ торҙоҡ. Ҡыҙ бала тау битләүенә күтәрелә лә көлә-көлә ҡар тәгәрәтә. Йоҙроҡтай йомарсыҡ төшөп еткәнсе ҙур түңәрәккә әүерелә.

Бәләкәй гонаһтар булмай шул, булмай, ул да бара тора, тәгәрәй килә тупраҡты, сүп-сарҙы үҙенә һеңдергән ҡар йомарсығы ише ҙур, өшәндергес, һипһендергес ҡазаға олғаша. Ә уны бер урынға өйҙө ниһәң, ҡурҡыныс ҡарасҡы хасил була…

## *Ҡорал һәм кеше*

Парад бара. Майҙандан колоннаға теҙелеп осо-ҡырыйы күренмәй ағылған техниканың ниндәйе генә юҡ: баллистик ракеталар, зенитка ҡоролмалары, танкылар, баштарына пулемет урынлаштырылған бронетранспортерҙар, күкте ауыр бомбардировщиктар япҡан. Баш осондағы шул самолеттар ҡара ҡоҙғондай шыҡыйып бына-бына өҫтөңә ташланыр төҫлө. Диктор эргәһенән үткән Армия ҡоралының мөмкинлектәрен, ҡеүәтен ентекләп тасуирлай, маҡтай.

Ер шары бөгөн дары мискәһен хәтерләтә, яңылыш ҡабынған бәләкәй генә осҡон осмото барыһын күҙ менән ҡаш араһында пыран-заран килтереүе ихтимал. Шулай булғас, ахырызаманды, ҡиәмәт көнөн тәбиғәттән көтәһе түгел, уны яуыз уйлы ҡәбер ҡаҙыусылар үҙҙәре соҡой, яҡынайта.

Тирә-яҡта – байрамса кейенгән ғәмһеҙ халыҡ, улар ҙа һәммәһенә һоҡланып ҡарай, йәнәһе лә, көслөбөҙ һәм һаҡлаулыбыҙ. Асылда был замана “бысағы” кемде лә булһа үлтереү өсөн ҡайралған түгелме? Чеховтың әйткәндәре иҫкә килеп төштө: “Если в начале пьесы на стене висит ружье, то (к концу пьесы) оно должно выстрелить”. Драматург бында сәхнәне күҙ уңында тотҡан, әлбиттә, тик тормош үҙе үк – ҙур сәхнә, ә беҙ – унда уйнаған актерҙар бары, үҙ ролебеҙҙе килештереп башҡарабыҙмы, әллә уйнап еткермәйбеҙме, быныһы инде – икенсе мәсьәлә. Йәшәйештә көн һайын башҡарылған комедиялар көлкөнө килтерә һалып бармай, нишләптер. Драма, трагедияларға килгәндә, улары тетрәндергес. Антон Павловичтың күҙ уңында тотҡан мылтығы ябайҙың-ябайы, ә былар бит – атом, водород бомбалары, ер сигенә барып етеп халыҡты юҡҡа сығарырға һәләтле, тереклекте, тәбиғәтте тамырынан ҡоротмалы ядро ҡоралы!

Парад дауам итте, ә мин был тамашанан ниндәй ҙә булһа йәм һәм мәғәнә эҙләп ҡаршымдағы телевизорға ҡаҙалғанмын. Бына экран тултырып йәш ғаиләне күрһәттеләр: сибәр ҡатын һөйөп-яратып иренә төбәлеп һыйынған, ә тегеһенең елкәһенә менеп үк ҡунаҡлаған шуҡ малай тотош асманды ҡосорға теләгәндәй ҡоласын йәйеп ебәреп шарҡылдап көлә, уның донъяһы теүәл, түңәрәк, сөнки яҡындары эргәһендә. Бер аҙҙан сикһеҙ мөхәббәтте, нур-яҡтылыҡты, шатлыҡ-ҡыуанысты үҙҙәре менән эйәрткән бәхетле өсәү ҡояш сығышына ҡарай атланы…

Ҡорал һәм кеше. Береһе икенсеһенә тап килмәгән ике төшөнсә. Ни өсөн тап килмәйме? Суҡмарҙы иблистәр, шайтан ялсылары әҙерләй һәм йөрөтә, ә иманлы әҙәм балаһы донъяға ҡорал эшләү өсөн түгел, бала табып йәшәүҙе дауам итеү өсөн яратылған!

# *“Кәкүк әбей”*

Ауыл осондағы яртылаш ергә һеңгән тәпәш өйҙә яңғыҙ әбей көн итә. Исеме Фатима булған, тиҙәр, хәҙер “Кәкүк әбей” ти ҙә ҡуялар. Әллә йәшләй генә ирҙән ҡалып, яңғыҙ ғүмер иткәнгәме, әллә бала-сағаһы булмағанғамы – шайтан белһен. Кәкүк булғас, кәкүк инде. Олоһо ла, кесеһе лә шулай өндәшкәс, инәйебеҙ ҙә үпкәләмәй.

Кәкүк әбей мал, ҡош-корт аҫрамай. Хәйер, туғыҙынсы тиҫтәне ҡыуалаған яңғыҙ кешенең ҡулынан килер эшме. Хоҙай биргәненә шөкөр итеп көн күрә шунда. Ә Хоҙай Тәғәләнең ҡыйырһытҡаны юҡ уны, көндәлеген ауылдаштары ҡулы менән килтереп биреп тора.

Инәйебеҙ ҡош-ҡорт көтмәй, тиһәм дә, бигүк дөрөҫ булмаҫ. Көтә ул… Уның… һайыҫҡаны бар.

Таң һарыһынан кискә тиклем һайыҫҡан Кәкүктең ярым-яртылаш ығышҡан баҡыуы буйында тибенә.

Әбей ҙә тәһәрәткә сыҡҡан һайын итәгенә бөрөп ҡаты-кото алып сыға ла тегенең тибененә илтә.

– Һәй, мәхлүк, килдеңме? – ти ул тешһеҙ ауыҙын саҡ-саҡ ҡыймылдатып, – бөгөн иртән олағып ҡайҙа йөрөнөң, һуңлағасың, өлөшөңдө күршенең Аҡколағы һыпырҙы.

Тегеһе лә өлөшөн ваҡытында ҡайтарып бирә. Кәкүккә ҡунаҡ килерен алдан хәбәр итә. Сарға ҡоштоң баҡыуҙан-баҡыуға ҡунып туҙына башлауы була, Кәкүк әбей самауырын терелтә, урындыҡҡа ашъяулығын йәйә.

Юҡ, ризыҡ, килем көтмәй ул, ауылдаштарын көтә, ҡунаҡ көтә. Моғайын, ғүмере буйы өҫтәле тулы һый булып та, уға килмәһәләр, хәлен белеп тормаһалар, был донъяла ул әллә булыр ине, әллә юҡ. Иң әүәл кешегә кеше йылыһы кәрәк, терәк кәрәк.

Юғалды бер көн һайыҫҡаны, һыуға батҡандай юҡҡа сыҡты. Бер көн көттө әбей, ике көн – ҡош күренмәне. Тамам хафаға ҡалды, тормошоноң бер сите кителгәндәй булды. Ауылдаштары тупһаһына туҙан төшөрмәй төшөрөүгә, тик барыбер улар килер алдынан шыҡырыҡлап сәләм әйтеп, йөрәкте елкендереп тороусы булмағас, кинәнес кинәнес түгел.

Шулай бошоноп йөрөгән көндәрҙең береһендә Кәкүкте арғы осҡа йома сәйенә саҡырҙылар. Тиң-тошо менән аяҡ һоноп ултырып, өс самауыр сәйҙе бушатҡан әбейебеҙ ҡайтыу яғына ыңғайланы, һәм… үҙҙәренән өй аша йәшәгән һунарсы Әүхәҙиҙең ихатаһына ҡарап ҡатты ла ҡалды. Иҫәңгерәрһең дә! Шифер менән бейек итеп ябылған һарай түбәһендәге ҡолғала атылған һайыҫҡан эленеп тора ине. Тәне бер эҫеле булды, бер һыуыҡлы булды инәйҙең, тәнтерәкләп ишек алдына инде, һарай янына килде, ҡулын маңлай өҫтөнә ҡуйып, төҫһөҙ күҙҙәрен елдә елберҙәгән емтеккә төбәне. “Үҙе, – тип бышылданы, – суҡышы ла, ҡойроғо ла уныҡы. Тик кәүҙәһе бер аҙ бөршәйә төшкән. Елдә ҡаҡланып торғас ни… Бахыр…”

Күҙҙәренән ике генә бөртөк йәш һығылып сыҡты ла ҡаҡ һөйәк тә сырыш тире генә булып ҡалған эйәгендә аҫылынып ҡалды…

– Һаумы, инәй!

Боролоп ҡараһа, тупһаға өй хужаһының ҡатыны сыҡҡан икән. Әбей сәләмде алманы. Тертәңләп килде лә йәш ҡатынға тексәйҙе:

– Әүхәҙи ҡайҙа, килен?

– Һине күргәс тә сәйнүк тоҡандырҙым, әйҙүк, инәй! Әүхәҙи ҙә әле генә эштән ҡайтты.

– Әйт әле, килен, сыҡһын! – Кәкүк саҡырыуҙы ҡабул итмәүен белдереп, ҡуш услап таяғына аушайҙы.

Сәйер һөйләшкән әбейгә аптыраған ҡатын инеп китте, һәм шунда уҡ ишектә мыҡты кәүҙәле ир күренде.

– Һаулыҡмы, инәй!

– Шөкөр әле. Әүхәҙи, анау һайыҫҡанды һин аттыңмы?

– Аттым шул. Оялағы йомортҡаны ҡуймай ине, эләктерҙем тәки.

– Ошоғаса Хоҙай биргәненә шөкөр итеп йәшәнек, әммә кеше әйберенә һорауһыҙ ҡағылғаныбыҙ булманы. – Әбейҙең күҙҙәренән тағы ла ике бөртөк йәш һығылып сыҡты. – Рәнйеттең, балам…

– Инәй, туҡтәле, бер нәмә лә аңламайымсы. – Йорт хужаһы ҡайтырға ыңғайлаған әбейҙең артынан ҡысҡырҙы. Кәкүк туҡтаманы. Һарай түбәһендәге елдә елберҙәгән һайыҫҡанды күреүҙән, йәнә Әүхәҙигә ауыр һүҙҙәр әйтеп ташлауҙан ҡурҡты.

Бына өйө тапҡырына етте, ҡапҡаһына боролдо. Бәй, тибенендә һайыҫҡаны тибенеп йөрөй ҙә баһа. Һап-һау.

– Ҡайҙа йөрөнөң бығаса! – Ҡыуаныстан әбейҙең йөҙө балҡып китте. – Ил гиҙеп йөрөп йүнләп ашамағас, мөҙөрөп киткән булған…

Һайыҫҡан ғәфү үтенгәндәй шыҡырыҡлап ҡуйҙы.

– Кәкүк инәй… – Артынан Әүхәҙиҙең тауышы ишетелде. – Инергә ярай-мы?

Әбей ялт итеп инеүсегә боролдо.

– Әйҙүк, балам, әйҙүк! – Ул ихлас өндәште. – Бәхетлenең ҡунағы бер юлы тигәндәй. – Унан баяғы “рәнйеттең” тигән һүҙҙәрен хәтерләп, хатаһын төҙәтергә ашыҡты. – Исмаһам, килен менән килеп хәлде лә белеп сыҡмай рәнйетәһегеҙ бит… Бар, балам, киленде лә алып кил, хәҙер самауырымды яңыртам, һыйым да өҫтәлдә.

Бая аяғын саҡ һөйрәп атлаған әбей еңел атлап инеп китте. Унан тәҙрәнән өҙлөкһөҙ шыҡырыҡлаған һайыҫҡанды ҡарай-ҡарай ҡунаҡтарын көтә башланы.

Ә тибендә һикрәңләгән ҡош әллә уныҡы булды, әллә түгел. Хәйер, барыбер түгелме ни, ул бит яңғыҙҙы яңғыҙлатмай, уға ҡунаҡтар саҡыра.

## *Ел һатыусы*

Колхоз осоронда башаҡ һуғырға йөрөй торғайныҡ. Бушап ҡалған баҫыуға барабыҙ ҙа сит-башҡа сәселгән, ҡамыл араһында ҡалған башаҡтарҙы йыябыҙ. Ҡыш бауыры оҙон, ҡош-ҡортҡа емлек. Төп ҡоралыбыҙ – иген һуғыу өсөн ҡулланылған турпыша, һәлмәк кенә таяҡ, биҙрә, шунан киндер тоҡ. Был эшкә төркөмләп, өмәгә барғандай дүрт-биш ҡатын бер юлы йөрөй. Кәрәк-яраҡты тоторға тип әсәйем мине лә эйәртә. Ҡайтыр мәл етһә, ҡатын-ҡыҙ берәй таҡыр ер таба ла ырҙын ойоштора. Әсәйем башҡаларға эйәреп килтергән баласын йәйеп һала ла биҙрәне юғары күтәреп игенде әкрен генә елгәреп ҡоя башлай. Бойҙайҙы кәбәгенән айырыу өсөн ел кәрәк, ел сығарыу өсөн һыҙғырырға кәрәк, һыҙғырыу өсөн, билдәле инде, мин кәрәк. Ауыҙымды остайтып һабан турғайылай төрлөләйем: ас ҡорһаҡҡа әсе, оҙон итеп һуҙам, кәйефле саҡта өҫтәп сутылдап та ебәрәм. Ыңғай, ырамлы

барған эшебеҙҙе ҡарап торған бисә-сәсә, әллә ысын, әллә шаяртып миңә инәлергә тотона:

– Беҙгә лә сиратлап һыҙғыр әле!

Борсаҡты эренән ярам:

– Эйе, шулайтмай ҙа, буштың атаһы күптән үлгән!

– Нимә бирәйек һуң һиңә?

– Елдең хаҡы бик тә арзан: талғыны бер лампасый, уртасаһы – ике, көслөһө инде – өсәү…

Бөгөн шул минән ел һатып алған апайҙарҙы күргем килә. Игендәр яңынан һары диңгеҙҙәй тулҡынып үсеүен саҡырып бушлай һыҙғырырға ла ризамын, әммә баҫыуҙар ташландыҡҡа ҡалған, теге апайҙар ҙа юҡ инде күптән…

## *Кешеләр һәм үҫемлектәр*

Урам буйлап етәкләшеп ҡарсыҡ менән ҡыҙ бала атлай. Ауыл бәләкәй булғас, ишек алдарын, өй арттарын, баҡса буйҙарын кесерткән, әрем, шайтан таяғы, тағы ла шундайыраҡ ҡый үләндәре ябып бара.

Ҡыҙый юл ситенә төртөп күрһәтте:

– Был ниндәй үлән, өләсәй?

– Тилебәрән.

– Уны ныҡ ағыулы тиҙәр.

– Ағыулы шу. Ә шайтан таяғы – торғаны сәнске, кесерткән саға һалып бара.

Ҡағылмаһаң-теймәһәң, шыпа ла зыянһыҙҙар. Кешеләр араһында ла тар күңеллеләр, насар уйлылар етерлек. Ундайҙарға яҡынламауың хәйерле. Тейһәң, бәлә килеүен көт тә тор.

## *Танытыу*

Ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында эшләп йөрөгән саҡ. Бер ағай тамам аптыратты, хәйерһеҙ, аҙна һайын йә берәйһе менән һуғыша, талаша, йә ерле юҡта кешенең муйынынан ала, юҡ тигәндә, бисәһен туҡмап, балаларын тинтерәтеп ҡыуып сығара. Тегеләре өй беренсә урам ҡыҙыра, кешелә йоҡлай. Саҡыртып алып ҡаты ғына итеп һөйләшеп алырға тура килде:

– Ағай, ҡасан шул ҡаңғырып йөрөүеңде ҡуяһың? Ысынын ғына әйткәндә, ҡатыныңды йәйге оҙон көндә – ике, ҡышҡыһын бер тапҡыр ҡыйырһытаһың. Сара күрергә тура килер!

– Эй, ҡустым, – тине ул, – ни өсөн улайтып ҡаңғыра тиһең? Ауылда минең хаҡта онотоп ташламаһындар, иҫтән сығарып ебәрмәһендәр өсөн эшләйем бит быны!

Бөгөн мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендәге әрһеҙҙәр түрҙә йөрөй, төрлө юлдарын табып телевизор экранында, гәзит-журнал биттәрендә, сәхнәлә күренеп ҡалырға тырыша. Ни хәл итәһең, талантһыҙ булған хәлдә лә, шау-шыу ойоштороп, үҙеңде нисек тә танытырға кәрәк бит…

## *Гүр саҙаҡаһы*

Яңы ғына өйләнешкән саҡ. Тәүге осорҙа әллә нишләп эш хаҡын еткереп булмай ҙа ҡуя, тормошобоҙҙо үҙебеҙсә, яңыса ҡороп маташҡас, өй эсенә уныһын-быныһын һатып алабыҙ, башҡалар алдында кәм-хур булғы килмәй ҡыҫтарланабыҙ ҙа. Нисек кенә һаҡсыл тотонорға тырышһаҡ та, икебеҙҙең

мәктәп оклады, әсәйемдең алған пенсияһы айыныҡы айына бөтә. Хәйерселәй ҡайта-ҡайта кешенән теләнселәп йөрөү ҙә килешмәй, ни тиһәң дә, ауылдаштар араһында абруй ҙа бар һымаҡ, мәжлестә ултырған ер ҙә ишек төбөндә түгел. Үҙ ҡоромда биләгән урынымды әйтеүем. Һуңғы сиктә тағы ла көн әсәйемдең гүр саҙаҡаһына ҡала. Осто-осҡа ялғай алмай бөтөнләй өҙөлөп киткәндә, әйтеремде асыҡтан-асыҡ ярып һалмаһам да, туранан һалдырам:

– Әсәй, кеҫәбеҙ төбө таҡырайып китте бит әле, төйнәнгәнеңде тотонайыҡ мәллә?

Ә ул нимә хаҡында һүҙ барғанын шундуҡ тойомлап ала:

– Ҡапылғара үлеп-нитеп китһәм, ҡайһылайтырһығыҙ икән?

– Буш һүҙ һөйләп күңелгә шом һалма әле, ауыҙыңдан ел алһын!

– Буш һүҙ тип, донъялыҡта була торған хәл. Юғарынан әшкәртеүҙе көтмәй алдан йыйына башлауың хәйерле…

– Бирәсәкле кеше үлмәй тиҙәр, һин дә хәйергә әҙерләгәнеңде тотоноп бурысҡа бат та йөҙгә еткәнсе йәшә!

– Ни хәл итәһең, һүҙегеҙҙе йыҡыу килешмәҫ, Хоҙай Тәғәләнән ахирәткә күсеүҙе бер аҙ кисектереүен үтенермен. Бәлки, ризалашыр, ҡабул ҡылыр… – Шулай ти ҙә тыҡшырған яулыҡ-таҫтамалдары араһын аҡтарырға тотона.

Тегене алабыҙ ҙа онотабыҙ, сөнки беләбеҙ, бер ни тиклем ваҡыттан саҙаҡа теүәл генә булып урынына барып ятасаҡ.

Бер ярты йылдан һөйләшеү тағы ҡабатлана...

Һуңынан матди яғыбыҙ яйға һалынды, хәлбуки әсәйем йомошҡа тип ингән-сыҡҡандарға һандығы төбөндәген биреп сығарыуҙы ғәҙәт итеп алды. Шулайтып әжәл алдында бирәсәкле булып, ғүмерен оҙайтып, һикһәнгә еткәнсе йәшәне. Бөгөн мөмкин булмағанды ялбарып ҡысҡырғым килә:

– Тәңре, үтенеп һорайым, әсәйемде кире ҡайтар. Уның алдында әллә күпме ҡайтарылмаған бурыстарым бар!..

## ***Көфөр хәбәр***

Берәй нимәне шаштырып, йә “Алла бирһә” һүҙбәйләнешен ҡушмай һөйләп ташлаһам, әсәйем мине гел тыя килде:

– Көфөр һөйләмә, балам!

Урта йәштәрҙәге ирҙе ерләүҙә ҡатнаштым. Зыяраттан сығыр саҡта бер йәш егет уйламаған иләмһеҙ һүҙ әйтеп белекһеҙлек күрһәтте:

– Инде кемде ерләрбеҙ икән? Сиратта йәше еткән Фәттәх ҡарт инде. Башҡа кеше юҡ!

Бер аҙна үттеме-юҡмы, аварияла һәләк булып ҡалған егетте ерләнек. Көфөр хәбәр һөйләгән теге егетте. Нисә йыл үтте, Фәттәх ҡарттың һаман да һин дә мин тереклек итеп ятҡан көнө, ары ла уға бына ошолай имен-аман ғына йәшәргә яҙһын. Иртәгә ни булырын беребеҙ ҙә әйтә алмайбыҙ. Хыялыбыҙҙа ҡом өйөмөнән хан һарайы төҙөйбөҙ ҙә ул, әммә уның теләһә ниндәй мәлдә ишелеп төшөп ҡабаттан ер менән тигеҙләнеү ихтималлығы ла бар бит әле. Иртәгәге көндө кем беҙгә вәғәҙәләй ала? Хоҙай Тәғәләнән башҡа бер кем дә!

Шуға әлеге мәлдең, әлеге минуттың, хатта күҙ асып йомған мәлдең ҡәҙерен беләйек, күктә балҡыған ҡояшҡа, иҫкән елгә, япраҡтарҙың ҡыштырҙауына, йә иһә ап-аҡ ҡарҙың яуыуына кинәнеп, ҡыуанып, барына шөкөр ҡылып йәшәйек Ә иртәгә? Әйҙәгеҙ, аша төшөп көфөр хәбәр һөйләмәй торайыҡ әле.

*(Дауамы бар).*



**Камил ФАЗЛЫЙ**

# ҺУЛЫШ БИРӘ ТЫУҒАН ЕРЕМ

## *Башҡортостаным*

*Оло Ватаным эсендә*
*Бар минең тыуған ерем.*
*– Ҡайҙан һин? – тип һораһалар:*
*– Башҡортостандан! – тимен.*

*– Матурмы ул?*
*– Эйе. Уға*
*Һоҡлана барса халыҡ.*
*Ҡурайы ла – моң шишмәһе,*
*Уйнаһаң ҡулға алып.*

*– Батырмы ул?*
*– Батырлығы*
*Билдәле түгел кемгә?!*
*Шайморатов генералдай*
*Меңләгән батыр илдә!*

*– Йомартмы ул?*
*Йомартлығы*

---

Камил Фазлый 1949 йылдың 15 февралендә Бәләбәй районының Туҙлыҡкыуыш ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләй, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Ул Фәтих Кәрим, Динис Бүләков исемендәге әҙәби премияларға лайыҡ булды.

Килә быуындар буйлап.
Ҡунаҡ итер ҡымыҙ, буҙа,
Табикмәк менән һыйлап.

– Йылытамы күңелдәрҙе,
Әйткән сағында йыйнап?
– Башҡортостан бөтәбеҙгә
Нур сәскән ҡояш һымаҡ!

Һулыш бирә тыуған ерем,
Ошонда нигеҙ ташым.
Гүзәл Башҡортостанымдан
Хоҙайым айырмаһын!

## Әбейҙәр сыуағы

Көҙҙөң бар ғәмәлдә
Йәнә бер шәп ягы:
Донъяға йәм өҫтәй
Әбейҙәр сыуағы.

Миҙгелдә тәбиғәт
Үҙгәрә ҡай ара?!
Салт аяҙ көндәре
Йәйҙәргә ҡайтара.

Күбәләк елберҙәй,
Ятҡас көн төшләккә.
Әллә һуң ҡайтамы
Әбейҙәр йәшлеккә?..

Ваҡытты үҙгәртеп,
Кирегә борғолап,
Йылдарҙы йырғалап,
Баҫһа ла һырғанаҡ?..

Шар асып Йыһанға
Ғүмерҙең ситлеген,
Йәш ҡыҙҙар кейгәндәр
Әбейҙәр битлеген.

Йылдарҙың туҙаны
Һылашҡан йөҙҙәргә.
Ә хистәр ялҡынлы,
Бирешмәй көҙҙәргә.

Күҙҙәре осҡонло,
Һөйкөмлө иҫ киткес.
Күҙҙәр һис ҡартаймай,
Ҡараштар иҫерткес!

Тәбиғәт өҫтөнән
Һоҡланғыс моң аға.
Әбейҙәр сыуағы
Көҙгө мул донъяла...

## Тыуған ерем

Күҙҙәремдә – нурлы һының,
Ҡолағымда – йырҙарың.
Ҡоштарыңдың ҡанатланып
Һайрауҙарын тыңланым.

Һулышымда – әсәй һалған
Ап-аҡ күмәс еҫтәре.
Беләгемдә – ғәйрәт биргән
Уралтауҙың көстәре.

Тел осомда – әрәмәлә
Бешкән еләк тәмдәре.

*Күңелемдең түрҙәрендә –*
*Ҡамышлы күл йәмдәре.*

*Тыуған ерем – бишек йырым,*
*Сикһеҙ хыял диңгеҙе.*
*Хыялдарҙан йәшәйешкә*
*Етәкләнең һин беҙҙе.*

*Кинйәң кеүек мин эргәңдә,*
*Ситтәгеләр һағына.*
*Һағынғандар һағышланып,*
*Ҡарай тыуған яғына...*

## Япраҡтар оса елдә

*Көҙгө япраҡтар ағастан*
*Оса өҙөлөп елгә.*
*Күсенеп киткән халыҡтай*
*Эш эҙләп илдән-илгә.*

*Ағас тағы япраҡ ярыр,*
*Йәшәрер яҙын ерҙәр.*
*...Ҡороған ағас хәлендә*
*Халҡын юғалтҡан илдәр...*

## Яналар

*Күбәләктәр утҡа осоп*
*Яна, юҡ көс аралар.*
*Ирҙәр тартыла хәмергә,*
*Эсә-эсә яналар.*

*Фажиғәләр көтөп тора,*
*Онотолһа самалар.*
*...Янғандарҙың урынына*
*Килә йәнә яңылар...*

## Яҡты юл

*– Етмәй яҡты! Юҡ иркенлек! –*
*Ағастар шаулаштылар.*
*Үҙ-ара яғалаштылар,*
*Яҡтылыҡ даулаштылар.*

*– Яҡты юл ярам һеҙгә! – тип,*
*Балта майҙанға сыҡты.*
*Алдында үҫкән ағасты*
*Сапҡылап ергә йыҡты.*

*– Яҡтырҙы донъя, иркен! – тип*
*Урман алҡышҡа күмде.*
*Балта ағастар ауҙара,*
*Көндәргә ялғап төндө.*

*– Афарин! – тиҙәр ситтәге*
*Ағастар, эшен маҡтап, –*
*“Әпипә”гә бейеп була,*
*Ул беҙҙе йөрөй яҡлап.*

*Ауа торғас ҡайын, имән,*
*Уҫаҡтар зифа буйлы,*

*Ҡалды тороп ҡарурмандан*
*Бары тик... балта юлы..*

## Балта һабы һәм утын

*– Эштә янып сыҡтым, – тине*
*Балта һабы утынға, –*
*Саптым, ҡаҡтым, арытҡан бик,*
*Хәл ҡалмаған суртым да.*

*– Бик мәслихәт, – тине утын,*
*Бынан файҙа табып ныҡ:*
*– Зинһар, янған мейескә ин,*
*Минең өсөн янып сыҡ!?.*

## Һүҙ бирҙе

*– Хәмер эсмә! Зарарлы! – тип*
*Сығарғас доктор ҡарар,*
*Пациенты анттар итте:*
*– Эсмәм! Һүҙ бирәм! Ярар!*
*Эскелектең зарарлығын*
*Ҡуйҙым башыма һалып.*
*Эсмәйем! Ашай башлайым*
*Үҙен икмәккә манып!..*

## Маҡсатлы фото

*– Ник төшәһең фотоға гел,*
*Һырышып, ҙур шәхес менән?*
*– Белһәң икән, төшөү бәйле*
*Тура минең бәхет менән.*
*Төшәм бергә, маҡсат ҡуйып,*
*Бынан файҙа күрмәмме, тип.*
*Икәү төшкән фото аша*
*Китаптарға кермәмме, тип...*

## Бәхәс

*– Хәмерһеҙ торалмайһың! – тип*
*Әйткәс хәмер ҡолона:*
*– Торам! – тине, бәхәсләшеп,*
*Һуҙып ҡулын ҡулыма.*

*(Өмөт усағы һүнмәгән,*
*Айыҡлыҡҡа тартыла).*
*– Бәхәс, – тим, – ниндәй бүләккә?*
*– Әйҙә, – ти, – бер “ярты”ға!*

## Көйгәндәр

*– Ник был икәү ҡара йөҙлө,*
*Элек бит аҡ инеләр?*
*– Бер-беренә тел тейҙереп,*
*Эстән яныып көйҙөләр.*

*– Булмағанмы бахырҙарҙың*
*Яндырмаçлыҡ һүҙҙәре?*
*– Булмаған шул, эстән янғас,*
*Тыштан көйгән йөҙҙәре...*

**Зөфәр**
**ВӘЛИТ**

# ҺӨЙӨР ӨСӨН БИРҘЕМ ҒҮМЕРЕМДЕ...

## *Башҡортостан*

*Башҡортостан – беҙҙең йөрәктәрҙә,*
*Башҡортостан – моңло йырҙарҙа,*
*Һүнмәҫ йондоҙ булып мәңгелеккә*
*Тараласаҡ ғорур һындарҙа...*

*Алға, алға, илем Башҡортостан,*
*Алға, дуҫтар, яҡты хыялға!*
*Донъя беҙҙән үрнәк алһын өсөн*
*Беҙ барырға тейеш гел алға!*

*Берҙән-берем, илем Башҡортостан,*
*Берҙәмлектә беҙҙең киләсәк,*
*Салауатың, Бабичтарың менән*
*Бөтөн донъя һине беләсәк!*

---

Зөфәр Вәлит 1949 йылдың 1 февралендә Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. Етмешенсе йылдар уртаһынан уның әҫәрҙәре республиканың гәзит-журналдарында даими баҫыла. “Йылдар сатында”, “Кәрәҙле минуттар”, “Йырлы ғүмер”, “Һуң түгел”, “Мин йәшәгән донъя” һәм башҡа шиғри йыйынтыҡтар авторы.

*Башҡортостан, беҙҙе бала саҡтан*
*Атайҙарса һөйгән ер бит һин!*
*Олатайҙар мәңгелеккә киткән*
*Беҙ артылыр һуңғы үр бит һин!*

## Булырбыҙ бергә

…Беребеҙ – ерҙең өҫтәрендә,
Беребеҙ – аҫтарында…
Рауил Бикбаев.

*Һин Ер-Әсә ҡосағында,*
*Беҙ уның усағында.*
*Ил-Ер өсөн янған саҡта*
*Булмаҫтыр бысағым да.*

*Ерҙең дә бит йәне – усаҡ,*
*Дөрләп китһә һыуы бар.*
*Беҙҙең һүнгән йөрәктәрҙе*
*Ваҡыт еткәс йыуыуырҙар…*

*Ил яҙмышы һалынғанда*
*Баҙар үлсәүҙәренә,*
*Ауырлығы төшә микән*
*Ерҙең күсәрҙәренә?*

*Ер кешеһе файҙа ғына*
*Килтергән саҡта ергә;*
*Ер-Әсәбеҙ иҫән саҡта*
*Булырбыҙ һаман бергә!*

## Ер йөҙөндә

*Йырлап торған ҡойо һиртмәләре*
*Тик тамырлы ерҙән һыу ала.*
*Ер-һыу тәбиғәтле Башҡортостан*
*Әҙиптәрен танып һоҡлана.*

*Шиғриәттең тамыры ҡайҙа икән,*
*Ашлаусыһы уны кем икән?*
*Исемдәре уның нисек икән –*
*Аллаһ микән, Һөйөү, һин микән!?.*

*Терпе кеүек кеше яҙмыштары*
*Сарланалыр тормош сарында…*
*Түҙер микән шиғри йөрәклеләр*
*Йырлағансы шуның барын да*
*Бик боронғо иҫке борамда?..*

## Хәтер

*“Ҡайтмайым!” тип өйҙән сығып китте,*
*Сығып китте ниҙер әҙләнеп,*
*Ҡолағымда бүре олоһа ла,*
*Мин доғала ҡалдым теҙләнеп…*

*Бар ғүмерем уны көтөп үтте,*
*Ҡайтмаһа ла, туңып ҡатманым.*
*Тик шуныһы: ул киткәндән алып,*
*Мин башҡаса сәскә атманым…*

## Мөғжизә

*Шиғриәттең шартын белгем килә,*
*Шул шарт менән килә йәшәгем...*
*Мәңгелеккә старт алһам, уны*
*Йәнгә һалып килә йәшнәгем.*

*Ожмахта ла йәшәп ҡараным мин,*
*Тамуҡта ла булып ҡараным,*
*Икеһендә лә шиғриәт тигән*
*Бер мөғжизә менән яраным.*

*Икеһендә лә мине йәшәү өсөн*
*Шиғриәтле рух сәмләне,*
*Ҡарашымды шиғыр имләп торҙо,*
*Күҙҙәремде һөйөү бәйләне...*

*Ә шиғырһыҙ йәшәү нисек икән?*
*Әле булһа шуны белмәйем,*
*Ожмахын да, тамуғын да күрәм,*
*Ах(ы)ры, шуға һаман үлмәйем...*

## Кемдән генә ҡалмай мөхәббәт...

*Бабичтарҙан ҡалған был мөхәббәт*
*Күңелдәрҙе нисек иретә! –*
*Ай ҡыҙының айһыҙ яланында*
*Диуаналар итеп йөрөтә...*

*Кемдән генә ҡалмай был мөхәббәт,*
*Кем күңелен генә илертмәй?*
*Тыумағанды ғына иҫертмәй ул,*
*Тыумағанды ғына тилертмәй...*

*Шуғалыр ҙа, миллиард характерлы*
*Мөхәббәттән тыуа кешеләр.*
*Бер ҡалыпта, ах(ы)ры, һуғылғандыр*
*Һинең менән минең ишеләр...*

## Һынауҙар

*Мин Хоҙайҙан бер ни һорамайым,*
*Һынауҙары алға өйөлгән,*
*Хатта уның доғаларында ла*
*"Һау-сәләмәт йәшә!" тиелгән.*
*Тәүге һынау бала саҡтарҙа уҡ –*
*Тереләрҙең белеү ҡәҙерен.*
*Аң кереүгә йәнә тәүге һынау –*
*Мәрхүмдәрҙең белеү ҡәберен...*
*Унан китә тормош һабаҡтары*
*Һынауҙары менән ғүмерлек,*
*Сүкей-сүкей һынай беҙҙе тормош,*
*Әйтерһең, ул беҙҙең тимерлек...*
*Һуңғы һынау ошо тимерлектә*
*Әйләндерер йәнде йәшенгә...*
*Һынаусыһы һине күреп торор,*
*Ҡайҙа ғына инеп йәшенмә!*

## Килербеҙ Салауатҡа!

*Күңелде һағыш баҫҡанда*
*Төшмәйбеҙ яманатҡа,*
*Дуҫтарҙы күрге килә, тип*
*Киләбеҙ Салауатҡа...*

*Ҡайғыны ла, һағышты ла*
*Һалмайбыҙ яманатҡа.*
*Йәшәү беҙҙән тора, тиеп*
*Киләбеҙ Салауатҡа...*

*Дошмандар беҙгә янаһа,*
*Сер бирмәй яманатҡа,*
*Ил бәхетен күрер өсөн,*
*Килербеҙ Салауатҡа!*

## Ҡырағай тәхеттә

*Донъяға һулыш өрөүсе*
*Саҡма тояҡлы атта,*
*Ғүмеремдең иң ысыны*
*Ҡырағай булған саҡта!*
*Вәт, исмаһам, йәшәгәнмен:*
*Йәшендәрҙе илертеп,*
*Үләндәрҙе дер һелкетеп,*
*"Үлектәр"ҙе терелтеп.*
*Алтынсы палатала ла*
*Булырға тура килгән:*
*Аҡыллылар ҡурҡып ҡасҡан,*
*Йүләрҙәр минән көлгән.*
*Йәшәгәнмен атай-ағай*
*Күрмәгәндәрҙе күреп.*
*Мин, ах(ы)ры, ҡиәмәттә лә*
*Ашты ашармын өрөп...*
*Донъяла мин йәшәгәнмен*
*Ҡырағай тәхет табып:*
*Юҡ ҡына ерҙәренән дә*
*Юҡ ҡына бәхет табып.*

## Рухиәт

*Наркоз көсө, һиҙәм, бөтөп бара,*
*Түҙемлектең аҡһай көстәре,*
*Мөмкинлектең сикләнеүҙәренә*
*Замандың да китә иҫтәре...*

*Шуғалыр ҙа, заман үҙгәреүсән,*
*Ул тыуҙыра яңы хәстәрҙе,*
*Шуға күрә ул үҙ тәхетенә*
*Күтәрәлер яңы көстәрҙе.*

*Ниндәй генә заман тыуғанда ла,*
*Рух бәүелтә уның бишеген.*
*Киләсәккә яҙған хаттарыбыҙ*
*Асыр яңы заман ишеген...*

*Наркоз көсө бөтә тип үкенмәм,*
*Түҙемлектәр һорап үтенмәм,*

Халыҡ рухы аҡһамаған саҡта
Үлгәндә лә хатта үкенмәм!

## Көҙгө моң

Көҙгө томан ҡуйынында зыңлай
Йәшлегемдең моңло ҡылдары.
Моң эсенән йәнә баш ҡалҡыта
Ғүмеремдең алтын йылдары...

Һөйөр өсөн бирҙем ғүмеремде,
Үлер өсөн түгел йәшәүем.
Бер сер булып ҡалды ваҡытында
“Һөйәм!” тиеп миңә әйтмәүең.

Йәш ғүмерем менән түләнем бит
Һөйгән өсөн һине онотолоп.
Мин һөймәгән, мине һөйгән йәрҙәр
Йыраҡтарҙа ҡалды моң булып...

## Өлгөрөрбөҙ әле...

Ҡартайылды... тигән һүҙҙе
Килмәй әле ишеткем.
Асырға беҙ өлгөрөрбөҙ
Мәңгелектең ишеген...
Бар әле һайратаһыбыҙ
Ғүмерҙең бурандарын,
Бар әле бейетәһебеҙ
Баш ҡала урамдарын...
Беҙҙән һуң ейән-бүләләр
Бейер быуат түрендә!
Шулай булғас, ниндәй ҡартлыҡ
Булһын ғүмер үрендә!?.

## Ҡорҙаштарға

Һорамағыҙ минең иҫәнлекте,
Күрәһегеҙ, үлеп ятмайым.
Күңел генә гел үҙгәреп тора,
Һәр яҙ һайын сәскә атмайым...

Һораһағыҙ, һорағыҙ һаулығымды,
Унығы ла балҡый йөҙөмдә.
Башҡа төҫтә булыу мөмкин түгел
Һайрағанда ғүмер көҙөндә.

Йә йылмайып, йә шарҡылдап көлөгөҙ,
Иҫәрлеккә уны һанамам,
Көнөм шул саҡ, бәлки, балҡып ҡуйыр,
Ә мин һеҙгә бармаҡ янамам.

Йәлләүҙең дә миңә кәрәге юҡ,
Беҙ бит инде унан уҙғанбыҙ.
Һүҙһеҙ генә бер серләшер өсөн
Бер-беребеҙгә ҡулды һуҙғанбыҙ...



**Мөнир**
**ИҠСАНОВ**

# ТОЯМ ҮРҘӘР ЯУЛАР ДАРМАНДЫ!

## *Батыр тураһында баллада*

*Кикбоксинг буйынса донъя чемпионы,*
*бокс буйынса Америка чемпионы,*
*Арғаяш еренең данлы улы*
*Хәбир Сөләймәновҡа бағышлана.*

*1*

*Ят ҡалала, диңгеҙ аръяғында,*
*Тыуған ерҙән алыҫ-алыҫта*
*Ринг уртаһына егет сыға,*
*Ҡамсат бүрек кейеп башына!*

*Йәйрәп ятҡан сикһеҙ дала көсө*
*Йоҙроғона уның төйнәлгән!*
*Йөрәгенә уның рух бирелгән*
*Урал да ғына тигән төйәктән!*

---

Мөнир Иҡсанов 1984 йылда Учалы районының Орловка ауылында тыуған. Ике китап авторы ("Менегеҙ ҡанатлы аттарға", "Урал ҡоросо"). Килмәк ауылы мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. 2014 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.

*Бына, хәтерләтеп ҡылыс сыңын,*
*Гонг яңғырай!*
*Алыш башлана!*
*Ҡан хәтерен егет уята ла*
*Айбарланып алға ташлана!*

*Әйтерһең, ул ярышыусы түгел,*
*Ул боронғо башҡорт яугиры!*
*Залға тулған халыҡ – һанһыҙ сиреү!*
*Ринг майҙаны – иркен яу ҡыры!*

*Бына, сығып хәнйәр көрәшенә,*
*Алдар тархан ала Аҙауҙы!*
*Варшавала хәрби хәйлә ҡора*
*Старшина Юлай Аҙналы!*

*Бер ҡараһаң, беҙҙең күҙ алдында*
*Ҡаһым түрә инә Парижға!*
*Бер ҡараһаң, Днепр буйҙарында*
*Атлы комбриг Муса һуғыша!*

*Һөжүм тынмай.*
*Йәшен тиҙлегендә*
*Йоҙ(о)роҡҡа йоҙроҡ бәрелә!*
*Етеҙ бер хәрәкәт!*
*Һәм дәғүәсе*
*Нокаутҡа китеп бирелә!*

*Ят ҡалала,*
*Диңгеҙ аръяғында,*
*Ил намыҫын яҡлап, ил данын,*
*Ҡамсат бүрек кейгән ир-уҙаман*
*Таға бына чемпион билбауын!*

*2*

*Башҡа берәүҙәрҙе арбар ине*
*Сит илдәрҙең алтын-гәүһәре.*
*Тыуған яҡтарына ҡайтмайынса,*
*Тыныс булмай батыр йөрәге.*

*Ҡайта батыр хәҙер инде халҡын*
*Әйҙәр өсөн оло еңеүгә!*
*Яҡты хыялдары, хаҡ уйҙары*
*Алып килә уны Өфөгә!*

*Ҡайта батыр, ихлас күңел менән*
*Башҡортостан ерен үҙ күреп!*
*Ошо мәлде яҡынайтыр өсөн*
*Айҡашты ул күпме көс түгеп!*

*Милләтенә мең саҡрымдар аша*
*Нисәмә йыл илтте сәләмен!*
*Милләт ҡуйынында була алыр,*
*Баға алыр хәҙер милләтен!*

*Әммә тормош ринг майҙанымы?!*
*Йыш тантана итә иң элек*
*Намыҫ түгел,*
*Ҡаһарманлыҡ түгел,*
*Ярамһаҡлыҡ менән мәкерлек!*

*Илдең яҙыҡ ҡанундарын күреп,*
*Ярһыу ҡуба аҫыл йөрәктә!*
*Бына егет, яңы ҡеүәт йыйып,*
*Инде сыға тиңһеҙ көрәшкә!*

*Әйтерһең дә, тарих ҡуласаһы*
*Үткән дәүерҙәргә борола!*
*Батшаларға баш эймәгән башҡорт*
*Оран яңғырата Уралда!*

*Бер ҡараһаң, халҡын яҡлап, Алдар*
*Тере ҡая булып ҡалҡына!*
*Бер ҡараһаң, ере-һыуы өсөн*
*Ут-ялҡындай Юлай ҡабына!*

*Бер ҡараһаң…*
*Тик күрәһе килмәй*
*Ҡанлы бәрелештәр заманын!*
*Алдар, Юлай, Ҡаһым, Мусаларҙың*
*Язаланып башын һалғанын!*

*Эй, Ватаным!*
*Илен ҡурсалаған*
*Бабаларҙы бөгөн ҙурлайһың!*
*Ата-бабаларҙың юлын ҡыуған*
*Замандашты үҙең хурлайһың!*

*Батыр замандаштар, ирек көҫәп,*
*Ҡулға алмаҫ һуғыш ҡоралын!*
*Ата-баба һымаҡ ҡорбан булмаҫ,*
*Ғазаптарға һалмаҫ Уралын!*

*Ләкин бирешмәҫтәр!*
*Бил бирмәҫтәр!*
*Килеп етер шундай ваҡыттар:*
*Тыуған илдә еңеү тәмен татыр*
*Ҡамсат бүрек кейгән батырҙар!*

## Азатлыҡ йыры

Кем шатлана, ҡәҙер күрә кемдәр?!
Ғазап сигә, йәберләнә меңдәр?!
Беҙҙә алтын зиннәт – хакимдарға!
Беҙҙә халыҡтарға – фәҡир тиндәр!

Бар донъяға ил күрһәтә көсөн!
Көслө илдең халҡы ниңә меҫкен?!
Ҡан ағыҙҙы, дан ҡаҙанды батша
Халыҡ өсөн түгел, тәхет өсөн!

Ҡол булыуҙан ҡурған булыу яҡшы!
Ирек өсөн ҡорбан булыу яҡшы!
Мәңгелекте ярып яңғыраған,
Ил күтәргән оран булыу яҡшы!

Йомоп булмаҫ беҙҙең ауыҙҙарҙы!
Тыйып булмаҫ беҙҙең аҙымдарҙы!
Беҙҙең тарафтарға иҫер тиҙҙән
Хаҡлыҡ һәм азатлыҡ дауылдары!

Булһын бөгөн сафтарыбыҙ һирәк!
Тиңһеҙ алыштарҙа килер ҡөҙрәт!
Күкрәктәрҙә утлы күмер булып,
Ялҡын бөркөп яна беҙҙең йөрәк!

Беҙ ауғанда, тыуыр яңы инсан!
Офоҡтарҙа балҡыр яҡты заман!
Халыҡ ҡулдарына ниғмәт ҡайтыр!
Ирек татыр, сәскә атыр Ватан!

## Тылсымлы көс

Илдә инде нисә йылдар
Хаким итә Ҡатил ҡулы!
Илде ямратыуҙан түгел,
Ҡурҡытыуҙан хакимлығы!

Үҫә бында, ҡеүәт йыя
Аҙау тешле үгеҙ генә!
Ул ер һөрмәй, ул ит бирмәй –
Ҡанлы әҙҙәр мөгөҙөндә!

Күңелдәрҙе шом һағалай!
Ни көтөргә мәркәземдән?!
Еребеҙҙе баҫып алды!
Ҡалышманы Әзрәҡәнән!

Үрсей халыҡ ҡанын һурған,
Зәрҡүм тигән йылан заты!
Милләтенән айырылған,
Илен һатҡан Шүлгән заты!

Ирек күргән ил-ҡәүемдәр
Ер йөҙөндә бармы әле?!
Суомиға бына күҙ һал!
Түгелме һуң Самрау иле?!

Рух ҡанаты донъяла бар!
Етеҙерәк Аҡбуҙаттан!
Тел ҡөҙрәте донъяла бар!
Үткерерәк аҡ булаттан!

*Тылсымлы көс булып улар*
*Йәшәй икән йөрәгеңдә,*
*Тыуыр ҡабат Урал батыр*
*Башҡорттарҙың төйәгендә!*

## Бабич рухы

*Күңелемдә – йәшлек сәскәләре!*
*Күҙҙәремдә – шатлыҡ йәштәре!*
*Ватанымды яҡтылыҡҡа сорнап,*
*Балҡып тора Бабич һәйкәле!*

*Һыны һомғол, аҙымдары еңел!*
*Ә һүҙҙәре уның ҡанатлы!*
*Ул саҡыра ғәзиз башҡорт илен*
*Өн итергә изге хыялды!*

*Ырыҫ өсөн көрәшкәндә халыҡ,*
*Шул һәйкәлдән башлар оло юл!*
*Шағирҙарға илһам булып торһа,*
*Батырҙарға оран булыр ул!*

*Эй үрелә нурлы ҡараштарым*
*Бейектәргә ашҡан Бабичҡа!*
*Бабич менән мин үреләм үҙем*
*Ирек тигән сағыу ҡояшҡа!*

*Уға баҡһам, ҡаным ҡөҙрәтләнә!*
*Уға баҡһам, аңым сафлана!*
*Ниндәй бәхет – йәш йөрәгем тибә*
*Бабич рухы ҡалҡҡан заманда!*

## Ирәмәл

*Ватанымдың күрке – Урал тауы!*
*Уралымдың күрке – Ирәмәл!*
*Ир ҡорона кергән егеттәрҙең*
*Үткер ҡараштарын иркәләр.*

*Ирәмәлтау бите оҡшап тора*
*Олатайҙың һырлы йөҙөнә.*
*Ирәмәлгә килеп ниәт ҡорһам,*
*Иңдәремә сихри көс инә!*

*Ап-аҡ түбәтәйҙе хәтерләтә*
*Ирәмәлдең ҡарлы түбәһе.*
*Ирәмәлдә илем тәүбә ҡыла.*
*Боҙолмаһын илдең тәүбәһе!*

*Ирәмәлдән күрәм: тыуған ерем*
*Бигерәк тә матур ер икән!*
*Урал күрке Ирәмәлтау булһа,*
*Илдең күрке – батыр ир икән!*

## Ҡышҡы мәл

*Баш осомда сағыу ҡояш балҡый!*
*Йондоҙ баҙлай аяҡ аҫтында!*
*Аҡ ҡышымдан сафлыҡ бөркөлгәндә,*
*Туҡтап торсо, ваҡыт, аҙ ғына!*

*Асмандарҙың зәңгәр туҫтағынан*
*Һулайымсы гәлсәр һауаны!*
*Үпкәләрҙән юл туҙаны сыҡһын!*
*Күңелдәрҙән – тормош туҙаны!*

*Энә кеүек сәнсеп, ҡар бөртөгө*
*Эҫе сикәләргә ҡаҙала!*
*Һәм асыла томаланған зиһен!*
*Ярһыуланған хисем баҫыла!*

*Йәки ҡарҙар яурыныма ҡунып,*
*Йомшаҡ таҫма булып урала!*
*Тәнем йәрәхәте йүнәлә, һәм*
*Йәнем яралары уңала!*

*Берсә наҙлап, берсә ҡырҡыуланып,*
*Елдәр ыуып ала арҡамды!*
*Талған быуындарҙы яҙҙырам да*
*Тоям үрҙәр яулар дарманды!*

*Аҡ ҡышымдан мине айырырға*
*Ашыҡмасы, ваҡыт, туҡтасы!*
*Ҡараштарҙы арбап торған ҡышым –*
*Аҡ халатлы шәфҡәт туташы!*

## *Яна йөрәк*

*Ҡояш балҡый күктәремдә!*
*Йөрәк яна күкрәгемдә!*
*Сәскәләнә яҙғы гөлдәр!*
*Осҡонлана наҙлы күҙҙәр!*

*Ҡояш сыҡҡан нурлар өсөн!*
*Йөрәк килгән йырлар өсөн!*
*Нур яғыла күктәремдән!*
*Йыр ағыла күкрәгемдән!*

*Ниндәй сағыу ҡояш, яҡты!*
*Ниндәй ярһыу йөрәк уты!*
*Үрел, сәскәм, күктәремә!*
*Һырыл, иркәм, күкрәгемә!*

*Гөлдәр миңә һала ауаз:*
*– Ҡайҙан ялҡын ала ҡояш?!*
*Серем асып, гөлгә әйтәм:*
*– Йөрәк яна мөхәббәттән!*



Салауат
РӘХМӘТУЛЛА

# ЙӘШӘР ӨСӨН ТЫНЫС ЙӘН МЕНӘН...

## Шиғыр

*…Күптән күнегелгән инде*
*Икмәккә тамаҡ туҡҡа:*
*Бер кем ышанмаҫ*
*Өйөмдә*
*Бер грамм тәъәм юҡҡа.*

*Урам аша ъына йортта*
*“Ул” –*
*“Икмәк” тигән кибет.*
*Өс куплет шиғыр яҙырға*
*Ун минут етә, ти бит.*

*Биш минут етә-ә-ә!*
*Урамъа*

---

Салауат Рәхмәтулла 1942 йылдың 1 февралендә Ауырғазы районы Солтанморат ауылында тыуған. Байтаҡ китап авторы. Шиғырҙары, поэмалары, тәржемәләре, публицистик мәҡәләләре гәзит-журналдарҙа даими баҫылып килә. Ауырғазы районы хакимиәтенең Ғәли Ибраһимов исемендәге премия лауреаты.

Сығыу – һуңғарак калһын!
…Ауаз – күктәндер: “Кузғал һин…
Азык… күп көнлөк ал һин!..”

## Донъя – матур!

Ерзә –
Тик һине үз иттем! –
Халәт – үкенерлектер:
Мин “тегендә” һинән алда
Китермен кеүек никтер.

Матур йәшә,
Минән һуң да
Йәшә һин оза-а-ак итеп.
…Мин ләхеттә, борғоланып,
Ятырмын һине көтөп…

***

– Дан кәрәкме?
Әллә акыл кәрәк
Йәшәр өсөн тыныс йән менән?
Акыл менән йәшәп ғүмер узһын,
Озак йәшәп булмай дан менән…

## Халык һәм балык тураһында

“Халык”, “балык”,
“Балык”, “халык” –
Мәғәнәләрен бер хәреф
Айыра бит, карағыз:
Тик балык һис халык булмас,
Ә без – халык –
Ә без – халык?! –
Балык булып барабыз…

## Алдау көнө

Алданыузар… –
Улар ғүмерем буйы
Теңкәләргә тейзе минең дә.
…Алдаһындар,
Алдаһындар ине
Апрелдең тик тәүге көнөндә…

## Думала

…Йылдар – Думала эш кайнай
(Тағы кайза кайнаһын?!):
Дума хәтле Дума булғас,
Эштәр – мөһим: аңла һин.

Мөһимдәрзең дә мөһиме –
Халыкка арт бормаска:
Уға… хәмер каптырмаска,
Тәмәке тарттырмаска!

## *Хаҡтыр…*

*Моғайын,*
*Тамуҡта урын*
*Ҡалмағанын белгәнгә:*
*“Урыны –*
*Йәннәттә булһын!” – тип,*
*Теләйҙәр һәр үлгәнгә.*

## *Бәхет*

*Кеше өсөн бәхет – нимә? –*
*Беҙ белергә тейеш.*
*…Кеше кешегә ярҙамға*
*Гел килергә тейеш…*

*Беребеҙ ҙә хата юлдан*
*Атламаҫҡа тейеш;*
*Бер кем дә бер кемгә нәфрәт*
*Һаҡламаҫҡа тейеш…*

*Кеше ҡайғыһына кеше*
*Шатланмаҫҡа тейеш;*
*Маҡсатҡа юлда күперҙәр*
*Шартламаҫҡа тейеш…*

*Түп-түңәрәк Еребеҙҙе*
*Ут алмаҫҡа тейеш;*
*Кешелек ҡулына хатта*
*Уҡ алмаҫҡа тейеш…*

*Ҡауышҡандар береһен-береһе*
*Юғалтмаҫҡа тейеш;*
*Кеше бәхетенә кеше*
*Күҙ атмаҫҡа тейеш…*

*“Тейеш”тәр – бихисап: барыһын*
*Аң һанларға тейеш…*
*…Бәхет күктән төшмәй – шуны*
*Беҙ аңларға тейеш!*

## *Мостай Кәримгә*

*Нишләрмен мин –*
*Сит илдәргә*
*Юлдар төшөп,*
*Яңғыҙлыҡҡа*
*Башымды дусар итһәм?!*
*Дуҫтар, туғандар табырмын,*
*“Мостай иленән!” – тиһәм!*

## *Әҙиптәребеҙ тураһында йылмайып-көлөп кенә*

*I*

*…Берлектә йөҙләп шағир, тип*
*Һөйләйҙәр гелән-гелән:*
*Йөҙләп үк микән ни хәҙер,*
*Мин…туҡһанлабын беләм…*

*2*

*Тәнҡитселәребеҙ ҙә бар,*
*Шаҡтайҙар ғына хәҙер,*
*Ләкин улар тәнҡитләмәй,*
*Маҡтайҙар ғына хәҙер…*

*3*

*…Драматургтарыбыҙмы? –*
*Ниңәлер баҙмай улар:*
*Элек күп яҙалар ине,*
*Хәҙер… һис яҙмай улар…*

*4*

*…Халыҡ шағирҙарыбыҙ – аҙ,*
*Күберәк булһын улар:*
*Егерме,*
*Утыҙ,*
*Ҡыр(ы)ҡҡа,*
*Иллегә тулһын улар!*

*5*

*…Тәржемәселәребеҙ ҙә*
*Күренмәй күҙгә хәҙер:*
*Рәми Ғарипов кеүектәр*
*Бик кәрәк беҙгә хәҙер!..*

## *Һин дә уйлап ҡара…*

*Донъяла дуҫ бар,*
*Дошман бар:*
*Был – яңылыҡ түгел.*
*Дошман барҙа йәшәү – ауыр,*
*Дуҫтар барҙа – еңел.*

*Илдәр кисерә был хисте*
*(Ер туп-тулы халыҡ!):*
*Был хаҡта һәр кем уйлана,*
*Һәр кем – яңғыҙ ҡалып…*

*“Мин дә уйланам”: дуҫ – ташлай,*
*Ташлай…*
*Уйлап ҡара:*
*Дошман беҙҙе ҡәбергәсә*
*Эҙәрлекләп бара…*

## *“Шағир һин!” – тинем бирәүгә…*

*Уйланам…*
*Уйланамын да,*
*Аптырап торам үҙем:*
*Уны күккә сөйгән икән*
*Шаярып әйткән һүҙем.*

*Уйлап-уйлап*
*(Төптән уйлап!),*
*Әйткән һүҙҙәрем – күп бит! –*
*Ҡолағына ла элмәне:*
*Дөрөҫ һүҙ уға – сүп бит…*

## *Стәрле*

*Тау башында балҡый бер ҡала,*
*Ул ҡала Өфө тип атала…*
*Рәғизә ЯНБУЛАТОВА.*

*Өфө Стәрленән бейек,*
*Бейектән беҙгә баға…*
*Ә йылғалар*
*Стәрленән*
*Өфөгә табан аға!*

## *Юпитер*

(Йылмайып-көлөп кенә)

Юпитер – Ҡояш система-
һындағы иң ҙур планета.

*Ҙу-у-ур һин!*
*Ләкин –*
*Күренмәйһең:*
*Белдең микән һин үҙеңә*
*Шундай яҙмыш тейәһен?! –*
*Башҡортостандағы*
*Шағир*
*Рәхмәтулла, гүйә, һин…*

## *Эскесе ҡыуанысы*

*Айныҡтыстарыбыҙ – ҡайта! –*
*Кәрәк ил менән хуплау:*
*Һағындырған дуҫтар менән*
*Күрешеп,*
*Бергә гөрләшеп,*
*Серләшеп…*
*Бергә йоҡлау…*

***

*Сит ауылдан үтеп барам,*
*Был ауылда – һин дә бар.*
*(Хәҙер һин дә – ауылда бит…)*
*Был донъяла – мин дә бар.*

*“Һа-ғын-ды-ы-ым!” – тип, элеккеләй,*
*Шашып, көтәһем килмәй.*
*Тик… хәлдәреңде белмәйсә,*
*Һис тә китәһем килмәй…*

***

*Минуттарҙан,*
*Айҙарҙан,*
*Йылдарҙан*
*Хасил булған ғүмер – үтәсәк:*
*Айҙары ла,*
*Йылдары ла – түгел,*
*Минуттары… башҡа етәсәк…*

# ЙЫЛДАР АША ҺӨЙЛӘШЕҮ



– Йә, һаумы, әтей…әтейем… Бик оҙаҡ килдем… килдек… 72 йыл кәрәк булған һинең яныңа килергә… Күп, бик күп йылдар, әммә, шөкөр, килдек…

«Әтей, әтейем» тип өндәштем дә, ниндәйҙер сәйерерәк хистәр солғанышында ҡалғандай булдым. Ул изге һүҙҙе әйтмәгән бала юҡтыр ер йөҙөндә. Беҙ ҙә – минең быуын – һуғыш заманында донъяға килгән балалар ҙа әйтә инек. Күбебеҙҙең атайыбыҙ булмаһа ла – уларҙы ҡәһәрле һуғыш йотҡан, ти инеләр, ул һүҙһеҙ йәшәмәй инек. Бер генә нәмә аңлашыла ла, аңлашылмай ҙа: нишләп Ринаттың, Исмәғилдең, Рәйсәнең, Әмирҙең, Роберттың, тағы ла кемдәрҙеңдер атайҙары бар, ә күбебеҙҙең юҡ? Улар «әтей, атай» тип тәғәйен кешегә өндәшәләр, тәғәйен кешегә мөрәжәғәт итәләр, ҡыйын булһа, уның янына йүгереп баралар, күҙ йәштәрен уның алдында ҡоялар, уға ҡарап йылмаялар, ҡыуаныстарын еткерәләр, яҡлау эҙләйҙәр, табалар. Ә минең кеүек, ғөмүмән, минең быуын малай-ҡыҙҙарҙың «әтей», «атай» тип йә илай-илай, йә бошона-көрһөнә, йә өмөт-ымһыныу, йә маһайыу-ғорурланыу менән өндәшеүебеҙ бер ҡайҙа ла, тәғәйен бер кемгә лә барып етмәй, ҡаҡлығып кире килеп «әү, балам», «ҡуй, илама», «әләкләшмә» тип ҡыҙыҡһынмай, аңлатмай, йыуатмай, тынысландырмай. Әрләмәй ҙә, яуап та ҡайтармай. Әйтерһең, минең әтейем юҡ… Ә ул бит бар, булған. «Булған» шул, шуға ла өнө юҡ. Булған, хәҙер юҡ. Һуғышта һәләк булған.

…Аптыраңҡырап та ятаһыңдыр әле: «Нишләп был улым Тәлғәт йә «атай», йә «әтей» тип өндәшә икән тип?» Хәтерләйһеңдер инде, беҙҙең ҙур булмаған – 15-ләп ауылды берләштергән Гәрәй-Ҡыпсаҡ ырыуында, беҙҙең нәсел тамырыбыҙ йәйелгән, һин донъяға килгән Иҫке Һәйет ауылында ла «атай-әсәй» тип мөрәжәғәт итәләр. Ә мин тыуып үҫкән, белем-фиғел алған, күҙ асылған, аяҡҡа баҫҡан Маҡар ауылында, ҡайһы бер төбәктәрҙәге кеүек

«әтей-әней» тиҙәр. Хәҙер инде «әтей» тип кенә мөрәжәғәт итһәм дә дөрөҫ аңларһың, аптырамаҫһың…

…Кесе ейәнең Салауат улым йыш ҡына «Аты-баты, шли солдаты» тигән фильмдағы бер эпизодты иҫкә ала. Унда бер грузин милләтле һалдат фронтта һәләк булған атаһы ҡәберлегенә килә лә, «вот, отец, 30 лет шёл к тебе», ти. Шунан өҫтәй: «Ә минең әтейҙең юлы 72 йылға һуҙылды». Эйе, оҙаҡ килдек. Былай ҡайҙа күмелгәнлегең билдәле лә ине һымаҡ. Маҡар район военкоматының 1943 йылда ебәрелгән хәбәрендә: «Ваш муж сержант Сагидуллин Нигамат Фаткуллович, верный военный присяге, проявив героизм и мужество, был убит 28/XI-1942 г., похоронен в д. Будкино Великолукского района Калининской области», – тип яҙылған.

Ул көндәрҙә 1942 йылдың көҙөндә Калинин фронтында бик тә, үтә лә мөһим һөжүм операцияһы башланған була. Ноябрҙең 19-да бында килгән маршал Г. К. Жуков операцияның маҡсатын дошман ғәскәрҙәрен Калинин фронтының ошо участкаһында тотҡарларға, уларҙы Сталинград һуғышына немец ғәскәрҙәренә ярҙамға күсереү мөмкинлегенән мәхрүм итергә, тип билдәләй. Юҡҡа ғына 24 ноябрь башланғанда был аяуһыҙ операцияны «икенсе» йәки «төньяҡ Сталинград» тип атамайҙар. Сафтарында һин дә сержант булып хеҙмәт иткән 31-се уҡсылар дивизияһы бәрелештең иң киҫкен участкаларының бер арауығында алыша. Быларҙың барыһы ла һиңә мәғлүм булғандыр инде. Тик ошо алыштың бишенсе көнөндә үк йәнең фиҙа ҡылыныр тип уйламағанһыңдыр. Юҡ, ваҡыт-ваҡыт, һәләк булыуым да бар, тигән уй килгеләмәй булмаҫ. Тик уның янында, юҡ-юҡ, мин йәшәйәсәкмен, ошо йәшәү өсөн ҡан ҡойошабыҙ түгелме, тигән өмөт тә айырылғыһыҙ оҙатып йөрөгәндер. Һин баҡыйлыҡҡа миңә дүрт ай ҙа тулмағанда күскәнһең. Былай, улың тыуған икәнен белеп, уға «Тәлғәт» тип исем ҡушығыҙ, тип әйтеп өлгөргәнһең. Шулай, һин ҡушҡан исемде йөрөтәм мин, ғүмер буйы тап төшөрөп ҡуймайым тип. Беҙҙең исемдәребеҙҙе «Тәлғәт Ниғмәтуллович», «Тәлғәт Ниғмәтулла улы» тип бергә ҡушып әйттеләр, әйтәләр бит… Бәлки, иғтибар иткәнһеңдер, фамилиябыҙҙы ғына, һинең бер туған ҡустың – Рифҡәт ағайыма эйәреп, 6-сы кластан һуң ҡыҫҡартып «Сәғитов»ҡа әйләндерҙем. Моғайын, рәнйемәйһеңдер тип өмөт итәм. Донъяны аңлайһың бит…

…Бер уйлаһаң, әтей, беҙ бер-беребеҙҙе белмәйбеҙ ҙә, беләбеҙ ҙә кеүек. Әлбиттә, миңә бәләкәйҙән «әтей, әтейең» тигән һүҙҙәрҙе һеңдерәләр ине, 7 – 8 йәшемдә һинең тыуған ауылың Иҫке Һәйеткә тәү тапҡыр барғаным да хәтеремдә. Унда ла, мин бәләкәй саҡта йәшәгән Сәлих ауылында ла, һуғышта һәләк булған әтей тураһында төрлө йәлләткес йырҙар өйрәтеп, уны йырлаттыралар ине. Сеңләүгә лә, таҡмаҡ рәүешенә лә тартым йырҙарҙы тыңлап, апай-инәйҙәр балауыҙ ҙа һығып ала ине. Шул ғәмәлдәрҙең уртаһында йөрөһәм дә «әтей» һүҙен һинең һының менән бәйләмәй инем әле. Бәлки, бер ҙә күргәнем булмағанғалыр. Яйлап-яйлап әнейем һөйләгәндәренән, беҙгә йышыраҡ килә башлаған Камила апай, Хөмәйрә апай, Рифҡәт абый (һинең һеңлеләрең, ҡустың) менән тығыҙыраҡ аралаша башлағас, һинең образың («образың» тием – «һының» тип әйтеү дөрөҫөрәктер ҙә инде) күҙ алдына баҫты, тулылана барҙы…

…Бәләкәйҙән үк белемгә ынтылырға, беҙҙең яҡта әйтмешләй, «кеше булырға» тырышҡанһың. Яҡташыбыҙ, ырыуҙашыбыҙ, нәҫелебеҙ, хәҙерге

көндә киң билдәле Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман ағай Мусин, Сөләймән улы тип өҫтәһәм, хәтереңә тиҙерәк килер, һинең турала былай ти: «Ниғмәтулла ағай һуғышҡа тиклем Өфөлә эшләне, 1940 йылда булһа кәрәк, ул ауылға ҡайтҡайны. Шундай матур итеп бөхтә, ҡаласа кейенгән. Сөм ҡара сәстәрен шыма итеп тарап ҡуйыуҙары килешле. Уның һөйләшеп ултырыуҙары үҙе бер мәртәбә ине». Шулай, Өфө яҡтарында урман хужалығы системаһында иҫәп-хисап эшендә эшләгән булырға тейешһең. Быны Бөрө урман сәнәғәте кооперация системаһының уҡыу комбинатында бухгалтерҙар әҙерләү курсында уҡыуың дәлилләй. Уны тамамлағанда төшкән дөйөм фотола “1-се 1940 йыл сығарылышы” тип яҙылған. Ул замандағыса фотоның һул мөйөшөндә В. И. Ленин, уң мөйөшөндә И. В. Сталин фотолары ла ҡуйылған… Моғайын да, һин дә һуғышта, башҡалар кеүек, «За Сталина» тип атакаға күтәрелгәнһеңдер. Ихлас күңелдән ҡысҡырғанһыңдыр… Донъяның танымаҫлыҡ булып үҙгәререн, бөйөк даһиҙың гонаһтары асып һалынырын, ыңғай эштәренән дә йөй эҙләп, уларына ла яла яғырға тырышасаҡтарын башығыҙға ла килтермәй инегеҙ бит… Ихлас ҡысҡырғанһыңдыр. Бәлки, ул һуңғы һүҙҙәрең дә булғандыр…

Әнейем һәм һине белгән, онотмаған кешеләрҙең әйтеүенә ҡарағанда, мин һиңә ныҡ оҡшағанмын. Шулай тип әйткәндә шул тиклем тулҡынлана инем, ниндәйҙер ғорурлыҡ тоя инем, һинең бөтә һының, буй-ҡиәфәтең, холоҡ-фиғелең күҙ алдына баҫа…

Өфөлә эшләп, Бөрөлә курстар тамамлап үҙебеҙҙең яҡҡа ҡайтҡас, Маҡарҙағы промартелгә эшкә урынлашҡанһың. Шунда Маҡарҙа әнейем Зөләйхә менән ғаилә ҡорғанһығыҙ. Армия сафына ла Маҡар районы военкоматы тарафынан саҡырылғанһың. Әйткәндәй, һинең фотоларҙы ҡарағанда бер нәмәгә иғтибар иттем. Хөмәйрә апай, Фәйрүзә апай менән өсәүләп төшкән фотоның артына «Снят 1941 года 28-го августа… перед отправкой брата Сагидуллина Н. Ф. в ряды РККА» тип яҙылған. Был юлы һине армияға алыуҙы кисектереп торғандар, күрәһең. Әгәр һине шул саҡ алып китһәләр был яҡты донъяға (ул саҡта бөтә донъя һуғыш һөрөмө менән ҡапланған булһа ла яҡты) мин килмәҫ инем бит, әтей. Шулай уйлаһаң, күңел өшәнеп китә. Әммә, Хоҙай ҡөҙрәте, яҡты яҙмыш килеп ҡыҫылып, һине бер аҙға һөйөклө ҡатының янында ҡалдырған.

Хәҙер, әтей, әнейемдең яҙып ҡалдырған һүҙҙәрен дә һиңә еткерәйем. Һүҙмә-һүҙ…«1942 йыл, февраль. Дәһшәтле һуғыш барған көндәр, ауылда һанаулы ғына ирҙәр ҡалған тип әйтерлек. Бер кисте шулай Баһауетдин ағайҙар ҡунаҡҡа саҡырып алдылар. Солтанов Ғаффар ағай Хәлимә апай менән, Буранғолов Камил Рауза ханым менән, Ниғмәтулла менән мин барҙыҡ. Ғаффар ағай сельсовет председателе булып эшләй, Буранғолов – мәктәп мөдире; Баһауетдин ағай сельпо председателе, Ниғмәтулла артелдә хисапсы булып эшләйҙәр ине. Хәлимә апа өс бала менән, Рауза ханым өс бала менән, Гөлниса апа өс бала менән тороп ҡалдылар. Был арыҫландай ирҙәр бронь менән ҡалып киләләр ине. Мәжлес башҡа ваҡыттағы кеүек күңелле түгел инде. Ҡайғылы йырҙар йырлашып ултырҙыҡ. Ниғмәтулла матур итеп оҙон көйҙәргә йырлай торғайны. Күп тә үтмәне, беҙҙең ирҙәр бер-бер артлы яуға киттеләр. Илашып оҙатып ҡалдыҡ. Киттеләр ҙә, береһе лә әйләнеп ҡайтманы…»

Был һөйләгән өҙөк, бәлки, оҙонораҡ та булғандыр, әтей. Әммә әнейҙең

һүҙҙәре һиңә, моғайын, танһыҡтыр. Әрнеү, һыҙланыу, һағыш һүҙҙәре булһа ла. Тыңларға ваҡытың да бихисап… Тағы ла әнейем һүҙҙәре: “1942 йыл, 20 март ине. Стәрлетамаҡ тимер юл вокзалына ҡәҙәрле Ниғмәтулланы яуға үҙем оҙата барҙым… Уф Аллам, ул көндәрҙе күҙ алдына килтереүҙәре, күңелдән кисереүҙәре шул ҡәҙәр ауыр… Бына беҙ Ниғмәтулла ултырып китәһе вагон ишеге алдына баҫҡанбыҙ ҙа бер-беребеҙгә ҡарап телһеҙ ҡалғанбыҙ, ни әйтергә лә белмәй тик торабыҙ. Уңарсы поезд да ҡуҙғалды.

*Ҡысҡырма, тим, паровоз, ҡысҡырма,*
*Ныҡ ҡуҙғаттың йөрәктең яраһын.*
*Минең йөрәгемде телгеләп,*
*Алып киттең күҙем ҡараһын…*

1942 йылдың март айынан сентябргә ҡәҙәр Алкинда булдылар, шунан Калинин фронтына оҙаттылар. Фронттан ике генә хаты килде лә, хаттар туҡталды”.

Һин Алкинға март айында киткәнһең, ә беҙҙә һинең шул осор төшкән фотоң бар. Өҫтөңдә һалдат гимнастёркаһы, пилотканды бер аҙ уңға ҡырынайтыңҡырап кейгәнһең. Ап-аруҡ һурыҡҡанһың. Ҡарашың көсөргәнешле кеүек, күҙҙәреңдә һағыш саткылары… Был фотоң башҡа бер нисә фотоңа ҡарағанда һарғайған. Әллә эшләгәндә үк һарыраҡ ҡағыҙға баҫылған, әллә инде ҡулдан-ҡулға күсеп миңә юлыҡҡансы һағыштан һарғайған… Артында һинең ҡулың менән яҙылған “На память снят 1942 г. 7-го мая, г. Уфа” тип яҙылған һәм ҡултамғаң. Ысынлап та, “на память“ булды. Был һинең, белеүемсә, һуңғы фотоң… Фронтта өс ай ғына булып, 1942 йылдың 28 ноябрендә ғүмерең өҙөлдө. Әнейем әйтә ине, яҙып та ҡалдырған: “…1943 йылдың 6 мартында мине сельсовет кәнсәләренә саҡырҙылар. Тәлғәтемде күтәрҙем дә сельсоветҡа барҙым. Председатель булып Зәһира ханым эшләй ине. Зәһира әйтә, Зөләйхә, зинһар, мине ғәфү итегеҙ инде, ти. Бына был хәбәрҙе алыуыбыҙға байтаҡ ҡына ваҡыт үтте. Был ҡайғылы хәбәрҙе һеҙгә әйтергә бер кем дә ризалашманы. Шулай тине лә алдыма бер яҙыулы ҡағыҙ ҡуйҙы…”

Бына шулай, әтей, һинең һуғыш яланында ауғаныңа өс айҙан артыҡ ваҡыт үткәс кенә ул ҡара ҡағыҙҙы әнейемә тотторалар. “Йөрәгем әрней, эстә ут яна, Тәлғәтем миңә ҡарап йылмая. Балаҡайым йылмайыуына ҡарап, әҙерәк кенә күңелем йыуана”. Нишләһен, һинең вафатыңа әрней-ҡайғыра, һинең төҫөң – улы булғанына ҡыуана-ҡыуана, зарлы – парһыҙ, ирһеҙ – атайһыҙ донъяла ҡалып балаһын үҫтереүгә бар көсөн һала әней. Рәхмәт әнейемә, матур тәрбиә биргән, иманлы аң тәрбиәләгән, йәшәйеш ҡанундарын төплө өйрәткән. Кешеләр менән үҙ-ара мөнәсәбәт ҡағиҙәләрен яҡшы һеңдергән… Мин түгел, бик күп кешеләр, беҙҙе белгән, беҙ аралашҡан кешеләр шулай ти. Беҙҙең тәүге осрашыуыбыҙ булғас, үҙемсә иң кәрәкле, иң тейеш хәл-ваҡиғаларҙы еткермәксе булдым, мөҡәддәс уй-фекерҙәр ҙә, хәтирәләр ҙә араһында ҡушылып киткәндер. Тағы шул: олатайым Фәтҡулла 1943 йылда һинән бер йылға ҡалып вафат булған. Өләсәйем Тайба – мин уны бик яҡшы хәтерләйем – 1952 йыл был яҡты донъяны ҡалдырҙы. Әнейем дә 2001 йылда яралы күңеле менән яңғыҙлыҡ мөхитендә 59 йыл матур итеп сабыр ғүмер кисереп, һинең яныңа китте. Бәлки, осрашҡанһығыҙҙыр ҙа.

…Баяраҡ бер-беребеҙҙе беләбеҙ ҙә, белмәйбеҙ ҙә кеүек, тигәйнем. Әлбиттә, беләбеҙ. Һин һәр саҡ минең күңелемдә булдың, ә мин – һинең ҡаның,

һинең йәнең. Шулай булғас, нишләп белмәйбеҙ, ти, беләбеҙ…

…Баяраҡ әйтә биреберәк ҡуйғайным, күмелгән ерең тураһында хәбәрҙар булһаҡ та, килеүебеҙ 72 йылға һуҙылды, тип. Шулай, тик беҙ был яҡтарҙа булғайныҡ инде. Оло ейәнең Азамат менән 90-сы йылдар уртаһында Мәскәүҙән машина менән военкомат күрһәткән адрес буйынса Будкино ауылын эҙләп барғайныҡ. Һинең ҡәбереңә, һинең яныңа. Тик юлыбыҙ уңышһыҙ булды, табалманыҡ. Великие Луки районында Будкино тигән ауыл булмай сыҡты. Кешеләрҙән һораштырып йөрөнөк, тик берәү ҙә ул ауылды белмәй. “Михалькино ауылы яғына барығыҙ. Унда Липец тигән ауыл клубы янында уң яҡлап туғандар ҡәберлеге бар. Позголино ауылы янында ла күмелгәндәр бар. Шунда барып ҡарағыҙ”, – тинеләр. Барҙыҡ, ҡараныҡ – һинең фамилияң юҡ. «Бынан йыраҡ түгел – өс саҡрымда Букино ауылы бар. Бәлки, шундалыр. Будкино тип яңылыш яҙылғандыр. Задежа, Анички ауылдарына ла һуғылыу кәрәктер, бәлки», – тинеләр. Улым менән иҫебеҙ китеп йөрөнөк. Ҡайҙа ҡарама – дөйөм ҡәберлек, ҡайҙа күҙ ташлама – ябай ғына һәйкәлдәр, обелискылар, хәтер таштары. Шунда йөрөгәндә ерҙең һәр ҡарышы ҡан менән һуғарылған тигәнде йөрәгең аша үткәреп нығыраҡ аңлай башлайһыңдыр, асылын төшөнәһеңдер.

Заманында Мостай Кәрим Германия Федератив Республикаһына барғас тынғыһыҙ журналистар унан: “Һеҙ үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ, ни тиһәң дә, Икенсе Бөтә донъя һуғышын башлаған илгә килгәнһегеҙ?“ – тип һорағас, аҡыл эйәһе: “Мин үҙемде 20 миллион ватандаштарым күмелгән (хәҙер ул һан да үҙгәрҙе) икһеҙ-сикһеҙ зыярат эсенән китеп барғандай тоям“, – тигән. Һуғыш хасил үткән һанһыҙ ҡәберлектәр, ҡәберҙәр, обелиск-һәйкәлдәр күрһәк, үҙеңде башҡаса хис итеп тә булмайҙыр…

…Великие Луки районы хакимиәтенә, военкоматына инеп мөрәжәғәт итер инек, ял көндәренә тура килгәнбеҙ. Йәл, тәүге сәфәребеҙ уңышһыҙ булды. Кәйеф төштө, бер аҙ төңөлөү ҙә баҫҡандай. Шулай ҙа эҙләп табырыбыҙға ышанабыҙ. Был ышаныс замандың компьютер тигән мөғжизәһе тыуғас, тамам нығынды. Уның мөмкинселектәрен яҡшы белгән оло ейәнең Азамат менән уның хәләл ефете – киленең Емеш – Наталья һинең төйәкләнгән ерҙе ныҡлап эҙләй башланылар. Башҡа документтарҙа Б. Рудкино тигән исем аталғанын күргәс, тәғәйен шул ауыл тирәһенән эҙләүҙе дауам иттеләр. Ҡайҙа, кемдәргә генә мөрәжәғәт итмәне улар. Яйлап-яйлап асыҡланылар, таптылар. Дөрөҫө Б. Рудкино булып сыҡты.

Бәхеткә ҡаршы, ул йылдарҙа Псков өлкәһендә Рәсәй Президентының баш федераль инспекторы булып Башҡортостан егете Салауат Булат улы Ғүмәров эшләй ине. Рәхмәт яуһын уға, ул ең һыҙғанып был эштә ярҙамлаша башланы.

Псков мәғлүмәт агентлығының 2014 йылдың 15 апрелендәге хәбәрендә былай тиелә: “… В ходе мероприятий по поиску места захоронения Н. Сагидуллина было установлено, что действительно на территории Горицкого сельского совета в довоенное время находилась деревня Большое Рудкино, в которой были захоронены погибшие в годы Великой Отечественной войны военнослужащие… В 1947 году останки погибших воинов данного захоронения были торжественно перезахоронены в братскую могилу в деревне Мякотино Горицкой волости Великолукского района…“ Бөгөн “Гвоздово“ тип аталған был туғандар ҡәберлегенә ошо тирәләге тағы ла 50 ауылдан һуғыш ҡорбандарын йыйып күмгәндәр. Был – райондағы туғандар

ҡәберлегенең иң ҙуры, унда 1482 яугир күмелгән. Шуларҙың береһе һин, әтейем – сержант Сәғиҙуллин Н. Ф., 1911 йылғы.

Тимер рәшәткә менән әйләндереп алынған майҙансыҡтың уртаһында туғандар ҡәберлеге. Майҙаны 3 метрға 6 метр. Һәм шунда – 18 квадрат метрға – 1482 яугир һөйәктәре күмелгән…һыйған. Иҫең китерлек… Фронттың ошо бәләкәй генә майҙанында күпме ҡорбан килтерелгәненә аптырарһыңмы, әллә 1500 ил улы һөйәктәренең шул ус аяһындай ғына ергә һыйғанынамы?.. Һәр хәлдә иҫәңгерәтерлек уйҙар… Ҡәберлектең уң яғында алты, һул яғында ла алты ҡалайҙан эшләнгән ҡалҡанға-плитаға бында күмелгән батырҙар исемдәре яҙылған. Ә яҙылған исем – ул мәңгеләштерелгән исем… 2014 йылда унда  һинең исем-шәрифтәрең дә яҙылды. Ә был ғәмәлде башҡарыу өсөн Азамат ейәнең ҡабул ителгән ҡағыҙә буйынса ил Президентына, Псков өлкәһенең шул саҡтағы губернаторы Андрей Турчак исеменә  мөрәжәғәт итте… Шунан, әтей, Псков мәғлүмәт агентлығы 2014 йылдың 15 апрелендә шундай хәбәр таратты. “К 9 Мая увековечат память сержанта из Башкортостана Нигмата Сагидуллина, который погиб в бою в Великолукском районе 28 ноября 1942 года. Его имя будет нанесено на мемориальную плиту на воинском захоронении в деревне Гвоздово Великолукского района. Такое решение озвучил временно исполняющий обязанности губернатора Псковской области Андрей Турчак в ходе приёма граждан, который он провёл 15 апреля, передаёт корреспондент Псковского агентства информации“… Бына шунан һуң һинең исемеңде, әтейем исемен мәңгеләштереп, уйып-сүкеп яҙып ҡуйҙылар. Рәсми органдар әйтеүенсә, 1500-сө итеп. Һәләк булған атай-олатайҙарын эҙләүселәр һаны етерлек әле, табыусылар һаны ла ап-аруҡ. Шул уҡ Псков өлкәһендә тик 2013 йылда ғына ла 546 яугир исеме мәңгеләштерелгән. Был ҡалҡан-плиталарҙа һинең исемең әле һуңғыһы түгел, тағы ла бер фамилия – сержант Майбородов К. И. 1903. 14.01.1944 – өҫтәлгән… Буш урындар һаман да бар әле.

Һинең исемең 1 майға тиклем (2014 йыл) мәңгеләштereләсәк, тигән хәбәр килеп еткәс, беҙ Великие Луки районы хакимиәте менән бәйләнешкә инеп, Еңеү көнө алдынан һин күмелгән, исемең мәңгеләштерелгән ҡәберлекте барып күрергә, мәңгеләштереү сараһында ҡатнашырға теләүебеҙҙе белдерҙек. Район вәкилдәре ихлас көтөүҙәрен әйткәс, юлға сыҡтыҡ.

Һәм бына бөгөн – 2014 йылдың 8 майында беҙ – улың Тәлғәт, оло ейәндәрең Азамат, Салауат, бүләң Буранбай һинең янындабыҙ, ҡәбереңянында… Урындағы ауыл советы рәйесе Меркулова Галина Евгеньевна, мәктәп директоры Черней Юлия Михайловна, мәктәптәге музейҙың йәмәғәт башланғысындағы директоры Черней Зинаида Павловна был ваҡиғаға арналған матур ғына сара әҙерләгәндәр. Бер төркөм балалар иҫ киткес һалҡын көн, үҙәккә үтерҙәй ел, күшектергес ямғырға ҡарамай, Советтар заманындағы кеүек, Ил хаҡында, Илһөйәрлек, Ватан, Тоғролоҡ, Намыҫ тураһында шиғырҙар уҡынылар. Советтар заманындағыса, тинем. Шулай тейештер ҙә, һеҙ бит бөтәгеҙ ҙә Советтар илен яҡланығыҙ. Ундағы митингыла һинең бүләң – 11 йәшлек Буранбай алҡымынан алған йәштәренә төйөлә-төйөлә: “Олатай, хәҙер һин дә өйлө булдың. Адресың да бар. Беҙ ҡайҙа килергә икәнде белгәс, хәлеңде белеп торорбоҙ“, – тине. Уның ул һүҙҙәрен, моғайын, ишеткәнһеңдер…

Әлбиттә, киләсәкбеҙ… Унда яҙылған 1500 фамилия менән ныҡлабыраҡ та танышырбыҙ. Һуғыш ваҡытында “Книга донесений о безвозвратных потерях“ тигән журнал да алып барылған. Унда һәләк булғандарҙың исем-фамилиялары, званиеһы, ҡайҙа нисәнсе йылда тыуған, ҡайһы военкомат һуғышҡа алған, ҡасан яуҙа ауған, был турала ҡайҙа, кемгә хәбәр итергә кәрәк икәнлеге яҙылған. Һине эҙләгәндә шул донесениеның бер битен беҙгә лә ебәрҙеләр. 15 яугир фамилияһы яҙылған (52 – 66-сы номерҙар). Һин теркәлгән 64-се номерҙа “Сагидуллин Нигмат Фаткуллович, сержант, стрелок; 1911. Баш АССР, Макаровский р-н и с/с, д. Макарово (бында С-Саитово булырға тейеш ине); Макаровским РВК Баш. АССР; 28.11.42 убит в бою; Калининская обл. В-Лукский р-н, д. Б. Рудкино; жена Газизова Зулейха Нагимовна, Баш АССР, Макаровский р-н. с. Макар. Больница“, – тип яҙылған. Ошо 15 кеше араһында бишәүһе Башҡортостандан. Бәлки, беләһеңдер, иҫеңә төшөр, уларҙы атап үтәйем. 54-се номер – Ғизелтинов Мөхәмәтйәр Ғазелтинович, районы аңларлыҡ түгел, ауылы дер. Н. Моногас тип яҙылған. 57-се – Раянов Мөхәмәтйән Ғаянович, Барановский район, д. Каразирик – моғайын, Шаран районылыр, унда Каразыбаш ауылы бар. Ә Ҡараерек ауылы Бүздәк, Борай, Саҡмағош райондарында. 59-сы – Сәитов Хамид Латыпович, Кушнаренко районы, Ҡарасайылға ауылынан. 63-сө – Шахмәтов Миниғәли Хазиәхмәтович, Кушнаренко районы, Әхмәт ауылынан. Шул яҡташтарың менән бер көндә – 28 ноябрҙә Большое Рудкино ауылы янында һәләк булғанһығыҙ. Донесениеның беҙҙәге битендә теркәлгәнсә, тағы ла 4 кеше – Горький өлкәһенән Шерстнев Емельян, Калинин өлкәһенән Вербин Георгий, Курган өлкәһенән Герасимов Иван, Горький өлкәһенән Телегин Михаил шул уҡ көндә һинең яҙмышыңды бүлешкән. Хәҙерге йәштәр ундай өлкәләрҙе белмәйҙәрҙер ҙә инде – исемдәрен алмаштырҙылар бит…

Киләһе сәфәребеҙҙә ҡәберлектәге фамилияларҙы иғтибарлап ҡарарбыҙ… Ә әле, әтей, һинең менән һөйләшкән арала һулдараҡ айырым бер обелиск кеүек ҡоролма күҙгә ташланды. Яҡыныраҡ барып ҡараһам, иҫем китте. Унда Советтар Союзы Геройы татар егете Ғазинур Ғәфиәтуллин күмелгән… Ғазинур Ғәфиәтуллин… Беҙ бәләкәй саҡта Ғабдрахман Әпсәләмовтың йотлоғоп уҡыған “Ғазинур“ романы геройы… Александр Матросов – Шакирйән Мөхәмәтйәнов ҡаһарманлығын 1944 йылда ҡабатлаған Ғазинур Ғәфиәтуллин… Һинең кеүек хеҙмәт юлын урман хужалығында башлаған, һинең кеүек үк сержант булған, һинең кеүек 31 йәшендә һәләк булған, һинең кеүек… Бөгөн һинең күршең… Ә бит һинең тағы ла бер күршең бар. Юҡ, был туғанлыҡ ҡәберендә түгел, ә яҡында ғына – Великие Луки ҡалаһы эсендә ҡалған Плетень тигән ауылда. Бая иҫкә алып киткән Александр Матросов ҡәбере. 1943 йылдың 23 февралендә Чернушки ауылы янындағы алышта батырлыҡ күрһәткән – дошман амбразураһына ташланған геройҙы аҙаҡ ҡала янына күсереп ҡайтанан күмәләр. Шул урында 1954 йылдың 25 июлендә һәйкәл ҡуялар… Александр Матросов… Ә һин, әтей, уның – Советтар Союзы Геройының башҡорт егете Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов икәнен белһәң, нимә эшләр инең икән, нindәй хистәр кисерер инең? Ә уның асылда Учалы районының Ҡунаҡбай ауылында тыуып үҫкәнен, башҡорт егете икәне журналист Рәүеф мәрхүм Насиров ныҡышлығы, тырышлығы менән тулыһынса асыҡланды. Бына шулай, әтей… Бер яғында рус исеме менән танылыу, хатта табыныу тапҡан башҡорт

егете, бер яғында – татар егете. Икеһе лә еңеү хаҡына дошман дотын кәүҙәһе менән ҡаплап ҡорбан булған. Икеһе лә Советтар Союзы Геройы.

Тағы ла бер күршең менән таныштырып үтмәй булмай, әтей. Беҙ был изге ергә аяҡ баҫҡанда бая бөтмәҫ рәхмәтебеҙҙе әйткән Салауат Булат улы Ғүмәров туғандаш ҡаҙаҡ халҡының данлыҡлы ҡыҙы Советтар Союзы Геройы Әлиә Молдағолова ҡәберен уның яҡындары килеүе алдынан тағы ла бер ҡарап, йыйнаҡлатып, нурлыраҡ итеү менән шөғөлләнә ине. 78 немец һалдат-офицерын юҡ иткән 18 генә йәшлек снайпер ҡыҙ, әлбиттә, хөрмәткә, юғары исемгә лайыҡ, хәтеребеҙҙең иң түрендә һаҡланырға тейеш. Һинең яҡташың, әтей, ауылдашың Әхәт Абдулхаҡ улы Әхмәтйәнов кеүек. Ул да снайпер булған. Финдарға, немец-фашистарына ҡаршы һуғышта 502 дошманды юҡ итеп, тыуған төйәгенә иҫән-аман Еңеүсе булып ҡайтҡан. Һуғыш заманында яҙылғанмы, яҙылмағанмы, мин белмәйем, тәртип буйынса 100-ҙән артыҡ дошманды юҡ иткән снайперға Советтар Союзы Геройы исемен бирер булғандар. Ә Әхәт Әхмәтйәновты был юғары исем, ни сәбәптәндер, (ҡыҙыу холоҡло булып кесе командирына ҡатыраҡ яуап биргән, тиҙәр) “эҙләп» таба алмаған. Ә ул барыбер халыҡ хәтерендә. 2019 йылда Маҡар ауылында асылған уның һәйкәле ил тыныслығы, халыҡ хәтере, намыҫы һағына баҫҡан кеүек, бар тирә-яҡты байҡап тора. Аллаға шөкөр. Шулай ҙа ҡайһы ваҡыт был рәсми герой тигән исем менән нисектер сәйер, аңлашылмаған мөнәсәбәттәр урынлашҡан кеүек тойолоп ҡуя. Бәлки, был исемдең Әхәт Әхмәтйәновты ғына түгел, Мишкә районы Янағош ауылы егете Ғазый Ҡазыхан улы Заһитовты ла урап үтеүе шундай уйға тарыталыр. Ул бит хеҙмәттәше сержант М. П. Минин менән тәүгеләрҙән булып 1945 йылдың 30 апрелендә үк 22 сәғәт 40 минутта Рейхстаг бинаһы өҫтөнә Ҡыҙыл байраҡ ҡаҙай. Һуңыраҡ ҡаҙаған яугирҙар был исемгә лайыҡ булалар ҙа… Данлыҡлы башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры генерал-майор Миңнеғәли Шайморатовты ла урап үткәнгәлер. Республикабыҙҙың нисә быуын етәкселәре нисәмә тапҡыр ғына ул юғары исемде юлламаһын, Мәркәздән ул мөрәжәғәттәргә ыңғай яуап һаман юҡ. Ә халыҡ барыбер ғәҙеллектең өҫкә сығырына ышана. Ә Геройҙар ҡәбере араһында батырлыҡ күрһәтеп ҡорбан булған миллиондарса яугирҙар… Ә исемдәре асыҡланмаған батырҙар һаны?.. Ҡанса шунда ятҡан батырҙар һөйәге… Кем белә?.. Хәйер, әтей, һәр һалдат, яугир – ныҡ билдәлеме ул, исемлеме, билдәһеҙме, пленға эләккәнме, хәбәрһеҙ юғалғанмы, мәңгелек төйәге табылғанмы-юҡмы, барыбер билдәле бит инде ул. Улар нәҫел-нәсәбәһенең, ул-ҡыҙҙарының, ейән-ейәнсәрҙәренең, бүлә-бүләсәләренең, ауылдаш-хеҙмәттәштәренең, дуҫ-дошмандарының, туған-тыумасаларының хәтерендә ҡала киләләр. Беҙҙеке кеүек инде: һин мәңге минең менән булдың, ейәндәрең һинең «төйәкләнгән» ереңде килеп тапты, бүләң килеп күрҙе. Беҙҙең ғаилә хәтере дөйөм халыҡ хәтеренең бәләкәй генә киҫәксәһе, атомы, өлөшсәһе… Дөйөм Халыҡ хәтерен хасил иткән миллиондарҙың хәтере кеүек… “Хоҙайым, ил, көн тыныс була күрһен инде!» тип теләгән халыҡ хәтере кеүек…

Бөгөн мин, әтей, күберәк һөйләнем, буғай. Ни хәл итәһең, 72 йыл аралашманыҡ бит, һөйләшер һүҙҙәр ап-аруҡ йыйылған. Ә атай менән һөйләшеү, фекер алышыу борон-борондан килгән, ҡанунлаштырылған йола, хатта тормошто алға һөрөүсе бер көс тә тип ҡабул ителә бит. Бер осрашыуҙа

ғына барыһы хаҡында ла һөйләшеп бөтөп тә булмай, тағы килербеҙ…

Ә хәҙер беҙ Русаново ауыл мәктәбенә барабыҙ. Унда бәләкәй генә бер бүлмәлә музей ойошторолған. Ошо яҡтарҙағы үлемесле алышты һүрәтләгән, күҙ алдына килтерерлек итеп урынлаштырылған төрлө экспонаттар, хәтирәләр бар… Туғандар ҡәберлегендә күмелгәндәргә килгәндә, Ғазинур Ғәфиәтуллин янына 1975 йылда килгән “Иркен нефть» нефть-газ сығарыу идаралығы делегацияһы алып килгән экспонат күҙгә салынды… Беҙ музейға халҡыбыҙ өсөн изге булған, тыуған районыңда ҡалҡып-балҡып торған Торатауҙың рәсемен тапшырҙыҡ… Һинең күңелеңде йылытып торһон… Торатауҙың үҙенең яҙмышы ла хәүефлегә әйләнде бер осор. Стәрлетамаҡтағы “Сода» компанияһы уға ныҡлап яҫҡынып алды. Имеш, уларға сеймал-сырьё кәрәк… Һин белмәйһеңдер шул, Стәрлетамаҡ аша ауылыңа ҡайтып йөрөгәндә лә, фронтҡа киткәндә лә дүрт шихан тауы тирә-йүнде, ил-көндө һаҡлап тора ине. Һуғыштан һуң ҡала предприятиеһы Шәкетау тигән, халыҡта уны Шахтау тип тә йөрөтәләр, бейеклеге 336 метр, киңлеге 1,3 километр булған мөһабәт тауҙы ашап бөттө. Хәҙер килеп Торатауға тотонмаҡсы булып киттеләр. Әммә халыҡ Торатауҙы дәррәү яҡлап сыҡты… Предприятие сигенде, тик оҙаҡҡа ла, йыраҡҡа ла түгел, ахырыһы… Күреп тораһың, тыныс ваҡытта ла, тәрән тылда ла йәшәү өсөн туҡтауһыҙ көрәш бара. Күп ерҙә, һәр тарафта, һәр юҫыҡта, һәр ҡатламда, һәр ҡитғала… Ана шул Торатауҙың – халыҡ тарихын – үткәнен, күргән-кисергәнен, рухын – иманын, аҡыл-тәжрибәһен, намыҫын – йәшәү рәүешен үҙенә һеңдергән, һаҡлаған, бөтөн иһә халҡына еткерергә – тапшырырға бар көсөн, һәләтен, мөмкинлеген һалған изге ҡомартҡыбыҙҙың рәсемен тапшырҙыҡ… Галина Егоровна менән Зинаида Павловна экспонаттар менән таныштырҙылар, музейҙа сағылыш тапҡан был яҡтарҙағы алыш хаҡында һөйләнеләр. Һәм шунда иҫ киткес бер документҡа юлыҡтыҡ. “28 ноября 1942 года впервые в истории Великой Отечественной (второй мировой) войны, произошло одновременное двойное окружение немецких войск у Сталинграда (23.11.42) и у Великих Лук (28.11.42г.). В январе – феврале 1943 года обе окруженные группировки были уничтожены. Может быть, эти дни и надо считать началом коренного перелома в ходе Великой войны?! (кн. Северный Сталинград, Великие Луки, 2008 г. стр. 287)». Иҫ китерлек шул, әтей, ҡамау тамамланған көн һинең һәм яуҙаштарыңдың һәләк булған көнөнә тап килә.

Туғандар ҡәберлегенә Рәсәйҙең бөтә тарафтарынан килеп торғандарын, былтыр (2013 йыл) Саха-Яҡутстандан килгәндәрен, быйыл Тула һәм Санкт-Петербургтан килеүселәрҙе көткәндәрен әйттеләр. Беҙҙә сикһеҙ ихтирам уятҡан хужабикәләрҙе Башҡортостанға, Өфөгә Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған тантаналарҙа, төрлө сараларҙа ҡатнашырға саҡырҙыҡ. Мең ярым (1500) шаһиттың мәңгелек төйәген ҡарау, тәрбиәле тотоу, хәстәрләү өсөн, ниндәйҙер кимәлдә уларҙың яҙмышы менән йәшәү, яҡындарын юллап, хәлдәрен белергә килгәндәрҙең хәсрәт-ҡайғыларын уртаҡлашыу, уларҙы йыуатыу-тынысландырыу өсөн ниндәй оло йөрәк кәрәк? Саҡырҙыҡ… Бәлки ҙә, ошо 1500 шаһит, уларҙың Рәсәйҙең, элекке Союздың төрлө тарафтарында көн иткән яҡындары исеменән дә булғандыр был саҡырыу. Һәр хәлдә хужабикәләр бындай саҡырыуҙы беренсе тапҡыр алдыҡ, тинеләр… Һәм 2015 йылдың 7 майында Псков өлкәһе Великие Луки районындағы Мякотино туғандар ҡәберлегендәге 1500-сө һан менән билдәләнгән башҡорт егете

батыр яугир Сәғиҙуллин Ниғмәтулла Фатҡулла улының тыуған еренә – Башҡортостанға аяҡ баҫтылар. Һинең сәләмеңде, рухыңды, хәтереңде еткерҙеләр беҙгә. Өҫтәүенә, һуңғы йылда сыҡҡан “Псковская область, Великолукский район, Горицкая волость, история и памятные места» тигән (төҙөүселәре беҙгә ҡунаҡҡа килгән Зинаида Павловна һәм уның ҡыҙы Юлия Михайловна) матур ғына брошюра – буклет алып килгәндәр. Был төбәктең ҡыҫҡаса бирелгән боронғо тарихы менән бер рәттән Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары ап-аруҡ яҡтыртыла... Һәм иң ғәжәпләндергәне, аптыратҡаны, әтей, унда бүләң Буранбайҙың исемең яҙылған ҡалҡан-плита алдында һинең фамилияңа ҡарап ҡатып ҡалған фотоһы урынлаштырылған... Был ғәмәлде башҡарған ҡатындарҙың аҡыл зирәклегенә, зиһен үткерлегенә, хис байлығына, күңел йомартлығына, әҙәп тәрәнлегенә, рух бөйөклөгөнә һоҡланмай мөмкин түгел, әтей... Килделәр. Матур итеп ҡаршы алдыҡ. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған баш ҡалабыҙҙа уҙғарылған бөтә сараларҙа ла ҡатнаштылар. Бик оҡшаттылар республикабыҙҙың үҙен, йөҙөн, халҡын, көнкүрешен. Ҡайтҡас, беҙҙең сәләмдәребеҙҙе еткергәндә үҙҙәренең тәьҫораттары хаҡында ла һөйләгәндәрҙер һиңә. Мостай Кәрим шиғырҙарын да уҡып ишеттергәндәрҙер. Шиғырҙарын бик оҡшатҡас, яугир халыҡ шағирының ус аяһындай ғына форматта ике телдә сығарылған китабын бүләк иткәйнек... Изге күңелле ул ҡатындар менән беҙ һәр саҡ бәйләнештәбеҙ. Посылкалар ҙа ебәрешәбеҙ. Былтыр алған посылка эсенән үҙ ҡулдары менән бәйләнгән ойоҡбаш килеп сыҡҡас, күңел тулышҡанын аңлайһыңдыр, әтей. Һуғыш йылдарында фронт өсөн беҙҙең әсәй-өләсәйҙәребеҙ ойоҡбаш бәйләгән булһалар, хәҙерге тыныс заманда беҙҙең алыҫтағы ҡәҙерлегә әйләнгән кешеләребеҙ беҙҙең күңелде йылы тотоу өсөн ниндәй ҡәҙерле бүләк ебәргәндәр. Посылка эсендәге открыткала шундай һүҙҙәр ҙә бар. “Спасибо, дорогие, за тепло ваших добрых сердец, за нашу встречу, за вашу удивительную и так необходимую в наше время, память о всех погибших в ту страшную войну...» Уларҙың был һүҙҙәрен һинең, әтей, һүҙҙәрең, баһаң, хисең, уйҙарың тип ҡабул итеп, аҡҡа төшөрөргә булдым... Эйе, хәтерләйбеҙ. Һинең исемең Великие Луки янындағы Гвоздево туғандар ҡәберлегендә ҡалҡанға яҙылған, Ишембай ҡалаһындағы Еңеү паркындағы обелискыла (элекке Маҡар районы хәҙер Ишембай районы тип атала) урын алған, Ҡолғона ауылындағы обелискыла ла исемең бар. Ишембайҙа 1993 йылда сығарылған “Книга памяти г. Ишимбая и Ишимбайского района, погибших в годы войны» тигән китапта ла мәғлүмәт бирелгән. Күреп тораһың, тыуған ауылың да, районың да, оло Ватаның да онотмай, хәтерендә һаҡлай... Һуңғы йылдарҙа илебеҙҙә “Үлемһеҙ полк» тигән хәрәкәт йәйелде. Ике ейәнең Азамат, Салауат, бүләң Буранбай ҙурайтылған фоторәсемеңде тотоп Еңеү көнөндә ҡала демонстрацияһына сығалар. Тағы ла бер бүләң – Урал мәктәптә, бүләсәң Сәлимә балалар баҡсаһында был акцияла ҡатнашалар... Былтыр 9 Майҙа Нальчиктан килгән фотоны күргәс күңел тулышты, ирекһеҙҙән күҙҙән йәш сыҡты. Беҙҙең балҡар дуҫтарыбыҙ үҙ ата-бабалары фотоһы менән бер рәттән һинекен дә күтәреп демонстрацияға баралар... Яҡут дуҫым иһә илдә билдәле режиссер Андрей Борисов Өфөлә үҙенең “Һуңғы һунн” спектакле премьераһын тәҡдим иткәндә, зал тулы тамашасыларға ҡарап, был эшемде мин башҡорт дуҫымдың атаһы Бөйөк Ватан һуғышында илен һаҡлап һәләк булған Сәғиҙуллин Ниғмәтуллаға бағышлайым, тине... Онотмайбыҙ һине,

әтей. Ул хәҙер беҙҙең тормошобоҙҙо сафыраҡ, уйсаныраҡ, мәғәнәлерәк, кеселеклерәк итә… Шул хәтергә туҙан төшөрмәҫкә була Великие Лукиҙан Еңеүҙең 75 йыллығын байрам иткән көндәргә Галина Егоровна Меркулова менән Зинаида Павловна Чернейҙы саҡырҙыҡ. Киленең – Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, вокал кафедраһы мөдире, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәрзәнә Фәтҡулла ҡыҙы (беҙҙең районды Көҙән ауылынан). Ейәндәреңдең хәләл ефеттәре – иҡтисад өлкәһендә төплө белгес, бүлек мөдире Емеш – Наталья Викторовна, сәнғәт институты доценты, сәнғәт фәндәре кандидаты Айһылыу Сынтимер ҡыҙы (беҙҙең Маҡар ауылынан). Бүләсәләрең – композитор, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты Шәүрәкәй, сәнғәт училищеһында рәссамлыҡҡа уҡыған Зәлифәкәй, кескенәбеҙ – мәктәпкә барырға йыйынып йөрөгән Сәлимәкәй – барыһы ла ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы йөрәкһеп көтә. Улар, иншалла, һинең сәләм-фатихаңды ла алып киләсәк бит. Ә йәй көнө үҙебеҙ һинең янына барырға йыйынабыҙ. Буранбай адресыңды беләбит. Һинең икенсе бүләң, туғыҙ йәшлек ҡустыһы Уралды ла алып барғыһы килә… Барасаҡбыҙ, Алла бирһә. Әтей, әтейебеҙ.

**Ниғмәтулла улы Тәлғәт СӘҒИТОВ,**
**Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры.**

## Фекер!

### *Милләт*

●Донъяла йәшәргә һәм башҡалар рәтендә ғүмер һөрөргә теләгән милләт үҙенең үткән көндәрен белһен һәм үҙ тарихы менән дуҫ булһын.

●Милләт мәшһүр әҙәмдәре менән мәртәбәле.

●Милләттең түбәнлеккә төшөүендә һәм юғалыуында төп сәбәп – тупаҫлыҡ.

●Күге аҫтында йәшәгән, һауаларын һулаған, һыуҙарын эскән һәм ниғмәттәрен ашаған ватанығыҙҙы зыялы һөйөгөҙ, бының исемен бөйөк итмәк өсөн тырышығыҙ. Ата-әсәләрегеҙҙе нисек һөйһәгеҙ, милләтегеҙҙе шулай һөйөгөҙ. Милләтегеҙ өсөн хеҙмәт итмәк йәнегеҙгә ғәнимәт тип белегеҙ.

●Беҙ бөтә торған ҡәүем түгел, бәлки, донъяла мәңге торор үә башҡа милләттәр менән берлектә ер йөҙөнән файҙаланыр өсөн килгән милләтбеҙ.

**Ризаитдин Фәхретдин.**



**Сәйет ӘХМӘТ**

# ТОРНАЛАР

Хикәйә

Бында, ҡалҡыулыҡ артында, йылға шауы ишетелмәй. Тик тынлыҡты ни өсөндөр һауанан түгел, ә ҡайҙандыр аҫтан килгән яңғыҙ торна тауышы боҙа. Туҙанлы юлдан ике йөҙ метр тирәһе ситтәрәк ҡыуыш янында ултырған ҡартты күрҙем. Ҡыуыштан ымһындырып ананас ҡауыны еҫе аңҡый. Сарсауымды ҡауын телеме менән ҡандырғым килде, ҡыуышҡа боролдом.

Ҡарт ҡымшанмайынса ултыра, баҡсаға ҡуйылған тоҙаҡтарға осоп килеүсе бытбылдыҡтарҙы өркөтөүҙән ҡурҡалыр, күрәһең. Уларҙың сутылдауына ҡолаҡ һала. Ҡарт янындағы ғәрәп балаҫында оҙон аяҡтарын ҡанаты аҫтына тыҡҡан... торна ята. Ҡош ҡалҡыулыҡ аръяғына китеүсе ҡояштың ҡыҙыл йөҙөнә ваҡыт-ваҡыт ҡарап ала, үҙ телендә нимәлер ҡысҡырып ҡуя. Торна ҡысҡырған һайын, шәмәхә өлпөһө һелкенә, ҡояш нурҙары аҫтында ебәктәй балҡый. Был күренеш мине шул тиклем арбаны, хатта сәйгүнгә саҡ әләгеп йығылманым. Ҡарт башын күтәреп миңә ғәжәпләнеп ҡараны. Көтмәгәндә ҡарауылсыларҙың баҡсала һәр ваҡыт уҫал эттәр тотоуы иҫемә төштө, уларҙың ҡайҙандыр килеп сығып, миңә ташланыуын көтөп, ҡатып ҡалдым. Ҡурҡып һораным:

– Һеҙҙең этегеҙ ҡайҙа?

– Минең этем юҡ, юҡ, – тип яуапланы ҡарт. – Рәхим итеп, үтегеҙ. Эттәр тотмайым – уларҙың торнаны тешләүе ихтимал.

---

*Үзбәк әҙәбиәтенең бәләкәй проза – хикәйә оҫтаһы Сәйет Әхмәт 1920 йылда Ташкент ҡалаһында тыуған. Педагогия институтын тамамлағас, урындағы гәзиттәрҙә хәбәрсе булып эшләй.*

*Сәйет Әхмәт хикәйәләрендә, повестарында һәм “Офоҡ” трилогияһында Фирғәнәлә сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереүселәрҙең тормошон яҡтыртыуға ҙур иғтибар бүлә. Пьесалар яҙа. Мәҫәлән, “Кәләштәр болаһы” комедияһы донъяның 14 илендә ҡуйыла.*

*Үзбәкстан Геройы, Үзбәкстандың халыҡ яҙыусыһы, Үзбәкстандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. 2007 йылда 87-се йәшендә вафат була.*

Торна, сит кешене күргәс, тороп, ҡыуыш артына китте.

Ҡарт одеял түшәне, мине ултырырға саҡырҙы, башын торна киткән яҡҡа бороп, тынысландырып һөйләнде:

– Ҡурҡма, ҡурҡма! – Шунан миңә мөрәжәғәт итте: – Ә һине беҙгә ниндәй елдәр ташланы, улым? Түрә-маҙар түгелһеңдер бит?

Нисек танышырға белмәгәнлектән, ҡаушап, өндәшмәнем, шулай ҙа яуап бирҙем:

–Һеҙҙең ауыл ҡунағы мин, бабай. Поезға ашыға инем, танауыма ҡауын еҫе бәрелгәс, ҡыуышҡа боролдом, ситләтеп үтә алманым. Мин хәҙер һеҙҙең ихтыярҙа: һыйлайһығыҙмы, юҡмы? Әлбиттә, түләйәсәкмен.

Ҡарт ризаһыҙлыҡ белдереп сырайын һытты.

– Баҡсала ҡунаҡтан аҡса алыу – крәҫтиән эше түгел. Беҙҙә ҡауын менән һыйлайҙар, ә һатмайҙар. Һеҙгә килтерергәме әллә үҙегеҙ һайлап алаһығыҙмы? Иң яҡшыһы – үҙегеҙ өҙөп алығыҙ, ул һеҙгә тәмлерәк тойолор. Баҡсаның теге башына барығыҙ – унда ананастар.

Ҡарт түтәлдәргә юл күрһәткәс, мин саҡ эләгеп йығылмаған сәйгүнде күтәрҙе, һыу ҡойғас, ҡоро ботаҡтарҙы тубығында шартлатып һындырҙы ла усаҡ яғырға кереште. Ул миңә ҡысҡырҙы:

– Ысын ҡауын тәмләгегеҙ килһә, иртәнге ысыҡтан ярыҡтар барлыҡҡа килгәнен һайлағыҙ, быңдай ҡауын ҡырҡ йыл элекке сирҙәрҙе лә дауалай.

Баҡса ситенә барып еткәс, һоҡланыуҙан таң ҡалдым: әллә ел тынып ҡалғанға, әллә бындағы һауа ҡауын еҫе менән тулғанға, – башым әйләнде. Бөтә яҡтан да еңелсә сытырлау ишетелде, әйтерһең, тәжрибәле һатыусы туҡыма йырта. Өлгөргән, шәкәр һутына тулышҡан ҡауындар ярыҡтар селтәре менән ҡапланғайны. Аяҡтарым аҫтында тоҙаҡҡа эләккән бытбылдыҡ сырылданы.

Ҡыуышҡа бер ҡулыма – ҡауын, икенсеһенә бытбылдыҡ тотоп урап килдем. Ҡарттың сәйе ҡайнап сыҡҡайны инде. Ҡауынға күҙ һалғас, ул йылмайҙы:

– Ҡала кешеһе икәнегеҙ әллә ҡайҙан күренә, өлгөргән түтәлендә ашамаһаң, баҡсала ҡауын ашаным, тип әйтеп буламы ни?

Дуҫтарса йылмайып, ҡарт ҡунысынан бысаҡ алып, миңә һуҙҙы. Шунан ҡыйыҡ өҫтөнә үк эленгән төйөнсөгөнән икмәк, кипкән өрөк, шәкәр алды ла сәй табыны әҙерләргә кереште.

Ҡауынды телдем, әйтерһең, уға үҙ ғүмеремдә беренсе мәртәбә йомоламын, тотош ашап бөткәнемдә һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ҡарт миңә каса менән ҡаты сәй яһап бирҙе. Бармаҡтарым йәбеште. Ҡарт көлдө.

– Бына беҙҙә ҡауындар ниндәй шәрбәт, – тип һөйләнде ул ҡулдарыма һыу ҡойоп. – Был яңы сорт, ананастар. Күптәр орлоғон алырға хыяллана.

Алыҫта торна торҡолдауы ишетелгәндә ҡояш батҡайны инде. Ҡарт күккә ҡараны, торналар тубы офоҡта үтә күренмәле, утлы шәфәҡ пәрҙәһендә ирееп юғалғансы унан күҙҙәрен алманы. Ҡыуыш артындағы торна борсолдо, осоп китергә йыйынғандай, ҡанаттарын ҡаҡты, уларҙы йәйҙе. Осоусы ҡоштарҙың тауышы әллә ҡасан тынды, ә ҡыуыш артынан ҡанаттарҙың ауыр ҡағылыуы һаман ишетелде.

Ҡарттың йөҙө етдиләнде. Ирендәренән йылмайыу юғалды, ҡарашы тоноҡланды, хатта маңлайҙарына һырҙар өҫтәлде. Ул борсолоп урынынан ҡалҡынды ла торнаны ҡыуышҡа алып килде.

– Их, Хоҙай мәхлүге! Иптәштәреңде һағындыңмы? Улар йылы илдәргә осто. Һин дә улар менән ос. Ос, ос! Һин дә улар һымаҡһың бит.

Торна, шәмәхә өлпөһөн һелкетеп, алыҫҡа, туп артынан тулҡынланып һәм моңһоу ҡараны, туғандарына хәйерле юл теләне шикелле.

– Был торна ҡайҙан килеп сыҡты? – тип һораным. – Бында күптән йәшәйме?

– Иртә яҙҙа улым Андрюшанан телеграмма алдым, – тип яуапланы ҡарт. – Ул алыҫ яҡтарға юлланыуын хәбәр итте, ҡайтыуын көтөп тороуымды үтенде. Ә мин Ленинградҡа йыйынып бөткәйнем инде. Шунда аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек, телеграмма килеп төштө. Ҡулымдағы ҡарбуз төшөп китте, тиҙәрме әле. Бындай хәбәрҙән һуң миңә бер нәмә лә ҡәҙерле булып тойолманы. Улымды ныҡ һағынғайным! Ашағым да, эскем дә килмәне, йоҡом ҡасты. Нисектер шулай бер тапҡыр ойоп киткәнмен дә төш күрҙем: Фазлетдин хәсрәтләнеп, ни өсөн ағайым хат яҙмай, тип һорай. Ә мин унан Шәмсетдиндең һәләк булыуын йәшерәм. Шунан көтмәгәндә, уйламаған ерҙән, Шәмсетдин барлыҡҡа килде, баҡтиһәң, ул үҙенә Фазлетдиндең һәләк булыуын хәбәр итмәгән өсөн миңә үпкәләй икән. Шунда күп тауыштарҙан уянып киттем. Чабандар өйөм эргәһенән һарыҡ көтөүе ҡыуа икән тип торам. Ишек алдына ҡараным, ә унда торналар өйөрөлә, ҡысҡырыша. Ул мәлдә беренсе мәртәбә торналарҙы бик түбәндә күрҙем. Баҫып торам, ғәжәпләнәм, уларҙы тыңлайым. Өйөм өҫтөндә ярты сәғәт буйы өйөрөлдөләр, ҡыҙғаныс торҡолдайҙар, әйтерһең, ыңғырашалар, ә ике торна ҡыйыҡ кәрнизенә бәрелә яҙып йә ҡырҡа түбән төшә, йә күтәрелә, йә яңынан төшә... Һуңынан туп көньяҡҡа осто. Ә иртән өй артынан ошо торнаны тапҡас, ни булғанын аңланым. Торна яраланғайны. Артабан осорға хәле ҡалмаған. Шунан бирле минең менән йәшәй. Ныҡ эйәләште. Өсөнсө көн инде ғазаплана. Осоп барыусы торналарҙы күреү менән үҙенә урын тапмай.

– Ул һаман да оса алмаймы?

– Оса ала. Ҡайһы берҙә ҡайҙалыр оса, ә һуңынан кире әйләнеп ҡайта.

Ҡарт, нәмәгәлер ҡолаҡ һалып, тынып ҡалды.

– Улым, һеҙ поезға һуңға ҡалдығыҙ. Хәҙер өлгөрмәйһегеҙ инде, поезд етеп килә, – тине ул, кәрәсин лампаһын тоҡандырып.

Бер нисә минуттан һуң паровоздың әсе гудогы ишетелде, йыш ултыртылған тирәк рәттәре аша вагондарҙың яҡты тәҙрәләре күренеп ҡалды.

– Мин һеҙгә урын һалам, бында ҡунығыҙ. Иртәгә китерһегеҙ.

Баш аҫтыма һуғылған халат һалғас, ул тоҙаҡтарҙы тикшерергә китте.

Ҡауындарҙың нәҙек һабаҡтарына баҫмаҫ өсөн, түтәлдән-түтәлгә һаҡ ҡына атлап, ҡарт бүҙәнәләрҙе тоҡҡа йыйҙы. Ҡыуыш артында йөрөгәс, мине йоҡлай тип уйлап, ахыры, аяҡ остарына ғына баҫып ҡыуышҡа инде, үҙ мөйөшөндә тауыш-тынһыҙ ултырған торна янына баҫып, уға нимәлер бышылданы. Бәлки, ул торнаға балалары тураһында һөйләгәндер. Тимәк, уның ике улы һәләк булған! Ленинградта өсөнсө улы йәшәй... Ни өсөн уның исеме Андрей?

Ҡулымды һоноп, шырпы менән папиросты һәрмәп таптым. Ҡарт минең яҡҡа боролдо.

– Йоҡлай алмайһығыҙмы?

– Ниңәлер йоҡо килмәй.

Ҡарт өндәшмәй генә лампа янына барып, утты һүндерҙе лә, аяҡтарын бөкләп, яныма ултырҙы. Ай яҡтыһында уның сал һаҡал менән уратып алынған бите асыҡ күренде. Һил. Сиңерткәләрҙең сырылдауы ғына ишетелә.

– Бабай, минең һеҙҙән һорағым килә... Ҡыҙыҡһыныуым өсөн алдан уҡ ғәфү үтенәм.

– Рәхим итеп һорағыҙ.

– Миңә улдарығыҙ һәм Андрей тураһында һөйләгеҙ әле.

Ҡарт ҡалтыранып ҡуйҙы булһа кәрәк, ул одеял алып, иңбашына һалды. Ай көтмәгәндә йәшеренде, ҡараңғыла ҡарттың да йөҙө юғалды.

Ул нимәлер тип яуап бирергә теләне, ләкин уның урынына ауыр һуланы. Былайтып ауыр юғалтыу кисергән кеше генә һулай ала.

Ҡарт маңлайын һөрттө, һаҡалын тотоп ҡараны, тубыҡтарына устары менән әкрен генә һуҡҡас, ниһайәт, телгә килде:

– Эй, улым, әгәр кешелә сабырлыҡ булмаһа, уны әллә ҡасан ҡайғы баҫыр ине. Бына, күрәһең бит, мин һаман да теремен, ә ҡолармын да ҡабат тора алмам, тип уйлай инем. Ике улымды юғалттым. Ике! Һуғыш башланғанда баш балама, Шәмсетдингә, егерме ике, ә кесеһенә, Фазлетдингә, ун туғыҙ йәш ине. Өлкәнен күҙе арҡаһында һуғышҡа алманылар.

– Күҙенә ни булды?

– Улы тыуыу хөрмәтенә үткәргән туйҙа Ғүмәр хажи фейерверк ойошторҙо. Шәмсетдин ул ваҡытта атламай ине әле, мәрхүм ҡатыным уны йоҡларға сәңгелдәккә һалған. Бәлә булырын ҡайҙан беләһең инде! Зарядтарҙың береһе сәңгелдәккә төшөп шартлаған. Малайымдың бите янған, һул күҙе зыянлаған. Ул күҙе һуңынан бөтөнләй күрмәй башланы. Шуға күрә уны хеҙмәт армияһына алдылар. Ә Фазлетдинде армияға саҡырҙылар. Мин уны Байтук станцияһына ҡәҙәр оҙаттым. Ул Ленинградта булды, беҙгә хаттар яҙҙы. Ә Шәмсетдин Подгорьенан яҙҙы. Һеҙҙең Подгорьела булғанығыҙ юҡмы?

Яуабымды көтмәй, ҡарт дауам итте:

– Мин Подгорьела булдым. Һәйкәл ҡуйғанда саҡырҙылар. Унда, Подгорьела, электр станцияһы бар. Немецтар Мәскәү янына барып еткәндә станция заводтарҙы һәм баш ҡала халҡын ток менән тәьмин итә башлаған. Немецтар уны сафтан сығарыу өсөн самолеттарын да, бомбаларын да йәлләмәгән.

Минең Шәмсетдин күмер бушатҡан. Бер мәл ул эшкә китеп барғанда көтмәгәндә тревога иғлан иткәндәр. Күктә немец самолеты күренгән. Бомбаларҙың береһе балалар баҡсаһындағы ҡом өҫтөнә төшкән. Ә эргәләге өйҙә балалар. Шәмсетдин бомбаны ҡулына алған да йылғаға йүгергән. Ләкин күҙе арҡаһында эләгеп йығылған, бомба шартлаған... Һуғыш бөтмәҫ борон уҡ әле уның ҡәберенә барҙым. Балалар йортона улымдың исемен биргәндәр, ишек алдына бронза бюсын ҡуйғандар.

Ҡарттың тауышы ҡалтыранды. Уны тынысландырырға нимәлер әйтергә теләнем.

– Кәрәкмәй, улым, мине тынысландырмағыҙ. Илаһам, еңел булып ҡала.

Һуңынан ул йәнә телгә килде:

– Фазлетдингә ағаһының үлгәнен хәбәр итмәнем. Бер йыл буйы хаты һайын уның адресын һораны. Көтмәгәндә тағы ла ҡара хат алдым, унда кесе улымдың алыш ваҡытында йылғаға батыуын хәбәр иткәйнеләр. Меҫкенемдең хатта ҡәбере лә юҡ. Бына шулай тороп ҡалдым мин...

Йондоҙло күктә, гүйә, бәүелсектәр осто – тағы ла торналарҙың бер тубы күренде. Ҡарт каруандан күҙҙәрен алмай дауам итте:

– Япа-яңғыҙым тороп ҡалдым, әйтерһең дә, бер ваҡытта ла ғаиләм булмаған. Үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәнем, йәнемә урын тапманым, аҡылым еңеләйгән кешеләй йөрөнөм. Аҡ көн ҡара төндәй күренде. Беҙҙең рәйес, аҡыллы ҡатын, мине үҙе менән Андижанға алды. Ул осорҙа Ленинградтан балаларҙы унда күсерәләр ине. Рәйес көтмәгәндә миңә ошо балаларҙы күрһәтте, тәрбиәгә берәй малай алырға өгөтләне. Мин интеккән, сибек кенә Андрюшаны алдым. Аяҡҡа баҫтырҙым. Шунан миңә уны ҡәрҙәше эҙләүе тураһында хәбәр килеп етте. Мин өндәшмәнем, баланы биргем килмәне. Малай, үҫә төшкәс, Ленинградты, атаһын, әсәһен йыш иҫкә төшөрҙө. Йөрәгемә ҡан һауҙы. Түҙмәнем. Үҙем барып, Ленинградта Андрей Карповтың ата-әсәһен эҙләүҙәрен үтендем. Баҡтиһәң, Андрейҙың әсәһе лә, атаһы ла блокадала һәләк булған. Малайҙы әллә ҡасандан бирле апаһы эҙләүе хаҡында хәбәр килде. Гүйә, унда ҡанаттар үҫеп сыҡты, унда осорға әҙер. Йыйындыҡ та киттек. Малайҙы уның берҙән-бер ҡәрҙәшенә үҙ ҡулдарым менән бирҙем. Ә үҙем яңынан етем тороп ҡалдым... Йәнә һағыш... Андрюша унда, Ленинградта уҡыны, өйләнде, улы тыуҙы — улына Сабир тип исем ҡушҡан. Улына минең исемде биргән! Яңыраҡ миндә ҡунаҡ булып киттеләр. Байтук станцияһында һаубуллашҡанда ейәнем ҡосаҡлап үпте лә: “Олатай, мин һинең яныңа йәшәргә киләм!” – тине. Уларҙың вагонына ун оло ананаска һалдым... Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, Ленинградҡа тиклем алып барып еткерә алдылармы икән?

– Әлбиттә, еткергәндәр.

– Андрюшаны апаһына биргәс һәр иртәлә Алланан әжәл ялбарҙым. Хәҙер ейәнемде күргәс, үлгем килмәй, уның туйына ҡәҙәр йәшәгем килә. Оло йәштә булыуым ғына йәл... Йә, хәтирәләргә бирелеү етер, йоҡларға кәрәк.

Ҡарт тынып ҡалды. Оҙаҡ йоҡлай алманым. Уйҙағы ҡарашым алдынан ошо кешенең тормошо үтте.

Торна тауышы ишетелгәндә йоҡомһорай башлағайным инде. Әйтерһең, эргәлә генә ҡанат ҡаҡтылар. Ҡарт урынынан һикереп торҙо, мин дә башымды күтәрҙем.

– Осоп китте! – тине ҡарт үпкәләп һәм әсенеп.

Мин бер нисә сәғәт элек кенә өлпөһөнә һоҡланған торна туп артынан көньяҡҡа осто. Туп, ярым түңәрәк яһап, кирегә, уға ҡаршы килде. Саф боҙолдо. Торналарҙың үҙ-ара торҡолдауы ҡатын-ҡыҙҙарҙың туйҙағы күңелле һөйләшеүенә оҡшағайны.

Сафҡа теҙелгәс, торналар, беҙҙең ҡыуыш өҫтөндә һалмаҡ өйөрөлдө лә, көньяҡҡа таң алды күк йөҙөнә осто.

Ҡарт яғымлы һәм моңһоу әйтеп ҡуйҙы:

– Китте!

Һәр яҙ һайын торналар каруанын күреп, уларҙың зәңгәр күктә осоуына һоҡланғас, колхоз баҡсаһы ситендәге яңғыҙ ҡарт хәтеремә төшә.

Алыҫта торналар торҡолдауын ишетеү менән, һауа ананас ҡауындары еҫенә тулғандай була.

Башындағы нәфис шәмәхә өлпөһөн һелкетеп ҡыуышҡа төшөүсе торнаны яңынан күрергә теләр инем!

**Факил МЫРҘАҠАЕВ тәржемәһе.**

# ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ ҮҘГӘРЕШҺЕҘ ҠАЛА



*Тарих фәндәре кандидаты, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Салауат Ишмөхәмәт улы Хәмиҙуллиндың телевизион тапшырыуҙарын ҡараған саҡта күңелдә шундай уй ныға: тарихи фактҡа хәҙерге көн күҙлегенән төрлөсә баһалар бирергә мөмкин булһа ла, тарихты үҙгәртеп тә, уны мөхәррирләп тә булмай. Тарихи факт ул хәҡиҡәттең үҙе кеүек. "Хатта ки бер генә кеше ышанған осраҡта ла, хәҡиҡәт йәшәйәсәк" тигән бер аҡыл эйәһе. Ҡайһы бер мөтәғалимдар хәҙерге көн талабынан сығып тотош халыҡтарҙың тарихын боҙоп, үҙгәртеп тә маташа, хатта ғилми хеҙмәттәр ҙә яҙа, ғилми дәрәжәләр яҡлай, китаптар ҙа баҫып сығара. Әммә, алда әйткәнебеҙсә, хәҡиҡәтте үҙгәртеү мөмкин түгел. Салауат Хәмиҙуллиндың тапшырыуҙары тарихи фактҡа таянылған хәҡиҡәтте әйтеп биреү менән көслө лә, сикһеҙ ышандырыу көсөнә эйә.*

*Ғалим менән был әңгәмәбеҙ быйыл октябрь айында илебеҙҙә үткәреләсәк халыҡ иҫәбен алыу сараһы, улай ғына ла түгел, тарихи хәҡиҡәт хаҡында.*

***– Салауат Ишмөхәмәт улы, беҙ халыҡ иҫәбен алыу ваҡыты еткәс кенә был үтә лә мөһим сараға әҙерләнә башлайбыҙ, кампанияға ҡушылабыҙ шикелле. Әлбиттә, һин бер нисә йыл һуҙымында ошо йүнәлештә даими һәм эҙмә-эҙлекле эш алып бараһың. Мин бында "Тарихи мөхит" серияһындағы телевизион тапшырыуҙарыңды, "Башҡорт ырыуҙары" серияһындағы китаптарыңды күҙ уңында тотам. Нисек уйлайһың, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары проблемаһы һәр ваҡыт шул рәүешле киҫкен булып ҡалырмы ни?***

– Һуңғы йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының да был йүнәлештәге эшмәкәрлеге әүҙемләшеүен билдәләп үтергә була. Беҙ үткән быуаттың егерменсе йылдарында ебәрелгән хаталарҙың әсе емешен әле килеп татыйбыҙ. Тарихи хаталарҙы төҙәтеү өсөн байтаҡ ваҡыт талап ителәсәк әле. Минеңсә, бар мәсьәлә бында мәғариф системаһында.

***– Күп кенә кешеләр үҙ шәжәрәһен өйрәнгәндә 1795 йылғы ревизия мәғлүмәттәре араһында үҙҙәренең нәҫел ебен таба алмауы хаҡында белдерә. Бының сәбәбе итеп башҡорттарҙың халыҡ иҫәбен алыусыларҙы үҙ биләмәһенә, ғаиләһенә индермәүен килтереп буламы? Әллә бында башҡа төрлө сәбәптәр нигеҙ булып торамы?***

– Беренсенән, 1795 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә башҡорттар фамилиялап бөтөнләй күрһәтелмәгән. Тағы ла унан алдағы ревизия документтарында ундай мәғлүмәттәр юҡ. Башҡорттар исем-шәрифе менән тәүге тапҡыр 1811 йылғы ревизия материалдарында сағылыш таба. Дөрөҫ, башҡорттар иҫәп алыусыларҙы үҙҙәренең йортона индермәгән, икенсенән, батша власы былдай саралар ҙы үткәреүҙән ныҡ ҡурҡҡан. Сөнки 1739 йылғы башҡорт ихтилалы алдынан халыҡтың иҫәбен алыуға бәйле саралар ошондай күтәрелешкә алып килеүсе сәбәптәрҙең береһе була ла инде. Тарихта Ҡараһаҡал яуы тип нарыҡланған ихтилал башҡорттарға штраф аттары һалымы түләүҙән тыш ошо сәбәпкә лә бәйле. 1725 йылда ла башҡорттарҙың иҫәбен алырға маташып ҡарайҙар. Ул саҡта бында сауҙагәрлек мәсьәләләре һылтауы менән Көңгөр бургомистры Юхнев килә. Уның маҡсаты: башҡорттарҙың донъяһына разведка яһау, шымсылыҡ ҡылыу була. Батшаны был халыҡтың ни өсөн туҡтауһыҙ баш күтәреүе, әгәр ҙә атка атланһалар, теләһә ниндәй дошманды ниндәйҙер ҡөҙрәт менән ҡырып һалыуҙары, бының өсөн улар көстө ҡайҙан алыуҙары, яугирҙарының һаны яҡынса күпмерәк булыуы мәсьәләләре борсой. Юхнев, нисек кенә тырышмаһын, башҡорттар тураһында тулы мәғлүмәт ала алмай, сөнки уны күп кенә ырыуҙар биләмәһенә индермәйҙәр. Башҡорттарҙың иҫәбен алыу батша хөкүмәте өсөн халыҡтың ерҙәрен яулауға әҙерлек булараҡ тормошҡа ашырылып, хәрби операциялар үткәреүгә йүнәлтелгән.

Шуға күрә лә беҙ башҡорттарҙа халыҡ иҫәбен алыуға бәйле тәүге тулы мәғлүмәтте 1811 йылғы ревизия материалдарында ғына таба алабыҙ. Был осорҙа инде Башҡортостанда ун йылдан ашыу кантонлыҡ системаһы эшләй, ҡыҫҡаһы, башҡорт йәмғиәте батшалыҡ тарафынан контролгә алына.

***– Нисек уйлайһың, Салауат, ни өсөн беҙҙә үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу сараларында милләт күрһәткесе социаль мәсьәләләр күрһәткестәренә ҡарағанда мөһимерәк булып һанала? Нимә генә тимә, был сара милләтте билдәләүҙән тыш башҡа маҡсаттарҙа ла үткәрелә. Шулай түгелме?***

– Әгәр ҙә мин һәм минең бер нисә быуын ҡартаталарым башҡорт икән, башҡа мәғлүмәттәр ҙә миңә мөһим. Мәҫәлән, 1917 йылғы мәғлүмәттәрҙә атай-олатайҙарымдың ниндәй ҡатлам кешеләре булыуы, уларҙың ере, мөлкәте күпме икәнлеге мине ҡыҙыҡһындыра. Яңыраҡ ҡарт ҡартатайым Сәфиулла Хәмиҙуллиндың ихата карточкаһын өйрәндем. Быға тиклем был тарихи документты бер нисә тапҡыр күрһәм дә, иғтибар итмәгәнмен. Мин ҡартатайымдың ни өсөн өс гектар самаһы ере, ике һыйыры, бер аты, ҡолоно, быҙауҙары ғына булған һуң тип аптырай торғайным. Аҙаҡ иғтибар иттем: баҡтиһәң, уның ҡырҡ күс бал ҡорто иҫәпләнгән, баҡтиһәң, ул умартасылыҡҡа өҫтөнлөк биргән һәм ошо һөнәре менән ғаиләһенең йәшәү сығанағын тәьмин иткән.

Хәҙерге заман халыҡтың иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә килгәндә, Башҡортостанда күп һанлы башҡа милләт вәкилдәре йәшәй, шуның өсөн

дә милләт күрһәткесе традицион рәүештә мөһим һанала. Өҫтәүенә, республиканың көнбайышында урталыҡтағы милли үҙаң күренеше милләт күрһәткесенә ошондай мөнәсәбәтте барлыҡҡа килтерә лә инде. Күп кенә кешеләрҙең үҙҙәренең тамырҙарын белмәүҙәре, белгәндәренең дә бәғзеләре был мәсьәләне мөһим тип һанамауы халыҡ иҫәбен алғанда күп кенә киҫкен проблемалар барлыҡҡа килтерә. Шулай ҙа һуңғы ваҡытта күпселектә үҙ тамырҙарын өйрәнеүгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде. Күптәр шундай һорауға яуап эҙләй: ни өсөн мәктәптә татар тарихын, татар телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеп килеп, хәҙер килеп ата-әсәләренең, бер нисә быуын ҡартаталарының, өләсәләренең паспорттарында, ревизия мәғлүмәттәрендә башҡорт икәнлеге яҙылған?

***– “Беҙҙең ата-олатайҙар аҫаба башҡорттар һымаҡ ер алыр өсөн башҡорт булып яҙылған” тигән һылтанмаға ниндәй аңлатма бирергә була?***

– Улайһа, шундай һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ: революцияға тиклем батша властары татарҙарҙы башҡорт итеп яҙғанмы һуң? Батшаға был нимәгә кәрәк булған һуң? Икенсенән, аҫаба хоҡуҡҡа эйә булған башҡорттар ситтән килеүселәрҙең башҡорт булып яҙылыуына юл ҡуймаған. Сөнки уларҙың башҡорт булып танылыуы уларға күп кенә ерҙәренән үҙ теләге менән баш тартыуын аңлатҡан. Белеүебеҙсә, мәшһүр Бабичтың “Тупраҡ” шиғырында әйтелгәнсә, ер, тупраҡ мәсьәләһе башҡорт өсөн иң ғәзизе һаналған. Шуға күрә был мәсьәлә беҙҙең өсөн һәр ваҡыт мөһим һаналған, кем белә, бәлки ҡасандыр ул, бәлки йөҙ йылдан, үҙенең әһәмиәтен юғалтыр. Һәр бер күренеш ҡасандыр башлана ла, аҙаҡ тамамлана.

***– Революция хаҡындағы бер фильмда ҡыҙыҡлы кадрҙар бар. Крәҫтиәндәр ауылға аҡтар килеп инһә, уларҙың символы төшөрөлгән баш кейемен кейә һала, ҡыҙылдар килһә, уларҙыҡына алмаштыра. Милли үҙаңдың тотороҡло булмауын да ошо күренеш менән сағыштырып булалыр. Нисек уйлайһың, һуңғы һигеҙ йыл халыҡ иҫәбен алыуҙа нисек сағылыш табыр?***

– Һуңғы һигеҙ йылда идаралыҡ органдарынан башҡорттарҙы ситләтеүҙең нисек үткәне бер кемгә лә сер түгел. Ул саҡта хатта рәсми булмаған кимәлдә Вәлидиҙең исемен әйтеү ҙә тыйылды. Милли үҙаң тотороҡһоҙлоғона килгәндә, республиканың төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына етмеш йылдан ашыу икенсе милләт идеологияһы һеңдерелеп, быны ике-өс йылда ғына үҙгәртеү мөмкин түгел. Бының өсөн йылдар талап ителәсәк. Быуындар алмашынып, үҙенең ысын тамырҙарын белгән яңы быуындың килеүе лә мөһим бында. Һәр хәлдә, был хәл ҡотолғоһоҙ буласаҡ. Һүҙ юҡ, бәлки кемдер үҙенең тамырҙарын белергә, бының мөһимлеген аңларға теләмәҫ тә, космополиттар ҙа юҡ түгел, әммә был төбәк башҡорттарының үҙ асылына ҡайтырына ышанысым ҙур. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының этник факты һәр ваҡыт йәшәйәсәк. Ҡайһы бер ғалимдар был төбәктең татар этник факты хаҡында ла яҙалар. Әммә академик фән, Р. Кузеевтың, С. Руденконың, башҡа ғалимдарҙың этнографик хеҙмәттәрен бер ҡайҙа ла ҡуя алмайбыҙ. Яңыраҡ Рәсәй Фәндәр Академияһының этнография һәм этнология институтында Р. Кузеев редакцияһында “Башҡорттар” тигән ҙур китап донъя күрҙе. Был китапта ла төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының кемдәр булыуы тураһында бик төплө итеп яҙылған. Был факт, һәм беҙ унан бер ҡайҙа ла китә алмайбыҙ. Әммә милли үҙаң мәсьәләһенә килгәндә,

әйткәнемсә, етмеш йылдан ашыу был төбәк башҡорттарының икенсе халыҡтың идеологияһы йоғонтоһонда булыуы эҙһеҙ үтмәгән. Бында революцияға тиклем ике халыҡтың да яҙма теле иҫке төрки әлифендә булыуын да өҫтәргә була. Уларҙың тик үҙҙәренә генә хас әҙәби яҙма теле совет дәүерендә генә үҙ аллы төҫ алған. Шул уҡ ваҡытта ике республика сигендә йәшәүсе башҡорттар ни өсөн күрше халыҡтың тел һәм мәҙәниәт йоғонтоһонда ҡалған һуң? Ул саҡтағы республика етәкселегенә бирге килә был һорауҙы.

***– "Тарихи мөхит" серияһындағы һуңғы тапшырыуҙарыңда һин күрше Татарстан Республикаһының көнсығыш төбәгендә көн күргән милләттәштәребеҙ рухи тормошона ла иғтибар бирә башланың. Ундағы ҡорған әңгәмәләреңдә ҡатнашыусылар үҙҙәренең ҡайһы башҡорт ырыуына ҡарауҙарын асыҡтан-асыҡ таныған хәлдә лә, был осраҡта үҙҙәренең башҡорт икәнлеге хаҡында әйтә һалып бармай. Быны нисек аңлатырға мөмкин тип уйлайһың?***

– Башҡортта "Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың" тигән киң мәғәнәгә эйә булған әйтем бар. Һүҙҙе оҙонға һуҙмайынса тик ошоно ғына килтерергә булалыр. Был йәһәттән ҡалаларҙа йәшәүселәр күберәк һүҙ азатлығына эйә, ә ауыл кешеһен анһат түгел. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, үҙ-ара былай ғына әңгәмәләшкәндә туранан-тура үҙҙәренең башҡорт икәнлеген таныусылар күп, әммә видеокамера алдында эске цензор үҙ эшен белә.

***– Тарихты мөхәррирләп булмай, уның өсөн теләк-шарт һөйкәлеше хас түгел. Тарихыбыҙҙың һәр боролошон яҡшы тойған, ентекле өйрәнгән ғалим буларак, үткәнебеҙҙең ҡайһы мәлен үҙгәртеп ебәргәндә, ҡайһы хаталарҙы төҙәткәндә, бөгөн бөтөнләй икенсе шарттарҙа йәшәр инек тип иҫәпләйһең. "Әгәр ҙә..." тигән һүҙ менән башлап ебәрһәк...***

– Ҡайһы бер ғалимдар ниндәйҙер тарихи хаталарыбыҙ хаҡында әйтә, әммә, минеңсә, хаталарыбыҙ булмаған. Нуғай урҙаһы емерелгәс, беҙгә Рус дәүләтенә ҡушылмаҫҡа кәрәк булған, ҡушылмаһаҡ, бөгөн яҡшыраҡ тарихи шарттарҙа йәшәр инек, тип әйтеүселәр ҙә бар. Был тарихи процестарҙы аңлап етмәүҙән килә. Тарихыбыҙҙы ныҡлы өйрәнеп, шундай һығымтаға килдем: атай-олатайҙарыбыҙ бик зирәк аҡылға, бай тарихи тәжрибәгә эйә булған. Улар халҡыбыҙ өсөн һынылышлы осорҙарҙа иң хаҡ юлды һайлай белгән. Рус дәүләтенә үҙҙәренең килешеү шарттары менән ҡушылыу ҙа башҡа төрлө юлдың булмауынан килгән. Был осраҡта башҡорттар ергә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалған. Тик башҡорттарҙа ғына аҫабалыҡ хоҡуғы булған тиеү ҙә дөрөҫ түгел. Ҡайһы бер урыҫтарҙың, шулай уҡ ҡайһы бер себер халыҡтарының да аҫабалыҡ хоҡуғы булған. Әммә башҡорттарҙың былдай хоҡуғынан айырмалы рәүештә ул халыҡтарға ҡаҙна еренә ҡарата аҫабалыҡ хоҡуғы бирелгән. Ә башҡорттар үҙ ерелең аҫабаһы булған. Шуға күрә һуңынан башҡорттар был ерҙәрен һата, ҡуртымға бирә алған. Себер халыҡтарынан казактар менән ҡалмыҡтарҙың быңдай хоҡуҡтары булмаған.

Башҡорттарҙың урыҫ дәүләтенә ҡушылыуы ла бик оҙайлы барған. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары Нуғай урҙаһына, төньяҡ башҡорттары Себер ханлығына ҡараған саҡта был процестың оҙайлы барыуы аңлашыла. Ҡайһы бер ырыу-ҡәбиләләр урыҫ дәүләтенә ҡушылыуҙан баш тартҡан. Ҡыҫҡаһы, был процесс тигеҙ генә, бер үк ваҡытта бармаған. Иң тәүҙә көнбайыш башҡорттары батшалыҡҡа ҡушыла. Диалектик яҡтан был процесс бик оҙайлы һәм ҡатмарлы барған. Былары тышҡы сәбәптәргә бәйле, ә эске

сәбәптәргә килгәндә, башҡорт йәмғиәте иерархияһы булмағанлыҡтан, йәмғиәттең горизонталь структураһы тота килеп бер ҡарарға килергә ҡамасаулаған.

***– Тарихсы, ғалим Булат Аҙнабаев халыҡтың ырыу-ҡәбиләләргә бүленеүе нигеҙендәге ошондай дәүләт ҡоролошон полития тип атай. Тимәк, һин әйткән күренеш был форманың кире һөҙөмтәле булыуы тураһында һөйләй түгелме?***

– Һәр бер дәүләт үҙ нәүбәтендә шулай уҡ политияны тәшкил итә. Ни өсөн тигәндә, дәүләт менән идара итеүсенең ғәҙәттән тыш ҡатмарлы юлбашсылыҡ рәүеше политияны аңлата. Хәҙерге күсмә халыҡтарҙы өйрәнеү фәнендә шундай фекер йәшәй: йәнәһе, күсмә халыҡтар дәүләт төҙөмәй. Йәғни, улар төҙөгән ханлыҡтарҙы бер нисек тә дәүләт ҡоролошо тип атап булмай.

***– Тимәк, һин әйтеп үткән фән менән шөғөлләнеүсе ғалимдар үҙ-үҙҙәренә ҡаршы килә: уларса фекер йөрөтһәк, бер нисә быуат буйына ике ҡитға менән идаралыҡ иткән Һун, Алтын Урҙа, Ғосман, Рәсәй империяларын да беҙ дәүләт тип атай алмайбыҙ булып сыға. Шулай ҙа баяғы һүҙ башына күсеп: “Әгәр ҙә башҡорттар шул саҡта үҙ дәүләтен төҙөгән булһа...” – тигән теләк-шарт һөйкәлешенә кире әйләнеп ҡайтһаҡ...***

– Әгәр ҙә атай-олатайҙарыбыҙ тап шул мәлдә үҙ дәүләтселеген төҙөгән булһа, ул ҡоролош оҙаҡ йәшәй алыр инеме икән? Сөнки башҡорт иленең дүрт тарафы дүрт ханлыҡҡа һәм юлға ҡараған саҡта шундайын ҙур майҙанды тотоу, сит дошмандарҙан һаҡлау өсөн ифрат ҙур көс һәм ғәйрәт талап ителер ине. Икенсе төп сәбәп: асылда демократик принциптарға ҡоролған башҡорт йәмғиәтенең иерархияһы булмауы.

***– Башҡорт ихтилалдары Рәсәйҙә Ислам динен һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итте, тигән фекер ҙә йәшәй. Быға һинең мөнәсәбәтең нисек?***

– Ҡаҙан ханлығы ҡолатылғандан һуң ханлыҡҡа ҡараған мосолмандарҙың күпселеге суҡындырыла. Батша хөкүмәте христианлыҡты ҡабул итеүсе мосолмандарҙы һалымдарҙан, башҡа төрлө түләүҙәрҙән азат иткән, суҡындырыу, асылда, ирекле рәүештә барған. Мариҙарҙың һәм сыуаштарҙың мәҫәлән, бер өлөшө суҡынған, ҡалғандары башҡорттарға килеп һыйынған. Башҡорттар уларҙы припущенник сифатында ҡабул иткән. Ул саҡтағы Башҡортостан Рәсәй уртаһындағы “Ислам утрауы”на әүерелгән. Башҡорттарҙың ураған һайын ихтилалдарға күтәрелеүе батшалыҡҡа бында ла суҡындырыу сәйәсәтен үткәрергә ҡамасаулаған. Кавказдан, Урта Азиянан тыш Ислам дине башҡорт ихтилалдары һөҙөмтәһендә һаҡланып ҡалған. Шуның өсөн дә һуңынан Рәсәй мосолмандары дини идаралығы Өфөлә барлыҡҡа килә. Сөнки ул саҡта Ырымбур губернаһы иң күп мосолман йәшәгән губерна һанала.

***– Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте етәкселеге ҡулға алынғандан һуң Борай башҡорттары үҙҙәренең башҡорт милли кантонын-автономияһын иғлан итә. Ошо ваҡиғаларҙан һуң Өфө Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп иғлан ителеп, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килә. Тап ошо рәүешле тарихи ерлегенән бер аҙға өҙөлөп ҡалған төньяҡ-көнбайыш башҡорттары үҙ республикаһы составына инә. Был ваҡиғаларҙы хәҙерге көн күҙлегенән нисек баһалар инең?***

***Ғөмүмән, республиканың барлыҡҡа килеүендә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ниндәй роль уйнаған?***

– Әйтергә кәрәк, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары Башҡортостан Республикаһы төҙөүҙә хәл иткес роль уйнай. Борай башҡорттары 1918 йылда Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре ҡулға алынғас, ихтилал күтәрә. Улар Борай һәм тағы ла ете башҡорт волосында Борай башҡорт кантонын иғлан итә. Ихтилал менән Борай ауылы аҫаба башҡорто, елдәк ырыуынан Шәрәфи Хәмитов етәкселек итә. Борайҙа һаман да уның йорто һаҡлана, уны Шәрәфи бай йорто тип атайҙар. Ихтилал ике ай һуҙымында властарға ҡаршылыҡ күрһәтә. Артабан 1920 йылда тоҡанған “Ҡара бөркөт” һәнәк ихтилалы республиканың артабанғы яҙмышында хәл иткес роль уйнай. Унда крәҫтиәндәр продразверстка сәйәсәтенә ҡаршы сығыш яһай. Бында тәүге планға иҡтисади мәсьәлә сыға. Ул саҡта Өфө губернаһы РСФСР составына ингән. Күршеләге Башҡортостан властары ирекле иҡтисади сәйәсәт үткәреп, күп йәһәттән алға китеүгә өлгәшә. Йәғни Кесе Башҡортостан территорияһында продразверстка үткәрелмәй, республика етәкселеге партияның ҡарарына ҡаршы барып, халыҡтың һуңғы ризыҡын талаусыларҙы республикаға индермәй. Тарихсы Рөстәм Хажиевтың “Автоном НЭП” тигән китабы бар. Уның яҙыуынса, һуңынан Ленин бөтә РСФСР-ҙа ҡулланған НЭП сәйәсәте иң тәүҙә Кесе Башҡортостанда башлана. Башҡортостандағы был сәйәсәт нимәнән ғибәрәт була һуң? Республикалағы предприятиеларҙың бер өлөшө буржуазия синыфы ҡулында ҡала килә. Большевиктар башбаштаҡлыҡ иткән Ырымбурҙан байтаҡ ҡына фабриканттар, завод етәкселәре Башҡортостанға ҡасып килә һәм хөкүмәт етәкселәре хужаһыҙ ҡалған завод-фабрикаларҙы уларға тапшыра. Ул саҡта барлыҡ Рәсәй буйынса иген һатыу тыйыла. Әгәр ҙә кемдер игенен һатһа, уны атҡандар. Крәҫтиәндәр продразверстка командаһы килһә, игендәрен уларға бушлай бирергә тейеш була. Ә Кесе Башҡортостанда иһә сауҙа рөхсәт ителә. Бөтә илдән алыпһатарҙар, сауҙагәрҙәр тап шул саҡта Башҡортостанға ағыла. Өфө губернаһы крәҫтиәндәре күршеләренең был хәленән көнләшеп, баш күтәрә һәм Кесе Башҡортостанға ҡушылыу талабын ҡуя.

***– Шулай ҙа һәнәк ихтилалы ҡайҙа һәм нисегерәк башланып китә һуң?***

– Һәнәк ихтилалы Миңҙәлә өйәҙенең урыҫтар йәшәгән ауылда башлана. Унда крәҫтиәндәр ҡыҙылармеецты үлтерә. Тораҡ был хәрәкәт совет власына ҡаршы көрәшкә әүерелә. Был хәрәкәтте икенсе һүҙ менән Башҡорт Республикаһына ҡушылыу хәрәкәте тип атарға ла була. Шулай итеп, был хәрәкәт Өфө губернаһында йәшәүсе урыҫтар өсөн иҡтисади, башҡорттар өсөн сәйәси талаптар менән бәйле. Ул саҡта “Башҡорт короле Зәки Вәлиди өсөн!”, “Башҡортостанға ҡушылабыҙ!” тигән лозунгылар күтәрелә. Ҙур ғына ғәскәр төҙөлә, штабтар ойоштороло, уларға кисәге фронтовиктар ҡушыла. Ғәскәр штурм менән Бәләбәйҙе баҫып ала һәм Өфөгә табан йүнәлә. Уларҙы Шишмә станцияһында Зәки Вәлиди көтөп тора тигән хәбәр тарала. Шунан һуң Троцкий Вәлидигә шылтыратып кемдәрҙе яҡларға йыйыныуы хаҡында һораша. Вәлиди уға Башҡорт ғәскәренең бер яугиры ла уларҙы яҡламаясағы хаҡында белдерә.

Ҡыҫҡаһы, был ихтилал Өфө губернаһының үҙ аллы йәшәүгә һәләтһеҙ булыуын дәлилләй. 1897 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Өфө губернаһында йәшәүселәрҙең 40 проценты башҡорттар

булыуы күренә. Өфө губернаһы башҡарма комитеты рәйесе Борис Эльцин үҙҙәрен бер ниһеҙ ҡалған “бонапартиктар” менән сағыштырып, алда көтөләсәк ихтилалдарҙың бөтә донъяны яндырасағы хаҡында белдереү менән сығыш яһай. Вәлидовсылар сәйәси аренанан киткәндән һуң Өфө губернаһында тыуып үҫкән Муллаян Халиков фиҙакәрлек күрһәтә. Ул Өфө губернаһына ҡараған Бәләбәй, Өфө, Бөрө өйәҙҙәрен Башҡортостанға ҡушыуҙы һорап бер-бер артлы совнаркомға һәм РСФСР-ҙың башҡа власть органдарына хаттар яҙа.

Ошолар һөҙөмтәһендә 1922 йылда 160 мең башҡорт йәшәгән Миңзәлә өйәҙенән башҡа Өфө губернаһына ҡараған өйәҙҙәр Башҡортостанға ҡушыла. Татарҙар Миңзәлә өйәҙендә ул мәлдә 120, урыҫтар ҙа шул сама мең кешене тәшкил итә.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары Башҡортостан Республикаһын төҙөүҙә лә, Өфө губернаһын Башҡортостанға ҡушыуҙа ла хәл иткес роль уйнай. Мәшһүр шағирыбыҙ, башҡорт әҙәби телен барлыҡҡа килтереүсе Шәйехзада Бабич, Муллаян Халиков, гәрәй ырыуынан бер туған Илдархан һәм Ғариф Мутиндар (хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районына ҡараған Таҡталасыҡ ауылы) башҡорт хәрәкәтенең башында торалар. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт милли хәрәкәтенең иң башында ҡаңлы ырыуы башҡорттары, Бүздәк өйәҙенең Шланлыкүл ауылынан дворян ҡатламына ҡараған Сыртлановтар тора. Рәсәй Дәүләт Думаһына Өфө губернаһынан һайланған депутат ошо нәҫел вәкиле Шахайдар Сыртланов 1906 йылда законһыҙ юл менән тартып алынған ерҙәрен башҡорттарға ҡайтарыуҙы талап итеп сығыш яһай. Уның улы, билдәле дипломат Ғәлиәскәр Сыртланов әгәр ҙә 1912 йылда һәләк булмаһа, беҙ уны артабанғы йылдарҙа башҡорт милли хәрәкәтенең башында күрер инек. Ул саҡта башҡорттар араһында Рәсәй империяһы властары менән уртаҡ тел таба алырлыҡ бик аҙ кешеләрҙең береһе була Ғәлиәскәр Сыртланов. Ул Петербургта киң билдәле кеше була. Ғәлиәскәр адвокат булып хеҙмәт итә. Әйткәндәй, рус-япон һуғышында Порт-Артурҙы ҡыйралыуға дусар иткән адмирал Рождественскийҙың адвокаты булып сығыш яһай. Ҡаңлы ырыуы башҡорт милли хәрәкәтенә бик күптәрҙе биргән: Шәйехзада Бабич, Муллаян Халиков, Сыртлановтар һ.б.

***– Революцияға тиклем батша армияһында хеҙмәт итеүсе ҡайһы бер татар милләтле кадровый офицерҙар татар милли хәрәкәтенә түгел, ә фәҡәт башҡорт хәрәкәтенә, ғәскәренә ҡушыла. Был хаҡта ни әйтерһең?***

– Улар мәҙәни автономияны маҡсат итеп ҡуйған татар милли хәрәкәтенең перспективаһыҙ булыуын аңлай. Икенсенән, башҡорттар үҙ ғәскәрен төҙөп, ҡулына ҡорал алып үҙаллығы өсөн көрәшкә күтәрелгән берҙән-бер халыҡ һанала. Шуға күрә хәрби тактиканы яҡшы аңлаған офицерҙар көслөгә һыйына ла инде. Әммә башҡорт хәрәкәтенә ҡушылған татар офицерҙары әллә ни күп булмай. Улар араһында төп урынды бер туған Усман һәм Хәлил Тереғоловтар алып тора.

***– Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының үҙ милли асылына ҡайтыуы үҙ сиратында “Без – башкортлар” хәрәкәтен барлыҡҡа килтерҙе. Был хәрәкәттең эшмәкәрлеген нисек баһалайһың?***

– Ыңғай баһалайым. Ни өсөн тигәндә, уның барлыҡҡа килеүендә мин дә ҡатнаштым һәм ҡатнашам. Беҙ төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһында

йөрөйбөҙ, уларға шәжәрәләрен төҙөргә ярҙам итәбеҙ, китаптар сығарабыҙ, тапшырыуҙар күрһәтәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта был төбәк башҡорттары үҙҙәре был хәрәкәткә ҡушылмаһа, былар барыһы ла бер ҡолаҡтан инеп, икенсе ҡолаҡтан сыҡҡан ғәмәлгә тиң булыр ине. Беҙ уларҙың күҙен астыҡ тип тә уйламайбыҙ, сөнки уларҙың күптәре үҙҙәренең башҡорт икәнлеген быға тиклем дә белә ине. Әммә улар эште нимәнән башларға белмәгән булып сыҡты. Сөнки көньяҡ-көнсығыш башҡорттары уларҙы башҡорт итеп танымаған, ҡаҙандар иһә уларҙы башҡорт тип ҡараған. Хәҙерге заманда башҡорттар тел принцибы буйынса бер нисә өлөшкә бүленгән саҡта уларҙы "Һ"ны әйтә алыуы-алмауына ғына ҡарап башҡортлоғон инҡар итеү аҡылһыҙлыҡтың иң юғары сағылышы булыр ине. Фонетик айырмалыҡ ҡына бында күрһәткес була алмай. Беҙгә бында тағы ла һығылмалыраҡ билдәләр табырға кәрәк. "Без – башҡортлар" проекты тап ошо айырмалыҡты хәл итер өсөн барлыҡҡа килде лә инде. Башҡорт милли проекты быға тиклем тик көньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанға ғына ҡағыла килде. Хәҙер беҙ башҡорт милли проектын киңәйтеү хаҡында һүҙ алып барабыҙ. "Без – башкортлар" хәрәкәтенә һәр йәһәттән ярҙам итергә һәм уның киңәйеүенә булышлыҡ итергә бурыслыбыҙ.

Донъяла ике йәки өс әҙәби теле булған халыҡтар бар. Шуға күрә дәүләт телен әлеге әҙәби башҡорт теле рәүешендә ҡалдырып, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының әҙәби теле мәсьәләһе тураһында ла уйланырға кәрәктер. Быға төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалекты нигеҙ була ала. Альберт Исмаилов үҙенең башҡортлоғо хаҡында белдергәс, уға ташландылар. Йәнәһе, уға башҡорттар күпмелер аҡса түләгән. Быға тиклем егерме йылдан ашыу Ҡаҙанда йәшәгән, татарҙарҙы милли асылына ҡайтыуға саҡырып күп һанлы йырҙар ижад иткән кеше тота килеп нисек инде үҙенең башҡортлоғон танып, быға тиклемге уңыштарынан, икенсе һүҙ менән әйткәндә, йәшәү сығанағынан баш тартып, Туймазы ҡалаһына йәшәргә килә алһын? Хәҙерге заманда кемде ниндәй сәбәп ошондай аҙымға барырға мәжбүр итә алһын? Үҙем шәхсән Альберттың был аҙымын ҡаһарманлыҡҡа тиңләйем. Шул уҡ ваҡытта беҙ Ҡаҙанда йәшәүсе, байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәшеп ихтирам яулаған башҡорттарҙы беләбеҙ. Башҡортлоҡтарын улар беҙгә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә. Әммә улар өсөн йәшәү уңайлығы беренсе урында торалыр, күрәһең. Альберт һәр йәһәттән дә ихтирамға лайыҡ.

***– 2020 йылғы халыҡтың иҫәбен алыу сараһы быға тиклемгеләренән ниндәй яҡтары айырылып торасаҡ тип күҙаллайһың?***

– Ҡатмарлыраҡ булыр тием. Электрон юл менән был сарала ҡатнашыу ревизияға индерелгән мәғлүмәттәрҙең объективлығына булышлыҡ итеренә шик юҡ. Һүҙ юҡ, халыҡ иҫәбен алыу сараһының сәйәси буяуҙарынан бер нисек тә азат була алмаясаҡбыҙ. Нисек кенә булмаһын, хәҡиҡәт һәр төрлө сәйәси буяуҙарҙан өҫтөн. Юҡҡа ғына Аллаһы Тәғәләне Хаҡ Тәғәлә тип атап йөрөтмәйҙәр.

***– Әңгәмәң өсөн рәхмәт, Салауат Ишмөхәмәт улы!***

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

# "БЕҘ УРМАН БАШҠОРТО БУЛАМЫҘ"

Ыҡ, Түбәнге Ағиҙел һәм Төньяҡ төркөмдәренә бүленгән төньяҡ-көнбайыш башҡорттарҙың этник йөкмәткеһе ҡатмарлы, тип яҙа "Историческая этнография башкирского народа" (Өфө, 2009 й.) тип аталған китабында академик Раил Кузеев. Ғалим шулай уҡ төньяҡ төркөмгә ҡараған башҡорттарҙың ырыу-ҡәбилә атамаларын да теркәй: уран, ғәйнә йәки тархан (түл-ғәйнә, тур-ғәйнә, бисер-ғәйнә, мул-ғәйнә), балыҡсы, ун (һыу-ун, байҡы, ҡыр-ун), танып (һыу-танып, ҡара-танып), ҡайпан, ҡаҙансы. Кузеевтың иҫәбенсә, XVIII быуатта төньяҡ-көнбайыш башҡорттар сама менән 100 кешегә еткән.

Тарих фәндәре кандидаты Әнүәр Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана и близлежащих регионов" тигән хеҙмәтендә билдәләнеүенсә, Тәтешле районы ауылдары башлыса Ирәкте, өлөшсә Урман-гәрәй һәм Ҡыр-танып олоҫтары ерендә урынлашҡан. Танып ҡәбиләһе нигеҙ һалған ауылдар тиҫтәнән ашыу, тип яҙа "Атайсал" (Өфө, "Китап", 2001 й.) китабы авторҙары – Азат Камалов һәм Фирүзә Камалова. Улар иҫәбенә Асауҙы, Иҫке, Яңы һәм Бүләгәрт Ҡайпан, Мәнәгәз, Иҫке Һикеяҙ, Танып-Шишмә h.б. ауылдар ҡарай. Бәҙрәш, Ҡарман, Ҡомалаҡ ауылдарында бөгөн уран ҡәбиләһе вариҫтары йәшәй. Иҫке һәм Яңы Аҡбулат, Асыуйылға, Борғонбаш, Ҡашҡаҡ, Сәрәштебаш, Шулған, Иҫке һәм Яңы Шәрҙәк ауылдарын гәрәй ҡәбиләһе нигеҙләгән. Кәлтәү һәм Түбәнге Кәлтәү ауылдарында гәрәйҙәр таныптар менән ҡушылған. Гәрәбаш, Үрге һәм Түбәнге Тәтешле ауылдарында башҡорттар менән удмурттар көн итә.

Ирәктеләр – Мейәс яҡтарынан күсеп килгән көнсығыш һәм көнбайыш табындар вариҫтары. Улар был тарафтарға XV – XVI быуаттарҙа хәрби хеҙмәт ҡылыу өсөн ебәрелә һәм таҙлар ҡәбиләһен ҡыҫырыҡлап, Ҡаҙан ханлығы сигенә тиклем ерҙәрҙе биләй. Раил Кузеев фекеренсә, ти автор, "ирәкте" – ҡәлғәлә хеҙмәт итеүсе. " Ирәкте башҡорттары нигеҙ һалған ауылдар ике тиҫтә: Аҡсәйет, Зиремзи, Илмәт, Йосоп, Иҫке һәм Яңы Күрҙем, Үрге һәм Түбәнге Ҡаҙансы, Үрге, Түбәнге һәм Яңы Ҡоҙаш, Мәмәтәй, Иҫке һәм Яңы Соҡор, Һәүәләй h.б.

"Будум йылғаһы элек-электән тулыһыса Таҙлар олоҫо ере һаналған, ти Бәҙрәш ауылы кешеһе Рауил Исламшин "Йәшәүгә хоҡуҡ" (Өфө, 2009) тип аталған йыйынтыҡта. Ә ирәкте ырыуының был урындарҙа борон-борондан булған бер ауылы ла теркәлмәгән". Автор шулай уҡ Үрге Таныпта элек башҡорттар нигеҙ һалған ауылдарҙың күп булыуы хаҡында ла әйтеп үтә. Ә бына 1795 йылғы (V рәүиз) иҫәптә, ти ул, ни бары Мотабаш һәм Кәлтәү ауылдары ғына телгә алына. Ҡалғандары ҡайҙа булған һуң? Автор был

һорауына яуапты тарихсы Н.В. Устюговтың “Башкирское восстание 1737 – 1739 годов” тигән китабында таба. Унда 1737 йылдың көҙөндә ошо төбәктәге 7 башҡорт ауылының язалау отрядтары тарафынан ут һалып юҡҡа сығарылыуы хаҡында хәбәр ителә.

Уса даруғаһының Ирәкте олоҫона Һәүәләй, Яңғыҙ Нарат, Иҫке һәм Яңы Соҡор, Аҡсәйет, Мәмәтәй, Зиремзи, Үрге һәм Түбәнге Ҡоҙаш, Илмәт ауылдары халҡы ҡараған. Архив документтарында Һәүәләй ауылы 1718, 1729 йылдарҙа ғына телгә алына. Уға нигеҙ һалыусы аҫаба башҡорт Һәүәләй тураһында мәғлүмәт юҡ. 1747 йылда Рәмғол Һәүәләевтең титуляр кәңәшсе Д.Л. Реутовҡа ер һатыуы тураһында ҡағыҙ һаҡланған.

1795 йылда Һәүәләй ауылында 23 ир һәм 24 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. 1816 йылда 8 хужалыҡта аҫаба башҡорттар донъя көтә. 1850 йылда Иҫке һәм Яңы Соҡор, Мәмәтәй, Аҡсәйет, Үрге һәм Түбәнге Ҡоҙаш ауылдарынан күсенеп килгән 11 ғаилә иҫәбенә ауыл 85 кешегә арта. 1870 йылғы иҫәп алыуҙа Һәүәләйҙә 82 хужалыҡта 455 кеше теркәлгән. Бөрө кантонының Ҡыҙыл Яр олоҫона ҡараған ауылда 1920 йылда 496 кеше иҫәпкә алына.

Яңғыҙ Нарат (Хәмит) ауылына 1783, 1795 йылдарҙа Иҫке Соҡор ауылынан күсенеүселәр нигеҙ һала. Зөлҡәрнәй Сәлимгәрәев 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, көмөш миҙал менән бүләкләнә. 1816 йылғы иҫәптә Яңғыҙ Наратта 47 ир енесе 18 йортта донъя көткән. VIII рәүиз мәғлүмәттәренә ярашлы, ауылда 28 хужалыҡ булып, уларҙа 145 башҡорт теркәлгән. Мосолмандар мәсеткә йөрөй, мәсет янында мәктәп тә эшләй. 1920 йылғы иҫәптә Яңғыҙ Нарат ауылында 744 башҡорт 146 хужалыҡ булып донъя көтә.

Ирәкте башҡорттарының төп төйәге – Иҫке Соҡор ауылында 1795 йылда 165 башҡорт иҫәпкә алына. 1859 йылда ауылда 325 кеше көн итеүе билдәле. 1920 йылғы иҫәптә иһә Иҫке Соҡорҙа 598 кеше теркәлә. 1735 – 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында ирәктеләр ҙә әүҙем ҡатнаша. Мортаза Хәлилов 150 кешелек төркөмгә етәкселек итә. Ә бына олоҫ старшинаһы Шәриф Кейеков батша хөкүмәтенә тоғро хеҙмәт ҡылып, яза отрядтарына етәкселек итә һәм Екатерина II тарафынан алтын миҙал менән бүләкләнә.

Иҫке Соҡор – “Беҙ урман башҡорто буламыҙ” тигән юлдарҙың авторы, XIX быуаттың икенсе яртыһында йәшәгән шағир-мәғрифәтсе Ғәли Соҡорой тыуған ауыл. Уның ысын исеме – Мөхәмәтғәли Кейеков, йәғни Шәриф Кейековтың бүләре. Ул Стәрлебаш мәҙрәсәһендә белем ала, дәрес биреп тә йөрөй. Биш йыйынтыҡ авторы. 1872 йылда ғәрәп илдәренә сәйәхәт ҡылып, шул тәьҫораттар нигеҙендә “Нәсим-әс-Саба” исемле очерк яҙа. Ҡаратабын ырыуының шәжәрәһен төҙөй.

Аҡсәйет ауылына Майҡы бей нәҫеленән булған Ҡыржау нигеҙ һалған, тигән риүәйәт бар, тип яҙалар урындағы мәғлүмәттәрҙә. 1811 йылда Аҡсәйеттә 123 башҡорт иҫәпкә инә. 1859 йылда башҡорттарҙан 136 ир һәм 147 ҡатын-ҡыҙ енесе, 47 типтәр теркәлә. 1843 йылда ауылдан 8 ғаилә күсенеп, Сорғолдоға нигеҙ һала. 1920 йылда Аҡсәйеттә милләтен атамайынса ғына 1454 кеше теркәлә.

1762 йылғы сығанаҡтарҙа Мәмәтәй – Уса даруғаһына ҡараған ауылдар рәтендә. 1843 йылда бында 62 аҫаба һәм 23 типтәр хужалыҡ итә. Суяғушты йылғаһын һыулаған Илмәт ауылында 1816 йылғы иҫәп 85 аҫабаны теркәгән. 1850 йылда уҙғарылған IX рәүиз 37 йортта көн иткән 141 ир енесен һәм 154

ҡатын-ҡыҙҙы иҫәпкә алған. Шул уҡ йылда 5 ғаилә Сорғолдо ауылына күсенә. 1920 йылда Илмәт ауылында 113 хужалыҡта 365 башҡорт донъя көтөүе билдәле.

1738 йылғы сығанаҡта Ҡоҙаш ауылы берәү, 1795 йылғы иҫәптә ике: Үрге һәм Түбәнге Ҡоҙаш күренә. Тәүгеһендә 148, икенсеһендә 154 кеше йәшәй. Барыһы ла аҫаба хоҡуғында ер биләй. 1920 йылда уҙғарылған иҫәптә ауылдар ныҡ ҙурайған: Үрге Ҡоҙашта көн итеүселәр – 1041, Түбәнгеһендә – 910 кеше.

Ауылдар халҡының малсылыҡ менән ныҡлап шөғөлләнеүе лә күренә. 1842 йылда, мәҫәлән, һәр йән иҫәбенә икешәр йылҡы һәм һыйыр малы, өсәр һарыҡ һәм кәзә аҫрағандар. Умартасылыҡ менән көн итеүселәр ҙә байтаҡ булған.

Ҡыр-Танып олоҫоноң Ҡайпан һәм Ҡаҙансы түбәләренән булған Иҫке Ҡайпан, Бүләгәрт-Ҡайпан, Яңы Ҡайпан, Кәлтәү ауылдары халҡы 10-сы башҡорт кантонының 18-се йортона ҡараған. 1758 йылғы сығанаҡта ике Ҡайпан ауылы иҫкә алына, 1795 йылда иһә – өс Ҡайпан. Будум йылғаһын һыулаған Иҫке Ҡайпан төп ауыл булып, унда 1795 йылғы иҫәптә 38 йортта типтәрҙәр ҙә күренә. 1834 йылда ауылда 113 башҡорт иҫәпкә алына, 1859 йылғы сығанаҡта хужалыҡтар иҫәбе 60-ҡа етеп, уларҙа 346 кеше донъя көтә.

1870 йылғы рәсми сығанаҡтарҙа Иҫке Ҡайпан ауылында бер мишәр ҙә көн итмәүенә ҡарамаҫтан, ул “мишәр” ауылы булып теркәлә. 1920 йылғы советтар иҫәбе был “хата”ны төҙәтә, Иҫке Ҡайпан – башҡорттар төйәге. Ошо ауылдан Аладин (моғайын, Ғәләүетдиндер) Биктуғанов Пугачев хәрәкәтендә 400 – 1000 кешелек баш күтәреүселәр атаманы булып йөрөгән.

Бүләгәрт-Ҡайпан һәм Яңы Ҡайпан да – аҫабалар ауылы. 1972 йылда ошо ауылда йәшәүсе 89 йәшлек Маһирҙан Шаһиевтан яҙып алынған мәғлүмәткә ярашлы, “бүләгәрт”тең тарихы бар. “Силәбе яҡтан Ҡайпуш тигән кеше килгән, – тип һөйләй ауыл аҡһаҡалы. – Тауҙа ҡарағай урманы булған. Урман халыҡҡа бүләк итеп бирелгән. Тау артына күсеп ултырғас, Бүләк арты Ҡайпан тип йөрөткәндәр”.

V рәүиздә Бүл-Ҡайпан ауылында – 147, Яңы Ҡайпанда 75 аҫаба теркәлә. 1870 йылда Яңы Ҡайпанда ғаиләләрҙең бер өлөшө Кесе Солод ауылына күсенеүе сәбәпле, халыҡ иҫәбе ярайһы кәмегән.

Ҡайпан түбәһенә ҡараған Кәлтәү ауылы шул исемдәге йылға буйында урынлашҡан. Үрҙә телгә алынған Рауил Исламшин, 90-сы йылдар аҙағында булһа кәрәк, ошо ауылда йәшәгән Әхнәф Мөхәмәтғәлиев менән осрашып, Кәлтәүгә башлап ултырыусыларҙың Иҫке Ҡайпан ауылы кешеләре Иҙрис менән Кәнжәй булыуын асыҡлай. Иҙрис Пугачев яуында ҡатнашҡан өсөн ауылдан һөрөлә һәм ҡабат әйләнеп ҡайтмай.

1811 йылғы сығанаҡтарҙа Кәлтәүҙә 62 ир заты теркәлһә, 1834 йылда улар – 185, 1870 йылда – 287 һәм 1920 йылда барлығы 766 башҡорт иҫәпкә алына. 1870 йылғы мәғлүмәттән күренеүенсә, Кәлтәү ауылы хужалыҡтарында йән башына икешәр йылҡы малы, өсәр һыйыр, икешәр-өсәр һарыҡ һәм кәзә тура килгән. Ауыл халҡының өс тирмәндән файҙаланыуы игенселек менән етди шөғөлләнеүҙәре хаҡында һөйләй.

Элек Шишмә тип аталып, һуңынан Шарлаҡ-Шишмә булып киткән ауылға

XIX быуат урталарында Кәлтәүҙән бүленеп сыҡҡан ғаиләләр нигеҙ һала. 1859 йылғы рәсми сығанаҡтарға ҡарағанда, ауылда 80 кеше көн итеп, 1870 йылда халыҡ иҫәбе 97-гә еткән. 1920 йылғы иҫәп иһә Иҫке Шарлаҡта – 300, Яңы Шарлаҡта 133 башҡортто теркәй.

Урман-Гәрәй олоҫона Шулған, Ҡашҡаҡ һәм Аҡбулат ауылдары ингән. Варзы йылғаһын һыулаған Аҡбулатта 1795 йылғы иҫәптә 30 аҫаба күренә. 1870 йылда ошонда уҡ типтәрҙәр ҙә килеп урынлаша. 1816 йылғы иҫәптә Аҡбулатта 80 башҡорт һәм 20 типтәр 16 хужалыҡ алып барған. 1870 йылда ауылда 389 аҫаба һәм 45 типтәр теркәлә. Ауыл атамаһы Апас Аҡбулатов исеменән алынған. Ул батша Петр Алексеевичтан Вәрәш һәм Ҡошас йылғалары буйындағы урманға хужа булыуы тураһында таныҡлыҡ алыуға өлгәшә. XX быуат башында типтәрҙәр Аҡбулаттан башҡа сыға һәм Яңы Аҡбулат ауылына нигеҙ һала.

Ялан Гәрәй һәм Юрмиязбаш йылғалары буйын төйәк иткән Шулған ауылында 1795 йылғы иҫәп 86 аҫабаны теркәй. 1818 йылда 91 башҡорт 25 хужалыҡҡа бүленеп йәшәгән. 1834 йылда үткән VIII рәүиздә Шулған 53 йорттан тороп, уларҙа 291 башҡорт донъя көтә. Артабан ауыл тағы ла ҙурайып, 1920 йылғы иҫәптә унда 253 хужалыҡта 1278 башҡорт көн итеүе күренә.

Мейәшяҙы (Варьяз) йылғаһын һыулаған Ҡашҡаҡ ауылында 1795 йылғы иҫәп 136 аҫабаны теркәй. 1850 йылда йорттар һаны 60-ҡа етеп, уларҙа 370 кеше йәшәгән. 1870 йылда иһә 570 аҫаба 92 хужалыҡта донъя көткән. 1920 йылғы иҫәптә Ҡашҡаҡта 219 өй булып, уларҙа 1119 башҡорт көн итә. 1849 йылда Ҡашҡаҡ, Сәлих, Йөгәмәш, Ҡыҙыл Яр ауылдары кешеләре аҫаба ерҙәрен һаҡлау маҡсатында Асыулы Йылға ауылына нигеҙ һала. 1870 йылда яңы ауылда – 106, 1920 йылда иһә 62 хужалыҡта 302 башҡорт теркәлә.

Архивта һаҡланған документтарға ҡарағанда, 1859 йылда барлыҡҡа килгән Беләш ауылын Танып ырыуының Иҫке Ҡайпан, Бүләгәрт-Ҡайпан, Кәлтәү, Салдау һәм Шәрҙәк ауылдары кешеләре нигеҙләй, ти Рауил Исламшин. 1870 йылда Беләштә – 239, 1920 йылда 632 башҡорт иҫәпкә алына. Иҫке Күрҙем ауылына нигеҙ һалыныу тарихы билдәһеҙ, ти Әнүәр Әсфәндиәров аталған хеҙмәтендә. 1920 йылда бында 641 башҡорт донъя көткән.

Бәҙрәш, Асауҙы, Сәүкияз, Яңы Күрҙем, Сәрәштебаш, Юрмиязбаш, Ҡытҡы Йылға, Йосоп, Биз, Үрге Салаевка һ.б. бер нисә ауыл 1920 йылғы иҫәптә башлап телгә алына. 1926 йылда уҙғарылған иҫәптән һуң Тәтешле ерендә Әрибаш, Артауыл, Еләктау, Көрәш, Мәнәгәз, Яңы Троицк, Һабансы, Фәнгә ауылдарына нигеҙ һалына.

Башҡортостандың көнбайыш төбәгенән айырмалы, Тәтешле районы ерҙәренә күскенселәр ашҡынып тормаған, күрәһең, уларҙы был тарафтарҙа игенселек менән шөғөлләнеү өсөн уңайлы уңдырышлы тупраҡ булмауы тыйып тотҡан, тигән фараз бар. Күпселеген аҫаба башҡорттар тәшкил иткән Бүләгәрт-Ҡайпан, Үрге Ҡоҙаш, Иҫке Күрҙем ауылдарына ғына бик аҙ мишәр, типтәр һәм татар килеп ултырған.

“Атайсал” авторҙары башҡорттарҙа киң таралған нәҫел (ара) атамалары тураһында мәғлүмәттәр ҙә килтерә. Мәҫәлән, Гәрәбаш ауылында йәшәүселәр бер-береһен тауыш, шаҙырбай; Кәлтәүҙә – таулы, ҡара тәкә, сүмес, яусыбай, маръямбай, нуғай; Ҡашҡаҡта – ҡушыҡ, гәрәй, даяш; Илмәттә – бәшир,

ҡаратабын; Үрге Ҡоҙашта – дәйүән, ҡаҙанбай; Иҫке Ҡайпанда – салдау, шәрҙәк, нуғай, кәлтәү, сирмеш һ.б. араларына бүлеп йөрөткән.

1979 йылғы иҫәп буйынса Тәтешле районында йәшәгән 30,1 мең кешенең 20,2 меңе, йәғни 67,3 проценты, үҙен "башҡорт" тип атаған. Удмурт халҡы районды 21,6, татарҙар – 6,9, урыҫтар – 2,3, мариҙар 1,5 процент тәшкил иткән. Ә бына 1989 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыуҙа районда төп халыҡ ни бары 13,9 мең кеше теркәлә, йәғни 10 йыл эсендә 6,3 меңгә кәмей. Уның ҡарауы, татарҙар өс тапҡырға артып, 5,4 меңгә етә.

Ирәкте башҡорттары төйәге Аҡсәйет, Илмәт, Түбәнге Ҡоҙаш, Зиримзибаш, Мәмәтәй, Иҫке Ҡайпан, Ҡашҡаҡ, Яңғыҙ Нарат һ.б. башҡорттар менән татарҙар көн иткән ҡатнаш ауылдар булараҡ теркәлә. Ғөмүмән, совет власы йылдарында уҙғарылған халыҡ, айырыуса милләт иҫәбен алыуҙар шик уята, сөнки, беренсенән, халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таныһа ла, большевиктар төрлө объектив сәбәптәр арҡаһында уны ғәмәлгә ашырыуҙан йыраҡ торған. Икенсенән, милләтте һәр кем ирекле һайлай, тигән яһалма лозунг аҫтында эш иткән КПСС, билдәле, был өлкәлә тотороҡло сәйәсәт алып барырға һәләтһеҙ булған. Ошо хәл Тәтешле районы миҫалында ла сағылыш тапҡан.

V рәүиздә аҫабалар төйәге Аҡбулат ауылына 46 типтәр килеп ултыра. 1917 йылғы сығанаҡтар унда биш татарҙы иҫәпкә ала. 1920, 1959, 1979 йылдарҙағы иҫәптәрҙә башҡорт ауылы Аҡбулат 1989 йылда башҡорт һәм татар ауылы булып китә. Ошондай ҡатнаш ауылдар Тәтешле ерендә ике тиҫтәгә еткерелә. Совет власы йылдарында нигеҙләнгән башҡорт ауылдары Ташкент һәм Юрмиязбаш татар ауылына әүерелә. Район үҙәге Үрге Тәтешле удмурт типтәрҙәре тарафынан нигеҙләнеүгә һәм унда әле лә удмурттарҙың байтаҡ йәшәүенә ҡарамаҫтан, башҡорт һәм татарҙар ғына йәшәгән ауыл булып күренә.

## *Һәр икенсе – аҫаба тоҡомонан*

13 мартта 1-се мәктәптә Шәжәрә байрамы булып үтте, тип хәбәр итә "Яңавыл таңнары" гәзите Яңауыл ҡалаһы уҡыусылары ҡатнашлығында ойошторолған сара тураһында. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлфиә Фаршатова әҙерләгән был үҙенсәлекле байрамда Яңауыл районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рафаил Яхин һәм Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте рәйесе Гөлнара Вәлиева ла ҡатнашты. 5-се класс уҡыусыһы Раил Гәрәев байрамда ҡатнашыусыларҙы нәҫеленең шәжәрәһе менән таныштырҙы. Уның ете быуын ата-бабалары Һандуғас ауылында көн иткән.

Яңауыл районы һәм ҡалаһының ваҡытлы матбуғаты ошондай саралар тураһында хәбәрҙәрҙе уҡыусыһына даими еткереп тора. 2019 йылда донъя күргән хәбәрҙәр араһында декабрь баштарында уҙған "Башҡорт теле көндәре", май айында Яңауыл ҡалаһында ойошторолған башҡорт теленән диктант яҙыуҙа 800-ләп кешенең ҡатнашыуы, милли тамырҙарҙы хәтерҙә һаҡлауға бәйле Шәжәрә байрамдарының балалар баҡсаларында ла ойошторолоуы хаҡында "Яңавыл таңнары" биттәрендә ваҡытында баҫыла килә.

Яңауыл ҡалаһы һәм районы – элек-электән төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда төп халыҡ вәкилдәре иң күп көн иткән төбәктәрҙән. Мәҫәлән, 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы,

ҡала менән районда 48 меңдән ашыу кеше теркәлһә, шуларҙың 20,8 меңе – башҡорт. Урыҫтар – 5,6 мең, татарҙар – 10,9 мең кеше.

Был биләмәләр элек Уран һәм Урман-Гәрәй олоҫтарына ҡараған, тип яҙа тарих фәндәре кандидаты Әнүәр Әсфәндиәров үрҙә телгә алынған хеҙмәтендә. 1866 йылда үҙәге Ямаҙы ауылында урынлашҡан Яңауыл территориаль олоҫо ойоштороло, шулай уҡ әлеге район ауылдарының бер өлөшө беркетелгән Ҡыҙыл Яр олоҫо ла була. XIX быуат башындағы генераль ыҙанлау Уран олоҫо аҫабаларының 76,4 мең дисәтинә ер биләүен асыҡлай. Был биләмәләрҙең 13,4 мең дисәтинәһе – һөрөнтө ер, 4,7 меңе сабынлыҡ булған.

1816 йылғы (VII рәүиз) йән иҫәбе уран аҫабаларынан 1931 кешене теркәй. Ебәрелмештәр (яһаҡсы татар, сыуаш, урыҫ һәм типтәр) барлығы – 2336 йән. Мәскәү батшалығына ҡушылғандан һуң был яҡтарға башҡа халыҡтар күпләп күсенә, тип дауам итә Әсфәндиәров. 1688 йылда Уран олоҫо башҡорттарынан Аҡкөсөк Аҡтуғанов һәм Иштирәк Истәков яҙған прошениела уларҙың аҫаба ерҙәрендә 40 ауыл татар, сирмеш (мари) һәм вотяк (удмурт) ултырыуы хәбәр ителә. Аҫабалар мари һәм типтәр ауылдарының ҡайһы бер исемдәрен дә атай: Әмзебаш, Кушни, Алдырғош, Әлекәй, Берҙәш, Теләш, Албарис һ.б.

Ошо уҡ документта олоҫ старостаһы, Биктуғанов менән Истәковтың олатаһы Тулыбай ҙа телгә алына. Уран ҡәбиләһе башҡорто Айсыуаҡтың саңғыла Мәскәүгә барып, ер биләүгә хоҡуҡ биргән туҙ грамота алып ҡайтыуы тураһында ла мәғлүмәт бар. Үҙ сиратында Уран олоҫо Әмзе, Тимбай, Тарағол, Мерҙәш, Избаҡты, Янбарис, Сапай, Манғул, Ҡотламыш һ.б. түбәләренә бүлеп йөрөтөлгән.

XVIII быуат башында нигеҙләнгән Ҡарман – уран аҫабалары ауылы. 1704 – 1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында ҡармандар ҙа әүҙем ҡатнаша. 1849 йылда был ауылдан бер нисә ғаилә күсенеп, Ямаҙы йылғаһы буйында Аҡтау ауылына нигеҙ һала, ул һуңынан Ҡарман-Аҡтау тип атала башлай. Был башланғысҡа нигеҙ һалыусы Әбделғәли Ҡарманов була. 1859 йылда Ҡарман ауылында 77 ир һәм 58 ҡатын-ҡыҙ 77 хужалыҡта донъя көткән. 1920 йылда бында 393 кеше иҫәпкә инә. Ҡарман кешеләре Беүә йылғаһы буйында Шишмә ауылына ла нигеҙ һала. Был 1834 йылғы VIII рәүизгә тиклем була. 1850 йылғы иҫәптә Шишмәлә 22 йортта 98 кеше көн итеүе билдәле. 1920 йылғы рәсми сығанаҡтарҙа ауыл Таш-Тау булып теркәлә.

1795 йылғы иҫәптә Ҡарман ауылында 566 аҫаба донъя көтһә, 1859 йылда бында 1186 кеше теркәлгән. 1917 йылғы иҫәп 2105 башҡорт менән дүрт урыҫты ла күрһәтә. 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу Ҡарман ауылында 1127 кеше көн итеүен асыҡлай. 1959 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре 417 башҡорт йәшәгән Ҡарман-Аҡтау ауылында 2002 йылда ни бары 96 башҡортто күрһәтә.

XIX быуат аҙағы – XX быуат башында барлыҡҡа килгән Шәңгәкүл ауылына ла башлап Ҡарман кешеләре ултыра. 1920 йылғы иҫәптә унда 55 хужалыҡта 165 кеше йәшәгән. Әмзе йылғаһын һыулаған Ҡом (Сосновка, Сосново, Әмзе-Тосҡом) ауылында 1795 йылда 35 йортта 115 кеше иҫәпкә инә. 1816 йылда хужалыҡтар иҫәбе 62-гә етеп, уларҙа 200 ир һәм 165 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. 1811 йылда Ҡом ауылына яһаҡсы татарҙар ҙа килеп ултыра.

1847 йылда ауылдан 7 ғаилә Ваяҙы ауылына күсеп китә. Яңы нигеҙләнгән

был ауылға шулай уҡ Ҡарман, Исмәмәт, Көйөк, Үрҙәк, Ҡыҙыл Яр ауылдарынан да килеп ултыралар. 1859 йылда Ваяҙы ауылында 115 башҡорт 17 хужалыҡта донъя алып бара. 1920 йылғы иҫәптә милләтен күрһәтмәйенсә генә 620 кеше теркәлә. 1959 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре Ҡом ауылында – 873, ә 1989 йылда – 356, 2002 йылда 268 башҡортто теркәй.

Шул исемдәге йылғаны һыулаған Бәҙрәш тә, Тартар, Ҡыҙыл Яр, Янбарис, Киҫәк Ҡайын, Кесеҡор, Көйөк ауылдары кеүек, 10-сы башҡорт кантонының 13-сө йортона ҡараған. XVIII быуат аҙағында Бәҙрәштә 228 кеше йәшәһә, 1816 йылда – 334, 1859 йылда иһә 111 хужалыҡта 515 башҡорт иҫәпкә алына. 1920 йылда йорттар иҫәбе 158-гә етеп, уларҙа 887 кеше көн иткән. 1842 йылғы мәғлүмәттәргә ярашлы, Бәҙрәш ауылында йән башына 3,2 йылҡы, 3,3 – һыйыр малы, 2,4 һарыҡ һәм 3,1 кәзә аҫрағандар. XIX быуат башында мәсет, уның янында мәктәп була.

Совет власы йылдарында алынған иҫәптәрҙә Бәҙрәштә халыҡ иҫәбе аҡрынлап кәмеүгә бара: 1959 йылда бында 340 кеше йәшәгән булһа, 1989 йылда – 27, 2002 йылда иһә 14 кеше генә тороп ҡалған.

Киҫәк Ҡайын 1795 йылда 26 хужалыҡтан тороп, уларҙа 141 башҡорт донъя көтә. Артабан ауыл аҡрынлап ҙурая: 1920 йылда 620 башҡорт төйәк иткән 128 йортлоҡ булһа, 2002 йылда 522 кеше йәшәгән ауыл. Бында элек-электән игенселек һәм малсылыҡ менән донъя көтәләр. 1842 йылда, мәҫәлән, 960 бот ужым арышы, 1184 бот яҙғы иген сәскәндәр, тирмән эшләгән. 40 хужалыҡты үҙ эсенә алған Киҫәк Ҡайын ауылында 126 йылҡы, 140 һыйыр малы, 89 кәзә аҫрағандар. Мосолмандар йәшәгән ауыл атрибуты – мәсет һәм уның эргәһендә мәктәп тә эшләгән.

Беүә йылғаһы буйын төйәк иткән Ҡыҙыл Яр – Яңауылдан 15 саҡрымда. Ул шул уҡ исемдәге олоҫ үҙәге лә. Ошо ауылдан Йөҙәй Раҡаев һәм Рәсүл Аббасов 1780 йылда биләмәләрен ебәрелмештәргә ҡуртымға биргән. 1795 йылда Ҡыҙыл Яр ауылында 100 аҫаба 15 хужалыҡ алып барған. 1834 йылда ауылда 170 башҡорт теркәлә. 1917 йылда үткән иҫәптә иһә 844 башҡорт менән бергә 109 урыҫ һәм 16 татар ҙа күренә. 1920 йылда 946 башҡорт теркәлгән Ҡыҙыл Ярҙа 1959 йылда 325 кеше иҫәпкә алына һәм 2002 йылда 183-кә тиклем кәмей.

Иткенә – элек-электән ҙур ауылдар иҫәбендә. XVIII быуат аҙағында бында 229 башҡорт иҫәпкә инһә, 1859 йылда иһә ауыл халҡы 717 кешегә етә. 1917 һәм 1920 йылдарҙа Иткенә – 1551 һәм 1308 кеше төйәк иткән ҙур ауыл. Һәр йән иҫәбе алыуҙа ла халыҡ үҙен “башҡорт” тип таный. 2002 йылда бында 748 кеше иҫәпкә алынған.

Нигеҙ һалынғандан алып башҡорт төйәге иҫәпләнгән Мәсәғүт ауылы – шул исемдәге ауыл Советы үҙәге лә. 1795 йылда бында 74 башҡорт теркәлһә, 1859 йылда ауыл халҡы 290 кешегә етә. 1917 йылда Мәсәғүт – 440 башҡорт менән ун урыҫ көн иткән ҡатнаш ауыл. 1989 йылда ул да, Яңауыл районының байтаҡ ауылдары кеүек үк, башҡорт менән татарҙар йәшәгән “ҡатнаш ауыл”дар исемлеген тултыра.

Аҫабалар төйәге Сәлихтә XVIII быуат аҙағында 23 кеше донъя көткән. 1859 йылда ауылда халыҡ иҫәбе 209-ға етә. 1959 йылға тиклем 600-ҙән ашыу кеше йәшәгән Сәлих “башҡорт ауылы” булып теркәлә. Артабан халҡы

аҡрынлап кәмей, 2002 йылғы иҫәптә унда 381 башҡорт ҡына теркәлгән.

Иҫке Ҡоҙаш ауылы V рәүиздә үк типтәрҙәр төйәге булараҡ иҫәпкә инә – 167 йән. 1920 йылда ул 1034 башҡортто һыйҙырған ҙур ауыл. 1959 йылғы иҫәптә иһә Иҫке Ҡоҙаш – татар, 1979 йылда – башҡорт ауылы. 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә ул ҡатнаш ауыл булып теркәлә.

Ошондай аңлашылмаусанлыҡтар милләт иҫәбен алыуҙа байтаҡ осрай. Мәҫәлән, 1795 йылда 165 башҡорт теркәлгән Вәрәш 1917 йылғы иҫәптә 667 удмурт менән мари ауылы булып күренә. Өс йылдан был “хата” төҙәтелеп, Вәрәштә 649 башҡорт иҫәпкә инә. Артабанғы иҫәп алыуҙарҙа, хатта 1989 йылда ла, Вәрәш башҡорттар төйәге булып теркәлә.

1870 йылда тәү башлап иҫәпкә ингән Максимовка ауылында, 1906 йылғы мәғлүмәткә һылтанып, милли сығышын атамай ғына 1066 кеше теркәлә. 1920 йылғы иҫәп иһә дүрт башҡортто, 1226 аҫабаны һәм типтәрҙе күрһәтә. 1959 йылда Максимовкала 934 башҡорт иҫәптә тора. Ә 1989 йылда иһә ауыл 630 татар һәм удмурт төйәге булып теркәлә лә 2002 йылда 642 башҡорт менән удмурт йәшәгән ауылға әүерелә.

Яңауыл районында ике Артауыл бар, тип яҙыла “Атайсал” китабында: Иҫке һәм Яңы Артауыл. Яңыһында билдәле башҡорт шағиры һәм яҙыусыһы Ғилемдар Рамазанов тыуып үҫкән. 1834 йылғы рәүиздә Бөрө өйәҙендә уран аҫабалары нигеҙ һалған Уртауыл ауылында 351 ир һәм 341 ҡатын-ҡыҙ иҫәпкә алына. 1870 йылғы иҫәптә иһә ике Уртауыл күренә: Иҫке һәм Яңы. Урья йылғаһы буйында урынлашҡан Иҫке Уртауылда 94 хужалыҡ иҫәпкә инеп, уларҙа 248 ир һәм 239 ҡатын-ҡыҙ донъя көтә. Башҡорттар. Мәсет, уҡыу йорто, ике тирмән эшләгән. Халыҡ умартасылыҡ менән дә әүҙем шөғөлләнгән.

1901 йылғы сығанаҡта ике ауыл да Артауыл булып теркәлеп, Байғужа олоҫоноң Бәҙрәш ауыл йәмғиәтенә буйһона. Ул саҡта Иҫке Артауылда йорттар иҫәбе 103-кә етеп, уларҙа 282 ир һәм 278 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Аҫабалар биләмәләрен Ҡаҙан, Уса өйәҙҙәренән күсеп ултырыусыларға биргәндә, тамғаларын ҡуйыр булған. Иҫке Артауылда Яҡуп һәм Кинйә Аҙналиндар, Бәшәр һәм Ҡотой Рахманғоловтар, Әбдүс һәм Ғәйетбай Яҡуповтар, Ғүмәр Ранғолов, Ғайса Сөйөшев, Яуыш Сәғитов, Әбделвәли Ғәбдүсов һ.б. донъя көткән.

Уран ҡәбиләһе башҡорттары Янбарис ауылы халҡы Бәҙрәш йылғаһын һыулай. 1659 – 1661 йылдарҙа улар батша Иван Грозныйҙың суҡындырыуынан ҡасып килгән Ҡаҙан даруғаһы Асы Тотмәт ауылы татарҙарын ҡабул итә. Ауылда уларҙы типтәр тип йөрөтәләр, тип яҙа “Атайсал”. Улар араһында башҡорттар ҙа булған. 1795 йылғы иҫәптә Янбариста 161 кеше теркәлә. Артабан ул ҙурайып, 1816 йылда – 228, 1859 йылда – 444 һәм 1901 йылда 636 кеше төйәгенә әүерелә. Шул йылғы мәғлүмәткә ярашлы, 31 хужалыҡта 245 аҫаба, 36 өйҙә 247 башҡорт типтәре һәм 17 йортта 144 яһаҡсы татар теркәлгән. Аҫабалар 1152 дисәтинә, башҡорт типтәрҙәре – 546, яһаҡсы татарҙар 128 дисәтинә ер биләгән.

1773 – 1775 йылдарҙағы ихтилалда янбаристар ҙа әүҙем ҡатнаша. 23 кеше Уран олоҫо старостаһы Мәсәй Йосопов, 20-һе шул уҡ олоҫтан Мәнәй Абдрахманов етәкселегендә һуғыша.

Кесеҡор ауылына 1740 – 1747 йылдарҙа Янбаристан күсеп ултырыусылар нигеҙ һала. 1816 йылда бында 16 хужалыҡта 86 кеше донъя көтөүе билдәле. 1834 йылда Кесеҡорҙа йорттар иҫәбе икеләтә, 1870 йылда иһә өсләтә артып, уларҙа 211 башҡорт иҫәпкә инә. 1920 йылда ауылда 522 кеше теркәлһә, 1969 йылда халыҡ иҫәбе 383-кә төшә.

1897 йылда уҙғарылған Бөтә Рәсәй рәүизендә Кесеҡор ауылы 1062 дисәтинә ергә хужа булған. 1842 йылда 128 хужалыҡтың һәр береһе 1344 бот иген сәскән. Йән башына 2,5 йылҡы, 3,5 һыйыр малы һәм һарыҡ, икешәр кәзә аҫрағандар. Умартасылыҡ, солоҡсолоҡтан да баш тартмағандар. Борон кесеҡорҙар үҙҙәрен башай, мәндәй, айыт араларына бүлеп йөрөткән.

Яңауыл ҡалаһы тарихынан. XVIII быуат ахырында уҙғарылған иҫәптә ул 173 башҡорт йәшәгән ауыл, 1920 йылда ла Яңауыл ҡәҙимге ауылдарҙан әллә ни айырылмай, унда 685 башҡорт донъя көтә. Совет власы йылдарында киң ҡолас йәйгән индустриалләштереү сәйәсәтенең ни рәүешле ғәмәлгә ашырылыуы Яңауыл ауылы миҫалында яҡшы сағылыш таба. 1959 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, ул 15,7 меңдән ашыу башҡорт һәм урыҫ көн иткән район үҙәге. 1989 йылғы иҫәптә Яңауыл ҡалаһында 24,4 мең кеше, нигеҙҙә, башҡорт, урыҫ һәм татарҙар күренә. 2002 йылда ҡалала 28 мең кеше иҫәпкә алынып, 12 меңләбе башҡорт, 4,6 мең урыҫ, 7,7 мең татар һәм 1,7 меңләп башҡа халыҡтар вәкилдәре теркәлә.

Күрше Тәтешле районындағы кеүек үк, Яңауылда ла башҡорттар менән татарҙар иҫәбен теүәл сағылдырыуҙа етди хаталарға, бәлки, аңлы рәүештә, юл ҡуйылыуы күҙәтелә. 1989 йылда бында төп халыҡ 7,5 мең кешегә кәмерәк теркәлә. Шул уҡ ваҡытта был яҡтарҙа саф татар ауылдары осрамай. Атамаһы Татар Үрәҙеһе булған ауылға ла башҡорттар нигеҙ һалып, ул барлыҡ иҫәптәрҙә лә төп халыҡ төйәге булараҡ теркәлә.

203 кешелек Айбүләк – 1795 йылда типтәр ауылы. 1917 йылғы иҫәптә бында 32 башҡорт һәм 1091 типтәр теркәлеп, 1920 йылда Айбүләк – башҡорт ауылы. 1989 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә ауыл татарҙар төйәге булып теркәлә. Типтәр ауылы Гөдбөр ҙә шундай яҙмышҡа дусар ителә. Ғүмер баҡый башҡорт ауылы иҫәпләнгән Байғужа ла 1989 йылда татар ауылына әүерелә. Истәк, Һандуғас, Иҫке Ҡоҙаш, Йөгәмәш һ.б. ауылдар ҙа ошо рәүешле милли сығышын алмаштырыуға дусар ителә.

## *Шәжәрәле, тимәк, дәрәжәле!*

2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа Тәтешле районында 25,1 меңдән ашыу кеше теркәлеп, шуларҙың 15,1 меңләбе – аҫабалар тоҡомонан. Район матбуғаты “Тәтешле хәбәрләре” урындағы башҡорт ҡоролтайы башҡарма комитетына һылтанып хәбәр итеүенсә, 14 мәктәптә биш туған тел уҡытыла. 2278 бала, йәғни барлыҡ уҡыусыларҙың 81,4 проценты, башҡорт, урыҫ, татар, удмурт һәм мари телдәре буйынса һабаҡ ала. Уларҙың 1414-е башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнә.

“Яңавыл таңнары” гәзитендә донъя күргән хәбәргә ярашлы, был төбәктә 30-ға яҡын милләт вәкиле йәшәй һәм мәктәптәрҙә шулай уҡ биш туған тел өйрәнелә. 1061 уҡыусы туған тел сифатында башҡорт теленән һабаҡ ала. Бынан тыш, 1 – 9-сы кластарҙа башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла.

Тәү ҡарашҡа барыһы ла ал да гөл кеүек. Сөнки, беренсенән, ике район

башҡорттары ла башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында аралаша; икенсенән, башҡорт әҙәби теле күптән ғәмәлгә индерелеп, 30-сы йылдарҙағы кеүек, дәреслектәр етмәүгә һылтанырға урын да, сәбәп тә юҡ.

1921 йылдың июлендә үткән Советтарҙың II Бөтә башҡорт съезы башҡорт теленең статусы буйынса ҡарар ҡабул итә, тип яҙа БДУ профессоры Марат Зәйнуллин "Яшәүгә хокук" (Өфө, 1998 й.) тигән йыйынтыкта. Унда һүҙ башҡорт теленең урыҫ теле кеүек дәүләт теле булыуы һәм уны бөтә уҡыу йорттарында, шул иҫәптән хәрби уҡыу йорттарында ла, мотлаҡ өйрәнеү хаҡында бара. Тимәк, был ҡарар ғәмәлгә ашырылмаған икән, унда ауылдарҙа көн иткән аҫабалар вариҫтарын ғәйепләргә урын юҡ.

Икенсе документ. Үткән быуаттың 40-сы йылдары аҙағында Бөтә башҡорт лингвистик конференцияһы үткәрелә, тип яҙа филология фәндәре докторы Мөсәлиә Хәйруллина "Тамырҙарыбыҙ – тәрәндә" тип аталған брошюрала. БАССР-ҙың Тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан ойошторолған был сарала төп мәсьәлә булып башҡорт теле диалекттары тора. Конференцияла ҡатнашыусылар башҡорт телендә өс – көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш диалекттар барлығын раҫлай. 1953 йылда көнбайыш диалект мәсьәләһе тағы ла күтәрелеп, уның буйынса тәрән ғилми-тикшеренеү эштәре башларға тәҡдим ителә. 1954 йылда Асҡын, Яңауыл, Борай һәм Балтас районларына диалектологик экспедициялар ҙа ойошторола.

Был экспедицияларҙың ниҙәр асыҡлауы хаҡында бер ни тиклем мәғлүмәт "Яшәүгә хокук" китабында ла урын алған. "Халыҡ, тел вә тарих" тигән күләмле яҙмаһында филология фәндәре докторы Нәжибә Мәҡсүтова түбәндәгеләрҙе хәбәр итә. Тел белгесе, ғалим Ғәббәс Дәүләтшиндың отчетына ҡарағанда, Яңауыл районында йәшәгән 71 меңдән ашыу кешенең 44 меңе – башҡорт. Татарҙар дүрт тапҡырға кәмерәк булыуға ҡарамаҫтан, барлыҡ башҡорт ауылдарында ла уҡытыу татарса алып барыла. Яңауыл, Ямаҙы, Аҡсәйет ауылдарында башҡорт теле предмет булараҡ индерелһә лә, иҫәпкә бар, һанға юҡ.

Экспедиция ағзалары тәжрибә рәүешендә Мәсәғүт ауылының 1-се баҫҡыс мәктәбендә балаларҙы башҡортса уҡытып һәм таҡтаға яҙҙырып ҡарай һәм уларҙың эште ярайһы яҡшы башҡара алыуын асыҡлай. Ямаҙы ауылының башҡорт балалары татар теле грамматикаһын ни рәүешле үҙләштереүен уҡытыусы Хафиз Ғирфановтың ошо уҡ яҙмала урын алған зары ла раҫлай. Балаларҙың "нәрсә" урынына "нәмә", "почмак" – "мөгөш", "тез" – "тубыҡ", "кечкенә" – "бәләкәй" тип яҙыуына ҡаршы күп көрәшергә тура килә.

Көрәш, билдәле булыуынса, һөҙөмтә менән тамамлана: кемдер еңә, кемдер еңелә. Был осраҡта, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кемдәр мәнфәғәтенең аҫта ҡалыуын самалау һис ауыр түгел.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

# ҺӘР КЕМДЕҢ БӘХЕТЕ ҮҘ ҠУЛЫНДА

Ерҙә кешелек донъяһы тыуып, унЫң артабанғы үҫеше осорҙарында мәңгелек ҡиммәттәр ҙә барлыҡҡа килә. Шуларҙың береһе – бәхет. Аныҡ ҡына билдәләмә биреп булмаһа ла, уның кешеләр өсөн иң кәрәкле, иң ҡәҙерле төшөнсә икәнен инҡар итеү мөмкин түгел. Был хаҡта халыҡта бик күптән ҡалыплашҡан әллә күпме миҫал килтерергә була.

Мәҫәлән, донъяға яңы тыуған балаға ата-әсәһе, яҡындары үҙ бәхете менән тыуыуын теләй. Бер-береһенә кеше бәхетле оҙон ғүмер юрай. Бәхетле бала саҡ, бәхетле ҡартлыҡ тип һөйләүҙең дә шаһитыбыҙ. Ғаилә бәхете теләү ҙә киң таралған. Әҙәм балаһы бәхет һорап Хоҙайға ялбара, ҡатын-ҡыҙ бала бәхетенә, ир бәхетенә мохтаж. Кемдер бәхетте аҡсала, байлыҡта күрә, бәғзеләр күңеленә яҡҡан шөғөлдө бәхет һанай. Берәүҙәр ошо яҡты донъяла тыныслыҡта йәшәүҙе бәхет тиһә, икенселәр һау-сәләмәт, бар ағзалары теүәл булыуы менән бәхетле. Көн һайын иртән ҡояштың ҡалҡып, кисен яңынан байыуы, миҙгелдәр менән миҙгелдәр алмашыныуы, яҙын ҡоштарҙың ҡайтып, көҙөн тағы китеүе – барыһы-барыһы ла бәхет менән ауаздаш бит ул.

Бәхет хаҡында һүҙ ҡуҙғатыуым юҡтан ғына булманы. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипованың “Канатлы бәхеткәйем” повесын (“Ағиҙел” журналы, 11-се һан, 2019 йыл) уҡығандан һуң байтаҡ ҡына уйланып йөрөлдө. Шуның һөҙөмтәһендә күңелдә бер килке фекерҙәр ҙә төйнәлде. Әҫәрҙәге образдарҙың үҙ бәхетен ниҙә күреүе, быны уҡыусыға нисек йоғонто яһары, яҙыусының һүҙ нескәлектәренә ни тиклем иғтибарлылығы, тел оҫталығы – ошолар хаҡында бер аҙ бәйән итеү теләге тыуҙы.

Повеста ваҡиғалар өс пар образға бәйләп үҫтерелә. Улар – Зәйнулла – Хәҙисә, Шамил – Шәмғиә, Ғәзиз – Наза. Һәр береһенең үҙ тормошо, үҙ яҙмышы, үҙ ҡарашы. Һис кеме барыһы ла ал да гөл, донъям түп-түңәрәк тип әйтә алмаҫ. Әгәр шулай тиһәләр, быға кем ышаныр? Әҙәби әҫәрҙәр тормошсанлыҡ тигән талаптан сығып баһалана. Бер ниндәй хәсрәт, ҡаршылыҡтар булмаһа, сетерекле мәсьәләләр алға килеп баҫмаһа, ниндәй тормош ти инде ул. Был яҡтан повесть геройҙарына, уларҙы ижад иткән авторға һүҙ тейҙерерлек түгел. Ниндәйҙер глобаль мәсьәләләр хаҡында һүҙ ҡуйыртылмай повеста. Бары тик көндәлек тормош, көндәлек мәшәҡәттәр (ғаилә, күршелек мөнәсәбәттәре, йорт-хужалыҡ мәсьәләләре) менән бәйле ваҡиғалар ағышы. Әммә шуның аша кешелек донъяһының мәңгелек серле һорауы – бәхет темаһы төп мәсьәлә юғарылығына күтәрелә.

Повестың башында (йәғни экспозиция) Зәйнулла менән танышабыҙ. Заманында белем, һөнәр ҙә алған, һөҙөмтәлә бригадир, профком рәйесе, партком секретары вазифаларын үтәгән, ғаилә ҡороп, балалар ҙа үҫтергән. Тәү ҡарашҡа, зарланырға урын юҡ һымаҡ. Әммә күңелен өйкәгән нәмәләр бар икән. Хужалығы бөтөн, тормошо етеш тә, тик тәүге ҡатыны бөтмөр

Хәсбиямалы иҫенән сыҡмай. Әлеге ҡатыны Хәҙисәһе менән сағыштырып ҡарай ҙа, юҡ-юҡта күңелен төшөнкө уйҙар биләй башлай. Тыштан ғаилә татыу ғына тойола, әммә ике яҡлы йылы мөнәсәбәттәр һиҙелмәй. Ҡатынына, балаларын ҡаҡмайынса, үҙ күреп тәрбиәләүенә генә рәхмәтле Зәйнулла. Ә күңеленең иң төбөндә бөтөнләй икенсе кеше – Наза. Ошо рәүешле, әлеге мәлдә Зәйнулла ҡатын бәхетенән мәхрүм һымаҡ. Ә Хәҙисә, киреһенсә, Зәйнуллаһынан ҡәнәғәт, өлөшөмә төшкән көмөшөм тип ҡыуана, шуның менән үҙен бәхетле һанай. Зәйнулланы ҡулынан ысҡындырғыһы килмәй. Назанан көнләшеүе лә шунан. Тик Хоҙай Тәғәлә Хәҙисәне бала бәхетенән мәхрүм иткән. Ана шуға күрә Зәйнулланың балаларын яҡын күреп, әсәләрсә хәстәрлек күрергә тырыша.

Шамилдың да яҙмышы бик шыма юлдарҙан ғына бармаған. Йәшлек ҡыҙыулығы арҡаһында төрмәгә эләгә. Унан утыҙ йәшкә етеп ҡайта. Иҫәбе – Назаға өйләнеү, тик ҡыҙҙың әсәһе риза түгел. Шул арҡала, бүтәнсә һайланып тормайынса, Шәмғиәгә өйләнә. Бер-береһенә ярап ҡына йәшәп китәләр, тик уларға ла бала бәхете татып ҡыуанырға насип булмай. Быны-быны булыр тип өмөтләнеп, ғүмерҙең емешле осоро ла үтеп китә. Бала бағыуға өмөт һүнһә лә, Шамилдың күңелендә башҡа өмөт һис кенә лә һүрелмәй: ул – Наза.

Шулай итеп, Назаға ике кеше, һауалағы торнаға ынтылған һымаҡ, йәшерен генә өмөт бағлай. Ә Наза үҙе ниндәй уйҙар менән йәшәй, ниндәй тойғолар кисерә икән? Уның да яҙмышы ал да гөл түгел бит. Атайһыҙ үҫә, әсәһенең ҡушыуы буйынса яҡындан күреп белмәгән кешегә кейәүгә сыға. Уныһы ла игеҙәк ҡыҙҙарын етем ҡалдырып, фажиғәле рәүештә һәләк була. Юғалып ҡалмай Наза: ҡыҙҙарын үҫтереп, уҡытып, кеше итә. Бер килке Италияла ла йәшәп ала. Йылдар үтеү менән күңеле тыуған яҡтарға тарта. Урау-урау оҙон юлдар аша һуңлап булһа ла үҙ бәхетен таба.

Зәйнулла менән Шамилдың Наза тип ымһыныуын көсәйтеү өсөн яҙыусы әҫәргә ошондай күренеште (сюжеттың төйөнләнеш өлөшө) индерә: Зәйнулланың яҙа ишетеүе арҡаһында, Назаның сирле ире Ғәзиз үлгән килеп сыға. Етмәһә, һаҡһыҙлыҡ менән уны Наза төшөрөп ебәргән, имеш. Былай булғас, уны кеше үлтереүҙә ғәйепләүҙәре мөмкин, имеш. Ығы-зығы, хәрәкәт, йәнлелек көсәйгәндән-көсәйә. Артабанғы ваҡиғалар барышында әҫәр геройҙарының тағы өр-яңы сифаттары асыла. Шәмғиә менән Хәҙисә тыштан әхирәттәр күренһә лә, бер-береһенә ҡарата ихласлыҡ һиҙелмәй. Тура килгәндә үҙ-ара әрепләшеп алыуҙан һис кенә лә тартынмайҙар. Баҡтиһәң, уларҙың яҡынлығы уртаҡ хәсрәттән – икеһенең дә балаһы булмауҙан, икеһе лә ирен бер үк кешенән көнләүҙән – икән. Зәйнулла менән Шамил араһында ла ысын ир-егеттәр дуҫлығы тойолмай. Ҡасандыр Аллаһ Тәғәләне бар тип тә белмәгән Шамилдың тора килеп мулла булып китеүе ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр тыуҙыра. Беренсенән, шундай осраҡлы муллалар ғәҙәти тормошта осрап тора; икенсенән, әгәр ҙә ысын күңелдән тәүбә иткән икән, бик яҡшы; өсөнсөнән, кешеләрҙе иманға килтереүҙә сауаплы эш тип ҡарарға кәрәк быға.

Әҫәрҙә кульминация – Шамил менән Зәйнулланың ҡатындары менән Назаларға ҡайғы уртаҡлашып, хәл белешергә, кәрәгенсә ерләшеү саралары күрергә килеүе. Әммә килеүселәр үҙҙәре көтмәгән күренешкә шаһит була: Ғәзиз ни теп-тере. Ниһайәт, сиселешкә лә килеп етәбеҙ: Назаның тәүге

мөхәббәте Ғәзиз икән дә. Зәйнулла менән Шамил да, ниһайәт, Назанан өмөттәрен өҙҙө, ҡатындары ла тынысланды. Шул уҡ ваҡытта бәхет төшөнсәһе лә асыҡланды: Наза менән Ғәзиз аңлауынса, бәхет ул – бер бөтөн, бер йән булып, бер уйҙа, бер теләктә йәшәү, изге ғәмәлдәр ҡылып, шунан ҡәнәғәтлек кисереү. Ғәзиз, төшөнкөлөккә бирелмәйенсә, мәктәп балалары өсөн “Йәш физик” түңәрәге ойошторған, Наза балаларға сит тел буйынса өҫтәмә дәрестәр бирә. Икеһе лә яҡты өмөттәр, матур хыялдар менән йәшәй. Бына ул бәхеттең асылы нимәлә.

Әҫәр һуңында Зәйнулла менән Хәҙисә лә, Шамил менән Шәмғиә лә үҙгәргән һымаҡ тойола. Һәр ике пар араһында татыулыҡ, бер-береһенә ихтирам артҡандай, иңдәренән ауыр йөк төшкәндәй, күңелдәрендә ниндәйҙер ынтылыш хистәре тыуғандай. Алда тормош дауам итә, ҡалған ғүмерҙәрҙе матур итеп йәшәргә кәрәк, тигән уйҙа ҡала повесть геройҙары. Моғайын, был Наза менән Ғәзиздең тормош асылы, йәшәү өлгөһө тәьҫирелер. Повестың шундай күтәренке рухта тамамланыуы уҡыусы күңеленә лә кинәнес бирә. Ысынлап та, ошо яҡты донъяла йәшәүе үҙе бәхет бит инде, тип уйлап ҡуяһың.

Һүҙ ыңғайында яҙыусының, хикәйәләү оҫталығы менән бергә, тел оҫталығына ла иғтибарҙы йүнәлтеү урынлы булыр. Образдарҙың характер үҙенсәлектәре лә, хәл-ваҡиғаларҙың тормошсанлығы ла шуға бәйле. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыуҙа ла тел саралары ҙур роль уйнай. Хәҙер һүҙебеҙҙе аныҡ миҫалдар менән иҫбатлап ҡарайыҡ.

Беренсенән, авторҙың бер генә һөйләм аша кешенең тотош уйҙарын да, тормошҡа ҡарашын да һыйҙыра алыуы күҙгә ташлана. Мәҫәлән, “Ул (Хәсбиямал. – Р.И.) булһа, бынау банкала ҡоро йылтыр һыу түгел, һәйбәтләп әсе ҡатыҡтан яһалған айран булыр ине” (Зәйнулла тәүге ҡатыны менән ғүмер иткән мәлдәрен һағына), “Һиңә (Ғәзизгә. – Р.И.) сыҡҡас, төштәремдә яңынан оса башланым!” (Наза еңел булмаған үткәндәренән һуң бөгөнгө тормошон бәхеткә тиңләй).

Икенсенән, яҙыусы әҫәрҙең йөкмәткеһенә тап килерҙәй, образдарҙы тулыраҡ һынландырырҙай сағыштырыуҙарҙы бик урынлы ҡуллана. Миҫалдар килтерәйек: “оҙон тороҡло ас яңаҡлы, йоҡа иренле” (Хәҙисәгә ҡағылышлы). “Әйтерһең, тәүге һөйөү хисенә дусар йәш бер үҫмер”, “Өйөнә кәләш төшөрөргә ашҡынған  кейәү егете тиерһең!” (Зәйнуллаға ҡарата). “Наза – аяҡлы бәхетем” (Ғәзиз шулай ти), “Наза – аяҡлы ҡаза” (башҡалар шундай уйҙа).

Өсөнсөнән, повестың телен мәҡәлдәр һәм әйтемдәр байыта. Мәҫәлән, “Тай ат булғансы, эйәһе эт булған”. Повеста был мәҡәл тормоштағы ике хәҡиҡәтте раҫлау өсөн хеҙмәт итә: бер яҡтан, йылҡы малын еккегә өйрәтеүҙең еңел түгеллеген, икенсе яҡтан, ҡатын-ҡыҙҙы үҙгәртеүҙең дә еңел генә булмауын, бәлки, мөмкин дә түгеллеген аңлата. “Тыуҙырған түгел, тәрбиәләгән әсә”, “Ир бирмәк – йән бирмәк,” “Биш балаһын биш мөйөшкә ҡаратып булһа ла һөй,” “Өмөтһөҙ – шайтан,” “Уңмағанды ҡыума” кеүек тапҡыр мәғәнәле һүҙҙәр ҙә повестың телен күркәмләндерә.

Дүртенсенән, повеста фразеологик берәмектәр ҙә образдар характерын асыуға булышлыҡ итә. Мәҫәлән, “Картайғанда тыртайҙым инде тип, үҙ-үҙен битәрләне” (Шамил үҙенең Назаға ымһыныуына ҡарата шулай ти). Юҡтан ғына ҡоҙағый, аңҡы-тиңке булыу, йөрәген асыу, күҙен күтәреп

ҡарау, һүҙҙән бутҡа бешереү кеүек тотороҡло һүҙбәйләнештәр ҙә әҫәрҙе тормошсан итеүгә булыша.

Бишенсенән, диалект һүҙҙәр ҙә (“балдар” (балалар), “ултырғысҡа ялпашты”, “ир эстәп йөрөй”, “әйт шәп булғасың”), йәнле һөйләш формалары ла (“толком һөйлә”, “мәсет төҙөлөп бөтһә, шитай, имам-хатип”, “өйләне түлке тамамлап тора инем”, “Шамилың хут куда”) повестың йөкмәткеһен тулыландыра, образдарҙың характер үҙенсәлектәрен асыуға булышлыҡ итә.

Йомғаҡлап әйткәндә, повесть бәхет төшөнсәһе аша йәшәү мәғәнәһе, йәшәү рәүеше, кешенең тормоштағы урыны кеүек фәлсәфәүи һорауҙарҙы ла алға ҡуя. Ҡатмарлы был һорауҙарға берҙәй генә яуап юҡ: һәр кем үҙенсә аңлай, үҙенсә ҡабул итә, һәр кемдең үҙ аҡылы, үҙ ҡарашы. Әммә шуныһы кире ҡаҡҡыһыҙ: кеше бер ҡасан да донъянан ваз кисеп, өмөтһөҙлөккә бирелеп түгел, ә киләсәккә ҡарап, алға маҡсаттар ҡуйып йәшәргә тейеш. Бәхете лә шунда булыр. Повесты уҡыған кеше шундай һығымта яһар. Ошо яҡтан әҫәрҙең тәрбиәүи көсө ҙур. Яҙыусының халыҡсан тел оҫталығы ла әҫәрҙең баһаһын бермә-бер күтәрә, уҡымлы, күңелгә ятышлы итә.

**Рим ИСХАҠОВ.**

# ТЕТРӘНДЕРГЕС ӘҪӘР

## *Салауат Әбүзәрҙең “Кисенбикә юлы”н уҡығас...*

Салауат Әбүзәр – төрлө жанрҙа ла бик оҫта эшләгән яҙыусы. Бына уның “Кисенбикә юлы” исемле повесы (“Ағиҙел”, 2018 йыл, 10-сы һан).

Көслө рухта яҙылған был әҫәрҙең нигеҙендә Свердловск өлкәһенең Дәүләт архивында һаҡланған рус генералдары фармандары аша бөгөнгө тарих өйрәнеүселәргә мәғлүм булған Кисенбикә Байрасованың 1736 – 1739 йылдарҙағы аяныслы яҙмышы ята.

Яҙыусының һаран ғына факттарға таянып яҙылған был уҡымлы “Кисенбикә юлы” повесын һөйләп биреү ҙә бик ауыр, уны, йөрәгең аша үткәреп, шәхсән үҙеңә уҡып сығырға кәрәк.

Повестағы хәл-ваҡиғалар килмешәктәрҙең 1736 йылда башҡорт ерҙәрен күпләп тартып алып, заводтар төҙөүенән, урындағы халыҡтың быға ҡаршы баш күтәреү солғаныштарынан башланып китә. Әҫәрҙә күрһәтелгәнсә, 40-лаған ир-егет ҡулдарына уҡ-һаҙаҡтарын ала. Шул болала Кисенбикәнең ире Сөләймән шәһит китә. Ирҙәре яуҙа ҡатнашҡан башҡорт ҡатындарын балалары менән, шул иҫәптән 57 йәшлек Кисенбикәне лә, карателдәр Екатеринбургҡа ҡыуып алып китә.

Кисенбикәнең һәм ҡыуылып барған ҡатын-ҡыҙҙың, балаларҙың юл буйы күргән ыҙалары, михнәттәре түҙеп торғоһоҙ, ҡот оҫҡос була. Екатеринбургҡа килеп еткәс, уларҙы хеҙмәтселеккә урыҫтарға һаталар, Кисенбикәне лә, бүтән ҡатын-ҡыҙҙы ла, балаларҙы ла көсләп суҡындыралар. Исемдәрен боҙоп, руссалап өндәшә башлайҙар.

Ҡоллоҡҡа түҙмәй, тыуған яғын һағынып, Кисенбикә өс тапҡыр ҡаса, әммә һәр ваҡыт тотола. Өсөнсө тапҡыр тотолғас, 60 йәшлек Кисенбикәне Екатеринбургтың үҙәк майҙанында тереләй яндыралар.

Бер ауыл кешеләренең аяныслы яҙмышы аша яҙыусы башҡорт халҡының милли асылын, уның ауыр тормошон, тел, дин, тыуған ил, ер-һыу өсөн бы-

уаттар буйы барған көрәшен асып бирә алған. Улар өсөн иң изге төшөнсәләр – тыуған ил, иман. Кисенбикәнең айырылыр алдынан әйткәне: “Ныҡ булығыҙ! Иманығыҙҙы һаҡлағыҙ! Тыуған төйәгегеҙҙе онотмағыҙ!”

Тыуған ерҙәренә кире ҡайтыу өмөтө ҡыуып алып кителгән ҡатындарҙың, балаларҙың ғына түгел, ә аттарҙың да ҡанына һеңгән. Авторҙың контекстуаль параллелизм принцибына ҡоролған аттар өйөрөн, өйөр айғыры Бөркөттө һүрәтләүсе бүлексәләре повестың идеяһын асыуҙа ныҡ ярҙам итә. Ирек һөйгән, тыуған ерем, һулаған һауам, тип янған башҡорттарҙың аттары ла ҡоллоҡтоң нимә икәнен бик яҡшы аңлай. Улар ҙа үҙҙәренсә карателдәргә баш бирмәйсә ҡаршылаша. Өйөр айғыры Бөркөттөң, ажарланып, үҙен ҡамсы менән ярған поручиктың маңлайына тибеп ҡасып китеүе һәм бар бейәләрҙе, тай-ҡолондарҙы ҡотҡарыуы иҫ киткес батырлыҡҡа тиң. Айғырҙың тыуған яғына өйөрөн әйҙәп алып ҡайтыуы тулҡынландырғыс. Үлеме лә һоҡландырғыс: “Һуңғы ынтылыш яһағандай, тибенеп ҡуйҙы айғыр, гүйә, мәңгелек кәртәһе аша һикерҙе”.

Кисенбикә лә һуңғы тамсы ғүмеренә тиклем иленә, иманына тоғро ҡала. Унын үлере алдынан Аллаһына төбәп әйтелгән һүҙҙәрен майҙанға йыйылған бар халыҡ та ҡабатлай. Тимәк, батша ялсылары нисек кенә тырышмаһын, башҡорт халҡының ирекҡә, тыуған иленә, диненә, иманына булған һөйөүен һындыра алмай.

Ыңғай образдарҙы автор улар башҡарған эштәре аша асып бирә алған. Кисенбикә ауыр минуттарҙа юлдаштарын йыуата, кәңәштәрен бирә. Ниндәй ҡыйынлыҡтар тыуғанда ла, оло йәштәге Кисенбикә балаларға ла, ҡатындарға ла өлгө булыуҙан туҡтамай. Унын һәр бер һүҙендә, холоҡ-фиғелендә халыҡ аҡылы сағыла. ”Аяҡтарығыҙҙы яҙып ултырығыҙ, йәш түкмәгеҙ, көсөгөҙ таш-лар”, – тип өйрәтә ул ҡыуылып барған хәлһеҙ балаларға. Һалҡын төндә өшөмәһендәр өсөн, арҡаларҙы бер-береһенә терәп кенә ятырға кәңәш итә. Балаларға драгундарҙан ҡалған бутҡаны дегәнәк япрағына һалып ғәҙел өләшә. Тереклекте һаҡлау – Кисенбикәнең бар булмышы. Балаларҙы, ҡатындарҙы ҡурсалау ғына түгел, ҡасып барғанда, ныҡ асыҡһа ла, ҡамыштар араһында өйрәк ояһында ятҡан йомортҡаларға ла теймәй, сөнки ошо йомортҡаларҙан өйрәк бәпкәләре сығасаҡ, уларҙың да йәшәүгә хаҡы бар, тип уйлай изге күңелле ҡатын.

Повеста ҡатындар ғына түгел, балалар ҙа уларға килгән афәтте кескәй йөрәктәре менән аңлай, асығыуҙың сигенә еткәндә лә, ризыҡҡа ташланмайҙар. Үҙҙәренә тигеҙ итеп бүлеп бирелгәнгә риза булалар. Ә Әхмәҙулла, аҡыл яғынан зәғиферәк тип һаналған егет тә, үҙен нисек мәрхәмәтле тота һуң юл буйы! Ҡыҙҙарға һоҡланып ҡарап, ололарға хөрмәт күрһәтеүсе Әхмәҙулла яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшкә сыға: төндә иҫерек һаҡалтайҙы унын хәнйәре менән сәнсеп үлтерә.

Повестағы кире образдар – карателдәр, поручик Гордей – башҡорт ҡатындарын, балаларын сусҡа бәрәсе хаҡынан да кәмерәккә һатып алып, кеше иҫәбенә йәшәүселәр, шулай уҡ генералдар һәм башҡа әҙәм аҡтыҡтары башҡорт халҡын, унын рухын һындырыу өсөн барыһын да эшләй: сыбыҡ, ҡамсы менән һуҡтыра, суҡындыра, тереләй утта яндыра.

Кисенбикәнең моңло, һағышлы йырын тыңлап, унын урыҫ хужаһы Кирьяк Андреевич былай уйлай: “Йөрәгендә илаһи моң йөрөткән халыҡты буйһондороу мөмкин түгел, рухын һындырырға кәрәк. Шул саҡта үҙҙәре баш һаласаҡ!”

Шуның өсөн дә бит улар халыҡтың киләсәген дауам итеүсе балалар, ҡатындар менән аяуһыҙ көрәшкә сыҡҡан – халыҡты төбө-тамыры менән йолҡоп ташлау маҡсаттары. Миңлеямалдың имсәк балаһының муйынын өҙә сабалар, Гөлбаныуҙы көсләйҙәр, ҡатын-ҡыҙҙарҙың камзулдарынан, ҡашмауҙарынан көмөш тәңкәләрҙе йолҡоп алып, шешәләргә алмаштыралар... Шул иманһыҙҙарҙың Әхмүштең ауыҙын ҡайырып, шайтан һыуы ҡойоуҙары ла, аҙаҡ уның ыҙалауҙарынан кинәнес табып шарҡылдап көлөүҙәре лә бик ерәнгес итеп һүрәтләнгән.

Кире образдарҙың береһе поручик Гордей “ҡамсы менән айғырҙы ғына түгел, тотош халыҡты ла буйһондорорға күнеккән”. Халыҡты ҡурҡыуҙа тотоу өсөн, улар ниндәй генә язалар уйлап сығармаған! Мәҫәлән, повестың башында Хөсәйенбәк мулланы ҡабырғаһынан аҫалар. Әҫәрҙең кульминацияһын тәшкил иткән өлөшө – Кисенбикәне суҡындырылғандан һуң да үҙ иманына тоғро ҡалғаны һәм өс тапҡыр тотҡонлоҡтан ҡасҡаны өсөн, терелəй утта яндырыуҙары – китап уҡыусыға яуызлыҡтың ни дәрәжәлә кешелеккә ҡаршы эшләнгән сәйәсәт икәнлеген күрһәтеүсе факт.

Хыянатсы Ялсығолдоң – элекке ат ҡарағының – карателдәргә ярамһаҡланып, ҡылған этлектәрен дә автор бик оҫта һүрәтләгән. Хатта үҙен ашатып-эсереп сығарған Туйгилдене – суҡындырылғандан һуң Анатолийҙы – властарға ошаҡлап тоттороп, тереләй яндырылыуына сәбәпсе булған Ялсығолға ҡарата китап уҡыусының күңелендә иҫ киткес нәфрәт уяна. Ҡараңғы төндә бейек ярҙан һыуға ҡолап төшөп үлгән һатлыҡ йәндең үлеме яуызлыҡтың да бер заман юҡҡа сығыуына ишаралай. С. Әбүзәрҙең бүлексәләрҙе матур итеп йомғаҡлай алыу оҫталығына бына бер генә миҫалды алып ҡарайыҡ: “Ялсығолдоң күкрәгенән сыҡҡан аҡтыҡҡы һулыш ҡыуыҡҡа әйләнеп, бер талай ағып барҙы ла шартланы”.

Шуны ла әйтмәйсә булмай: Кисенбикәгә ябай урыҫ ҡатындары, ирҙәре ярҙам ҡулын һуҙа. Ҡыуылып барғанда, бер мәрйә уларға икмәк бирә, ә иленә ҡасып барған саҡта ирле-ҡатынлы рустар уны баҙҙарында драгундарҙан йәшереп алып ҡала.

Авторҙың һутлы тел менән яҙылған әҫәрендә бик күп мәҡәл, әйтем, халыҡ аҡылын сағылдырған фекерҙәр тулып ята: “Яҙғанын күрмәй, гүргә кермәй кеше”, “Кешенән ҡасып булһа ла, үҙеңдән ҡасып булмай”, “Иманынан яҙһа, шайтанға әйләнә кеше”, “Ҡоллоҡ – әжәлдең туғаны”, “Әҙәм балаһы һәр нәмәгә күнегә икән. Шул күнегеүҙең йәшәү рәүешенә әйләнеп китеүе ҡурҡыныс” һәм башҡалар.

Мәңгелек темаларҙы тәшкил иткән изгелек һәм яуызлыҡ, ирек менән ҡоллоҡ, шулай уҡ бүре-һарыҡ, төйләгән-себеш, ҡара-аҡ, иркенлек-ҡура, кәртә, туҡлыҡ-аслыҡ кеүек антонимдар әҫәрҙең идеяһын асыуҙа ҙур ярҙам итә. Көл-күмер, бүкән-түмәр кеүек контекстуаль синонимдар ҙа повестың телен байыта.

Салауат Әбүзәрҙең “Кисенбикә юлы” повесы, шулай итеп, беҙҙең туған халҡыбыҙҙың тарихи үткәндәрен асыҡларға ярҙам итә. Ул халҡыбыҙҙың үҙ илен, ерен сит-яттарға бирмәйәсәгенә, ҡоллоҡ бығауҙарын киймәйәсәгенә, кәрәк икән, иле, теле, иманы өсөн көрәшеп, баш һаласаҡтарына ныҡлы ышаныс уята. Шуның менән әҫәр, минеңсә, бөгөн дә бик актуаль.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА.**<br>
Өфө ҡалаһы.

# ӘЙТКӘН ҺҮҘ АТҠАН УҠ ТҮГЕЛ



*Хәбәрсе ҡәләмен башланғыс кластарҙан уҡ ихлас йүгерткән, мәктәптән һуң быны, хәрби хеҙмәткә тиклем әле, Бөрйән районы гәзитендә штатта тороп башҡарған, университет тамамлап «Башҡортостан» дәүләт телерадиокомпанияһында емешле эшләгән Рәсүл Сәғитовты «Юлдаш» радиоһының бүлек етәксеһе, халыҡсан тапшырыуҙар алып барыусы тип тә, эфирҙағы, гәзит-журналдарҙағы, шул иҫәптән рус телендә лә белдерелгән, олпат, үҙенсәлекле, тәрән фекерҙәре менән журналист һөнәренең бәҫен даими күтәреүсе рәүешендә лә, китаптары аша йомарт тәжрибә уртаҡлашыусы булараҡ та яҡшы танийбыҙ.*

*Журнал уҡыусыларға уның яңы яҙмаларын тәҡдим итәбеҙ.*

Журналистикаға, ошо эшмәкәрлек, минең ҡарамаҡҡа, уңышлы атҡарылған радиоға ла шул иҫәптән, «киң мәғлүмәт» һүҙбәйләнеше төйөн-төйөн бәйле булһа ла, һөнәремдең хәбәр итеүҙән бүтән дә – һәйбәт, файҙа йәһәтенән әле аталғандан осмот та кәм түгел, бурыстары ла барлығын беләбеҙ һәм уларҙың береһе, ифрат мөһиме – аңлатыу. Әлеге һүҙҙән ҡолаҡтарҙа, бәлки, ҡәтғиме, өгөтлөмө уҡытыусы тауышы яңғырап китһә лә, ысынында быны күҙҙә тотмайым, ҡыҫҡалыҡ, теүәллек маҡсатынан ғына ҡулландым – хәбәрсене белемсегә яһалма сығармайым, шөғөлө өсөн генә өҫтөн ҡуймайым. Юғиһә, заман «яман» даһа хәҙер – грамоталылыҡ көслө. Интернет та түш кеҫәһендә генә ята: астың, ҡараның, төшөндөң. Уныһы шулай, әммә әле бында мин ҡабарып торған, күҙ ҙә, һүҙ ҙә өйрәнгән мәғәнәнән төпкәрәк төшөүгә, таҙа асылға ишаралайым. Мәҡәләмдә, төрлө миҫалдар килтереп, ошоно һәм үҙем мөһим күргән башҡаларҙы күрһәтә лә барырмын.

Башта, эйе, ябайыраҡ нәмәләр – әйтәйек, тапшырыуҙа уртаға һалыныр темалағы төп һүҙҙең килеп сығышы, тыумышында ҡайһы мәғәнәлә булып, бөгөн ниндәй йөкмәткелегә әйләнгәне белдерелә.

## Шикһеҙ һәм сикһеҙ көслө

Халыҡ ижады тураһындағы тапшырыуға әҙерләнгәндә, ғәҙәтемсә, күләмле генә инеш яҙҙым.

– Фольклор – нимә ул? – Үҙ-үҙемә төбәлгән һорауға яуап ҡыҫҡа бирелде. – Һүҙе инглиздән килә, ике өлөштән тора. Тәүгеһе һәр кемгә билдәле –

«халыҡ». Бергә – «халыҡ аҡылы». «Белеме» тиһәк тә була. Ошо ауыҙ-тел ижадын өйрәнеүсе фән фольклористика тип атала.

Артабан батырыбыраҡ ҡаҙылды, сөнки маҡсатым – мәсьәләнең ижтимағи-сәйәси тапшырыуға сығарылыр кимәлдә үк мөһимлеген раҫлап ҡына ҡалмау, иҫбатлау ҙа:

– Әҙәбиәтте яҙма нәфис ижад менән генә тарайтмай, ғөмүмән, һүҙ сәнғәте булараҡ алһаҡ, фольклор – әҙәбиәттең айырым бер бүлеге, ә фольклористика – әҙәбиәт ғилеме өлөшө. Мәсьәләнең, йәмғиәт иғтибарының уға кәрәктән бер килке һайлығы арҡаһындамы, матдилыҡтың рухилыҡтан өҫтөн баһаланыуынанмы, бүҫкә күренгән мөһимлеген күтәреү өсөн әйтелде былар. Ә ысынында – тотош донъя ла баһа! Халыҡтың тормошо, тарихы. Кешенең тойғолары, хистәре, фекерҙәре, һығымталары, һөйөнөсө, көйөнөсө. Хайран затлы һандыҡ! Фольклорҙа һәр кем тап үҙенекен, нәҡ уға тәғәйенде, ул аңлағанды ғына табалыр ки. Халыҡ ижады халыҡтың үҙен, донъялағы нисә-нисәмә милләт араһынан кемлеген төшөндөрә бит. Тәрәнгә ҡарау киләсәккә бағыу мөмкинлеген дә бирә. Ә тәрбиә һуң!? Ә әхлаҡ һуң!? Быларҙы әлеге ижад күмәртәләп тарата, ботлап һеңдерә.

Тел тураһында айырым әйтергә кәрәк. Шулай тигәндә, эпостарыбыҙ киңлегенә үк иркенләмәй, ҡыҫҡараҡ, көнитмешкә яҡыныраҡ жанр – мәҡәл, әйтемдәребеҙҙе миҫал итеү ҙә етә: урынлы ҡулланғанда уларҙың телмәрҙе ни тиклем балҡытып ебәргәнен өҫтәмә белдереп торайыҡмы икән!? Ә күпмеләренең Тыуған илде һөйөүгә өндәгәнен, бөтә булған изге төшөнсәләрҙе әләм итеп күтәргәнен беләбеҙ. Бөгөн өҫкәрәк сығарылырға ниндәйҙер дәрәжәлә, танмайыҡ, мохтаж ватандарлыҡ тойғоһо ла бит халыҡ ижадында ныҡлы тамырлана – ил һаҡлау, батырҙар тураһындағы әҫәрҙәрҙең үҙҙәрен генә түгел, жанрҙарын теҙеү өсөн дә ваҡыт күп кәрәк. Бына шундай мәртәбәле өлкә ул фольклор – халыҡ ижады вә аҡылы.

– Декоратив-ғәмәли ижад тураһында бөгөн булыр һүҙ, – тип дауам иттем. – Тамыры латиндан: «деко» биҙәү мәғәнәһен бирә – артабан шулай тиербеҙ ҙә. Википедия: «Һынлы сәнғәттең утилитар нәфис функциялы художестволы әйберҙәр етештереүгә йүнәлтелгән киң бүлеге», – тип асыҡлай. Йәғни, нимәлер, беренсенән, күркәмләндереп яһала, икенсенән, көндәлек тормошта ҡулланып булмалы күркәмлек ул.

Ошо өлкәне лә оло кимәлгә сығарҙыҡ, сөнки ниндәйҙер кәсептәрҙең бәҫе, нефть менән газға ҡарағанда, бәлки, түбән баһаланһа ла, рухи көсө ҙур. Шулай тигәндә тарихилыҡ, матди мәҙәниәт, этник тамырҙар, милли үҙенсәлектәр һәм башҡалар күҙҙә тотола. Ә милли тамырҙарҙың һәр эштә лә ныҡлыҡ биргәне асыҡ. Ул ғынамы – иҡтисад әллә күпме алға һикерһә лә, рухи яғы наҡыҫ илдең бер яғы барыбер ҙә китек. Үҙенә хөрмәт дәрәжәһе шунан да тора.

Ошоларҙы әйттем. Быны киң мәғлүмәт сараһына ҡуйылған бөгөнгө талаптарға, айырыуса – көнбайыш традицияларына артыҡ таянып ҡуйылғандарына, тура килеп етмәүе лә ихтимал: йәнәһе, аҡыл өйрәтелмәһен – ликбез дәүере түгел, ләкин, беренсенән, тәрән төшөндөрөү ҡануни тыйылмай, икенсенән, үҙенсәлек тә булырға тейеш, өсөнсөнән, хәбәрсе тип аталһын ғына ул, ә ысынында тәрбиәсе лә булһын, минеңсә. Дүртенсенән,

бынығы ла мөһим – шул иҫәптән журналистикала ла форма ла, йөкмәтке лә төрлөлөгө ныҡ кәрәк, ошо сыбарлыҡ менән сабырлыҡ дөйөм камиллыҡҡа килтерә, тип уйлайым.

## Ярҙам иләге

Бына – икенсе бер тапшырыуҙа белдергәнем.

– Төп һүҙ алдынан граждандар йәмғиәтенең нимәлеген ҡабаттан ҡарайыҡ, сөнки тапшырыуға сығарылыр мәсьәлә менән уның араһында бәйлелек шикһеҙ, сикһеҙ көслө. Рәсми телдә был – «Азат граждандарҙың һәм коммерциялы булмаған йүнәлештә үҙ ирке менән формалашҡан, дәүләт хакимлығы менән эшҡыуарлыҡтың тура ҡыҫылыуынан, башҡа тышҡы факторҙарҙан ҡурсаулы ойошмаларҙың үҙ-үҙен күрһәтеүе өлкәһе». Йәмғиәттең сәйәси системаға талаптары һәм уға ярҙамы иләге, тип тә нарыҡлана. Артабан китһәк, граждандар йәмғиәте – кеше хоҡуҡтары яҡланыуы гаранттарының береһе. Граждандар йәмғиәтен үҫтереү – хоҡуҡи дәүләт төҙөүҙең ифрат мөһим нигеҙе һәм уның тиң хоҡуҡлы ише лә бит. Илдә граждандар йәмғиәтен тағы ла көсәйтергә кәрәклек йыш белдерелә, тимәк, тура демократия механизмдарын киләсәктә лә киңәйтеү, граждандар активлығының ғәйәт ҙур потенциалын тулы асыу, идеялар ярышын тәбрикләү хәжәт.

Граждандар йәмғиәтенең үҙ-үҙен көйләргә тейешлеген дә күләгәлә ҡалдырмайыҡ: ошо тиклем юғары кимәлгә күтәрелеү, даими маҡсат, оло үр, изге ниәт һәм башҡа һәйбәт сифаттар менән билдәләнеп, дөйөм ынтылыш һөҙөмтәһендә тормошҡа ашырылһа – бик арыу. Шулай тигәндә тормошта дәүләттең бурыстарҙы тап дәүләт булараҡ ҡына хәл ҡылыуы дөрөҫлөгө, муниципаль хакимлыҡтың да өҫтөнә һалынғанды ғына үтәүе хаҡлығы күҙҙә тотола – ҡалғанын йәмғиәт, мөмкинсә, ҡануниәткә тулы ярашлы, үҙе башҡарһын. Дәүләт ошоноң яҡлы, теләк иғлан ҡылына ла килә, әммә функцияларҙың күпләп аҫҡа төшөүе, ҡабул ителеүе тураһында әйтергә иртәрәк – миҫалға урындағы үҙидараны ғына ла атау етә.

Быларҙы беҙ, ҡабатлайбыҙ, Конституцияға, ғөмүмән, ҡануниәткә тулыһынса тура килгән ниндәйҙер яңы йәмәғәт ойошмалары барлыҡҡа килеүенә йәмғиәттең үҙендә ыңғай ҡараш булырға тейешлеккә тағы бер мәртәбә баҫым яһау маҡсатында белдерҙек.

Шунан әңгәмәгә тотондоҡ.

Ғөмүмән, граждандар йәмғиәте мәсьәләһе үҙемә ныҡ яҡын – махсус та, ирекһеҙҙән дә, һүҙ ыңғайында ла ярайһы йыш телгә алам. Мәҫәлән, Википедияла ирекмәнлек менән шөғөлләнеүҙе – ошолай ил эше менән бер тинһеҙ булышыуҙы, ана шул граждандар йәмғиәтенең кескәй, әммә камил үрнәге, тип атағаным булды.

## Ураy юлдар әҙләмә

Юлдар тураһында һөйләшер алдынан да тыңлаусымды мәсьәләгә мәжбүри тиерлек әйҙәгәнем, быны иҡтисади, социаль өлкәлә генә ҡалдырмай, әхлаҡи юғарылыҡҡа ла күтәргәнем бар.

– Яҡшы ла был: илдә юлдар оҙон, айҙар буйы барырға мөмкин; яман да: тотош таҡырлыҡ тураһында әйтеп булмай, – тинем. – Таҡырайтырға теләк һаман көсәйһә лә, ҡаҙнанан сығым сағыштырмаса арыу бүленһә лә, эштәр даими башҡарылһа ла, камиллыҡ – ҡайҙалыр алыҫта, томан аръяғында. Сәбәптәре күп атала: сифатһыҙ проектлау, йүнләп ҡарамау, төҙөлөш материалдарының хөртлөгө, әле әйтелгән дә инде география – мәсәлән, 60 процент – мәңгелек туңлыҡта, йәнә лә системалы контролдең етешмәүе, артыҡ ауырлыҡ һәм башҡалар.

Бөтәһе лә мөһим, һәр береһенең өлөшө мул, әммә бөгөн һуңғыһын, ауырлыҡты, айырып ҡарайыҡ. Сөнки хайран мөһим мәсьәлә, ошо өлкә эсендә генә ҡалмай, ижтимағи кимәлгә лә күтәрелә. Һәм эш – бына нимәлә.

Юлдар тураһында һүҙ сыҡҡанда башта сифат ҡалҡыусан. Артынса, бәғзе осраҡта тәүҙә үк, хәрәкәт тығыҙлығы белдерелә. Артабан инде, ҡатмарлылыҡ тыуҙырыусы булараҡ, оҙон йөк машиналарына эйәк ҡағыла. Ижтимағи мәсьәлә, тип тә тамсы бүрттермәй әйтелде – фура менән еңел автомобилдең хоҡуҡтары (уларҙы ошолай йәнле итеп алайыҡ) төрлө булһа ла, тәүгеһенең үҙен, башлыса, өҫтөн, хатта һауалы тотҡаны асыҡ. Хикмәт әллә нисәмә мәртәбәгә ҡалҡыуыраҡ булыуында ғына ла түгел – хужа төҫөндә ҡабарыуында. Йәнәһе, «бәләкәстәр» ҡунаҡҡамы-ҡайҙа бара, бушты бушҡа ауҙара, ә мин – эштәмен: ал юҡ, ял юҡ – һеҙҙең өсөн ташыйым, әйткәндәй, тауарҙы. Шулай, ләкин, беренсенән, билдәле романыбыҙ атамаһын ҡулланып, һайлап алған яҙмышына ишаралайыҡ, икенсенән, эшҡыуарлыҡ был – файҙа алаһың даһа һәм килемде мул төшөрөү теләге лә әйҙәй һине. Шулай булғас, тиң хоҡуҡлылыҡ һәм бурыслылыҡ ҡына булырға тейеш: ниңә әле кемдер, юлды боҙһа ла, майҙанды күберәк биләһә лә, тимәк, башҡаларға ҡамасаулаһа ла, шул уҡ хаҡты түләй?..

Ғәҙелһеҙлекте бөтөрөү, исмаһам, кәметеү маҡсатында хөкүмәттең ҡарарҙары ла сыға тора. Иң билдәлеһе – түләү индерелгәне, ләкин уныһының да, шау-шыу арҡаһында, тәүҙә уйланылған кимәлдән төшкәне мәғлүм. Йәнә лә артыҡ ауырлыҡ боҙа юлды – 44 тонна урынына 146 тонна тейәүҙе нисек аңламаҡ вә аҡламаҡ кәрәк?..

Мәсьәләне әхлаҡи юҫыҡта ла ҡарарға мөмкин: һөнәреңде йәһәт аҡса эшләү ысулы итеп кенә күрмә, был һине тәртип, тәүфиҡ сиктәренән сығармаһын. Дәүләттең, тейешле бөтә процедураларҙы үтеп, көсөнә ингән закон нормаһы бар икән – һүҙһеҙ үтә, урау юлдар эҙләмә. Быны ла әйтмәй булмай, сөнки йөк контроле пункттарында туҡтамай уҙыусылар ҙа юҡ түгел. Кемгәлер ялланып, әйтәйек, ҡырсын ташыйһыңмы? Хуп, ләкин, ике йөрөмәйем тип, аштырма, өҫтөн, әйткәндәй, һәйбәтләп ҡапла – юлға, тимәк, башҡаларға, осмаһын.

Ошондай әңгәмә алды сығыштары, икенсе төрлө әйткәндә, – һәйбәт йүнәлткестәр ҙә, юл йүнәлешен күрһәтеүсе билдәләрҙер хатта. Ә инде уларының ҡағыҙәләрҙә теркәлгәнен, үтәмәгән өсөн яза ҡаралғанын иҫәпкә алғанда, инеш һүҙҙең бәҫе бөтөнләй артып китә.

## *Минең дә һүҙем кәрәк*

Эш урыным буйынса эфир хәбәрсеһе булһам да, баҫма журналистиканы ла ныҡ яҡын күргәнемде йәнә асыҡлап торайыммы икән? Уны ла хайран хөрмәт итәм һәм ҡағыҙлы матбуғатта ҡатнаша килеүем менән дә раҫлана был. Ихтирамым яурынға яуаплылыҡ та һала – шуға мәсьәләне, яйы табылған һайын, радио тулҡындарына ла сығара йөрөйөм. Маҡсатым – тираж йыйнауҙа ярҙам итешеү, һәм ул ғәҙәти өгөтләү аша ғына башҡарылмай: башта әйтелгәнсә, мәсьәләнең әрсәһенә ынтылына, сөнки бында ла, тапшырыуымдың формаһы интервью, әңгәмә булһа ла, минең дә һүҙем кәрәк.

– Боронғо ла, бөгөнгө лә ҙур эш тә, аптырарлыҡ күренеш тә – гәзит-журналдарға яҙылыу тураһында һөйләшер өсөн астыҡ студияны, – тинем 2018-ҙең ҡышында. «Эш тә» һәм «күренеш тә» һүҙҙәрен махсус уйлап, һайлап алдым – рифмалылыҡ кәрәк ине. – Илдә ижтимағи-сәйәси ҡоролош бөтөнләй икенселәнһә лә, яҙылыу һаҡланып килә һәм дөрөҫ тә, тигән уй ныҡ. Сөнки, дөйөм алғанда ла, тотош донъяны күҙҙә тотҡанда ла, йолаларҙың, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең онотолмауы, үткән менән әлегенең һыйышып йәшәүе оло ихтирам уята. Иҡтисадтың үҙ закондары – йолалармы, традициялармы нормаларына йыш ҡына тура ла килмәй, әммә, мөмкин булғанда, уҙғандар тәжрибәһен дә файҙаланыу хаҡ. Беҙҙең илдә күңел күренеше лә был: гәзит килә, журнал килә – өйгә баҫма һүҙ инә. Ә уға ышаныу электән көслө. Бөгөн дә булһын, юғалтылмаһын, юғары сифатҡа дәлил ул. Аптырарлыҡ та, тиелде бая һәм был шунан – яҙылыу йылдан-йыл кәмей, айырыуса милли баҫмаларҙы алдырыусылар әҙәйә. Ҡиммәт тә түгел, осһоҙайтыуҙың төрлө ысулдары ла табыла тора, ләкин хәлде яҡшыға ҡырҡа үҙгәртерлек түгел. Телде үҫтереү хаҡында йыш белдерелә, ә быны, матбуғатҡа яҙылып, шәхсән башҡарыу һирәгерәк.

Кампанияға иғтибар иттереүҙең бер сараһы ошо көндәрҙә лә бара – йылдың икенсе яртыһына, тимәк, ваҡытынан алда, яҙылыу башланды. Бының тәртибе лә, хаҡтар ҙа шул килеш ҡала.

Редакцияларҙың үҙ эшмәкәрлеге лә мөһим. Ысулдар иҫке булһа ла, йөкмәтке яңыса булырға тейеш, әлбиттә. Ә нисек һуң заманса булырға? Ғөмүмән, баҫма һүҙ, әйтәйек, әҙәби әҫәрҙәр гел генә көн ҡаҙағына һуғып тора аламы? Һатылһын өсөн баҙар әйбереме ул гәзит менән журнал?

Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптарҙы артынса башланған әңгәмәлә мотлаҡ ҡайтара һораным.

## *Күп һыйҙырышлы әҙлек*

Төп маҡсаты әлеге аңлатыу, мәсьәләнең үҙегенә ҡарау булған шундай әңгәмә алды монологтарыма төрлө тыңлаусымдың үҙенсә мөнәсәбәтле икәнен дә, әйҙәгеҙ, йәшермәйем. Эйе, быны артыҡҡынғандар ҙа барлығын беләм һәм, иғтибар ителһен, хөрмәт менән ҡарайым – тимәк, улар – фекерле замандаштарым, шәхсән позициялы тыңлаусыларым, төп, ҡаймаҡлы мәғлүмәттең генә мөһимлеге яҡлылар. Ләкин бындайҙар әҙерәк, тип уйлайым, ә күпселек хуплай – һәр хәлдә шулай тип белдерелә килә. Ул

ғына ла түгел, инеш һүҙемде тыңлау менән генә сикләнгәндәрен тура әйткәндәре лә булды: шул етә, артабан тыңларға ваҡыттары ла юҡтыр, бәлки. Быға ла ихтирамлымын, сөнки ошо «ҡыҫҡа ҡолаҡтар» араһында, бер ни тиклем дәрәжәлә, үҙемде лә күрәм – ҡайһы саҡ тапшырыуҙың анонсын тыңлау йә күреүҙән ашыуы кәрәкмәй ҙә. Сифатлы эшләнһә – быныһы ҡаты шарт.

Инеш һүҙҙең тағы бер бөйөклөгө – үҙ өлкәһендә тәнҡит тейгеһеҙ оло белгес булһа ла, теләгәнен киң тыңлаусы алдында, башҡорт телендә, күп һыйҙырышлы әҙ һүҙҙәр менән, теүәл әйтә алмауы ла ихтимал һәм был иҫбатлана ла килә. Шуға күрә мәсьәләгә инеүҙе хәбәрсе башҡарһа, һәйбәт, тигән шикһеҙ фекерҙәмен.

Йәнә лә шул: нисәнсегә ҡабатлайымдыр инде – инеш һүҙ тапшырыуға иғтибарҙы йәлеп иттереү өсөн дә арыу. Сөнки, фәнни лексикаға төшмәй генә белдергәндә, радиотапшырыуҙа башта шулай ҡолаҡтарҙы ҡарпайттырыу, уртала – диҡҡәтте тотоу, аҙаҡта иҫкә һеңерлек йомғаҡ яһау мотлаҡ. Ана шул баш менән уртала, хәйер, аҙаҡта ла инде, йөкмәтке генә түгел, ә, бәлки, унан да бигерәктер әле, форма, был осраҡта – тел мөһим. Ҡабаланһаң да, көндәлек, ябай тапшырыуҙарҙың береһе генә булһа ла, фондҡа һалыу, аҙаҡ ҡабатлау планлаштырылмаһа ла, сценарийыңды, хәлеңсә, образлы яҙ.

– Яңы йылда – яңыса, тине елле, һалҡын тауыш менән тәбиғәт һәм айҙан ашыу ҡыҫып йыйнағанын, 31 декабрҙәге өймәләм табын ише, бер юлы ауҙарҙы, – тип әле әйткәнемде сираттағы тапҡыр тормошҡа ашырырға тырыштым 2018 йыл башында. Иҫләйһегеҙҙер: 8 ғинуарҙа, каникулдан һуң тәүге эш көнө ине, яман буран ҡупты. Тап «ҡупты» тиеү дөрөҫ, сөнки 2017-нең ноябре менән декабрендә ҡар нисә генә бөртөк төштө икән... – Кеше тыуған ере менән (йәки киреһенсә – төшөнсәләрҙең урындарын алмаштырып белдерергә лә мөмкин – сумма үҙгәрмәй) халыҡташ ҡына түгел, холоҡташ та, тип нисек әйтмәйһең инде шунан: булғанда – бүреләй, булмағанда – сүреләй.

Самаһыҙыраҡ та булыусан яңы йыл өҫтәленә ишараланды шулай.

– Тәү ҡарашҡа көнкүреш тип баһаланырлыҡ ошо мәсьәләне лә, сәйәси үк булмаһа ла, ижтимағи кимәлгә мендереүебеҙ бер бөгөн түгел, – тип теҙҙем артабан. – Сәбәбе алдараҡҡы сығыштарымдың береһендә нигеҙләнелгәйне лә инде – сөнки, был юлы ябайыраҡ бәйән ҡылғанда, донъяла ваҡлыҡтар юҡ. Булғандары, күпселектә, ҙурлыҡтарҙы тотоп тора, ә киреһенсә тимәйексе. Етмәһә, юлдар, урамдар, майҙандар, хатта кескәй генә сауҙахана һикәлтәһе лә, хужаһы ҡырҡа бүтән фекерҙә булыуға ҡарамаҫтан – ижтимағи мәсьәлә. Дөйөм ҡулланылышта булғанға шулай. Һөҙөмтәлә, беренсенән, фекер алышыуға ҡуйыла ала, икенсенән, позитив күпселектең ҡарары үтәлһен: кәмендә, оялыпмы, штрафтан хафаланыпмы, күтәрмәңде, эргә-тирәңде мәлендә көрә.

Сәйәси үк түгел, тип баҫыра ҡуйылһа ла, көнитмеш мәсьәләләре бәғзе осорҙарҙа үҙҙәре лә башын ҡалҡыта. Тәбиғи ҙә күренеш был. Осорҙарҙың иң сағыуҙары – һайлау алдары, әлбиттә, һәм быйыл, 2018-ҙә, шундай ике осор ғынамы – мөһимлек яғынан ҡарағанда тотош дәүерҙәрҙең, көтөлгәне, тәүгеһенең, Президент һайлау кампанияһының, асылда башланыуы ла, ә Башҡортостанда көҙ республика парламенты һайланасағы мәғлүм. Сағыу,

сөнки программаларҙағы ылыҡтырғыстар, башлыса, нәҡ көнкүреш тирәһендә әйләнә, сәбәбе – аңдың йәшәйеш тарафынан билдәләнеүендәлер инде барыбер ҙә.

Ҙур һүҙҙән йөкмәткелерәк бәләкәскә төшәбеҙ артабан: тәғәйен ҡалаға – мәркәз Өфөгә, уның ҡар бөркәлеүҙән асыҡлығы кәмегән йөҙөнә, һандарға. Шулай уҡ – ниәттәргә лә һәм тапшырыуыбыҙҙы көтөлгән проекттар буйынса йәмәғәт тыңлауы, тип тә атарбыҙ ниндәйҙер дәрәжәлә.

Шулай тинем. Һәм, минеңсә, эфирға сығарған һүҙеңде, кәрәк булғанда, нигеҙләй ҙә барыу хәжәт: һин һорау бирәһең дә ул, һиңә һорау ҡалмаһын.

## *«Хатта әйбәт»*

– Рәсәй фәне көнө үтте кисә. Шул турала һөйләшәйек тә бөгөн, – тип астым сираттағы тапшырыуымды. Бая әйтелгән рифмалыҡҡа ынтылған ише, һүҙ уйнатыбыраҡ башҡарҙым: һөйләм махсус икәүгә бүленеп, тәүгеһе «кисә» менән тамамланды, арыһы «бөгөн» менән башланды. Иғтибар тартыуҙың, еңелсә йәбештереп алыуҙың үҙенә күрә ысулы – ошо ла, тип уйлағандан шулайттым. Һәм күрше һөйләмдәрҙең синтаксик яҡтан бер төрлө osланыуы хилафлыҡ рәүешендә ҡабул да ҡылынмағандыр. Быны булдырмауҙа, әйткәндәй, эфир журналистикаһының мөмкинлеге киңерәк – әлеге ике һүҙҙе интонация менән айырып була һәм шулай ителде лә. Йәғни мантиҡ баҫымы, белеп ҡулланғанда, сәпкә атҡандай, теүәл, кәрәкле урынына ғына төшөргәндә, ҡайһы бер замандаштарым әйтмешләй, «хатта һәйбәт». Төҙ тейеү тураһында ла матурлыҡ өсөн генә өҫтәмәнем – ҡыйыш атыуҙар, ныҡ йыш булмаһа ла, бар. Радио һәм тележурналистикала быны ифрат мөһимлеген бик ҙур нәмәләргә, хатта йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлеккә үк, тиңләйем мин: баҫымдың, тимәк, иғтибарҙың, беҙҙең осраҡта – һөйләмдең тейешле ағзаларына түгел, ә яңылыш ҡуйылыуы тотош мәғәнәне үҙгәртеүсән. Мантиҡ баҫымының ғәйәт мөһимлеген, күп миҫалдар менән, 2013 йылғы «Имен-аман тороғоҙ!» китабымда яҙғайным инде, әлегә ошоноң менән сикләнәйем.

– Ни өсөн 8 февраль? – тип дауам иттем баяғы «Асыҡ студия»ла. – Рәсәй Фәндәр академияһы ойошторолоуға бәйле: 1999 йылда, Ельцин дәүерендә әле, академияның 275 йыллығы айҡанлы, билдәләнә башлай. Билдәләнһен дә – фәнгә иғтибар йүнәлтелә ошолай, ул виртуаллектән ысынбарлыҡҡа яҡыная. Донъяны үҙгәртеү мөмкинлеге лә, хәүефле көсө лә бар үҙенең: теорияһан практикаға күсеп, тормош шарттарының яҡшырыуына килтерһен, донъяны танып-белеүҙе еңелләштерһен, бар нәмәне камиллаштырһын, ләкин кешелектең йәшәү, үҫеү, әхлаҡи нигеҙҙәрен ҡаҡшатмаһын – сама белгән сайҡалмаҫ.

Фәндең даими алға барғаны тормошта сағыла ла бит – быға диҡҡәт ҡылмау мөмкин түгел. Бөгөн ҡарашыбыҙ менән ҡолағыбыҙҙан йәшерен нәмәләр, лабораторияларҙа бешеп кенә килгәндәр ун – ун биш йылдан көнкүрешкә ҡыйыу килеп тә инер. Кешелек бит, ана, телепатияны ысынбарлыҡ тип ҡабул итергә әҙер, тиерлек – кәмендә яһалманы, кешене компьютер менән тоташтырғанын: ғалимдар компьютерға уйҙағы бойороҡтарҙы биреү технологияһын тапты ла баһа. Ә вакуум поездары?

Торба эсендәге поезд осҡостан ике тапҡыр етеҙерәк елдерһен әле! Үҙе йөрөгән автомобилдәр әле үк тә бар. Һәм башҡалар, һәм бүтәндәр. Ләкин, ҡабатлап әйтәйек, әҙәмгә зыян ғына килмәһен – мәҫәлән, күпме йөрөтөүсенең эшһеҙ ҡалыуы ихтимал. Донъяның барыбер ҙә түңәрәк икәнен иҫтә тотоу ғына тынысландыра – бушаған урын шундуҡ икенсе менән биләнә – яңы һөнәрҙәр барлыҡҡа килә. Уларҙы бөгөн үк өйрәнә, ошоға әҙерләнә башларға кәрәклек һис яңылыҡ түгел.

## *Нигеҙле ҙурлыҡ*

– Башҡортостанда бөгөн парламент көнө – Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың айға бер үткәрелгән ултырышы уҙҙы, – тип белдергәндән һуң да әле әйтелгән һүҙ уйнатыуҙың бер ысулын ҡулландым. – Был, минеңсә – тапшырыуға алырға ҙур нигеҙ. Нигеҙ ҙур, сөнки ижтимағилыҡ та, сәйәсилек тә, тәү нәүбәттә, ошонда, закондар сығарыу урынында, бергә туплана бит, – тинем. Һәм бында төп объекттар – «ҙур» һәм «нигеҙ» һүҙҙәре ине. Уларҙы мин ике һөйләмдә, ләкин йәнәш, алмашлап, урынлаштырҙым. – Уртаҡ майҙанда йыйылғас, етешһеҙлектәр асығыраҡ күренә, һөҙөмтәлә хәл ҡылыуға ыңғайлатыу ҙа еңелерәк, – тип дауам иттем. – Ижтимағилыҡ тигәндән, граждандар йәмғиәтендәге проблемаларҙың, түбәнерәк кимәлдә сиселмәгәндә, закон рәүешенә еткерелгән, тимәк, мотлаҡ үтәлергә тейешле хәлгә килтерелгән, дәүләт органы булһа ла, ысынында уның менән йәмғиәт араһындағы тотош бер тармаҡ ул. Быны тәфсирләп белдерәбеҙ, сөнки йәмғиәт үҙенең закон сығарыу башланғысы алдында тора алғанын гел генә иҫендә тотмай – мәҫәлән, асыҡ фекер алышыуҙарҙа ихлас ҡатнашмай, быға ныҡыш өндәленгәндә лә тәҡдимдәрен яҙмай, ә аҙаҡ, уның ихтыярынан тыш, тыуған законды хушһынмаҫҡа ла мөмкин. Йәмғиәт менән дәүләт араһы тиелгәндә депутаттарҙың һайланғанына, йәғни күпселектең тауышын йыйғандан һуң ғына ошо статусҡа күтәрелгәненә, ишаралана.

## *Дуҫтарса ғына*

– Архив тармағына бәйле мәсьәләләрҙе һалайыҡ бөгөн уртаға – ул да ифрат мөһим, – тип башланған эфирымдың да артабанғы һүҙҙәре һис тә өҫтән аҫҡа ҡарамай, дуҫтарса ғына төшөндөрөү булды. – Тәү мәғәнәһе – «хакимлыҡ», әйткәндәй, – тинем, һәм был минең өсөн дә яңылыҡ ине. – Немец теле аша латиндан ингән, ә уға, ғәҙәттәгесә, гректан күскән. Йәғни, төп асылы, ә, ныҡлап баҡҡанда – йөкмәткеһе буйынса ла – башкөлләй ижтимағи-сәйәси өлкә төшөнсәһе. Дөйөм алғанда, һүҙҙе ҡыҫҡа тотҡанда – документтарҙы артабан файҙаланыу маҡсатында уларҙы ҡабул итеү, системаға һалыу һәм һаҡлау ойошмаһы. Төрҙәре бик күп: ойошмалар архивтары, тарихи архивтар, төбәк архивтары һәм башҡалар. Рәсәй Федерацияһы Дәүләт архивы барлығын беләбеҙ. Шәхси архивтар ҙа эшләй.

Мәсьәлә тапшырыуға йәнә шуларға таянып та сығарыла. Беренсенән, 10 мартта Архивтар көнө билдәләнде. Сағыштырмаса яңы һөнәри байрам – 2003 йылда ғына барлыҡҡа килгән, шулай ҙа тамыры тәрәнгә китә: 1720 йыл мартының унынсы көнөндә Петр Беренсе батша «Генераль регламент йәки Устав» тигән Рәсәйҙәге тәүге дәүләт актына ҡул ҡуя. Фарманда дәүләт

идараһы нигеҙҙәре теркәлә, дәүләт хакимлығының һәммә органдарында ла актуариус (архивариус) вазифаһы булдырыла. Шунан һанала хеҙмәт тарихы. Икенсе нигеҙ – Рәсәй Архив хеҙмәтенең 100 йыллығы: 1918 йылдың 1 июнендә Халыҡ Комиссарҙары Советы «РСФСР-ҙа архив эшен үҙгәртеп ҡороу һәм үҙәкләштереү тураһында» декрет ҡабул итә. Мәғариф наркоматы ҡарамағында Архив эше буйынса Баш идаралыҡ ойоштороала. Унан бирле хеҙмәттең исеме бер нисә тапҡыр икенселәнә, 2004 йылдан – федераль архив агентлығы. Рәсәй Федерацияһы Архив фонды – XI быуаттан башлап йыйылған ярты миллиардтан ашыу һаҡлау берәмеге ул.

## *Бел!*

Тарихи темаларға тапшырыуҙарҙы, мөмкинлеккә ҡарап, йыш эшләргә тырышам – йәһәт иғтибар даулаған бөгөнгөләр менән дә эфирҙы биләйем, сөнки янып барған мәсьәләләр тап бөгөн өсөн генә мөһим, ә үткәндәрҙә ҡалғандар шунда барыбер ҙә ныҡынған, уйылған, онотолмаған икән – быға нигеҙ ҡаты.

– Сағыштырмаса яңы тарихҡа бағабыҙ, – тип асыҡлап, уның фән булараҡ та, дөйөм ғилемдең бер мөһим өлкәһе сифатында ла ҡаралаcағын хәбәр ҡылдым. – Диҡҡәт шулай ҙа икенсеһенә күберәк бүленер, сөнки тапшырыуҙың форматы ғилми конференция йөкмәткеһенән ныҡ айырыла. «Ни өсөн тарих?» тигән һорау тыуа ҡалһа, яуап былай: үҙен заманса тип баһалаған һәр кем был диңгеҙҙә иркен үк йөҙмәһә лә, бәғзе тәрәнлеккә сума алһынсы – исмаһам да мөһим даталарҙы, ваҡиғаларҙы аңғарһын. Бында тыуған ереңдең дә уҙғандарын күләгәлә ҡалдырмау мең хаҡ: һин дә белмәгәс, кем һуң белһен? Көҙгә тартым көн торошо ла киң, ҡабаланыуһыҙ фекер алышыуға йайлы һәм уңайлы. Етмәһә, Башҡортостан ойошторолоуҙың 100 йыллығына яҡынаябыҙ. Яҡынлау 1919 йылға, уны тау итеп күҙ алдына килтерһәк, итәгендәге күренештәргә айырым бағыу аша ла башҡарылырға тейеш бит. Был мөһим эште тәрәнерәк аңларбыҙ шунда. Тәрәнерәк төшөнөү бөгөнгөнө асыҡлау, ә тимәк, киләсәккә күҙ һалыу мөмкинлеген дә бирер. Фекер яңы түгел, шуға оҡшаштың бынан алда ла белдерелгәне булды, әммә, дөрөҫ тигән уйҙа ныҡ торолоу арҡаһында, бына, йәнә ҡабатланды. Үткәндәрҙе сүпләгәнсе, бөгөнгөнө ипләү, унан да бигерәк киләсәкте хәстәрләргә кәрәк, тиеүселәр ҙә бар арабыҙҙа һәм, ғәжәпләнелмәһен, улар менән дә килешәм – бөгөн яңынан тыуып, йәш кәр-көс менән йәшәй башлау һәйбәт. Әммә был, беренсенән, мөмкин түгел, ә киреһенсә, тарих, ваҡытты киҫеп үтеп, мәңгелеккә тоташа, икенсенән, ҡасанғылыр ваҡиғалар, ҙурҙан алғанда, бөгөнгөнө ысынлап та аңлата ла баһа. Быны, бәлки, юриспруденциялағы «прецедент» һүҙе менән, йәғни алдағы осраҡтың һуңынан килгәненә нигеҙ, аҡлаусы булыуын, билдәләү дөрөҫтөр? Ул ғынамы, тарихты белмәгән кешелек үҫешә лә алмай һымаҡ: ата-бабаларының ниндәйҙер хаталарын ҡабатлай-ҡабатлай бер түңәрәк эсендә әйләнәләр. Шулай бына: ҡаты әйттек, ҡатмарлы әйттек, уйлағанды әйттек.

Тарих – мәҙәни мираҫыбыҙ ҙа бит ул, ә кемдең һуң мәҙәниәтле булғыһы килмәһен.

## Етмеш йылды билдәләгән көн

Минеңсә, тарихҡа һаҡ ҡарау, күпме теләһәң дә үҙгәртеп булмау айҡанлы, йә үрнәк, йә ғибрәт алыу кәрәклеге һәр хәбәрсенең күңелендә ятырға тейеш. Ошо ҡаты инаныу, кемдер әйтә тип, яманлауҙан да аралай тороп ине һәм тора ла. Ә инде мәсьәләләргә бөтә яҡлап ҡарау – күпме фекер бар, исмаһам да, иң етдиҙәрен, тигеҙ биреү хәжәтлеге тураһында әйтеп тә тормайым.

2017 йылдың көҙөндә, тап тарихи көнөндә, эфирға сыҡҡанымда, һүҙҙе ошолай башланым:

– 7 ноябрь бөгөн һәм, дата әйтелеү менән, күпселектең, һәр хәлдә элек СССР-ҙа йәшәгәндәрҙең, күҙе алдында етмеш йыл буйы, ашыуыраҡ та әле, махсус, маҡсат ҡуйып ололанылған, был, мәҫәлән, халыҡты көҙгө бысраҡ-һалҡындарҙа урам-майҙандарға мәжбүри сығарып та башҡарылған, берҙәнбер, ләкин ана ниндәй, сикһеҙ тиерлек, хакимлыҡҡа эйә сәйәси фирҡәне данлап һөрәнләүҙәргә эйәреп ҡысҡыртылған, шуның менән бергә, ғәҙәткә инеп, ҡанға һеңептер инде, кешенең үҙе тарафынан да тантана рәүешендә ҡабул ителгән, ул саҡта юғары рух, күтәренкелек менән аталғанса, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнө баҫалыр. Яңы тарихта байрам тип белдерелмәһә лә, үҙенә баһа бөтөнләй икенселәнһә лә, ошо һүҙҙе ҡулландыҡ, ваҡиғаны ла, совет осорондағыса, тулы әйттек, инҡилап тип тәржемәләмәнек – һәр нәмә асыҡ аңлашылһын һәм һәр нәмәгә ғәҙел ҡаралһын.

Уның Советтар Союзы дәүерендә, ноябрҙә билдәләнһә лә, октябрь байрамы тип йөрөтөлгәнен дә өҫтәйек һәм сәбәбе асыҡ: түңкәрелеш иҫке стиль буйынса 25 октябрҙә тормошҡа аша, ә большевиктар илде Григорий календарына күсергәс, 7 ноябрҙә урын ала.

Ҡыҫҡаһы, теүәл 100 йыллыҡ көнө бөгөн һәм «Асыҡ студия»ны тап ошоға арнауыбыҙ мәғлүмәти яҡлап та, оло быуынға хөрмәтебеҙ йәһәтенән дә, ул тип Граждандар һуғышында башын һалғандарҙың, әлеге идеяларға ысын мәғәнәһендә инанып, Бөйөк Ватан һуғышында ҡорбан булғандарҙың яҡты хәтере йәһәтенән дә тәбиғи, хаҡ, тигән аныҡ фекерҙәбеҙ. Хеҙмәт кешеһе лә ошо ҡаҙаныштар хөрмәтенә яңы бейеклектәргә рухландырылды бит, түштәргә 25 октябрь – 7 ноябрь символикаһы төшөрөлгән бүләктәр тағылды.

Тарихты белеү ҙә мөһим, баһаһыҙ ғына ла белеү мотлаҡ: үткәнде асыҡ иҫләмәйенсә, киләсәккә төбәлеү ҡатмарлы.

## Ярлылыҡтан – барлылыҡҡа

– Төрлө форумдар күбәйеп китте… – тип һуҡранды замандашым бер заман. – Нимәгә хәжәттер шулар? Эш менән шөғөлләнергә кәрәк, йыйылышып хәбәр һатырға түгел.

– Һәйбәт булды әле, – тип ҡәнәғәтлек белдерҙе икенсе береһе яңыраҡ. – Ике көн буйы пленар ултырыштарҙа телмәрҙәр тыңланым, секцияларҙа ҡатнаштым, түңәрәк өҫтәлдәрҙең береһендә сығыш та яһаным. Йәмәғәт палатаһының нимә менән шөғөлләнгәнен аңланым – бик мөһим мәсьәләләр күтәрелде.

Үҙе ишетмәгән баяғы ризаһыҙ һорауға ситтән тороп яуап та бирҙе шулай.

Ысынлап та ла: эште, бигерәк тә ҙурын, уртаҡ һүҙһеҙ, кәңәшһеҙ башлау – хата ла баһа. Айырыуса – тотош йәмғиәт, дәүләт күләме һәм кимәлендәгене. Һәм илдең дә, төбәктәрҙең дә ошондай институттары тәғәйенләнеше, ябай әйткәндә – проблемаларҙы уртаға һалыу, фекер тыңлау, һығымта яһау, тәҡдимдәрҙе дәүләт хакимлығына еткереү ҙәһә. Әҙерләнер закондарҙың сифаты ла арта шул саҡта – үтәлерлек була, ғәҙел була. Йәғни ифрат файҙалы былдай осрашыуҙар.

– Бөгөнгө һөйләшеүҙе минең ҡарамаҡҡа ғәйәт мөһим сара – «Берләшмә» форумының һыуынып өлгөрмәгән эҙҙәре буйлап үткәрәбеҙ, сөнки унда белдерелгәндәр радио тыңлаусыларыбыҙ иғтибарына ла еткерелергә тейеш, тигән уй ныҡ, – тип башланым да быйыл 25 апрель эфирын.

Ҙур инеш әйттем:

– Рәсәй Федерацияһы Йәмәғәт палатаһы тарафынан ойошторолдо ул һәм Башҡортостанда эшләне. Төп ултырыштары Өфөлә, “Торатау” конгресс-холында, барһа ла, быны әле асыҡлап әйтмәнек, сөнки ҡатнашыусылары республиканың, мәркәздең башҡа урындарында ла булды. Яҡшыраҡ аңлашылһын өсөн федераль кимәлдәге ошо палатаның 1994 йылда барлыҡҡа килгәнен, «Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Йәмәғәт палатаһы» тип йөрөтөлгәнен, өҫтәйек. Әлеге рәүеш һәм йөкмәткеләгеһе 2005-тән эшләй. 2012-гәсә ике йылға бер һайлана ине, хәҙер – өс йылға. Былтыр июндә яңыһы формалашып бөттө. Йәмәғәт палаталарының төбәктәрҙә лә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, барлығы мәғлүм, һәм беҙҙең палата форумды уҙғарыуҙа яҡындан ҡатнашты.

– Сара шулай һәр федераль округта уҙғарыла килә, был юлы Волга буйы вәкилдәре йыйылды. Кисәге тәүге пленар ултырыштың йөкмәткеһе «Социаль ғәҙелһеҙлек һәм лайыҡлы тормош» тигән ярайһы ҡыйыу атамаһына тура ла килде, – тинем артабан. – Модераторы, ә ул палата секретары үҙе булды, ҡырҡыу проблемаларҙы йәшермәҫкә, һорауҙарға яуаптар табырға кәрәклекте асыҡ әйтте. Уның фекеренсә, төбәктәрҙәге хәл ифрат мөһим, бөтә нәмәнең Мәскәүҙә тупланыуы дөрөҫ түгел. Ғөмүмән, социаль ғәҙелһеҙлек иҡтисади үҫеште тотҡарлай, тиелде һәм быға кире миҫалға Европа дәүләттәренең Икенсе донъя һуғышынан һуң тиҙ аяҡҡа баҫҡаны килтерелде – сөнки кешенең табышы йылдам күтәрелә. Оло компания етәксеһе менән ябай эшсенең хеҙмәт хаҡы араһындағы ҙур айырмаға ла иғтибар ителде һәм модератор ошоға залдың фекерен һораштыы. Махсус пульттар таратылғайны, шуның ярҙамында әлеге айырманың нисә тапҡыр икәне буйынса тауыш бирә алдыҡ.

– «Берләшмә» форумы ошоғаса Әстрханда булғайны, беҙҙән һуң Ханты-Мансийск, Томск, Тула, Калининград, Южно-Сахалинск килә. Йомғаҡлау сараһы 2 – 3 ноябрҙә Мәскәүҙә үткәрелә, – тип асыҡлыҡ индереүҙе дауам иттем. – Ошонан сығып илдә граждандар йәмғиәтенең торошо тураһында йыллыҡ доклад эшләнәсәк. Өфөләге кисәге-бөгөнгө эш тә, ҙурҙан алғанда, ошоно билдәләүҙән ғибарәт ине: коммерцияға ҡарамаған берекмәләр вәкилдәренә түңәрәк өҫтәлдәрҙә сығыш яһау, проблемаларҙы атау, тәжрибә уртаҡлашыу өсөн мөмкинлек киң бирелде.

Быңдай инеш һүҙҙәрҙә, минеңсә, дөйөмлөктән шәхсилеккә тарта төшөү, шаһитлыҡты белдереү хаҡ, сөнки ныҕыраҡ ышандыра.

Шулай тинем дә:

– Миңә ауыл биләмәләрен үҫтереү, киң мәғлүмәт саралары эшмәкәрлегенә арналған һәм төркөмлө социаль низағтарҙы урындағы берләшмәләр вәкилдәре ҡатнашлығында хәл итеү тәжрибәһе ҡаралған секцияларҙа булыу мөмкинлеге тейҙе. Аграр өлкәлә кесе хужалыҡтарға иғтибарҙы көсәйтеү, сеймал түгел, ә тауар етештереү кәрәклеге белдерелде. Юғиһә, иген тәңгәлендә һуңғы арала, көтмәгәндә, заманында капиталистик мәмләкәттәргә хас, тип әрләнелгән күренеш – артыҡ етештереүгә осраныҡ: былтырғы муллыҡ республикала ла уға былай ҙа түбән хаҡты уғата шыйыҡайтты. Иген, икмәк беҙҙә – тауар ғына түгел, изге төшөнсә, әммә алдан фаразламау, кеҫәгә һуғып, уның баһаһын үҙгәртә лә ала икән. Шуға күрә иҡтисади шарттарға яраҡлашыу, мәңге тайпылмаҫ тойолған фекереңдән дә шыла төшөү – ят булһа ла, аҙаҡ табышлы һатып булмалы культуралар менән шөғөлләнеү дөрөҫ барыбер ҙә.

– Киң мәғлүмәт саралары буйынса секцияла улар менән коммерция булмаған берекмәләр мөнәсәбәттәре ҡаралды, һәм тәүгеләрендә был өлкә лә сағылыш табырға тейеш, әлбиттә, сөнки әлеге ойошмаларға гранттар бик күп бүленә – йылға 7 миллиард һум, ҡайҙа киткәне халыҡҡа билдәле лә булһын, – тинем. – Шуның 3 проценты киң мәғлүмәт сараларына бирелгән майҙан өсөн түләүгә тотонолһа ине, тигән тәҡдим дә иғлан ителде, әммә киң хуплау тапманы. Әлеге ойошмаларға медиа өлкәһендә үҙҙәренең өлөшөн эҙләргә, йәнә лә виртуаль селтәрҙәрҙе ихласыраҡ файҙаланырға тәҡдим ҡылынды.

– Социаль низағтар, тигәйнек. Ошоға арналған һөйләшеүҙең маҡсаты – уларҙы башланған мәлендә үк, йомшағыраҡ ысулдар менән, һүндерергә өйрәтеү, тип аңлашылды, – тип, өсөнсө секцияға күстем. – «Бәхәстәрҙе аралашсы ҡатнашлығында альтернатив көйләү процедураһы тураһында» федераль закон бар, 2010 йылда ҡабул ителеп, 2011-ҙән – көсөндә. Икенсе төрлө, йәйәләр эсендә, медиация хаҡында, тип тә атала, ә медиацияның әлегене башҡарыу технологияһы икәнен беләбеҙ. Мастер-класс, ошоға таянылып, ролле уйын рәүешендә барҙы һәм, минеңсә, шул иҫәптән Йәмәғәт палатаһы яуаплы өлкәгә лә ифрат тура килә.

Оҙон булды шулай әңгәмә алды һүҙем. Уның ҡарауы, аңлау артты, тигән фекерҙәмен.

## *Ҡый һуңы – һый*

– «Ҡыйҙан булыр һый» тип атайыҡ бөгөнгө тапшырыуҙы, һәм ул һауанан алынманы, ә ергә бағыуҙан яралды: сүп-сарҙан, ҡалдыҡ тип, танауҙы сикәнеүле бормағанда, ә, бынамын тигән сеймал булараҡ, ихтирамлы ҡарағанда, заманыңдың алдынғы кешеһе булғанда, һыйлы йәшәргә лә бик мөмкин, – тип ышаныслы белдерҙем быйыл яҙ, эфирҙы асҡас та. – Ошоно аңлау ҙа бар: йыйыу, эшкәртеү буйынса тендер иғлан ителгәс, ҡатнашырға теләк белдергәндәр көтөлмәгәнсә ишле булып сыҡты.

Замандың зары ла был, сөнки йәмғиәт көнкүреш әйберҙәрен торған һайын күберәк ҡуллана, һөҙөмтәлә ҡалдығы ла бүртә, һәм быны туҡтатыу

ҡатмарлы – хәлле кешене, әҙерәк ал, сама бел, тип, тыйып булмай, ә етештереүсе, киреһенсә, мөмкин тиклем мулыраҡ һатырға тырыша. Шуға күрә бөгөн сүп-сар әхлаҡи ҙа мәсьәләгә әйләнә, ә инде уны тәртипһеҙ ташлау – күптән шунда.

Артабан әйткәнем шул булды:

– Етештереү һуңы ҡалдыҡтарҙы бөтөрөү булырға тейеш шуның өсөн. Башларҙан алда ташлау, дөрөҫөрәге – ташламау уйланылһын. Утилләштереү бер нисек тә башҡарылмаһа, планета күп метр, хатта километрлыҡ ҡыйға күмелер ине.

Тәртипле булған, йәғни уны тейешле урынына һалған, хәлдә лә, ошоғаса унан алыҫ торҙоҡ – сүпте айырым йыйыу яңы ғына ғәҙәткә инә.

Сүп-сар эшҡыуарлығы ике яҡлап өҫтөнлөклө: әлегә барыбер ҙә конкуренция түбәнерәк һәм йүнәлеш – юғары рентабелле: башлап ҡына торғанда ла 20 процент булып китә, – тип дауам иттем. – Сеймал сағыштырғыһыҙ осһоҙ. Унан яһалған пластик һауыт йә төрөү әйберҙәрен әллә күпме ҡимməткә һатып була. Был йәһәтенән киләсәк тә өмөтлө: кешелек йәшәгәндә ул да гел буласаҡ. Ҡалаларҙа хәҙер айырым контейнерҙар күренә башланы, эйе, әммә бөтә ерҙә лә түгел.

Инеш һүҙем елгә осмаған булып сыҡты – ай самаһынан ҡунаҡта хәтергә төшөрөлдө:

– Анауы көндө һөйләгәнеңдә баш ҡағып ултырҙым, – тине ҡоҙа. – Беҙҙең ҡалала ла аптыратып һалалар. Мин үҙем ситтә, шәхси секторҙа, йәшәйем. Ике ҡулына моҡсай тотоп сығалар ҙа, – иҙән уртаһында хәрәкәтләнеп күрһәтте, яман килештерҙе, әйткәндәй – тимәк, йә йыш күрә, йә зитына нıҡ тейгән нәмә, – урам буйлап барған ыңғайы, атлауҙарын да, ҡул һелтәүҙәрен дә үҙгәртмәй, тура ҡарап ҡына, устарын яҙа ла ебәрәләр. Шул килеш ары китәләр, ҡулдарын ҡағып та тормайҙар. Ситтән, йәнәһе, ташлаған һымаҡ күренмәйҙәр. Әҙәм балаһының ҡыланыуҙарына иҫ китә, әй...

Урынына ултырғас, алдындағы ваҡ ҡына ризыҡ валсыҡтарын салфеткаға матурлап төрҙө. Һауыттарҙы шылдырғыланы. Өҫтәлдә урын күҙгә күренеп иркенәйҙе. Махсус башҡарманы быны, беләм – даими эшләгәнен генә эшләне. Тын алыу еңелләште – гүйә бөтә планета таҙартылды.

Ҡыйҙы айырым йыйыу ҙа – үҙе бер тәртип: өйҙә лә буталғанды рәтләү, тәҫләп һалыу әллә күпме киңлек бирә ләһә.

## *Ҡыҫҡа, әммә ҡырҡа һүҙ*

Инеш һүҙҙәр, темаға, әңгәмәсенең һөйләү кимәленә ҡарап, ҡыҫҡа ғына ла булғылай. Тик тоҡос сыҡмаһын: бөгөн фәлән нәмә тураһында һөйләшәбеҙ, беҙҙә ҡунаҡта – шул кеше, тип кенә сикләнеү бармай.

Ыҡсым әйтеүгә ике миҫал килтерәйем дә.

1. Үткәндәр менән бөгөнгөнөң тығыҙ бәйләнеше, ошолар аша – киләсәккә юл тураһында һөйләшергә ҡарар ҡылынды бөгөн. Инде нисәнсегә, эйе, шулай. Нигеҙ ҙә нıҡ – тормош фәлсәфәһе булғандың буяуы бер ҙә уңмағанын раҫлай килә: үткәнен ҡәҙерләгән үҙе лә ҡәҙерле. Һөйләшеүҙе, әйҙәгеҙ, ошолай атайыҡ та.

2. «Тәбиғәтте ниңә һаҡларға кәрәк?» – тигән ябай, ләкин тәрән һорауҙан башлайыҡ. Быны үҙ-үҙенә һәр кем бирергә тейештер ҙә. Яуабын да тап һәм күңелең ҡушҡанды үтә. Ә күңел, уның өҫкө, көнкүреш ихтыяжы баҫҡан, мөхиткә талаусы сифатындамы, битараф рәүештәме, шунан ғына әллә ни зыянланмаҫ, типме ҡараған, өлөшө, бәлки, еңелерәк мөнәсәбәттә булһа ла, төптә беҙҙән һуң килер быуындарҙың да саф һауа менән таҙа һыуға хоҡуҡлылығын аңлау барыбер ҙә бар. Яуап та бирелде, бына, әйткәндәй.

Артабан әңгәмә ағылды һәм әҙ инешле тапшырыуға унан да сиклерәк йомғаҡ та яһаным. Ул, беренсенән, китабымда өҫтәрәк, тәбиғәткә һоҡланыу тәңгәлендә, һүҙ уйнатып белдергәнемдең – үҙ аллы сатаһы, икенсенән, дин өлкәһендәге билдәле әйтемдең минең тарафтан үҙгәртелә төшкән формаһы һәм йөкмәткеһе ине:

– Һаҡла – һаҡланырһың.

## Хәрәкәтсәнлеккә күндереү

Ҡыҫҡа йомғаҡлы нөктәне вуз тамамлағандарҙың артабанғы, инде хеҙмәти, эҙмышына арналған тапшырыуымда ла ҡуйҙым.

– Заман бәләһе – эш табыуға бәйле мәсьәләләр тураһында әңгәмәләштек. «Бәлә» тип тә һүҙ ыңғайында ғына әйтелмәне, быны шулай икәнлегенә үҙҙәре осрағандар шаһиттыр. Ләкин, һөйләшеүҙән аңлашылыуынса, тырышҡан барыбер ҙә мораҙына етә, ә ысул-юлдары әле генә аталды, – тинем дә, тәгәрәтмәй генә йомғағымды ҡырт һалдым:

– Башы барҙың ашы бар.

Сығарылыштың атамаһы ла иткәйнем ошоно. Радиола башлыса, күп сериялы тиек, проекттар ҡулланылғаны билдәле, һәм иң уңышлылары йылдар буйы бара ла – һәр сығарылышҡа, гәзит йә журнал матбуғаты, йә Интернет ресурсындағы ише, исем талап ҡылынмай. Шулай ҙа һуңғы осорҙа тормош эфирҙағы һүҙ менән сикләнмәү, уны, текст рәүешендә, Интернетта ла урынлаштырыу талабын ҡуйғас, атамалар ҙа кәрәк булды. Быны мин ыңғай баһалайым, сөнки, беренсенән, эфирға бөркөлөп юҡ булыу – күпме көс, ваҡыт түгеп, ижади күңелеңде һалып эшләгәнеңә – әсе яҙмыш, икенсенән, өндәр менән түгел, хәрефтәр менән аҡҡа төшөрөлгән өсөн хәбәрсенең яуаплылығы ла юғарыраҡ: асып, ҡайтара-ҡайтара уҡырға мөмкиндәр – һөҙөмтәлә текстар сифатлыраҡ яҙыуға этәрелә.

Исемдәр шиғри яңғыраһа, телгә ятып, ҡолаҡты иркәләп торһа – иҫ киткес шәп! Ниндәйҙер билдәле ҡанатлы һүҙҙе өс йөҙ алтмыш градусҡа бора алһаң – бөтөнләй генийһың. Ләкин быны төп текста мотлаҡ иҫбатларға кәрәк. Ә әле уйлап тапҡас та шикләнмәнем түгел: дөрөҫ буламы? Сөнки аштың әллә ни башһыҙ ҙа табылғанына, быны, мәҫәлән, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, туғанлыҡ аша башҡарылғанына ла күҙ йома алмайбыҙ. Шулай ҙа ошо вариантты ҡалдырҙым, сөнки башы бар тигәндә күпселектә тәбиғәт биргән һәләттән дә бигерәк уҡыу йортонда белем алыуҙы күҙҙә тоттом.

Былай тинем:

– Бөгөнгө студентҡа иртәгә нисек эш табырға? Һүҙ килешлеге өсөн әйтелмәне, нәҡ шулай – табырға. Сөнки эҙләргә кәрәк – заман күренеше был. Һәйбәтенә урынлашыу ҙа мөһим шарт һәм шулай тигәндә тәүге көндән

үк яҡшы түләү, йылы социаль яҡлау, хеҙмәти иркенлек, башҡа уңайлыктар ғына күҙҙә тотолмай, ә, беренсенән, оҡшаған, күңеленә ятҡан да хәжәт, икенсенән, уҡыу йортонда өйрәнгәнең дә файҙаһыҙ мүкләнмәһен, ил мәнфәғәтендә ҡулланылһын. Юғиһә, ҡайҙалыр сауҙала, фастфуд-ресторанда эшләүгә лә йәмғиәттә, эйе, билдәле дәрәжәлә ихтыяж бар, ләкин, ҙурҙан алғанда, хаҡҡа сығарыу ҡатмарлы – сараһыҙҙың көнөнән, әлбиттә. Йәғни диплом алыу ғына уңышлы хеҙмәт биографияһына тулы нигеҙ була алмай. Раҫлауға иҫбатлау элек тә талап ителмәне, бөгөн айырыуса кәрәкмәй – конкуренция юғары. Белгескә тәжрибә мотлаҡ, шәхси сифаттар ҙа йоғонто яһай, теҙә китһәң – күп.

Конкуренция тигәндән. Вуздар баһаланғанда, шуға ҡарап киләсәккә дәүләт ярҙамы билдәләнгәндә, ана шул ярыш күрһәткестәре лә ифрат мөһим һәм бында уҡып сыҡҡандарҙың эшкә урынлаша алыу дәрәжәһе үҙәктә булырға тейешлек бик һәм бик ғәҙел: минән китте – вәссәләм, тиергә йәнһеҙ тауар етештерелмәй бит. Бында, билдәле әйтемдәгесә, эйәһенә етеү ҙә әҙ, һәр белгестең, ҡабатлайыҡ, дәүләтте алға тартыуы ныҡ кәрәк – студент беренсе курста уҡ үҙенең кәрәклеген аныҡ тойһон.

Диплом алыусының яуаплылығын һис кәметмәй был: уҡыу йортона инерҙән алда сығырын уйларға тейеш. Хатта бурыслы ла – көнүҙәк, үтемле һөнәр һайлаһын. Ә нисек билдәләргә һуң быны – уҙа барһа, ун йылдан кешене әҙме-күпме аҫраған тотош йүнәлештәрҙең юҡҡа сығыры асыҡ белдерелә ләһә?.. Беренсенән, ҡыҙыҡһыныу, үҙеңде яңыра барған, алда тағы ла йылдамыраҡ үҙгәрер тормошҡа әҙерләү, йәғни, шәхси ынтылыш кәрәк, икенсенән, дәүләттең ваҡытында мәғлүмәт еткереүе, төрлө саралар үткәреүе, өйрәтеүе, ошолай хәрәкәтсәнлеккә күндереүе мотлаҡ.

Ә һан былай: юғары уҡыу йорттарынан һуң илдә уртаса дүрттән өс өлөш кенә эш таба. Ошо көндәрҙә генә быны хөкүмәт рәйесе тарафынан дәүләт проблемаһы тип аталғаны билдәле.

## *Ихлас барһын Ислах*

Атама тигәндән. Әйтеүемсә, һүҙ сәнғәтендә уның ылыҡтырғыс көсө баһалап бөткөһөҙ. Текстарға ҡеүәтле реклама был! Алтындан ҡойолһа, әлбиттә – юғиһә, ижади ҡарамай, исемде исем өсөн генә ҡушыу, күп ҡулланыуҙан төҫө бөткәнде яҙа-йоҙа йәбештереү мең затлы материалға ла иғтибарҙы йәлеп итмәй – уҡылмай йә тыңланмай ҡалыуы ла ихтимал.

Бер ысул – телдә әллә ни йөрөмәгән һүҙҙәрҙе файҙаланыу. Тапшырыуҙарымдың береһендә шулай иттем дә – «реформа» урынына «ислах» тинем, боронғонан, китап стиленән алдым. Тиеүем булды, шуға оҡшаш «ихлас» иҫкә төштө, сөнки үҙәккә ҡуйылыр өлкәлә үҙгәрештәр (ә улар тик халыҡтан ғына тора, закон шулай талап ҡыла) теләнгәнсә дәртле бармай. Ошо ике һүҙҙең атаманы башлап һәм тамамлап ҡуйыуы уға яҡтылыҡты, минеңсә, ҡуйы һирпте.

– Урындағы үҙидараны һалабыҙ уртаға һәм быға кәмендә ике һәйбәт нигеҙ вә мәғлүмәти һылтау бар, – шундуҡ мәсьәләнең әрсәһен хәбәр ҡылдым. – Беренсенән, 2013 йылдан ошо өлкә көнө тип билдәләнеп киленгән 21 апрелгә яҡынбыҙ. Ә ул Екатерина Икенсе имзаһы менән 1785-тә көсөнә индерелгән документ – ҡалаларға бирелгән Грамотаға таянып билдәләнгән.

Асыҡлыҡ өсөн тарих буйлап елеп кенә үткәндә – былай. Урындағы үҙидараның артабанғы үҫеше Александр Икенсе ислахтарына бәйле: 1864 йылда һайланма губерна һәм өйәҙ земство йыйылыштары булдырыла – урындағы хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнәләр. Хоҡуҡҡа 1870-тә ҡала думалары менән управалары эйә була. Әммә Александр Өсөнсө дәүерендә инде өлкә хөкүмәт әһелдәре буйһоноуында ҡала. 1917-ләге түңкәрелеш һөҙөмтәһендә 80-селәр аҙағына – илдә дәүләт хакимлығын үҙгәртеү башланғанса, онотолоп тора. Рәсәйҙең 1993 йылғы Конституцияһында урындағы үҙидараның үҙаллылығы иғлан ителгән. Ислахлау һәм үҫтереү бөгөн дә хәрәкәттә.

– Икенсенән, ошо көндәрҙә, Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһында, территориаль йәмәғәт үҙидараһы буйынса семинар уҙҙы – унда белдерелгәндәргә әйләнеп ҡайтыу, проблемалар буйынса фекер алышыу талап ителә, – тинем ары, һәм һорау төбәп, яуап бирҙем:

– Ә нимә һуң ул территориаль йәмәғәт үҙидараһы? «Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидараны ойоштороуҙың төп принциптары тураһында»ғы федераль законға ярашлы, «Муниципаль биләмәнең үҙҙәре йәшәгән өлөшөндә урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләр буйынса башланғыстарын үҙ аллы һәм үҙ яуаплылығында тормошҡа ашырыу өсөн граждандарҙың үҙ-үҙен ойоштороуы». Асылы буйынса бәхәстәр бөгөн булһа дауам ҡылына, әммә шул асыҡ: бик мөһим институт был – гражданлыҡ үҙаңын тәрбиәләй, власть менән халыҡ араһында хеҙмәттәшлеккә булышлыҡ итә, һәлкәүлектән, дәүләткә һалынғанлыҡтан арындыра. Ләкин быға етер өсөн уның үҙен аңлау кәрәк. Әлеге семинар шуның өсөн ойошторолдо ла, бөгөнгө эфир маҡсаты ла – ошо.

Инеште бая әйтелгәнгә – ислахта ихласлыҡ кәрәклеккә тура һуҡтырыу менән осланым:

– Территориаль йәмәғәт үҙидараһы тик халыҡ башланғысы менән генә ойошторола, вәкәләттәре нәҡ граждандар тарафынан ғына билдәләнә – юғарынан көтөп ятыу бында һис урынһыҙ.

## *Тере йәндәй күрелһен*

Ижтимағи-сәйәси тапшырыуҙарыма тел мәсьәләһен дә сығара киләм, сөнки уның тап йәмғиәти күренеш икәненә инаныуым тәрән: кешеләр йәмғиәте йәшәүенең мотлаҡ шарты ул.

– Тел тураһында булыр һүҙ. Һуңғы осорҙа уға бәйле бер ҡыҙған, бер тымған бәхәстәр араһында бөгөнгө рәүештәге һөйләшеү таман урынлашыр, файҙалы булыр, тигән фекер ныҡлыҡтан был – артыҡ ҡыҙыулыҡ арыу булмағандай, бөтөнләй һүрелеү ҙә һәйбәт түгел, – тип башланым 2018 йылғы сығыштарымдың береһен. – Самаһыҙ дөрләүҙең аҙағы һалҡын көл икәнен дә онотмау хаҡ. Телде йәшәтеү мөһим икән, тере йән итеп күрергә лә кәрәк – ҡараш, мөнәсәбәт даими булһын, төрлө хәлдәрендә лә аңлау, ҡурсалау, киләсәген хәстәрләү хәжәт.

Быға бәйле киң билдәле фекерҙәрҙе ҡабатлап тормай, дәүләт хәстәрлегенә килгәндә, һуңғы ваҡытта ҙур документтар донъя күргәненә диҡҡәт ҡылыу дөрөҫ. Мәҫәлән, республика башлығының дәүләт телдәрен һәм туған телдәрҙе

һаҡлау, үҫтереү өлкәһендә гранттар тураһында указы сыҡты – оло һандар атала. Былтыр сентябрҙә республиканың дәүләт телдәрен һәм уның халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса саралар тураһында фарманға ла ҡул ҡуйылғайны. Тап унда әлеге гранттарҙы ойошторорға, йәнә лә башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү Фондын булдырырға, өҫтәп дәүләт программаһын раҫларға ҡушыла. Быларҙың барыһы хаҡында ла, бәлки, аталмағандарын да иҫкә алып, һөйләшелер бөгөн, ләкин төп иғтибар һуңғыһына – программаға төшөр.

Тулы рәсми атамаһы менән әйткәндә – «Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү» дәүләт программаһы проекты йыл башына әҙерләнеп бөттө һәм киң фекер алышыуға сығарылды. Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы башланғысы менән ойошторолдо, сөнки программа проектына йәмәғәт экспертизаһы үткәреүселәрҙең береһе сифатында ул да билдәләнгәйне.

Фекер алышыуға саҡырылғандар араһында дәүләт хакимлығының закондар сығарыу, башҡарма тармаҡтары вәкилдәре, муниципалитеттар хеҙмәткәрҙәре, ғалимдар, йәмәғәт ойошмалары рәйестәре һәм башҡа күптәр бар ине, йәғни документ күмәк кеше ҡатнашлығындағы оло майҙанға сығарылды. Йөкмәткеһе бөгөнгө тапшырыуҙа мотлаҡ ентекләберәк асылыр, әлегә, уға яҡыныраҡ килер өсөн, республикала телдәр өлкәһендәге хәлгә анализ яһалғанын, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү маҡсатында бурыстар билдәләнгәнен, мәҫәлән, башҡорт теленең, дәүләт теле буларaҡ, дәүләт һәм муниципаль хакимлыҡ органдары эшмәкәрлегендә әҙ ҡулланылғаны, ошо уҡтың мәғлүмәти технологиялар өлкәһендә лә күҙәтелгәне, уҡытыу сифатын да күтәреү кәрәклеге раҫланғанын хәбәр ҡылайыҡ.

Күп сығыштар тыңланды, тәҡдимдәр, тәнҡит еткерелде. Бындай осрашыуҙар киләсәктә лә була торор, тип аңларға кәрәк: йылға бер мәртәбә үткәрелер, моғайын, тиелде. Йәғни Йәмәғәт палатаһының әлеге составы өс йылға һайланғанын, 2020 йылғаса эшләйәсәген, иҫәпкә алғанда – тағы ике тапҡыр. Программа ҡабул ителгәс тә кәрәк шулай, сөнки артабанғы маҡсат – үтәлеште тикшереү, кәрәк икән – төҙәтмәләр ҙә индереү.

## *Осар ҡош*

Мәҡәләм аҙағында уны «Әйткән һүҙ атҡан уҡ түгел», – тип, киң таралған әйтемгә ҡаршы килеп, атауым сәбәбенә мөрәжәғәт ҡылайыҡ. Ҡолаҡ ишетеп өйрәнгән мәғәнәһенән бөтөнләй ситләштерҙем һәм ынтылыуым да шул ине: уҡ, сәпһеҙ осоролғаны йә артыҡ алыҫҡа тоҫҡалғаны, шыйлап ҡуҙғалып китһә лә, оҙаҡламай кәре кәмей – эйелә башлай, ахырҙа йә ҡаҙала, йә һуҙылып ята. Уҡсы эҙләп алмаҫҡа, яңынан атмаҫҡа ла мөмкин. Ә һүҙ – осар ҡош ул: һауала күпкә оҙағыраҡ була, шунда йәшәй. Осорған ҡоштарыбыҙ ҡарҡылдамаһын, саңҡылдаһын ине лә шуға күрә: бөркөттөң, ҡанаттарын иркен, ғорур йәйеп, көндәр буйы әйләнгәнен беләбеҙ.

Шуның менән бергә һүҙҙе йәйәһенән ысҡынған уҡ рәүешендә күреүҙән дә баш тартыу юҡ – әйткәнеңде мотлаҡ үтәү кәрәклегенә ҡушып, нимәнелер кеше алдында раҫлауың өсөн оло яуаплылыҡ тойоу мәғәнәһе лә ҡабарып ятһын.

**Рәсүл СӘҒИТОВ,**
**радиожурналист һәм яҙыусы.**

# ЮЛДАР БУЙЛАП ТИК ҮТЕРГӘ ЯҘҺЫН ХАЛҠЫМ МЕНӘН БЕРГӘ, ИЛ МЕНӘН!



*Шағир Ринат Хәйри 1950 йылдың 19 ғинуарында Илеш районының Үрмәт ауылында донъяға килгән. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлағас, Тыпый мәктәбенә директор итеп эшкә ебәрелә. Унан һуң Илештең "Маяҡ" гәзитендә бүлек мөдире булып эшләй. Үҙен һәләтле журналист итеп таныта.*

*Ринат Хәйриҙең Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫылған тәүге шиғри йыйынтығы балаларға арналған. Йәшләй генә баҡыйлыҡҡа күскән шағирҙың "Әле яҙ башы ғына", "Минең уйынсыҡтарым", "Хәрефтәр парады", "Эҙләйем һине" тигән китаптары донъя күрҙе.*

**Ринат ХӘЙРИ**

## *Юлдар*

*Ялан аяҡ ҡара ергә баҫып,*
*Тәүге тапҡыр атлап киткәндә,*
*Белмәгәнмен – килеремде һиҙеп,*
*Күпме юлдар мине көткәндәр!*

*Белмәгәнмен, ниндәй юлдар минең*
*Бала саҡты алып китәһен.*
*Белмәгәнмен, ниндәй юлды йәйәү,*
*Ниндәй юлды һыбай үтәһем.*

*Белмәгәнмен, ниндәй юлдар мине*
*Һөйгәнемә алып бараһын.*
*Белмәгәнмен, ниндәй юлда һағыш,*
*Ниндәй юлда бәхет табаһым.*

*Белмәгәнмен...*
*Хәйер, бала саҡта*
*Ни көткәнен алда кем белгән?!*
*Юлдар буйлап тик үтергә яҙһын*
*Халҡым менән бергә, ил менән!*

## *Тауҙар*

*Бына ниндәй була икән тауҙар!*
*Шундай яҡын кеүек алыҫтан.*
*Йәшел сапан кейгән бейеклектә,*
*Кәпәстәре ап-аҡ нағыштан.*

*Алыҫтан уҡ һине арбай тауҙар,*
*Шундай яҡын кеүек күренеш.*
*Бик теләһәң әгәр, кәпәстәрен*
*Һалдырырһың төҫлө үрелеп.*

Тик ни хикмәт? Яҡынайған һайын
Алыҫлаша һаман был тауҙар.
Арыған ға шулай тойола, тип
Кәрәк түгел юҡҡа һылтауҙар.

Арыһаң да, туҡтамаҫҡа кәрәк,
Шул үрҙәргә барып еткәнсе.
Туҡтамаҫҡа кәрәк, туҡтамаҫҡа,
Хыялыңды ысын иткәнсе!

Тауҙар бөйөклөгөн аңлау өсөн
Күтәрелеү кәрәк юғары.
Күтәрелмәй тороп уның серен
Аңлай алған кеше юҡ әле.
Бына ниндәй була икән тауҙар!

## Эҙләү

Ҡышын, йәйен, яҙын, көҙҙәрен...
Кеше йәшәй һәр саҡ эҙләнеп...
Теле асылғанда –
Изге һүҙҙәр эҙләй,
Үҫә төшкәс – эҙләй батырлыҡ.
Йәшлек килә –
Өҙөлөп һөйөр ваҡыт, –
Мөхәббәтен эҙләй атлығып.

Ауыр саҡта –
Бер йылы һүҙ эҙләй,
Эҙләй бәхет, эҙләй яҡшылыҡ.
Өшөгәндә –
Йылы усаҡ эҙләй,
Ҡараңғыла ҡалһа – яҡтылыҡ.

Кеше ғүмере
Һәр саҡ юлда үтә,
Кеше йәшәй һәр саҡ эҙләнеп.
Бурандарҙа
Сәскә эҙләп йөрөй
Һәм яҙҙарҙы эҙләй көҙҙәрен.

Ғүмер буйы
Уға ниҙер етмәй,
Юлда үтә шулай һәр көнө.
Һуңға табан
Үткәндәрен эҙләй,
Бала сағын эҙләй, йәшлеген...

Бар донъяны
Иңләп-буйлап сыҡҡас,
Ғорур ҡараш ташлап, был ярҙан
Китә кеүек...
Табалмағандарын
Эҙләр өсөн "теге донъя"нан...

***

Тормош – лотерея...
Бәхет ҡошон
Тотоп алғас, ҡулдан ысҡына.
Берәүҙәрҙең бәхеттәре өсөн
Меңдәр түләй ҡай саҡ йыш ҡына.

Тик, барыбер, кеше өмөт өҙмәй,
Дауам итә тормош уйыны.
Сираттағы тираж.
Иң бәхетле
Мин булырмын, бәлки, был юлы?

Уйын бара.
Тираж артлы тираж.
Бөтәһе лә отош көтәләр.
...Ә шулай ҙа минең бәхет өсөн
Түләмәһен ине бүтәндәр!

## Ағиҙелдә – ҡыр ҡаҙҙары

Дәрәжәһен яҡшы белгән кеүек,
Ағиҙелкәй аға тын ғына.
Тулҡындары, теләр-теләмәҫтәй,
Һырышалар ярға шым ғына.
Киң йылғаның сабыр, тыныс һыуы
Тыпырсынып ала бер аҙға.

“Ракета”, етеҙ арғымаҡтай,
Йырып үткән саҡта “бураҙна ”.

Ҡунаҡ көтәме ни – ҡолас йәйеп,
Ҡаршы килә ярҙар йүгереп.
Тын баржалар, аҡҡош-пароходтар
Боролмала ҡала күмелеп.

Йәнәштәге ағай уйҙы бүлә:
– Ҡара әле, ҡустым, был таба!
...Күҙҙәремә ышанмайса торам,
Өн менән төш, гүйә, бутала.

Ағиҙелдә ҡыр ҡаҙҙары йөҙә,
Ҡыр ҡаҙҙары йөҙә теҙелеп.
Иңдәремде баҫҡан ауыр уйҙар
Зыңлай-зыңлай китте өҙөлөп.

Ағиҙелдә ҡыр ҡаҙҙары йөҙә,
Һөйөнмәйсә ҡара шул саҡта!
Улар беҙҙән өмөт өҙгән булһа,
Ҡайтыр инеме ни был яҡҡа?!

## Үткәндәргә
## тоҫҡап уҡ аттым

Бөгөнгөгә һеҙ иш түгел, тиеп
Үткәндәргә тоҫҡап уҡ аттым.
Кире ҡайтып, эҙләп табалманым,
Эй шәп ине уғым, юғалттым.

Дуҫ-иштәрем мине йыуаттылар,
Ҡайғырмасы бер ҙә юҡҡа тип,
Уҡ – уҡ инде, алтын түгел әле,
Исең киткән икән уҡҡа, тип.

Үткәндәрең менән араларҙы
Өҙөү кәрәк, имеш, бер һелтәп...
Үткәндәрҙән ләкин шаңдау килде,
Әллә нимә ауҙы гөрһөлдәп.
“Нишләнең һин?
Тамырыңа саптың!
Йә, кем быға яуап бирәсәк?”
...Уғым сәпкә тейгән:
Минән шулай
Һорау алып тора Киләсәк!

## Уйланыу

Борондан уҡ шулай килгән
Үткәндәр – һағынырға.
Бөгөнгөһө – көрәштәрҙә,
Киләсәк – табынырға.

Кеше тыуа – атлап инә
Йәшәйеш тупһаһынан.
Йәшәй, үлә...
Был ҡанунда
Үҙгәреш юҡ та һымаҡ.

Тик берәү йәшәй ут сәсеп,
Берәүҙәр – талғын ғына.
...Ҡайһылары тороп ҡалыр
Мәңгелек табынында?

***

Был донъяла шатлыҡ ҡына түгел,
Ҡайғылар ҙа ҡай саҡ ҡәҙерле.
Ауырлыҡтар мине ситләп үтһә,
Белмәҫ инем, тормош, йәмеңде.

Ташламағыҙ мине, Бәхет, Шатлыҡ,
Сит итмәгеҙ, Һағыш, Ҡайғылар.
...Ярҙарында ағастары бөтһә,
Йылғалар ҙа хатта һайыға.

# ЙӘНЕ ЙӘННӘТТӘ БУЛҺЫН КӨРӘШТӘШЕМДЕҢ



2004 йылдың 17 ноябрендә «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәгенә мине рәйес итеп һайлағанда, ул юҡҡа сығыу хәлендә ине. Юридик адресы ла юҡ, уставы иҫкергән, элемтәһе өҙөлгән, банкта иҫәбе ябылған, сәнки ойошманың төрлө урынға йөҙ меңдән ашыу бирәсәге йыйылған булған...

Утыҙ йылдан артыҡ милицияла, унан һуң «Трал» муниципаль унитар предприятиеһының директоры вазифаһында һәм Өфө ҡалаһының Калинин районы башҡорттары башҡарма комитеты етәксеһе булараҡ, үҙемдең һәләтемә, эшмәкәрлектә ныҡышмалылығыма таянып, милләт зыялыларының ышанысын аҡлаясағыма инанып, рәйес итеп һайлауҙарына ризалыҡ бирҙем.

Тормош тәжрибәм буйынса беләм инем: һәр башланғыс, йәмәғәт эшеме, башҡаһымы, кешенән ифрат ҙур тәүәккәллек талап итә. Тик үҙенә тормошҡа ашырырлыҡ реаль маҡсат ҡуйғандар ғына уйлағандарына өлгәшә. Йәмәғәт эшен уңышлы һәм һөҙөмтәле башҡарыу өсөн, иң беренсе күп һандағы дуҫтарым араһынан ауырлыҡтар алдында баш эймәй торған, бергәләп эшләрлек команда һайлап алыу һәм уларҙың ҡушылғанды һәр нескәлегенә тиклем белеп, профессиональ кимәлдә башҡарыуына өлгәшеү маҡсат ине.

Интуиция менән кешенең бар булмышын билдәләүгә һәләтле шәхес булараҡ, һайланасаҡ идара ағзаларының һәр береһе менән, айырым-айырым әңгәмәләшеп таныштым. Һөҙөмтәлә, етәкселек тарафынан ентекләп өйрәнелгән 28 кеше идараға ағза итеп һайланды. Һәм һәр кемдең эшмәкәрлеген билдәләү өсөн, ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында, республика, ҡала кимәлендә бер-бер артлы митингылар һәм пикеттар ойошторҙом. Ошо эштәр барышында һынамыш үткәреп, милләт һәм йәш быуындың киләсәге өсөн үҙем менән берҙәм арымай-талмай эшләйәсәктәрҙе генә билдәләп, әүҙем эшмәкәрлек алып барыу өсөн урынбаҫарҙар тәғәйенләнем.

Һынау иләгенән үткәреү барышында уңышлы имтихан тапшырған Нияз Мәһәҙиевты хужалыҡ һәм матбуғат буйынса эштәрҙе алып барһын өсөн, эш хаҡы билдәләп, вазифа биләүемдең беренсе көндәренән үк, Үҙәктең

мөһим эштәренең барыһын да уға ышанып йөкмәттем. Нияз Бикйән улы матбуғат өлкәһендә күп йылдар эшләп туплаған тәжрибәһенә таянып, һәм һәр кем менән уртаҡ тел таба белеп, ойоштороу эшен уңышлы башлап ебәрҙе. Алдына ҡуйғанды тормошҡа ашырыуға ғәҙәтләнгән шәхес булараҡ, ижтимағи ойошманың эшмәкәрлеген йәнләндереүгә бар көсөн һалып, ваҡыт менән иҫәпләшмәй арымай-талмай эшләне. Ойошманың уставын яңынан законлаштырып, Юстиция министрлығында ҡайтанан теркәттереү хәстәрлеген күрҙе. Үҙәк өсөн бирелгән бүлмәләргә капиталь ремонт эшләгәндә, ауылда тир түгеп эшләп үҫкән хеҙмәт һөйөүсе булараҡ, дәртләнеп йөрөп иң һыҙғанып эшләп, башҡаларҙы ла ырамлыраҡ эшләүгә әйҙәне. Халҡының социаль көнкүреш кимәлен хәстәрләп тиҫтәләгән мәҡәләләр менән сығыш яһаған зыялы булараҡ, илдә бар өлкәлә лә «үҙгәртеүҙәр» башланып, колхоз-совхоздар тарҡалғанда тиҫтәләрсә йылдар дауамында тупланған дөйөм байлыҡтың, ҡомһоҙ етәкселәр кеҫәһен ҡалынайтыуын белеп-күреп торһалар ҙа, берәү ҙә дәғүә белдермәүенә ғәжәпләнер ҙә ошолай һөйләнер ине: «Был Совет власы етмеш йыл дауамында ифрат аҫтыртын, мәкерле эш иткән дә баһа! Киләсәктә хөрриәттә – коммунизмда йәшәйәсәкһегеҙ, тигән булып, аҙ һанлы милләттәрҙе әкренләп юҡҡа сығарып, барыһын да урыҫлаштырыу маҡсатында, телһөйәрлеген дә, илһөйәрлеген дә, ерһөйәрлеген дә юҡҡа сығара барған. Шул формала ҡалаларҙа, удар төҙөлөштә эшләгәндәр ҙә, колхоз-совхозда тир түккәндәр ҙә, ауылдары тирә-яғында эшкәртелгән ерҙәр, ата-бабаларынан мираҫ икәнлеген, шул үҙҙәренең өлөш ерҙәренең фәҡәт коллектив хужалыҡҡа дөйөм эшкәртеүгә генә бирелгәнен дә ғүмерҙәре буйынса аңламағандар, күрәһең. Иғтибарлаһаң, эшһеҙ ҡалғандар аңһыҙлыҡтары арҡаһында, ары-бире һуғылып эш таба алмай йөрөй торғас, үҙҙәренең пай ерҙәре барлығын да хәтеренән сығарып, өлөш ерҙәре өсөн дәғүәләшәһе урынға, кәсеп итергә Себер тарафтарына юлланалар бит. Уларҙың пай ерҙәре хужаһын юғалтҡас, эшкәртелмәйенсә ҡый үләндәре менән ҡаплана, йә еңел юл менән аҡса табырға өйрәнгән һөмһөҙҙәр тарафынан һатылып, уларҙың кеҫәһен ҡалынайта».

Ошондай ил эсендә барған хәл-әхүәлде асыҡлағандан һуң, ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы көрәшер өсөн, 2005 йылға БХҮ-нең 65 пункттан торған эш планын төҙөнөк һәм сараларҙың үткәреү урындарын, ваҡытын билдәләп, яуаплыларҙы тәғәйенләнек. Йыллыҡ пландың һәр пунктының эстәлеген мәҡәләлә биреү мөмкин булмағанлыҡтан, айырыуса әһәмиәтлеләрен, Нияз Мәһәҙиев менән бергәләп башҡарғандарын халыҡ иғтибарына йүнәлтеү кәрәк. Иң беренсе «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәгенең урындағы ойошмаларының эшмәкәрлеген йәнләндереүҙе һәм яңыларын төҙөүҙе, йәмәғәтселек ойошмалары менән берлектә, башҡорт халҡына аҫабалыҡ ерҙәрен ҡайтарыу буйынса эш алып барыуҙы, ауылдарҙа бәләкәй эшҡыуарлыҡты һәм фермер хужалыҡты үҫтереүҙе, уйлағандарҙы тиҙерәк тормошҡа ашырыу маҡсатында «Йәш көстәр» гәзитен сығара башларға ҡарар иттек. Гәзит сығарыу эштәре Илшат Теләүембәтовҡа, Нияз Мәһәҙиевҡа, Зөфәр Толомғужинға йөкмәтелде. Хәл иткес мәлдә, мөһим вазифаларҙы башҡарып сығасағына ышанып, бер кешегә йөкмәтеү тарихи, ғәҙәти күренеш. Нияз мөхәррир булыуҙан, хужалыҡ эштәрен уңышлы башҡарыуҙан тыш, төрлө кимәлдә ойошторолған митинг, пикеттар үткәреүгә рөхсәт алыуға ла өлгөрә.

Атамаһы ғына «Башҡорт химияһы» тип исемләнеп, үҙе йөҙ проценты

менән Кипрҙа теркәлгән «Modisanna limited» офшор компанияһына хеҙмәт иткән Стәрлетамаҡ сода-цемент комбинатының изге Торатауҙы сеймал итеп файҙаланырға уйлау ниәттәрен белеп ҡалғас, урындағы һәм Өфө зыялылары менән берлектә, «Руки прочь от Торатау» исеме аҫтында, 2006 йылдың 15 июлендә акция үткәрҙек. Ҙур йыйынға Ишембай, Баймаҡ, Фёдоровка, Мәләүез, Күгәрсен, Көйөргәҙе районларынан халыҡ күпләп йыйылды. Шул көндән башлап тәбиғәт ҡомартҡыһын һаҡлап алып ҡалыу өсөн 18 мәртәбә митинг-пикет ойошторолдо. Һәр үткәрелгән йыйындарҙа алдынғы ҡарашлылар менән әңгәмәләшкәндә, уларҙың фекер йөрөтөү, затара сығышын иғтибарлап, уларға таянып эшмәкәрлек алып барып буламы, юҡмы икәнлеген билдәләп барҙым. Һөҙөмтәлә, милләт киләсәге өсөн көрәшкәндә утҡа ла, һыуға ла бергәләп инерлек алдынғы ҡарашлы төркөм барлыҡҡа килеүенә инандым. Бына улар: Нияз Мәһәҙиев, Зөһрә Ҡотлогилдина, Зөфәр Толомғужин, Алберт Юлдыбаев, Спартак Хөсәйенов, Линер Сәлишев, Вадим Сафин, Зәки Хамматов, Рәшит Шәкүр, Әхмәт Сөләймәнов, Ҡәҙим Аралбаев, Мөхәррәм Сәлимов, Әнүәр Йомағолов, Хәмит Әүбәкиров, Ирек Агишев, Сабир Шәрипов, Ноғман Мусин, Абдрахман Вәлидов, Мәзит Әминев, Зилә Аҙнабаева, Мәрйәм Бураҡаева, Сания Сәғитова, Әнүзә Йомағолова, Гөлнур Ҡолһарина... Йөҙәрләгән зыялылар ҡатнашлығында үтте изге Торатауҙы һаҡлап алып ҡалыу өсөн ойошторолған йыйындар. (Кемдәрҙең бигерәк тә әүҙемлек күрһәткәндәрен белгегеҙ килһә, яҙыусы Зөфәр Толомғужиндың «Беҙҙең көс – берҙәмлектә», «Торатау – тәбиғәт ҡомартҡыһы» тигән китаптарын уҡырға мөмкин.)

Йәмәғәт ойошмаһын етәкләгән шәхестең, күреүегеҙсә, фекерҙәштәре, дуҫ-иштәре күп була. Уларҙың бөтәнөһө менән дә ҡатнашып, үҙ туғаның менән аралашҡан кеүек йәшәү мөмкин түгел дә һымаҡ. Шулай ҙа көрәш юлында, күңел түренде яулаған ҡайһы берәүҙәр менән шул ҡәҙәре дуҫлашып китәһең, хатта улар үҙ туғаныңдан да ҡәҙерлерәк булып китәләр... Йөҙәрләгәндәр араһынан Нияз Бикйән улы Мәһәҙиев, Зөфәр Ғәле улы Толомғужин шундайҙар араһынан булғандыр тип уйлайым.

Нияз әхирәткә күсә торған йылда булды был хәл. Мин Зөфәр ағайҙы шул ҡәҙәре хөрмәт итәм, уның тәҡдимен бер ваҡытта ла кире ҡаҡмайым. Ул үҙенең тыуған ауылында, атай йортонда тыуған көнөн үткәрәсәген, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына арнап, саф башҡортса яҙылған стела асасаҡтарын хәбәр иткәс, айырылмаҫ дуҫым Нияз, уның ҡатыны Зөһрә, минең ҡатыным Рәйлә, юлһыҙ төпкөл ауылға йөрөп өйрәнгән водитель Федя, сәфәргә юлландыҡ. Тыуған көнө 1 сентябргә тура килгәс, башта Зөфәр ағай белем алған Ғәлиәкбәр мәктәбендә уҡыусылар менән осрашыу үткәреп, хакимиәт машинаһындағылар менән берлектә Үрге Нөгөшкә табан юл тоттоҡ. Унда стеланы тантаналы асып, ауыл халҡы, уҡыусылар менән матур тамаша үткәргәндән һуң хозур тәбиғәтле Нөгөш йылғаһы буйҙарында, уйнап-көлөп ял итеп, күтәренке кәйеф менән ҡайтырға юлға сыҡҡайныҡ та бит... Әлеге лә баяғы, кәрәгенән артыҡ дыуамаллыҡ, тәүәккәллелек башҡарып сығара алмаҫтай хәлдәргә лә тарытып ҡуя икән... Ғәмәлдә, әкиәттәрҙә яҙылғанса, сәфәреңдең уңышлымы, уңышһыҙмы тамамланыуы юлдар сатында ҡайһы бороломто һайлауыңа ҡарап билдәләнә.

Ғәлиәкбәргә етергә 6 саҡрым ҡалғас, нишләп әле мин, тураға 250 саҡрым үтеп ҡайтырға мөмкинлек булғанда, 100 километр урап йөрөргә тейешмен,

тигән уй үтте башымдан. Һәм ҡайһы бер фәһемле мәҡәлдәрҙе иҫтән сығарып, ата-бабалар йөрөгән юлдан, янғын сыҡҡан хәлдә ҡулланыу өсөн генә бульдозер менән һөрҙөрөп һалынған юлдан китергә тәүәккәлләнем. Ун-ун биш саҡрым үтеүгә яңылышыуымды аңланым. Кире боролоу мөмкинлеге юҡ. Сөнки бензин самалы. Ҡеүәтле машиналар менән ағас ташып, йырмасланған колеяларға төшөп кәпсәлеп ултырмаҫ өсөн, юлдың йә теге, йә был яғына сығып хәрәкәт итергә мәжбүр булғас, яғыулыҡ кәрәгенән артыҡ сарыф ителә. Өҫтәүенә, аҙым һайын осраған үрләстәрҙе менгәндә сит ил машинаһы һөйрәй алмай буксовать итә. Бына ошо юлды үткәндә аңланым да инде мин, интуиция менән, утҡа ла, һыуға ла бергә инерлек дуҫтар һайлай белеүемде. Юлда сурайып ултырған эре таштарҙы күреп ҡалыу менән, Нияз машинанан сыға һалып, «һә» тигәнсә уларҙы ситкә, йә колеяға ырғытып, үтәмеш барлыҡҡа килтерә. Шулайта торғас, ниһайәт, алтмыш саҡрымға һуҙылған Ҡалыу тауының иң бейек һырты Ҡолгилдегә килеп еттек. Тауҙың текәлеген билдәләп, машинамдың булмышын биш бармағым кеүек белгәс, разгон менән менергә маташыу, фәҡәт бар яғыулыҡты юҡҡа сығарыуға ғына килтерәсәген аңлайым һәм Федяға күрһәтмә бирәм. Бара алғансы бар ҙа, тормозға ҡуйып һүндер, тием. Ниһайәт, машинабыҙ утыҙ метрҙай үрмәләй биреп туҡтай. Нияз машинанан балтаны алып, юл эргәһендә ятҡан егерме сантиметр йыуанлыҡтағы ҡоро уҫаҡты метр оҙонлоғонда тумырырға тотона. Ҡыҙыҡһынғас:

– Беҙгә алдыбыҙға ҡуйған маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн, бер сантиметр ҙа артҡа төшөргә ярамай, сантиметрлап алға ынтылғанда ғына, Риф Шәрифрахмановичты иртәгә үткәреләсәк Ҡоролтай йыйынына алып ҡайтып еткерәсәкбеҙ, – тине.

Тумырған түмһәген уртаға яра ла, берәүһен Зөһрәгә, икенсеһен Рәйләгә тоттороп:

– Төндө машинала ултырып таң аттырғығыҙ килмәһә, сосланығыҙ, – тип аңлатып күрһәтмә бирә.

Темәстә, тәбиғәт ҡосағында тыуып үҫкән шәхес, таһыллы ла, физик яҡтан көслө лә, йылғыр ҙа шул! Федя рулгә ултырып, тиҙлеккә ҡуйып ынтылыш яһауға, беҙ ярҙамлашып этәбеҙ. Бер, ике, өс... ун метр үтеүгә, машинабыҙҙың «хәле» бөтөп, тәгәрмәстәре бер урында әйләнә башланы. Шофёр тиҙ генә һүндерә, ҡатындарыбыҙ әҙер тотоп торған ағастарын тәгәрмәс аҫтына ҡыҫтыра һала. Ошолай 4 – 5 мәртәбә мәшәҡәтләнә торғас, ниһайәт, Ҡолгилде түбәһенә менеп етеүгә, әйҙәүсебеҙ «ура!» ауазын яңғыратты. Стәрлетамаҡтың уттарына ҡарап, изге Торатауҙың ҡайһы тирәләрәк булыуын билдәләп, шунда ерләнгән әүлиәләр рухына бағышлап доға уҡыныҡ. Уларҙың именлеге өсөн көрәшкәс, бәләгә тарығанда әүлиәләр рухтары ла ярҙамға килгәндер.

Бөйөк тәрбиәсе Ҡөрьән тәғлимәте нигеҙендә, уның бойороғо буйынса һәр ауылда таныштар, дуҫтар барлыҡҡа килтереп йәшәгәс, Ялтыран ауылында яғыулыҡ табыу мәшәҡәт тыуҙырманы. Маҡсатлаштырғанса ваҡытында ҡайтып етеп, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып, һәр беребеҙ эшкә сумды.

Кем белгән?! Донъяуи мәшәҡәттәрҙән арынып, мәңгелеккә хәтерҙә ҡалырлыҡ шул сәйәхәттән һуң һөйләшеп ултырып та булманы. Ул Хан һүҙенән юғарыраҡ Әҙип һүҙе булыуын халыҡҡа еткереү өсөн ваҡыт таба алмай эшләгәндер, ә мин халҡым мәнфәғәтен ҡайғыртып, йәмәғәт осрашыуҙарында ҡатнашып, үҙем менән утҡа ла, һыуға ла инерҙәй фекерҙәш

дуҫымдың, көтмәгәндә әхирәткә күсеүен абайламай ҡалғанмындыр… Нишләйһең, бөтөнөбөҙҙөң дә маңлайына яҙылған, тәҡдир алып китте уны беҙҙең аранан. Йәне йәннәттә булһын тип, доғалар уҡып теләргә генә ҡала уны белгәндәргә. Ни тиһәң дә, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып, арымай-талмай көрәш юлында йөрөгән шәхес ине ул!

…Нияз Мәһәҙиев хаҡында һөйләгәндә тағы ла уның ихласлығы, балаларса бер ҡатлылығы, балаларҙы яратыуы, бала йәнле булыуын да әйтмәй үтһәк, яҙыҡ булыр.

Уларҙың ғаиләһе – барыһы ла ижади шәхестәр. Беҙҙең ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙе ике тапҡыр «Йәншишмә» гәзитенең календарына төшөрҙөләр. Тәүгеһендә – 2014 йылда. Икенсеһендә – биш йылдан һуң – 2019 йылда. Балаларҙы фотоға төшөрөр өсөн Нияз Ишембай районына ла, Стәрлетамаҡҡа ла, Өфөләге Шаҡша биҫтәһенә лә барҙы, улар менән күңелле лә, фәһемле лә итеп аралашты. Ике тапҡырында ла өсәүләп – улы Азамат һәм үҙе, тормош иптәше Зөһрә ханым менән биҙәлеше яғынан бик зауыҡлы итеп календарҙар әҙерләп сығарҙылар. Беҙҙең ейән-ейәнсәрҙәр өсөн генә түгел, ә республика балалар гәзите «Йәншишмә»нең уҡыусыларына ла бик ҙур бүләк һәм иҫтәлек булды ул.

Нияз Бикйән улы фантазияға бик бай кеше ине. Бер нисә йыл башҡорт Ҡыш бабайы булып беҙҙең ейән-ейәнсәрҙәрҙе лә, күп кенә зыялы милләттәштәребеҙҙең балаларын да ҡотлап йөрөнө. Беҙгә тәүге тапҡыр килгәндә ейәндәребеҙ тәҙрәнән күҙҙәрен алмай көттө. Бына бер заман урамда матур итеп биҙәлгән тылсымлы таяғын тотоп, арҡаһына күстәнәстәр һалынған тоҡон аҫып, балаларға ҡарап ҡул болғап торған Ҡыш бабайҙы күреп беҙҙең ул саҡтағы бәләкәс ейәндәребеҙҙең иҫтәре китте. Ә инде өйгә килеп инеп, үҙҙәре менән башҡортса ла һөйләшкән Ҡыш бабайға ҡарап аптырауҙарының сиге булманы. Улар шулай тәүге тапҡыр башҡорт Ҡыш бабайын күрҙе. Нияз Бикйән улы һәр баланың күңелен күреп һөйләште, шиғырҙарын, йырҙарын тыңланы, тоҡонан бүләктәрен, күстәнәстәрен алып бирҙе. Ғәҙәттә, атай-әсәй өйгә Ҡыш бабай саҡырһа, үҙҙәре бүләк әҙерләйҙәр ҙә Ҡыш бабайҙан тапшырттыралар. Ә Нияз Бикйән улының тоҡонда һәр балаға үҙҙәре алған бүләктәр бар ине. Аҙаҡ беҙҙекеләрҙе лә матур итеп тапшырҙы. Һуңғы Яңы йылында ла килде ул беҙҙең өйгә. Балалар менән уйнап, шаярып, көлөп иҫтә ҡалырлыҡ кисә яһанылар.

…2020 йылда башҡорт Ҡыш бабайһыҙ ғына Яңы йыл ҡаршыланыҡ…

**Риф ИҪӘНОВ,**
**«Урал» башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе, отставкалағы подполковник.**
1 ғинуар, 2020 йыл.

## *Башҡортостан Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнә*

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Халыҡ-ара фольклор фестивале 2020 йылдың 18 июленән 1 авгусҡа тиклем буласаҡ.

“Рәсәй Бөтә донъя фольклориадаһын беренсе тапҡыр ҡабул итә. Уны икенсе төрлө мәҙәни Олимпиада тип тә атайҙар, – тине Радий Хәбиров. – Был бик ҙур сара, тотош республика буйынса үтәсәк. Башҡортостанға донъяның 80-дән ашыу дәүләтенән өс меңгә яҡын артист киләсәк. Тотош республика буйынса 72 майҙансыҡ булдырыла”.

Республика етәксеһе майҙансыҡтарҙы әҙерләргә, уларҙы алдан тикшереп сығырға, ҡунаҡтар йәшәйәсәк урындарҙы тәртипкә килтерергә ҡушты. Уларҙың именлеген тәьмин итеү, мәҙәни программа төҙөү бурысын ҡуйҙы.

Мәҙәни сараға әҙерлек барышы тураһында Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров һөйләне. Уның әйтеүенсә, был эш 2015 йылда башлана. 2017 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путин тейешле указға ҡул ҡуйҙы, эшсе төркөм барлыҡҡа килде. Фольклориадаға ярашлы район-ҡалаларҙа үтәсәк саралар буйынса урындарҙа айырым план төҙөлгән.

## *“Урал батыр” – рус һәм инглиз телендә*

“Урал батыр” китабы башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә донъя күрҙе. Был эпос – башҡорт халҡының ауыҙтел ижадының аҫыл хазинаһы.

Китапты төҙөүсе – филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләймәнов. Башҡортсанан руссаға – яҙыусы Әхиәр Хәкимов, инглиз теленә Зөһрә Рәхимова тәржемә иткән. Инеш мәҡәләне рус теленә тәржемәләүсе – Фәрит Әхмәҙиев, ә инглиз теленә – Римма Шәйбәкова. Рәссам – Азат Мөхтәруллин.

Баҫма фольклорҙы өйрәнеүселәргә, шулай уҡ башҡорт халҡының рухи мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнгән. Китап З. Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә баҫылған, нәшриәттең магазинында һатып алырға мөмкин.

## *Башҡорт әҙәбиәте тарихы*

“Башҡорт әҙәбиәте тарихы”ның етенсе томы донъя күрҙе. Ул билдәле башҡорт ғалимы һәм әҙәбиәтсеһе, академик Ғайса Хөсәйенов етәкселегендә әҙерләнгән һәм 1990 – 1996 йылдарҙа алты томда сыҡҡан баҫманың дауамы булып тора.

Тәүге ике том боронғо замандарҙан алып 1917 йылға тиклем башҡорт әҙәбиәтен анализлай; артабанғылары совет осорона бағышланған. Алтынсы томда XX быуаттың 90-сы йылдарының беренсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәтенә күҙәтеү яһала.

“Башҡорт әҙәбиәте тарихы”ның етенсе томы заманса башҡорт әҙәбиәтен анализлауға арналған. Ул XX быуаттың 90-сы йылдарынан бөгөнгә тиклемге осорҙо үҙ эсенә ала. Китапта шиғриәт, проза, драматургия, балалар әҙәбиәте, әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит тураһында күҙәтеү мәҡәләләре тупланған. Нәжиб Асанбаев, Шакир Янбаев, Талха Ғиниәтуллин, Әнғәм Атнабаев, Рәшит Шәкүр, Ҡәҙим Арал-

бай, Таңсулпан Ғарипова, Фаҡиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева һәм башҡа башҡорт яҙыусыларының тормошо, ижады хаҡында мәҡәләләр индерелгән.

Баш мөхәррир һәм инеш һүҙ авторы – филология фәндәре докторы Миңлеғәле Нәҙерғолов. Редколлегия ағзалары – Рауил Бикбаев, Айбулат Псәнчин, Ғайса Хөсәйенов, Гөлнара Абдрафиҡова.

Китап уҡытыусылар, студенттар, шулай уҡ башҡорт әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһынған уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән.

## *Сал Урал хазиналары*

Билдәле башҡорт фольклорсыһы, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәнүзә Нәҙершина менән ғалимә Элла Созинова башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә “Сал Урал хазиналары” тигән китап-альбом әҙерләне.

Баҫмаға тау, йылға-күлдәрҙең килеп сығышын аңлатҡан башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары, уларҙың матурлығын, бөйөклөгөн данлаған йырҙар, “Урал батыр”, “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпостарынан өҙөктәр индерелгән.

## *Өр-яңы тамашалар көтә*

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ике премьера көтөлә.

21, 22 февралдә “Рөстәмдең сере” (Ғ. Ҡотой, С. Баженова инсц.) исемле яңы спектакль сәхнәгә сығасаҡ. Ул Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арнала. Ғәҙел Ҡотойҙоң “Рөстәм мажаралары” әҫәре буйынса спектаклде Рәсәйҙең билдәле театр эшмәкәрҙәре әҙерләй: инсценировка авторы – драматург Светлана Баженова, ҡуйыусы режиссеры Радион Букаев, рәссам-яҡтыртыусы – Евгений Ганзбург. Шулай уҡ ижади төркөмдә ҡуйыусы рәссам – Альберт Нестеров, композитор – Илшат Яхин эшләй.

1 мартта Талха Ғиниәтуллиндың әҫәрҙәре буйынса “Шәмсетдин һәм Шәмсура” спектакленең премьераһы уҙасаҡ. Режиссеры – Хөрмәтулла Үтәшев. Төп ролдәрҙә – Морат Рафиҡов һәм Милена Ишаева.

## *Бабич тураһында тәүге роман*

Билдәле булыуынса, ғинуар айында халҡыбыҙҙың үлемһеҙ шәхесе – бөйөк шағир, күренекле йәмәғәт эшмәкәре һәм сәйәсмән Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулды.

Ошо айҡанлы үткән йылдың аҙағында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың был күренекле датаны киң йәмәғәтселек кимәлендә билдәләү тураһындағы айырым Указы ла булды. Уға ярашлы, республика Хөкүмәте 2020 йыл дауамында юбилей сараларын үткәреү планын әҙерләне.

Ошондай сараларҙың береһе Милли әҙәбиәт музейының филиалы булған Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында ла үткәрелде. Музей хеҙмәткәрҙәре 6 февралдә “Ағиҙел” журналы менән берлектә билдәле драматург, прозаик Наил Ғәйетбаевтың Ш. Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арнап яҙылған “Бабич” романы буйынса китап уҡыусылар конференцияһы ойошторҙо. Сарала әҙиптең ҡәләмдәш дуҫтары, әҙәбиәт белгестәре, тарихсылар, журналистар ҡатнашты.